Мөнир ҺАҘЫЕВ
Абдрахман ФӘХРЕТДИНОВ

# باشقرد تاریخی

# БАШҠОРТ ТАРИХЫ

ناشر و محرری:

ملا منیر هادییف

جمعلادی

Өфө –2007

Мөнир ҺАЗЫЕВ
Абдрахман ФӘХРЕТДИНОВ

# БАШҠОРТ ТАРИХЫ

КАЗАНЬ
Электро-типографія "УМИДЪ"
1912

Казан – 1912
Өфө – 1925

КИТАП
Өфө
2007

УДК 94 (470.57)=512.141
ББК 63.3 (2Рос. Баш)
Б 28

Китапты төҙөүсе, текстологик эштәрҙе башҡарыусы, транслитерация ысулы менән ғәрәп графикаһынан хәҙерге имләгә ауҙарыусы, глоссарий биреүсе
*Р. Ф. Рәжәпов*

Рецензенттар:
тарих фәндәре докторы, профессор *Р. Ғ. Буканова*,
филология фәндәре докторы, академик *Ғ. Б. Хөсәйенов*

**Рәжәпов Р.Ф.**
Б 28 М. Һаҙыев, А.Фәхретдинов. Башҡорт тарихы. — Өфө: Китап, 2007. — 176 б.

ISBN 978-5-295-04151-8

Йыйынтыҡта XX быуаттың тәүге сирегендә донъя күргән башҡорт тарихына арналған бер үк атамалы ике китап урынлаштырылған. Тәүгеһе Рәсәйҙең империя осоронда баҫылһа, икенсеһе совет хакимиәте ваҡытында нәшер ителгән. Тәүге китап Иҙел — Урал буйы халыҡтарының уртаҡ иҫке төрки телендә яҙылһа, икенсеһе XX быуаттың 20-се йылдарындағы башҡорт телендә. Мөмкин булғанса тел үҙенсәлектәре һаҡланды.

**УДК 94 (470.57)=512.141**
**ТП – 142/07** **ББК 63.3 (2Рос. Баш)**

**ISBN** 978-5-295-04151-8

© Төҙөүсе-туплаусы Р.Ф. Рәжәпов, 2007

## Инеш

Кешелек барлыҡҡа килеп, донъяла үҙенең барлығы хаҡында аң-ғоман саҡкылары уяна башлаған мәлдән алып, үҙенең ни рәүешле яралтылыуы, ни замандан бирле терек-лек итеүе, ул замандарҙан һуң үткәне хаҡында уй йөрөт-кән. Тәүҙәрәк был үткәндәр хаҡындағы уй-фекерҙәр дөйөм характерҙағы абстракт, башлыса мифологик башланғысы хәл иткес әһәмиәткә эйә булған Тәүбаба, Тәүге Ата йәки Тәүге Әсә, тәүге кешеләр йәки игеҙ туғандар хаҡындағы мифтарға нигеҙләнгән, баштараҡ телдән сакраль мәғәнәле изге һүҙ булараҡ быуындан быуынға тапшырылып килгән, һуңғараҡ, яҙмаға теркәлә барған генеалогик әҫәрҙәр шә-кәлен хасил итә. Артабан, кешелек фекере конкретлаша, реаллек арта барыу менән мифик-фантастик башланғыс кә-мей бара, реаль ерлек һәм тарихилыҡтың артыуы күҙәтелә.

Донъя тарихының беҙгә билдәле иң мәшһүр дини-мифологик концепцияларынан зәрдүшселек (зороастризм) һәм йәһүди — христиан — мосолман традициялары, тәү-геһе Авеста буйынса Гайомардтан («Шаһнамә»лә — Кеюмарс), һуңғыһы буйынса Әҙәмдән, ғәләйһис-сәләм, баш-ланған генеалогия-шәжәрәләр тәҡдим итә. Төрки халыҡта-рының үҙ милли мифопоэтик тарихи концепциялары «Уғыҙнамә», «Сыңғыҙнамә» кеүек әҫәрҙәр аша ниндәйҙер кимәлдә сағылыш таба. Ошо традиция Рәшитетдиндең «Жәмәиғ әт-тауарих» китабы, уның икенсе томы булған «Тарих-и уғыҙан үә төркән», уйғырса «Уғыҙнамә», Әбулғазы Баһадирҙың «Шәжәрә-и тәрәҡимә», «Шәжәрә-и төрк», Ғәли яҙыусы уғлының «Сәлжүкнамә» («Тәуарих-и Ғәли Сәлжүк») әҫәрҙәре менән киңәйтелеп, тәрәнәйтелеп дауам ителә.

Башҡорт халҡының тарихына ҡағылышлы әҫәрҙәргә килһәк, иң тәүгеләренең береһе итеп Шәрәфетдин бин

Хисаметдин Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болгариа» әҫәрен атарға тулы нигеҙ бар. Ошо традицияның дауамы буларак башҡорт авторҙарының әҫәрҙәрен атап булһаҡ, иң тәүҙә Тажетдин Ялсығолдоң «Тарихнамә-и Болгар» ҡульъяҙма китабын хәтергә алырға тейешлебеҙ.

XX быуат башында Рәсәй империяһындағы төрки-мосолман халыҡтары араһында яңырыу, тәрәҡҡиәт, милли үҙаң үҫеүе кеүек хәрәкәттәр уяныуы һәм көсәйеүе күҙәтелә. Был бер яҡтан мәғариф һәм дин өлкәһендә йәҙитселек хәрәкәтенең көсәйеүе менән, икенсе яҡтан төрки-мосолман халыҡтарының империя эсендә ниндәй шәкелдә булһа ла үҙаллылыҡҡа өлгәшеү ынтылыштары барлыҡҡа килеү менән бәйле. Тәбиғи, был осорҙа тарихҡа ла ҡыҙыҡһыныу арта.

Төрки халыҡтарының тарихына арналған мәҡәләләр, китаптар нәшер ителә башлай. Улар араһынан билдәле дин ғалимы, тарихсы һәм йәмәғәт эшмәкәре Хәсәнғата Ғәбәшиҙең Ҡазанда 1909 йылда нәшер ителгән «Мөфассал тарих-и ҡәүми төрк» китабын телгә алыу кәрәк. Автор төрки халыҡтары тарихын бик боронғо дәүерҙәрҙән башлап бер бөтөн, ҡатмарлы һәм күп ҡырлы күренеш буларак яҡтыртыуға ҙур өлөш индергән. Бында төрки халыҡтарының төрлө дәүерҙәрҙә, төрлө территорияларҙа тотҡан дәүләттәре, халыҡтарҙың күсенеү процестары һәм башҡа күренештәр ентекләп яҡтыртыла.

Китаптың тәүге бүлегендә автор кешелек тарихының Әҙәмдән, ғәләйһис-сәләм, башланыуы хаҡындағы фекергә ҡаршы сыҡмайынса, Нух пәйғәмбәрҙең өс улының иң кеçеһе Йәфәстең арий ырыуҙарының («ҡәүем арьяния») һәм төрки ҡәбиләләренең («ҡәүми турания») атаһы булыуын хәбәр итә. Тарихтың ул заман өсөн традицион булған дини-мифологик моделенә автор ярты биттән артығыраҡ урын бүлә. Авторҙың бер үк ваҡытта билдәле һәм танылыу тапҡан имам булыуын да иҫәпкә алғанда, был заманаһы өсөн ҡыйыу күренеш була.

Төрки халыҡтарының тарихы «Төрк ырыуҙары» тигән бүлектән башлана һәм скиф, сармат, массагит ырыуҙары тарихын төрки ҡәүемдәр буларак яҙып, һун төркиҙәре һәм артабан башҡа «йәшерәк» халыҡтар тарихын бәйән итеп яҡтыртыла.

Башҡорт халҡының тарихына ла, этнонимының килеп сығышына ла ҙур иғтибар бирә автор.

Авторҙың шәхсиәте хаҡында ла мәғлүмәт биреү кәрәк булыр. Хәсәнғата Ғәбәши (1863—1933) заманаһы өсөн бе-

лемле һәм алдынғы ҡарашлы танылған имам, тарихсы ғалим. 1908—1911 йылдарҙа Өфөләге Диниә назаратында ҡазый. Һуғышсан дәһрилек һәм золом йылдарында нахаҡҡа ғәйепләнеп репрессиялана. Тотҡонлоҡта вафат була.

Башҡорт тарихына ғына арналған тәүге беҙгә билдәле баҫма китап булып мулла Мөхәмәтмөнир Мөхәмәтһаҙыевтың (Мөнир Һаҙыев) 1912 йылда Ҡазанда «Өмөт» матбағаһында нәшер ителгән «Башҡорт тарихы» тигән хеҙмәте сығыш яһай. Китап шәкелендә донъя күрерҙән элек был хеҙмәт тәүҙә 1909—1910 йылдарҙа мәшһүр башҡорт мәғрифәтсеһе, яңы дәүер башҡорт милли прозаһына нигеҙ таштары һалыусы яҙыусы, энциклопедист ғалим Ризаитдин бин Фәхретдин мөхәррирлегендә 1908—1917 йылдарҙа Ырымбурҙа баҫылған «Шура» журналында донъя күрә.

Шәхсиәтенә килһәк, Мөхәммәтмөнир Һаҙый улы Һаҙыев 1876 йылда донъяға килеп, 1913 йылда, ошо китап баҫылыуға бер йыл үтер үтмәҫтән фанилыҡтан үтә. Ул 1902—1904 йылдарҙа «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһе мөғәллиме, 1904 йылдан Силәбелә имам-хатип һәм мәҙрәсәлә мөғәллим. 1911 йылдан Ырымбурҙа архив комиссияһы ағзаһы.

Шуны ла әйтергә кәрәк: М. Һаҙый менән Р. Фәхретдинде оҙайлы хеҙмәттәшлек ептәре бәйләй. М. Һаҙыйҙың күп кенә мәғариф, милли мәҙәниәт, тарих, диндә йәҙитселек мәсьәләләренә арналған мәҡәләләре «Шура» биттәрендә донъя күрә. «Башҡорт тарихы» китабының журнал варианты «Башҡорттар» тип аталған мәҡәләләр серияһы рәүешендә бирелә һәм уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын уята. Империяла нәшер ителгән һәр баҫма, айырыуса айырым китаптар ҡаты цензура контролен үтә. Шуға ла, хөрмәтле уҡыусылар бында Рәсәйҙең рәсми ҡараштарын бер аҙ сағылдырылыуына ла, башҡорттарға ҡарата төрки-татар зыялылары тарафынан булған һауалыраҡ ҡараш тойолоуына ла артыҡ аптырамаҫтар. Ни тиһәң дә, йәмғиәттә йәшәп, унан азат булып булмай. Шуға ҡарамаҫтан китаптың башынан ахырынаса башҡорт халҡына ҡарата булған йылы мөнәсәбәт тойола. Йәнә лә, китаптың кем аҡсаһына һәм кемдәр тарафынан нәшер ителеүен дә хәтерҙән сығарырға ярамай.

Мулла М. Һаҙыйҙың Р.Фәхретдинов менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуына ла аптырайһы түгел. Икеһе лә йәҙитсе-реформатор. Мәктәп һәм мәғариф системаһын ғына түгел, ә Диниә назараты идараһын, ғөмүмән, Рәсәйҙә урыҫ булмаған халыҡтарға ҡарата булған мөнәсәбәтте үҙгәртеү яҡлы шәхестәр нисек хеҙмәттәшлек итмәһен дә нисек фекерҙәш булмаһын?

М. Һаҙыйҙың шәхсиәтенә ҡағылышлы шул да мәғлүм булһын: алдынғы ҡарашлы йәҙитсе-реформаторға ҡаршы булған иҫке ҡарашлы муллалар, асыҡтан-асыҡ көрәшергә хәлдәренән килмәгәс, императорлыҡтың Эске эштәр министры исеменә аноним ялыу яҙа. Милли яңырыш хәрәкәте менән таныш кешеләргә ул «12 мулла хаты» булараҡ билдәле. Шул хатта исемләп яманланған алдынғы ҡарашлы зыялылар араһында М. Һаҙыйҙың исеме лә бар. «Вашей великой особе высокочтимому и высокостепенному Министру внутренних дел г. Столыпину...» тип башланған был хатта меҫкен муллалар имзаларын ҡуймауҙарын: «Вот о чем пишем мы, 12 указных имамов, скрывших свои имена, потому что боимся своих односельчан, как бы не пострадать нам из-за неустройств», — тип аңлата, йәғни халыҡ туҡмап, ҡыуып ебәрмәһен тип ҡурҡа. «В эти последние годы, — тип дауам итә улар, — появились мугаллимы, особого рода общество революционеров /.../ Хотя они служат будто религии, но /.../ возмущают общество против правительства и вооружают его /.../ Вследствие того, что общество очень следует за этими мугаллимами, местные указные муллы сильно боятся этих мугаллимов, как бы эти взбунтовавшие общество не сместили их, а мулл эти мугаллимы не боятся», — тип зарлана.

Йәнә лә, был 12 мулла алдынғы ҡарашлы зыялыларҙы ҡаты жандарм күҙәтеүе аҫтына ҡуйыуҙы, бер мәхәлләлә ике мәктәп асмауҙы, ә муллаларға «чтобы о таких дрянных революционерах муллы доносили Собранию (Диниә назараты. — *Р. Р.*) или безболезненно объявили полицийским властям», — тип теләнселәй. Был 12 милләтен һәм динен һатҡан бәдбәхет, үҙҙәре белгән һәм ҡурҡҡан кешеләрҙең исемлеген биреүҙән дә тартынмай. М. Һаҙыйҙы улар: «В городе Челябинске есть указной мулла Мунир....» — тип атап үтә. Хат 1908 йылдың 15 авгусында яҙылған. Ошо хат менән бәйле Ырымбур губернаторы полиция департаментына яуап яҙырға мәжбүр була. Был хатта «...сведениям, описанного в заявлении мулл, /.../ не установлено и ранее не замечалось. Проживающий в городе Челябинске имам Мухамед-Мунир Мухамед-Гадеев /.../ имамом в г. Челябинске состоит с 18 декабря 1905 г., за все время проживания в г.Челябинске поведения был безукоризненого, под судом и следствием не состоял и не состоит, ни в чем предосудительном в политическом отношении не замечен; он, действительно, один из развитых и настойчивых сторонников разумных нововведений, благодаря чему более развитая часть мусульманского населения

/.../ настояла на передаче в заведование его местной школы (мәктәп)», — тигән яуап яҙылған. Ысынлап та, ниндәй генә шымсылар ебәрмәһендәр, халыҡ үҙе ятаҡан, ышанған уҡымышлы шәхестәрен һаҡлай ҙа, яҡлай ҙа белгән.

Йыйынтыҡта урын алған икенсе китапҡа килһәк, ул билдәле энциклопедист-ғалим, Диниә назаратында ҡазый, һуңынан мөфтөй Ризаитдин бин Фәхретдиндең өлкән улы Абдрахман Фәхретдиновтың 1925 йылда нәшер ителгән әҫәре. Бында ҡәтғи фәнни стиль, ваҡиғаларҙы саф ғилми бәйән итеү күренеп тора. Шуныһына иғтибар итеү кәрәк: китап большевик түңкәрелешенең һигеҙенсе йылында донъя күреүгә ҡарамаҫтан, «Үктәбер Башҡортостаны» тигән бүлеккә ни бары бер биттән саҡ ҡына артыҡ урын бирелгән. Был авторҙың ижтимағи-сәйәси ҡараштарының сағыу күрһәткесе. Китапҡа анализ бирмәҫтән, авторҙың шәхсиәтенә килһәк, шул мәғлүм. Ул 1887 йылда Р. Фәхретдиндең ғаиләһендә тәүге бала булып донъяға килә. Юғары гилем ала. Ул атаһының бар эштәрендә лә төп ярҙамсыһы, кәңәшсеһе, уң ҡулы була. Бөйөк аталарҙың балаларының эшмәкәрлеге, ғәҙәттә, аталары башҡарған ғәмәлдәрҙең күләгәһендә ҡалыусан. Барлығы 240 һаны донъя күргән «Шура» журналын әҙерләп нәшер итеүҙә ул атаһының алмаштырғыһыҙ һәм иң ышаныслы ярҙамсыһы була.

Абдрахман Фәхретдинов 1917 йылғы февраль инҡилабынан һуң көсәйгән башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең етәкселәренең береһе. Йәш Башҡортостан хөкүмәте ағзаһы. Хөкүмәттең 4563-сө һанлы Фарманы менән Башҡортостандың Истихбарәт шөғбәһе (хәҙергесә мәғлүмәт министрлығы) булдырыла. Һәм мөдире итеп Абдрахман Фәхретдинов тәғәйенләнә. Йәғни, Башҡортостандың матбуғаты өсөн дә, ниндәйҙер кимәлдә разведкаһы өсөн дә яуаплылыҡ уға йөкмәтелә. Был Фарман хөкүмәттең 54-се Әмере менән конкретлаштырыла, шөғбә атамаһына «махсус», йәғни, урыҫса әйтһәк «спецотдел» булыуы аңғартыла. Биләгән вазифалары өҫтөнә Башҡортостан Хөкүмәтенең рәсми нәшер әфкәре булған, һуңынан «Башҡортостан Хөкүмәтенең теле» гәзитенең баш мөхәррире вазифаһын да атҡара.

Шуны ла әйтеү кәрәк: Башҡортостан Хөкүмәте 1918 йылдың сентябрендә Һамарҙағы Учредительное Собрание Комитеты (Комуч), ғәмәлдәге аҡтар хөкүмәте менән Башҡортостан мөхтәриәтен танытыу өсөн аңлашыу делегацияһында Абдрахман Фәхретдинов та була. Ә Һамар хөкүмәте делегацияһы составында унан ике йәшкә кесе бер туған ҡустыһы Ғәбделәхәт ҡатнаша.

Шунынһы мөһим, 1918 йылдың сентябрендә Һамар ҡалаһында ҡул ҡуйылған Башҡортостан автономияһын таныу хаҡындағы тәүге Килешеүҙе имзалатыуҙа Ризаитдин Фәхретдиндең ике улы ла ҡатнаша. Ғәбделәхәткә килһәк, ул да атаһы һәм ағаһы кеүек башҡорт милли-демократик хәрәкәте эшендә 1917 йылдан уҡ ҡатнаша, Рәсәй Учредительное Собраниеһына булған һайлауҙарҙа федералист-башҡорттар списогынан, йәғни Рәсәйҙең тәүге азат парламентына Шәриф Манатов менән бергә һайлана. Учредительное Собрание комитетында — Рәсәйҙәге, ғәмәлдә, берҙән-бер легитим, йәғни юридик яҡтан законлы берҙән-бер хөкүмәттә башҡорттарҙан Фәтих Төхвәтуллин менән бергә эшләй.

Шуны ла онотмаҫҡа кәрәк: Ризаитдин Фәхретдин үҙе лә башҡорт милли-демократик хәрәкәте эшенән, хәрәкәт башланған мәлдән үк ситтә ҡалмай. Ул 1917 йылдың 8—20 декабрҙәрендә эшләгән төп Ғөмүми Башҡортостан Ҡоролтайы йәки икенсе төрлө әйткәндә Учредительный Ҡоролтайҙың депутаты, Абдрахман улы менән бергә Башҡортостан Хөкүмәте ағзаһы була. Йәш Башҡортостан иленең тәүге мөфтөйө булараҡ тейешле вазифаһын башҡара.

Үкенескә ҡаршы, Ризаитдин Фәхретдиндең был ике улы үҙе 1936 йылда вафат булғас та нахаҡҡа хөкөм ителеп, үлем язаһына тарттырылалар.

Йыйынтыҡҡа ингән китаптарҙың тел үҙенсәлектәре һаҡланды, тәүге китаптың етмәгән һуңғы бите журнал вариантынан алынды.

**Рөстәм Рәжәпов**

*Мөнир ҺАҘЫЕВ*

# *БАШҠОРТ ТАРИХЫ*

*Ҡазан – 1912*

## 1

Русиә дәүләтенә ҡушылыуҙан элек, киң Урал сәхрәләрендә башҡорттар үҙҙәре генә торорҙар ине. Ҡазан дәүләте мөнҡариз булып, башҡорттар Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткәндән һуң ғына был сәхрәләргә һәр төрлө милләттән килә башланылар. Иң әүәл мишәр вә татарҙар, сирмеш вә сыуаштар килделәр. Бынан һуң урыҫ енестәре килә башланылар. Был ваҡиғаға ҡәҙәр халис башҡорт енесенең хисабы һис кем тарафынан асыҡ ителеп бәйән ителмәгән, араларында булған мишәр, типтәр, татар таифәләре барсаһы бәрәбәр хисап ителеп йөрөтөлгән. Һәр хәлдә, халис башҡорт енесенең хисабы тәхминән ике миллион ярым ҡәҙәренән кәм булмаҫҡа тейештер. Быларҙың күберәк торҙоҡтары ерҙәр: Уфа, Ырымбур, Пермь губерналары булып, Һамар вә хатта Тубыл губерналарында ла бер аҙҙары барҙыр.

Башҡорттарҙы Урал әтрафының төп кешеләре тип хисап итәләр. Ләкин хәҡиҡәт хәл улай булмайса, быларҙан мөҡаддәм был ерҙәрҙә «чудь» исемендә бер ҡәүемдең торғанлығы табылдыҡ әҫәрҙәренән мәғлүмдер. Был ҡәүемдең Урал тауҙарында булған тимергә, башҡа һәр төрлө мәғдән менән файҙалана белеүҙәре һәм был мәғдәндән сәнғәт йәһәтенсә яҡшы уҡ нескә нәмәләр ҙә яһай алыуҙары аңлашылалыр. Быларҙан ҡалған ҡәберлектәрҙән һәм соҡорҙарҙан табылдыҡ нәмәләр: уҡ, пот һәм өй эсендә истиғмал ителә торған ҡоралдар вә биҙәктәрҙән ғибәрәт булып, күберәге баҡырҙан, еҙҙән вә бәғзеләре алтындан яһалғандар.

Был нәмәләрҙең һис ҡайһыһы тимерҙән булмайса, башҡа мәғдәндән яһалған булыуы, был ҡәүемдең тимер истиғмалы мәғлүм булмаған иҫке ваҡыттарҙа торғанлыҡтарын аңлата. Ләкин, һәр хәлдә шул ҡәҙәр иҫке ғасырҙарҙа булып кискән «чудь» ҡәүеменең ғилем, мәғрифәт, һөнәр йәһәттәренсә был замандағы башҡорттарҙан нисә мәртәбәләр артыҡ булғанлыҡтарын белдерә. Был ҡәүемдең мөҡәбәрәләре күберәк Сибирияла вә хосусан Миәс, Исәт, Тубыл йылғаларының тирәләрендә табылып гәһан Һамар, Ырымбур губерналарындағы Быҙаулыҡ, Троицк шәһәрҙәре тирәләрендә лә табылғылай. Хәҙерге хәлдә «чудь» исемендәге ҡәүемдең юҡлығы мәғлүм. Был ҡәүем башҡорттар Азия вустанан был ерҙәргә килгәндән һуң икенсе бер ергә күсеп киткәндәрме йәки башҡорттар араһында ҡалып, юҡҡа сығып бөткәндәрме — уныһы асыҡ мәғлүм түгел. Йәнә был әҫәрҙәрҙән башҡа Урал тауҙарынан бик иҫке замандарҙа ҡаҙылған шахталар вә был шахталарҙа эшләү өсөн баҡырҙан, таштан эшләнгән ҡоралдар ҙа табылған. Был шахталар тар вә оҙон бер коридор рәүешендә булып, был замандың шахталары шикелле стеналары таҡталар вә бүрәнәләр менән беркетелгән. Был шахталарҙың эстәрендә бик күп әҙәм һөйәктәре табыла. Шуның өсөн эшләгән ваҡытта был шахталар емерелеп, бик күп әҙәмдәр үлгәнлеге ғоман ителә. Был шахталарҙа эшкә кергән һис бер тимер заты табылмай. Бында эшләү өсөн яһалған ҡоралдарҙың бәғзеһе баҡырҙан вә бәғзеһе таштан яһалғанлығы күрелә. Шуның өсөн был шахталарҙың да тимер истиғмалы мәғлүм булмаған иҫке замандарҙағы кешеләр тарафынан эшләнгәнлеге аңлашыла вә был ҡәүемдәрҙең «чудь» ҡәүеме булғанлығы ихтимал тотола.

Был ерҙәрҙә башҡорттарҙан элек икенсе ҡәүемдәрҙең тороуына әйтелгән нәмәләргә дәлил булған шикелле күл, йылға вә тау исемдәре лә дәлил булырҙар, сөнки кәрәк ни ерҙә генә булһа ла булһын, йылға вә тау кеүек һәр заманда була торған нәмәләрҙең исемдәре шул тарафтарҙа ултырған иң иҫке ҡәүемдәр тарафынан бирелгән исемдәр булыуында шөбһә юҡ. Инде Башҡортостанда булған күл, йылға, тау

исемдәренә ҡаралһа, быларҙың һис ҡайһыһы ни ҙә башҡортса, вә ни ҙә ҡырғыҙса түгел. Барсаһы беҙҙәргә мәғлүм булмаған икенсе бер лөғәттән исемдәр. Мәҫәлән: Һаҡмар, Уфа, Ыҡ, Суҡ, Уй, Ирәмәл, Миәс, Әй, Ур кеүек исемдәр барсаһы башҡа лөғәттән алынған исемдәр. Был нәмәләрҙең барсаһы башҡорттарҙан элек был ерҙәрҙә икенсе бер ҡәүемдәрҙең тороуына, башҡорттарҙың һуңдан ғына килеп ерләшеүҙәренә дәлаләт итерҙәр.

Гәрсә башҡорттар был ерҙәрҙең төп кешеләре булмаһалар ҙа шаҡтай иҫке ваҡыттарҙан бирле шул ерҙәрҙә торғанлыҡтары тарих яҙыусылар тарафынан бәйән ителәлер. Башҡорттарҙы туғыҙынсы ғасырҙан башлап ғәрәп мөәррихтәре ҙекер итә башлайҙар һәм быларҙың Волга, Ҡама, Тубыл йылғалары араһында йәшәгәнлектәрен ҙекер ҡылалар. Мәҫәлән: туғыҙынсы ғасырҙағы ибн Дастә, унынсы ғасырҙағы ибн Фаҙлан, ун икенсе ғасырҙағы Идриси, ун өсөнсө ғасырҙағы Дәмәшҡи былар тураһында бик мөһим нәмәләр яҙғандар һәм урыҫ вә ифрәнж мөхәррирҙәре был әҫәрҙәрҙән бик күп файҙаланып, был әҫәрҙәргә төрлөсә шәрехтәр бәйләгәндәр.

## 2

Иҫке замандарҙа Шәрҡи Азия вә Урта Азия сәхрәләрендә күсәбә хәлдә йәшәп, һуңынан араларынан Аттила, Сыңғыҙ, Аҡһаҡ Тимер кеүек олуғ әҙәмдәр зоһур итеп, бөтөн донъяны дәһшәткә һалған олуғ татар йәмәғәттәренең булғанлығы мәғлүмдер. Башҡорттарҙың да шул татар йәмәғәттәренән булған бер фирҡә булғанлыҡтары күп тарих ғалимдары тарафынан бәйән булыналыр. Флоренский әйтер: «Төрки ҡәбиләләре араһында өҫтән генә ҡарағанда айырма бик күптер, ләкин төрки ҡәбиләләре йөмләһенән булған татар вә башҡорт ҡәбиләләре араһында был ҡәҙәр ҙә ихтилаф юҡтыр. Затән был ике ҡәбиләнең һәр икеһе бер нәҫел вә бер енес була тороп, береһе татар вә береһе башҡорт тип исем алыуҙары үҙәндәренең башҡалығынан вә йәхүд тарз мәғишәттәренең ихтилафынан ғына хасил булмыштыр». Витевский

быға өҫтәп әйтер: «Флоренскийҙың әйткәндәре дөрөҫ булһа кәрәк, сөнки Ҡазан татарҙары менән Урал башҡорттары араһында ихтилаф бик аҙҙыр һәм ғилем тәшрих буйынса ҡаралғанда ла ағзалары бер-береһенә монасип күрелмештер. Нәсәп ғөләмәһе ҡаршыһында иң бөйөк дәлил ителгән тел берлеге быларҙа мөкәммәлдер. Зирә башҡорт теле менән Ҡазан татарының теле араһында башҡалыҡ юҡ тиерлек дәрәжәлә аҙҙыр. Былар араһындағы башҡалыҡ фәҡәт тарз мәғишәттә һәм бер аҙ ғилем, мәғрифәт вә һөнәр йәһәттәренәндер. Башҡорттарҙың тереклектәре бәдәүиәткә яҡын бер хәлдә булып, Ҡазан татарҙарының тереклектәре егерменсе ғасыр мәҙәниәтенә яҡын бер хәлдәлер. Башҡорттар ғилем вә һөнәр йәһәттәренсә бик кирелә булып, Ҡазан татарҙары быларға ҡарағанда яҡшы уҡ алға китмештәрҙер. Бер төптән вә бер нәҫелдән булған был ике таифә араһындағы ихтилафтар фәҡәт мәүҡиғтарының ихтилафынан ғына тыумыштыр, сөнки Ҡазан татарҙары күп ваҡыттарҙан бирле мәҙәниәт ғаләменә яҡын торғанлыҡтарынан, аҙ-аҙ ғына булһа ла ғилем вә һөнәр йәһәттәренсә алға китмештәрҙер һәм Ҡазан дәүләте урыҫтар тарафынан алынғандан һуң, татарҙар урыҫ мәҙәниәтенең тәхете тәьҫирендә ҡалмыштарҙыр, ләкин шул хәлдә башҡорттар ғаләм мәҙәниәткә йыраҡ булып, күршеләрендә ҡаҙаҡ вә ҡалмаҡ кеүек бәдәүи таифәләр булғанлыҡтан был ваҡытҡа ҡәҙәре бәдәүиәт ғаләменең тәхете тәьҫирендә ҡалмыштарҙыр. Аралашыуҙары һәм алыш-бирештәре һаман шулар менән булғанға ғилем вә һөнәр йәһәттәренсә алға китә алмағандарҙыр. Бына, бер атаның балаларынан булған татар вә башҡорттар араһындағы аҙ-маҙ башҡалыҡ фәҡәт шул йәһәттән генә хасил булмыштыр. Юғиһә, былар араһында башҡа йәһәттән төплө ихтилаф юҡтыр.

Әбүл-Фида «Тәҡүим үл-бүлдән» нам әҫәрендә, Ҡәзүини «Ғәжәиб үл-мәхлүҡәт» нам әҫәрендә башҡорттарҙың төрки енесенән икәнлектәрен ҙекер итәләр һәм быларҙы башҡа башҡорттарҙың хәлдәренә мөтталиғ ғәрәп вә фарсы мөхәррирҙәре быларҙың төрк енесенән икәнлектәренә мөттафиҡ тиерҙәр.

Болғар падишаһы Алмас үҙенең ойо йәмәғәттәре һәм әһле мәмләкәте менән бәрәбәр дин Исламды ҡабул иткәс, Хәлифә-и Ғәббәсиәнән Мөҡтәдир Биллаһ быларға шәриғәт хөкөмдәрен өйрәтмәк өсөн 922 сәнәлә бер илсе һәйәте күндерҙе. Был илсе һәйәтенең сәркәтибе Әхмәт бин Фаҙлан ине. Әхмәт бин Фаҙлан әйләнеп ҡайтҡансы ниҙәр күргән булһа, барсаһын да яҙа барҙы. Әхмәт бин Фаҙлан юлда күргәндәре араһында башҡорттарҙы ҙекер итә һәм быларҙың төрки енесенән икәнлектәрен асыҡ итеп әйтә: «Сәфәребеҙҙә башҡорт исемле төрки ҡәбиләләренән береһенә осраныҡ. Быларҙан бик һаҡландыҡ вә ҡурҡтыҡ, сөнки былар төрки ҡәбиләләренең иң яуыздары вә ҡәбәхәттәрелер. Кеше үлтермәк былар ҡаршыһында һис нәмә түгелдер. Ҡаршыһына килгән бер әҙәмдең баш ҡапҡасын ҡуптара ла алып китә. Ул кеше шунда һәләк булып ҡала. Үҙҙәре һаҡалдарын китәрәләр, күлдәк-ыштандарындағы йөй араларынан беттәрен тештәре менән сүпләп ашайҙар. Беҙгә хеҙмәт итеүсе былар йөмләһенән бер исламға килгән кеше бар ине. Бер көндө ҡарап торам: был әҙәм күлдәгенән бетте алды ла тырнағына ҡыҫып үлтереп, һуңра теле менән ялап алды. Минең ҡарап торғанымды күргәс: «Аһ, яҡшы ла баһа», — тиеп ҡуйҙы. Быларҙың һәр бере ҙекер ҡәҙәрле бер ағас яһап янына таға. Сәфәргә йәхүд бер дошман ҡаршыһына китһә, шуға сәждә ҡылып: «Я-рабби, маҡсатымды бир!» — тиеп доға ҡыла. Был хәлде күргәс, тәржемәнемә: «Ник былай ҙекергә ғибәҙәт ҡылалар икән, быға дәлилдәре бармы икән?» — тип һорарға ҡуштым. Тәржемәнем һорағас: «Был мине яратыусылыр, бынан башҡа яратыусыны мин белмәйем», — тип яуап ҡайтарҙы. Быларҙың бәғзеләре ҡыш өсөн бер илаһ, йәй өсөн бер илаһ, ямғыр өсөн бер илаһ, ел өсөн бер илаһ, ағасҡа бер илаһ, әҙәмгә бер илаһ, хайуандарға бер илаһ, һыуға бер илаһ, кискә бер илаһ, көндөҙгә бер илаһ, күккә бер илаһ, ергә бер илаһ, хайәткә бер илаһ иғтиҡад итәләр һәм быларҙың ғоманынса, күктәге илаһ барсаһынан олуғыраҡ булып, һәр эштә быларға кәңәш итәлер. Һуңра был ни эшләһә, башҡалары шуға разый булалыр. Башҡорттарҙың бәғзеләре йыланға, бәғзеләре

балыкҡа, бәғзеләре торнаға ғибәҙәт ҡылалар. Торнаға ғибәҙәт ҡылыуҙарының сәбәбен һорағас: «Бер ваҡыт дошмандарыбыҙ менән һуғышҡанда, дошмандарыбыҙ беҙҙе еңә башланылар, шул ваҡыт арттарынан торналар сығып ҡысҡырҙылар. Һуңра улар еңелделәр. Дошмандарыбыҙҙың еңелеүҙәренә сәбәп булған өсөн, беҙ уны илаһ тип таныйбыҙ. Шул сәбәпле уға ғибәҙәт ҡылабыҙ, — тип яуап бирәләр».

### 3

Башҡорттар шәрҡи вә ғәрби исемдәре менән икегә бүленәләр. Шәрҡи тип Урал әтрафындағы башҡорттар тәсмиә ителеп, ғәрби тип Австрияның бөйөк бер жөзөн тәшкил иткән ғилем, һөнәр вә сауҙа йәһәттәренсә бик тәррәҡи иткән венгр ҡәүеме тәсмиә ителә. Был хәлдә венгрҙар үҙҙәрен мадьяр, төркиҙәр мажар тип тәсмиә итәләр. Иҫке ислам мөәррихтәренең бәғзеләре һүнкәр, бәғзеләре мажғар, бәғзеләре мажғард, бәғзеләре башҡорт тип атап йөрөтәләр. Мажарҙар әүәлдәрҙә Урал тарафында булынып, бәшәнәктәр тарафынан тарлыҡ күреүҙәре сәбәпле 884 йылдарҙа Урал тарафынан Алмус исемле әҙәмдең ҡулы аҫтында күсеп киттеләр. Бик күп ваҡыттар йөрөгәндән һуң, Хәзәрстан менән сиктәш бер ергә урынлашып, Хәзәрҙәргә табиғ булып тереклек иттеләр. Бер нисә ваҡыттарҙан һуң был ерҙе Алмустың урынына ҡалған Либидияс исемендәге башлыҡтарына нәсәбәт менән Либидия тип атап йөрөттөләр. Бер нисә ваҡыттарҙан һуң бәшәнәктәр шәреҡтән ғәрпкә күсеп килеп, мажарҙарҙы йәнә ҡыҫа башланылар. Мажарҙар йәнә был ҡыҫыуға сыҙаша алмай, Либидиястың ҡулы аҫтында Атилкус исемле ергә күсеп киттеләр. Бәшәнәктәр һәр ваҡыт хәзәрҙәр менән һуғышып торорҙар ине. Шул сәбәпле хәзәрҙәр бәшәнәктәргә ҡаршы мажарҙар менән иттифаҡ яһанылар. Был ваҡытҡа ҡәҙәре мажарҙарҙың даими хакимдары юҡ ине. Алмус менән Либидияс ваҡытлы ғына хакимдар ине. Хәзәр падишаһы дошманға ҡаршы тороуҙа йәплерәк булһын өсөн мажарҙарға даими бер хаким билгеләүгә тәклиф итте. Мажарҙар

хазар падишаһының күрһәтеүе менән Либидиясты хаким — падишаһ итмәк булдылар. Ләкин Либидияс, һис балаһы булмағанлыҡтан быны ҡабул итмәне. Үҙе урынына Алмустың улы Арпадты күрһәтте. Мажарҙар бер ауыҙҙан Арпадты үҙҙәренә падишаһ ҡылып тәғәйен иттеләр. Ләкин ни сәбәп менәндер Атилкуста ла күп тормайса, унан һуң хәҙерге урындары Венгрияға барып ирештеләр. Мажарҙар тураһында бик асыҡ итеп бәйән иткән иҫке ислам мөәррихтәренең бере ибн Даста булып, ул әйтер: «Мажар ерҙәре бәшәнәк ерҙәре менән һәм Эсегел болғарҙарының ерҙәре бер яҡтан сиктәштәр. Мажарҙар төрки енесенән булып, башлыҡтарының исеме Жилә вә ләҡәбе «ҡушаматы» Кәндәлер. Һуғыш ваҡыттарында егерме мең атлы ғәскәр йыйырға хәленән киләлер. Кәрәк һуғыш ваҡыттарында вә кәрәк башҡа ваҡыттарҙа булһын, мажарҙар башлыҡтарына бик итәғәтлеләрҙер. Үҙҙәре сатырҙарҙа тереклек итеп, хайуандары өсөн яҡшы үләнле ерҙәрҙе эҙләп бер ерҙән икенсе ергә күсеп йөрөрҙәр. Ерҙәре бик киң булып, бер сиге Рум диңгеҙенә (Ҡара диңгеҙ) ҡәҙәр барып етәр. Был диңгеҙгә ике йылға ағып, бының береһе Жәйхун йылғаһынан да олуғыраҡтыр. Мажарҙар шул ике йылғаның аралығында тереклек итерҙәр. Ҡыш яҡынлашты иһә, һәр береһе үҙенең торған еренә яҡыныраҡ, шул ике йылғаның береһе янына күсеп китерҙәр һәм шул йылғанан балыҡ аулап, яҙға ҡәҙәр ғүмер кисерерҙәр һәм башҡа ергә ҡарағанда мажарҙар өсөн бында ҡыш үткәрмәк муафиҡлылыр. Мажар ерҙәре бик ағаслы вә һыулы булғанлыҡтан, ратубәтлелер. Иген икмәктәре бик күптер. Мажарҙар күршеләрендә булған славян таифәләренә хужалыҡ ҡылырҙар, быларға бик ауыр налогтар һалып, тотҡондарға ҡылған мөғәмәлә менән мөғәмәлә ҡылырҙар. Мажарҙар уттарға ғибәҙәт ҡылырҙар һәм даимән славяндар менән һуғыш ҡылып, быларҙан күп тотҡондар алырҙар. Был тотҡондарҙы диңгеҙ буйы менән Рум еренә барып, Кәрх исемендәге пристангә илтеп һатырҙар. Риүәйәт ителгәненә күрә, элекке ваҡыттарҙа хәзәрҙәр мажарҙарҙан вә быларға башҡа күрше таифәләрҙән һаҡланыу өсөн әтрафтарына хәндәктәр

каҙмыштарҙыр. Мажарҙар тотҡондар менән Кәрх пристаненә ирешкәс, румдар (гректар) ҡаршы сығарҙар һәм шунда баҙар яһап, тотҡондарҙы румдарға биреп, алмашына ҡәтифәләр, йөндән яһалған сыбар балаҫтар вә башҡа тауарҙар алып китерҙәр». Ибн Дастаның был һүҙҙәре мажарҙар Атилкустан хәҙерге урындарына күсмәҫ борон яҙылмыштыр. Сөнки ибн Дастаның «Ҡара диңгеҙгә ҡоя торған ике йылға араһында торалар» тигән һүҙҙәрендәге йылғаларҙан мурады Дунай вә Днестр йылғалары булып, Атилкустан мурады хәҙерге Бессарабия мәмләкәтелер. Мажарҙар хәҙерге башҡорттар менән бер нәҫел булыу ғына түгел, хатта Урал тирәләренән китмәҫ борон шул башҡорттарҙың бер жөзөн тәшкил итмештәрҙер. Ун икенсе ғасыр сәййәхтәре башҡорт теле менән мажар теле араһында һис бер йәһәттән айырма тапмамыштарҙыр, шуның өсөн Башҡортостанды «Олуғ Венгрия» тип атап йөрөтмөштәрҙер. 1849 йылда венгрҙарҙың Австрияға ҡаршы баш күтәргән ваҡыттарында, Австрияға ярҙам өсөн Русиә дәүләте ғәскәр күндергән ине. Был ғәскәрҙәр араһында башҡорттарҙың ватандаштары булған Урал казактары ла бар ине. Был казактар венгрҙарҙы күреү менән бик оҡшағандары өсөн быларҙы башҡорттар тип атамыштар һәм һуғыштар баҫылып ватандарына ҡайтып киткәнсе быларҙы башҡорттар тип атап йөрөтмөштәрҙер.

Урал башҡорттары мосолман булған кеүек мажарҙар араһында ла үткән заманда әһле ислам булыуынан хәбәр бирәләр. Был турала Яҡут Хәмәүи үҙ тарафынан шуны яҙа: «Хәлеб шәһәрендә башҡорт исемендә бер таифә күрҙем. Тәндәре вә сәстәре ҡыҙғылт булып, имам Әбү Хәнәфиә мәҙһәбе үзрә булған ғилем фиҡһыны тәхсил итәләр. Быларҙың береһенән үҙҙәренең вә шәһәрҙәренең хәлдәренән һораштым. Миңә әйтте: «Шәһәрҙәребеҙ Ҡанстантинияның (Истанбул) артында Һүнкәр тигән ифрәнж мәмләкәтендәлер, Һүнкәр тигәне венгрҙыр. Беҙҙәр утыҙ ҡәрйә ҡәҙәре әһле ислам булып, барсабыҙ шул Һүнкәриә тигән ифрәнж падишаһына табиғтарбыҙ. Ҡәрйәләребеҙҙең һәр береһен бер кескенә шәһәр тимәк мөмкиндер.

Падишаһыбыҙ беҙҙең баш тартыуыбыҙҙан ҡурҡып, шәһәрҙәребеҙҙең әйләнәләренә крепостар яһарға ихтыяр бирмәйҙер. Беҙҙәр христиан шәһәрҙәренең урталығындабыҙ. Төньяғыбыҙҙа тотош ыслав шәһәрҙәре булып, жәнүб тарафыбыҙҙа Папа (хәҙерге Италия) шәһәрҙәрелер, ҡояш батышы яғыбыҙҙа Әндәлес шәһәрҙәре булып, ҡояш сығышы тарафыбыҙҙа Ҡанстантиния мәмләкәтелер. Беҙҙең телебеҙ һәм ҡиәфәтебеҙ ифрәнжсәлер. Былар менән берлектә ғәскәрлек хеҙмәте итәбеҙ һәм былар менән берлектә дошманға ҡаршы тороп, һуғыш ҡылабыҙ, сөнки былар һәр ваҡыт исламға дошман ҡәүем менән генә һуғыш ҡылалар». Һуңра мин ғәжәпһенеп был ҡәҙәре ҡафыр араһында нисек былар ғына мосолман булып ҡалыуҙың сәбәбен һораным. Ул миңә әйтте: «Ҡарттарыбыҙҙан ишетеүебеҙгә күрә, элекке замандарҙа беҙҙең еребеҙгә Болғар еренән ете мосолман килеп, беҙҙең еребеҙҙә торғандар һәм әкренлек менән беҙҙең заләләттә икәнебеҙҙе төшөндөрөп, беҙҙе дин исламға кереткәндәр. Бына шул ваҡыттан беҙ мосолман булып ҡалғанбыҙ. Беҙ был шәһәрҙәргә килеп, ғилем фиҡһыны тәхсил итәбеҙ. Ҡасан тәхсил итеп шәһәрҙәребеҙгә ҡайтһаҡ, халҡыбыҙ беҙҙе хөрмәт итәләр һәм беҙҙәрҙе дин башлыҡтары ҡылалар». Һуңра мин: «Ни өсөн һаҡалдарығыҙҙы китәрәһеҙ?» — тип һораным. Миңә: «Беҙ ғәскәрибеҙ, беҙҙең ғәскәриҙәребеҙ һаҡалдарын китәрәләр һәм ифрәнж кейемдәрен кейәләр. Әммә ғәскәр хеҙмәтендә булмағандарыбыҙ улай итмәйҙәр», — тине. Һуңра: «Һеҙҙең шәһәрҙәрегеҙ бынан йыраҡмы?» — тинем. Ул әйтте: «Истанбулға ике ай ярымлыҡ юлдыр. Истанбулдан һуң йәнә шул ҡәҙәре барҙыр». Хәмәүи һүҙе тамам.

Был заттың әйтеүенә күрә, был мосолмандар мажарҙар менән бер енестәндер, ләкин хәҡиҡәт хәл улай булмайса, ни ҙә булһа бер сәбәп менән был мосолмандарҙың ситтән килеп ерләшкән әҙәмдәр булыуы Аурупа ғөләмәһе тарафынан бәйән ителәлер. Яҡут Хәмәүи менән һөйләшкән шәкерттәрҙең үҙҙәрен башҡорттар тип тәсмиә ҡылыуҙары фәҡәт ғәрәптәр ҡаршыһында башҡорттар тип танылған ҡәүемдәр араһында тороуҙары йәһәтенән генә

булыуы ғоман ҡылыналыр. Бәғзе Аурупа мөәррихтәре тарафынан был мосолмандар хаҡында ошондай хәбәр биреләләр: мажар ханы Таҡсун ваҡытында Венгрияға Билла, Баксу исемле ике туғандың ҡул аҫтарында бер фирҡә болғар мосолмандары килделәр. Бынан һуң күп тә үтмәне, Хөсәйен исемендәге йәнә бер өйҙөң ҡулы аҫтында икенсе бер фирҡәһе килде. Мажарҙар быларҙы яҡты йөҙ менән ҡабул итеп, Дунай йылғаһы буйында ер бирҙеләр. Болғар мосолмандары шунда ерләшеп, Пешт исемендә бер шәһәр ҡорҙолар вә быларҙы гәһан болғарҙар тиеп, вә гәһан мосолмандар тип атап йөрөттөләр. Был мосолмандарҙың үҙ ерҙәрен ташлап, был ергә килеүҙәренә сәбәп Святослав ваҡытында, 968 сәнәлә урыҫтарҙың Болғарға барып үлтереп вә талап йөрөүҙәре булмыштыр. Һуңға табан был мосолмандар Венгрияла мал вә дәүләт йәһәттәренсә бик ҙур урындар тотмоштарҙыр. Был мосолмандарҙы ун дүртенсе ғасыр урталарына ҡәҙәр Венгрияла булғанлыҡтары мәғлүм иһә лә һуңғы хәлдәре мәғлүм түгелдер.

Бына Яҡут Хәмәүи вә башҡаларҙың башҡорттар тип атап йөрөткәндәре мосолмандар шуларҙыр. Күп ғәрәп мөәррихтәре Азияла ҡалған башҡорттар менән Аурупаға киткән башҡорттар араһын айырмай, икеһен бер хисап итеп йөрөтәләр. Мәҫәлән, ибн Сәид: «Башҡорт ере етенсе әҡлимдә ваҡаиғ», — тиер. Бынан маҡсат, әлбиттә, Урал тирәләрелер. Йәнә шуның артынан уҡ: «Башҡорттар төрки енесенән булып, немецтар менән күрше торалар вә күршелек тәьҫире менән немецтарҙан христианлыҡты ҡабул иткәндәр», — тиҙер. Бынан маҡсат шөбһәһеҙ мажарҙарҙыр. Хәлбуки, ибн Сәид быларҙың араһын айырмай, һәр икәүһен бер хисап итеп йөрөтмештер. Яҡут Хәмәүи «Мүғжәм үл-бүлдәндән»: «Башҡорт ерҙәре Истанбул менән Болғарстан араһында ваҡаиғ», — тиер. Бынан маҡсат шөбһәһеҙ Аурупалағы башҡорттарҙыр. Хәмәүи йәнә шул уҡ башҡорттар тип ғоман итеп ибн Фаҙлан рисәләһенең башҡорттарға ғаид ҡыҫымын күсерәлер. Хәлбуки, ибн Фаҙлан ҙекер иткән башҡорттар үҙҙәренең Урал тауҙарын үтеп, шәһри Болғарға барған ваҡытта күргән башҡорттар ине.

Рума папаһы тарафынан Бату ханға христиан динен тәҡдим өсөн барған миссионер Карпини сәфәрендә башҡорттарҙы күргән һәм быларҙың мажарҙар менән бер енестән икәнлектәрен бәйән итеп, башҡорт вә мажар телдәре араһында һис айырма юҡлығын бәйән иткән. Шуға күрә Карамзин иҫке башҡорт теле менән хәҙерге мажар теле араһында айырма юҡлығын, башҡорттар татарҙар ҡулы аҫтына кергәс кенә үҙ телдәрен ҡуйып, татар телен ҡабул иткәнлектәрен ҙекер итә. Ләкин, хәҡиҡәт хәл бының киреһенсәлер, сөнки мөҡәдимдәге мажар теле хәҙерге башҡорт теле кеүек төркисә булмыштыр. Һуңға табан ғына был телдәрен юйып, хәҙерге телдәрен ҡабул итмештәрҙер. Быға иң ҡеүәтле дәлил ун дүртенсе ғасырға ҡәҙәр мажарҙарҙың уҡыла торған доғаларының төркисә булыуылыр.

Инде киләйек башҡорт вә мажар исемдәренә. Был ике исем араһында һәр ни тыштан ғына ҡарағанда бер ҙә мөнәсәбәт юҡ кеүек күренһә лә, әммә хәҡиҡәт хәлдә был ике ләфз һәр икеһе бер төптән тыумыштарҙыр. Сөнки, унынсы ғасырҙағы Мәсғүди быларҙы бажғард тип атайҙыр. Тимәк, быларҙың иң иҫке исемдәре бажғардҡыр. Һуңға табан был исем икегә үҙгәреп, шәреҡтә был исемдән бажғард, башҡард, башҡарт, башҡорт ләфздәре хасил булмыштыр. Ғәребтә иһә «б» хәрефе еренә «м» хәрефе ҡуйылып вә «д» хәрефе бөтөнләй ҡалдырылып, мажғар булып ҡалмыштыр. Йәнә һуңыраҡ мажғар ләфзе мажарға үҙгәртелеп, мажарҙан мадьяр ләфзе хасил булмыштыр. Урыҫ мөәррихтәре был ҡәүемде башҡорт тип атауға төрлөсә үәжеһтәр бәйән итәләр. Бәғзеләре элек тә: «Былар бал ҡорто аҫрап тереклек иттеләр, шул мөнәсәбәт менән башҡорт тип тәсмиә ителделәр», — тиерҙәр вә бәғзеләре: «Башҡорттар Алтын Урҙа хөкүмәтенә табиғ ваҡыттарында Алтын Урҙа хөкүмәте үҙенең ғәҙәтенсә башҡорттарға бүре башы ғәләмәте бирҙе. Башҡорттар быны әләмдәренә флаг ҡуйып һәм башҡа нәмәләрҙә милли ғәләмәт ҡылып йөрөттөләр. Шул мөнәсәбәт менән «баш бүре» йәхүд «бүре баш» мәғәнәһендә булған башҡорт исеме менән аталып киттеләр», — тиерҙәр. Ләкин башҡорт вә

мажар ләфздәренең ҡайҙан алынғанлыҡтарын вә быларҙың төбө нисек булғанын яҡшылап белгәс, тәүжиһтәргә шаид зиһен китмәһә кәрәк.

## 4

Унынсы ғасыр ибтидаларына ҡәҙәр башҡорттар, ғөмүмән, тиерлек мәжүсиәттә булып, фәҡәт аҙ-маҙ ғына дин ислам араларына таралмаға башламыштыр. Бәғзеһе хайуандарға ғибәҙәт итеп, бәғзеһе ун ике илаһҡа иман килтермештәрҙер. Мәҫәлән: ҡыш, йәй, ямғыр, ел, нәбатат, һыу, хайуан, көн, төн, ер, тереклек, үлем. Быларҙың һәр бере өсөн бер илаһ иғтиҡад итмештәрҙер. Хатта бик аҙ ғына мөҡәддәм башҡорттарҙа мәжүсиәт ваҡытынан ҡалған әҫәрҙәрҙе күрмәк мөмкин булған. Мәҫәлән, йәш килен кейәү йортона килеп төшкәс тә шул ерҙәге тауҙарға, йылғаларға, мәшһүрерәк ерҙәргә, ҡайнатаға, ағастарға, үлгән ҡарттарға, башҡа шул ерҙең иғтибарлы кешеләренә теҙ сүкмәк вә сәждә ҡылмаҡ тейешле булған һәм бәғзеләренең әйтеүенә күрә, башҡорттарҙың яҙ көндәрен артыҡ тәғзимләүҙәре лә шул мәжүсиәттән ҡалған. Волга болғарҙары унынсы ғасырҙа үҙҙәре исламиәтте ҡабул иткәс, үҙҙәренә табиғ башҡорттарға ла был мөбәрәк динде ҡабул иттереүгә ижтиһад иткәндәр һәм бөтөнләй үк булмаһа ла бер аҙ исламиәт орлоғон сәсеүгә муафиҡ булғандар. Һуңра Алтын Урҙа хөкөмдарҙарынан Бәркә хан 1266, Үзбәк хандар 1341 башҡорттар араһына исламиәтте нәшер итеүгә тырышҡандар һәм былар тамамы менән муафиҡ булып, бөтөн Башҡортостанға исламиәтте ерләштергәндәр. Волга болғарҙары исламиәтте ҡабул иткәс, әхкәм исламиәне яҡшылап өйрәтеү өсөн хәлифә Мөҡтәдир Биллаһ тарафынан Болғарға бер илсе һәйәте күндерелгәне мәғлүмдер. Шуның кеүек башҡорттарға ла дин исламды өйрәтеү өсөн ислам мәмләкәттәренән ғөләмә килгәнлеге ҙан ҡылыналыр. Был йөмләнән береһе Уфанан илле саҡрым мосафәдә Шишмә ҡәрйәһенең яҡынында мәдфүн Хөсәйенбәктер. Был әҙәмдең Төркөстандан бында килеп, 76 йәшендә 444 йылда донъя ҡуйғанлығы ҡәбер ташында

яҙылмыштыр. Риүәйәттәргә күрә, был әҙәм Урта Азия хандары тарафынан исламиәттәре зәғиф булған нуғайҙарға динде яҡшылап өйрәтеү өсөн вә башҡорттарҙы мәжүсиәттән исламиәткә керетеү өсөн был ергә күндерелмештер. Шул сәбәпле, урыҫ мөәррихтәре был әҙәмде мосолман миссионеры тип тәсмиә итмештәрҙер. Златоуст өйәҙендә Кошелевка йылғаһының яҡынында Соҡор исемле тауҙың башында тупраҡтан өйөп яһалған бер вал булған. 1868 йылда был вал — стена емерелеп аҫтынан бер нисә баҡыр аҡса табылған. Был аҡсаларға мосолманса «Буләнд Хәуҡәнд» тип яҙылған. Шул сәбәпле бәғзеләр башҡорттарҙы исламиәткә керетеү өсөн Хәуҡәнд еренән дә мосолман миссионерҙары килгәнлеген ғоман итәләр. Башҡорттар фекер йәһәтенсә бик сикле булып, һис ваҡытта бер кем тарафынан да быларҙың аҡыл вә фекер тәрбиәһенә әһәмиәт биргәндәре юҡтыр. Башҡорттарҙың иҫке ғәҙәттәрендә фәҡәт өс төрлө нәмәне өйрәнмәк лазым булып, ғилем даирәләре шуға сикләнеп ҡалмыштыр: бәғзе йондоҙҙарҙың исемдәрен белмәк вә файҙаларын өйрәнмәк, иҫке хандар хаҡында булған риүәйәттәрҙе белмәк һәм батырҙар хаҡында һөйләнгән бәғзе бер тарихи шиғырҙарҙы хифзы итмәк. Һәр бер башҡорт үҙенең ырыуын вә ҡайһы ханға мәнсуб икәнен белмәк. Башҡорттар араһында бәғзе шиғырҙар барҙыр ки, көйөнөң матурлығы йәки бик нескә хиссиәткә малик булыуы йәһәтенсә бөтөн башҡорт араһында мәҡбул булмыштыр. Был йөмләнән береһе «Ашҡаҙар» көйөлөр ки. Был көй бер башҡорт ҡыҙы тарафынан Ашҡаҙар йылғаһына батып үлгән үҙенең һөйөклө егетенең ядына сығарылмыштыр. Башҡорт араһында батырҙарҙың ғәҙәттән тыш батырлыҡтарын әйтеп һөйләгән шиғырҙар, көй менән хан улдарына ҡылынған нәсихәттәр бик күптер. Быны менән батырҙарҙың мәшһүрҙәре «Сура батыр», «Һары Мәркәс улы» вә ғәйреләрҙер хаҡында бик күп шиғырҙар һөйләнгән әҙәмдәрҙең береһе — Салауат Юлаевтыр. Был шиғырҙарҙа Салауатты егерме йәшендә үк бик ҙур дәрәжәгә менеүе, Пугачевтың бригадиры булып, башына ҡамсат бүрек кейеүе, үткер ҡылыс тотоп

мендәрсә кешеләрҙең баштарын өҙөүе ҙекер ителмештер. Хатта бәғзе шиғырҙарҙа Салауатты пәйғәмбәрлек дәрәжәһенә еткереп мәдех ҡылынмыштыр. Был шиғырҙар урыны менән яҙғы йыйындарҙа оло вә кесе тарафынан уҡылырҙар һәм барса башҡорттар быны ишетеп, ғәҙәттән тыш ләззәт алырҙар. Һуңғы ваҡытта башҡорттарҙан етешкән шағирҙарҙың береһе Әбелмәних бин Әбелфәиздер. Ҡарғалы ҡасабаһында донъяға килеп, Мөхәммәтйософ исемендәге Бохара ханының илсеһе менән Истанбулға солтан хозурына бармыштыр. Унда эштәре тамам булғандан һуң Мәккәгә барып 1231 йылда хәж ҡылмыштыр. Был сәфәренән ҡайтып, 1240 йылда йәнә хәж ниәте менән сәфәр итеп, ҡырҡ йәшендә юлда донъянан үтмештер. Баҫылған бер төрки диуаны булып шиғырҙары фасих вә ләзиздер. Был шиғырҙарында Бәйтуллаға хаж ҡылғанлығын, пәйғәмбәребеҙҙең мөҡәбәрәһен зыярат иткәнлеген ҙекер итмештер. Йәнә мәғруф шағирҙарҙан береһе Һибәтулла бин Сәидбаттал хәҙрәттәрелер. Мәржәни хәҙрәттәре быныҡ тураһында: «Был әҙәм Һибәтулла ишан Ҡарғалы тип мәғруфтыр. «Мәжмүғ әл ләтаиф вә әл әҙәб» нам мәуағиз вә нәсаихкә мөштәмәл яҡшы би мәғәнә вә сахих әл мәзамин төрки лисанында мәнзумалары барҙыр», — тиер.

Урыҫса әҫәрҙәрҙә: «Бының шиғырҙары үҙ ғасырындағы башҡорт ғәскәренең рәистәрен мәдех вә ҫәна ҡылыуҙан ғибарәт ине гәһан урыҫ түрәләренә лә мәдех ҡылып шиғырҙар һөйләмеш ине», — тип ҙекер ителмештер. Урыҫ мөәррихтәре быны башҡорттан хисап итмештәр иһә лә Мәржәни хәҙрәттәре ни сәбәпкә мәбәниҙер, быны болғар төркиҙәренә нәсәбәт бирмештер. Йәнә башҡорттарҙың мәғруф әҙәмдәренән береһе Тажетдин Ялсығоловтыр. Был әҙәм суфый Аллаһияр хәҙрәттәренең — «Ҫөбат әл-ғажизин» исемле әҫәренә бер шәрех яҙып, был шәрехте үҙенең Ғәзизә исемендәге һөйөклө ҡыҙына мөнәсәбәтле «Рисәлә-и Ғәзизә» тип исем ҡуймыштыр.

Иҫкелә башҡорттарҙың өй эсендәге тереклектәре бик тәклифһеҙ ине. Урман эсендәге башҡорттар бал ҡорто аҫрау менән, ҡырҙағы башҡорттар мал-тыуар аҫрау менән тереклек итәләр ине. Тижарәт вә

сәнәғәттең ни икәнен дә төптән хәбәрҙәре юҡ ине. Буш ваҡыттарында ҡырғыҙ вә ҡалмаҡ таифәләренә барып-барып талайҙар ине. Бынан һуң ҡырғыҙ вә ҡалмаҡтар ҙа башҡорттарҙы таларға керешкәндәр ине. Шул сәбәпле бөрйән башҡорттары үҙҙәренең төп ерҙәрен ташлап Өршәк, Көгәнәк йылғаларының тирәләренә килеп ерләшергә ихтыярһыҙ булғандар ине. Ҡалмыҡ вә ҡырғыҙ таифәләренең талауҙары тураһында башҡорттар араһында шундай хикәйәләр ҡалған: «Гүйә, бер ваҡыт мең ҡәҙәре ҡалмыҡ талау ниәте менән башҡорттарға һөжүм иткәндәр, ләкин ни хәтле тырышып ҡараһалар ҙа булдыра алмағандар. Һуңра төн үткәрмәк ниәте менән ҡалмыҡтар Торатау исемендәге бер тауҙың тирәһендә оло бер күлдең әйләнәһенә килеп ерләшкәндәр. Башҡорттар аңһыҙҙан быларға һөжүм итеп, бер данаһын ҡалдырмай үлтереп бөтөрөп, барсаһын күлгә ырғытҡандар. Шул сәбәпле был күл Меңҡалмыҡ күле тип аталып ҡалған».

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йорт эшенән бушағас, иң һөйөп эшләгән эштәре сигеү, туҡыу кеүек ҡул эштәре булмыштыр. Ҡул эштәренән иң маҡтаулы эштәре ебәк йәки йөн менән сиккән үҙҙәренең буяҡ исемендәге милли буяуҙары менән буяған киндер сәкмәндәре булмыштыр. Был буяҡ исемендәге буяуҙары, фабрика буяуҙары бик таралыу сәбәбенән, һуңғы ваҡыттарҙа юҡҡа сыҡмыштыр. Фәҡәт ҡатай башҡорттарында ғына аҙ-маҙ ҡалдығы ишетелмәктәлер. Бынан һуң иғтибарлы ҡул эштәренән ҡашмау менән мәрийен теҙеп эшләгән түбә исемендәге баш кейемдәрелер һәм ҡашмауҙың түбәнге яғынан бәйләү өсөн **һараус** исемендәге ебәк менән сиккән бер таҫмалары ла барҙыр.

Башҡорт ҡыҙҙарының һәр төрлө сигеү эштәренә хас исемдәр барҙыр. Мәҫәлән, сигеү эшенең бер төрлөһөн манара, бер төрлөһөн тәкә мөгөҙө тип атап йөрөтәләр. Иҫке ваҡыттарҙа үҙ ҡәбиләһенән, ырыуынан ҡыҙ алмаҡ башҡорттар ғәҙәтенсә бик ҙур ғәйеп һаналмыштыр. Был эшкә батырсылыҡ ҡылған әҙәмде йә үлтергәндәр вә йәки ҡатынын ҡулынан алғандар. Килмәт исемендәге бер хан үҙ ҡәбиләһенән ҡыҙ алған ине, шул сәбәпле башҡорт араһында ҙур

һуғыштар сыкты вә күп халыҡтар үлтерелде. Фәҡәт бер нисә ваҡыттарҙан һуң аҡыллы башҡорттарҙың ҡатнашыуы менән генә баҫылып ҡалды. Башҡорттарҙың иң ҡыҙыҡ ғәҙәттәренең береһе, әгәр ҙә бер әҙәмдең балаһы тормай торған булһа, һуңғы балаһын аттан имеҙҙерә ине, сөнки үҙҙәренең ғоманынса, ат имгән бала, гүйә, оҙаҡ йәшәй, имеш. Башҡорт хандарынан береһе шулай ат имсәге имеп тәрбиәләнгәнлегенән Бурнаҡ тип аталмыш ине. Бурнаҡ — ат улы тимәктер.

## *5*

Аңлашылғанына күрә, Русиәгә табиғ булыуҙан элек башҡорттар барсаһы олуғ ханға табиғ булған ваҡ-ваҡ бейҙәр вә хандар тарафынан идара булынмыштарҙыр. Был хандар урынына ҡарап аҙ ҙа һәм күп тә булмыштарҙыр. Элекке хандың ир балаһы кәрәк ни ҡәҙәре генә булһа ла булһын, үҙенән һуң барсаһы хан булғанлыҡтарынан, хан балаһы күп ҡалһа — хандар күп булмыштыр. Әгәр элекке хандың балаһы аҙ булһа — хандар аҙ булмыштыр. Мәҫәлән, Табындағы хандар бер ваҡыт ун етегә ирешмештер. Шуның өсөн дә «ун ете ҡәрендәш табын» тигән исем бирелмештер. Был ваҡыт хандарҙың үҙҙәренә махсус ерҙәре һәм риғәйәләре булған. Был ханлыҡты икенсе ханлыҡтан айырып йөрөтөүгә уңай булһын өсөн, һәр береһенә олуғ хан тарафынан бер ҡош, ағас, тамға, бер ләҡәп бирелгән. Мәҫәлән, Ағиҙел тирәһендә күсеп йөрөүсе Йомран-Табын ырыуының ханына ғәләмәт өсөн ҡоштарҙан — ҡарағош, ағастан — артыш, тамғанан — ҡабырға тамға, ләҡәптән — салауат ләҡәбе бирелгән ине һәм Сыңғыҙ хан олуғ нуғай ханы Ураҙбайға ҡоштарҙан — һөдһөд (урыҫса — удод) ҡошон, ләҡәптән —Шәйхғәли бей ләҡәбен биргән ине. Башҡорт ханлыҡтарынан береһе Уфа ханлығы ине. Хәҙерге Уфа шәһәренең яҡынында заманаһына күрә олуғ маҡтаулы Уфа исемендә бер шәһәр булып, хандар шунда торорҙар ине. Уфа хандарының иң һуңғыһы Түрә баба Таукәлүс (Түкләс) исемендә булып, Уфа Иҙеленең Ағиҙелгә ҡойған ерендәге бер

морононда бина ҡылынмыш крепость та торор ине. Хәҙерге хәлдә был ер Уфа шәһәре яҡынында «Чертово городище» тип йөрөтөлмәктәлер. Дошман килеп баҫҡан ваҡытта әҙер булып торһон өсөн хандың был крепостан Уфа Иҙеленә сыға торған йәшерен юлы ла булмыштыр.

Башҡорттарҙың һис бер ваҡыт мөстәҡил дәүләт тәшкил итә алғандары тарих буйынса мәғлүм түгелдер. Һәр ни эске идаралары үҙ ҡулдарында булмыш иһә лә Алтын Урҙа хөкүмәте бар ваҡытта Алтын Урҙа хөкүмәтенә, был мөнҡариз булып Ҡазан дәүләте майҙанға килгәс, Ҡазан дәүләтенә табиғ булмыштарҙыр. Ҡазан дәүләте мөнҡариз булғас, йорт башынан аҙ ғына миҡдарҙа бирге (налог) бирмәк шарты үзрә үҙ ихтыярҙары менән Русиә тәбәғәлеген ҡабул итмештәрҙер. Ғариз итәғәт өсөн һәр ырыуҙан Иван Грозныйға кешеләр һайлап күндермештәрҙер. Иван Грозный ҙа быға мөҡәфәт булараҡ «дошмандарынан һаҡлау, ерҙәренә теймәү» менән вәғәҙә ҡылып, үҙ ҡулынан инабат ҡағыҙы бирмештер.

Сибириә хандары бер тарафтан, ҡаҙаҡтар икенсе тарафтан башҡорттарҙы һәмишә рәхәтһеҙ итеп торорҙар ине. Мәркәздән бик йыраҡ булыуҙары сәбәпле, хөкүмәт эсендә быларҙы һаҡламаҡ уңайлы түгел ине. Һәр ни, башҡорттар хәсән ихтыярҙары менән Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткәндәр иһә лә, хөкүмәт быларҙың үҙ тарафтарынан да бер аҙ шөбһәлә ине. Башҡорттар башта ҡабул ителгән яһаҡты, йыраҡлыҡ сәбәпле, Ҡазан шәһәренә алып барып түләргә ауырһыналар ине. Бына шул, юғарыла әйтелгән сәбәптәр өсөн хөкүмәт башҡорт ерҙәренә шәһәрҙәр вә крепостар бина итеүгә вә бында даими һаҡсы ғәскәрҙәр тотоуға ҡарар биргән ине. Ләкин яңы ғына тәбәғәлек ҡабул иткән вә тейешенсә һаналып етмәгән бәдәүи ҡәүемдәрҙең кәйефһеҙләнеп китеүҙәрен уйлайҙар ине. Шул сәбәпле был ҡарарҙы бер аҙ кисектерергә тейеш күрелгән ине. Бер аҙ ваҡыттан һуң, ерҙәренә шәһәрҙәр бина итеүҙе башҡорттарҙың үҙҙәре истәгәнлек аңлашылды һәм хөкүмәттең дә истәгәне күптән шулай булғандан, шул хәлдә үк эшкә керешелеп, 1552 йылда Бөрө (Бирск)

шәһәре, 1557 йылда Уса шәһәре, 1584 йылда Минзәлә шәһәре, 1586 йылда Уфа шәһәре бина булынды. Уфа шәһәренең бина булыныуына эстәре бошоп, Аблай менән Тәүкил ғәскәр менән килеп, бының бинаһына ҡаршы тороуҙы истәгәндәр. Ләкин маҡсаттарына ирешә алмай, Уфанан ун биш саҡрым ерҙә ғәскәрҙәре еңелеп, үҙҙәре әсир төшөп, Мәскәүгә күндерелгәндәр.

Был шәһәрҙәр бина булынып бөткәс, ун алтынсы ғасыр һуңдарына табан ғәскәрлек сифаты менән шәһәрҙәргә вә әйләнәләренә урыҫтар һижрәт итергә башлағандар һәм ун етенсе ғасыр эсендә Занецск, Новошишинск һәм Билярск ҡасабалары ла бина булынып был тарафтарға урыҫтар һижрәт иткәндәр. Русиә эстәренән һижрәт ни ҡәҙәре күп булып торһа ла башҡорт сәхрәләре бик киң булғанлыҡтан, ҡыҫынҡылыҡ ул ҡәҙәр тиҙ һиҙелмәне. Фәҡәт ун һигеҙенсе ғасыр баштарында ғына тарайыуҙар беленә башланы. Бының менән бәрәбәр башҡорттарҙа ла тынысһыҙлыҡ ғәләмәттәре аңлана башланы. Шул сәбәпле хөкүмәт халыҡты башҡорт ерҙәренә һижрәттән рәсми сүрәттә маниғ ҡылып, фармандар таратты. Һәр ни, хөкүмәт тарафынан рәсми сүрәттә маниғ булды иһә лә Русиә эстәренән һижрәт бөтөнләй үк туҡталмайса, һәмишә аҙ-аҙ ғына була торҙо. 1719 сәнәлә Минзәлә, Силәбе, Заинск өйәҙҙәренә башҡа ерҙәге мөһәжир урыҫтарҙың хисаптары алынды. Барыһының хисабы 1198 өйҙән ғибарәт икәне мәғлүм булды.

Ихтыярлы әҙәмдәр башҡорт ерҙәренә күскән кеүек, ни ҙә булһа бер ғәйебе сәбәпле, Русиәлә тороуы мөмкин булмаған һәр әҙәм Башҡортостанға ҡаса торған булды. Шулай итеп, башҡорттарҙың киң сәхрә, урмандары бер ҡасаҡлыҡ ер булып ҡалды. Хосусан, был ерҙәргә ҡасып килгән кешеләрҙең күберәге һалдаттан ҡасҡан кешеләр, алпауыттарҙың золомдарына сыҙай алмаған крәҫтиәндәр, православный сиркәүҙән айырылған әҙәмдәрҙән ғибарәт ине. Ҡазан дәүләте мөнҡариз булғандан һуң Башҡортостанға урыҫтарҙан башҡа татар, сирмеш, сыуаш кеүек таифәләр ҙә күп килделәр. Бик күп ваҡыттарға ҡәҙәр мөһәжирҙәр менән башҡорттар тыныс тора

алманылар. Араларында һуғыш-ҡысҡырыш һәмишә булып торҙо. Бының башлыса сәбәбе башҡорттарҙың мөһәжирҙәргә килмешәк ҡарауы менән ҡарауҙары ине. Шул арала хөкүмәт әүәлге налогтар өҫтөнә төтөн башынан йәнә бер ҡәҙәр налог алырға, туйҙарынан пошлина алырға низам сығарҙы. Был низам башҡорттарға бик ят тойолоп, күп һүҙҙәргә вә күп ғомандарға сәбәп булды. Бер-береһен налог вә пошлиналарҙы түләмәҫкә димләнеләр вә араларынан бик яуыздары заһир булып хөкүмәткә ҡаршы баш күтәрергә йөрөнөләр. Ҡырғыҙ вә ҡалмаҡ таифәләрен дә ҡотортоп үҙ-үҙҙәренә баҫтырҙылар. Шулай итеп, ун алтынсы ғасырҙың ахырҙарында ҡурҡыныслы башҡорт фетнәләре башланды вә бер тоташтан тиерлек ике йөҙ йылдар ҡәҙәре дауам итте. Был фетнәләрҙә ни ҡәҙәре малдар әрәм булды вә ни ҡәҙәре гонаһһыҙ ҡандар һәҙер булды. Башҡорттарҙың беренсе мәртәбә баш күтәреүҙәре 1584 йылда ваҡаиғ булды. Йәнә Уфа губернаһында мөһажир урыҫтар менән башҡорттар араһында ер тураһында низағ сыҡты. Шуның сәбәпле башҡорттар баш күтәреп, Минзәлә шәһәренә һөжүм иттеләр, ләкин, бик тиҙлек менән еңелеп, күбеһе тотҡонға төшөп, үлем язаһына хөкөм ителделәр.

1663 йылда Уфа башҡорттары яңынан баш күтәрҙеләр, ләкин Мәскәүҙән ғәскәр килтертеп, бер нисә ваҡыттан һуң баҫтырылдылар. Был фетнәнең ҡыҙыуы бөтөр-бөтмәҫ үк 1664 йылда Сәит исемле бер башҡорттоң ҡулы аҫтында йәнә бик ҡеүәт менән баш күтәрҙеләр. Был фетнәлә Уфа вә Ҡазан әтрафында булған күп урыҫ ауылдарын яндырып, күп урыҫтарҙы үлтерҙеләр. Был фетнә биш йылдар ҡәҙәре дауам итте. Башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн түрәләр тарафынан күп ихсандар вә яҡшылыҡтар вәғәҙә ҡылынды. Ләкин һис ҡайһыһы файҙа бирмәне. Башҡорттар үҙҙәренең талау вә үлтереүҙәрен дауам иттеләр. Башта былар менән бер булып эшкә керешкән ҡалмыҡ хандарынан Аюк быларҙан айырылып, хөкүмәт яғына сыҡты. Шул сәбәпле ҡеүәттәре аҙайып, туҡтамаҡтарына сәбәп булды. Был фетнә урыҫ тарихтарында башлыҡтарының исеменә нисбәт менән Сәит фетнәһе тип мәшһүрҙер. Ләкин, был

баçылыуҙары ла бик оҙаҡҡа барманы. 1677 йылда башҡорттар йәнәнән баш күтәрҙеләр вә талау ниәте менән Уфа тарафына киттеләр. Ләкин, Уфаға ун саҡрым ҡалғас, боролоп кире ҡайттылар. Шулай ҙа, был фетнә баçылмайса аҙ-аҙ ғына булһа ла, 1680 йылдарға ҡәҙәр булып торҙо. Һуңра Мәскәүҙән Зелин исемендәге бер полковник ғәскәр менән килеп фетнәне баçтырҙы. 1683 йылда Минзәлә тирәһендә йәнәнән башҡорт фетнәләре заһир булды, ләкин биш йөҙ ҡәҙәр Яйыҡ казактары килтерелеп, был фетнәләрҙе лә баçтырҙылар.

1707 йылда Сергеев фамилияһындағы комиссар менән араларында низағ сығыу сәбәпле башҡорттар араһында йәнә фетнә ҡуҙғалды. Был фетнә биш йылдар ҡәҙәрле дауам иткән Сәит фетнәһенән нисә өлөш артып китте. Был фетнәнең башлап йөрөүсеһе Күсем исемендәге бер башҡорт булғанлыҡтан, был фетнә уға мөнәсәбәтле Күсем фетнәһе тип исем алды. Был фетнәлә бөтөн Уфа әтрафындағы башҡорттар баш күтәрҙеләр һәм ҡоторта торғас, ҡырғыҙ вә ҡалмыҡтарҙы, мишәр вә бер ҡәҙәр татарҙарҙы һәм сыуаш вә сирмеш кеүек Волга буйындағы мәжүси таифәләрен үҙ тарафтарына ҡуштылар. Фетнәне баçтырып, башлыҡтары Күсемде ҡулға алыу өсөн туғыҙ йөҙ йәйәүле ғәскәр менән Хохловты Уфала, ете йөҙ атлы ғәскәр менән Аристовты Ҡазандан фетнә урынына күндерҙеләр. Хохловтың ғәскәрҙәре араһында бер аҙ башҡорттар ҙа бар ине. Хохлов Уфанан йөҙ егерме саҡрым самаһында Йөрәктау исемле урында башҡорттар менән осрашып, һуғышҡа кереште. Ләкин Хохловтың ғәскәрҙәре араһында булған башҡорттар хыянат иттеләр. Бынан һуң фетнәселәр Хохловты бар ғәскәре менән солғап алдылар. Шулай итеп, һалдаттарҙы ун көн ҡәҙәр мохасарала тотоп, ашарға ла, эсергә лә, йоҡларға ла ирек бирмәнеләр. Һуңра дүрт йөҙ ҡәҙәреһен тоҡкон итеп, ҡорал вә аҙыҡтарын алғандан һуң, барсаһын ҡылыстан кисерҙеләр. Бүтәнсә сара ҡалмағас, Хохлов ҡалған ғәскәре менән башҡорттарҙың мохасара хаттарына һөжүм итте һәм ҡаты һуғыш һуңында киçеп сыҡмаға муафиҡ булды. Бынан ҡотолғандан һуң Хохлов тура Табын тарафына

китте. Шул арала Ҡазан тарафынан килмәктә булған Аристов Хохловтың ярҙамына килеп ирешә. Ләкин фетнә бының менән генә бер юлы баҫылып китмәй, аҙ-аҙ ғына булһа ла булып торҙо.

1717 йылда ҡырғыҙ вә башҡорттар берләшеп ун мең кеше миҡдарында йыйылышып Новошишинск ҡасабаһын алдылар, ләкин Суяз исемендәге бер полковниктың тәдбире вә шәжәғәте арҡаһында шәһәрҙе ташлап ҡасырға мәжбүр булдылар. Ләкин фетнә бының менән генә баҫылып китмәне. Фетнә яңынан бөтә Башҡортостанды солғап алды, хатта һуңға табан башҡорттар вә ҡаҙаҡтар Ҡазан шәһәрен алмаҡ булып, шул тарафҡа киттеләр. Ләкин маҡсаттарына ирешә алмай, Ҡазанға утыҙ саҡрым етмәҫ, туҡталып ҡалдылар. Кама, Волга, Һамар йылғаларының тирәләрендә булған барса ауылдарҙы таланылар, сиркәүҙәрен вә алпауыт йорттарын барсаһын яндырҙылар. Крәҫтиән урыҫтарын ҡайһыларын үлтерҙеләр, ҡайһыларын бала-сағалары менән бәрәбәр тотҡон итеп Ҡырымға, Бохараға, Хиуаға илтеп ҡоллоҡҡа һаттылар. Был фетнәләр татарҙарға ла сәраит итеп, шул ваҡыттағы Ҡазан губернаторы Кудрявцев падишаһҡа шундай хәбәр күндерҙе: «Башҡорт фетнәләре хатта татарҙарға ла сәраит ҡылды. Ҡазан тирәһендәге күп татарҙар фетнәсе башҡорттарға ҡушылдылар, башҡорттар һәм сыуаштарҙы ла ҡоторталар. Быларҙың да башҡорттарға ҡушылыу ихтималы бар». Был ваҡыт Петр Великий Швеция короле Карл менән һуғыша ине. Был хәбәр уға күңелһеҙлек бирҙе. Петр Великий Ховановский фамилиялы олуғ бер әҙәмде, нисек булһа ла был фетнәне солох тариҡы менән баҫырға ҡушып Ҡазанға күндерҙе. Ховановский башҡорттарҙы итәғәткә өндәү өсөн Ҡазандан бер нисә иғтибарлы мосолманды күндерҙе, ләкин башҡорттар итәғәткә килмәнеләр. Волга вә Кама йылғалары тирәһендә булған барса ар вә урыҫ ауылдарын яндырып вә талап һәләк ҡылдылар. Кешеләрен йә үлтерҙеләр вә йәки йыраҡ ерҙәргә алып барып ҡоллоҡҡа һаттылар. Башҡорттарҙың яҡшылыҡ менән итәғәткә килеү ихтималдары булмағас, Ховановский Бартенев тигән бер полковникты күндерҙе. Бартенев башҡорттарҙы

Уфа тирәһенә ҡәҙәр ҡыуып илтте һәм Ховановский ҙа ғәскәр менән быны ң артынан килеп етеп, башҡорттарҙы тамам итәғәткә килтерҙе. Башлыҡтарын үлем язаһына хөкөм иткәндән һуң, башҡаларын ғәфү итте. Был фетнәгә сәбәп булған комиссар Сергеевты Ҡазан шәһәренә килтереп аҫырға хөкөм итте. Бынан һуң дүрт йыл ҡәҙәре башҡорттар бик тыныс торҙолар, бер ҙә ризаһыҙлыҡ ғәләмәттәре вә фетнә әҫәрҙәре һиҙелмәне, ләкин дүрт йылдан һуң кәйефһеҙлек ғәләмәттәре һиҙелә башланы. Үҙҙәре менән бәрәбәр баш күтәрергә өндәү өсөн Ҡырымға вә ҡалмыҡтарға илселәр күндерҙеләр, ләкин был илселәр маҡсаттарына ирешмәҫтән элек, ҡулға төшөп, язаларын күрҙеләр.

Түрәләр киләсәк ваҡыттарҙа ла тыныcһыҙлыҡтар буласағын аңлап, Башҡортостанға бик ысын күҙ менән ҡарай башланылар. Шуның өсөн, Башҡортостандың мөһим ерҙәренә крепостар бина итеп, шунда даими ғәскәр аҫрауға ҡарар бирҙеләр. Тәбиғи, был ҡарарҙың башында Петр Великий ине, ләкин ваҡытһыҙ үлеп китеү сәбәпле, был пландарын майҙанға килтереүгә муафиҡ була алманы. Фәҡәт быны ң фекерҙәренә әшнә булған Кириллов вә Татищев кеүек ғәйрәтле хакимдар Петр Великийҙың бәғзе пландарын үҙенән һуң майҙанға ҡуйҙылар.

## *6*

Петр Великийҙың беренсе планы Ур йылғаһы тирәһенә бер шәһәр бина итеп, шул васита менән бөтөн Башҡортостанды Русиәгә бәйләмәк һәм Бохара, Хиуа, Һиндостан тарафтарына юлды асмаҡ ине. Бына, Петр Великийҙың был хакимәнә планын Кириллов майҙанға ҡуйҙы. Императрица Анна тәхеткә ултырғас, бер проект тәҡдим итеп, был проектта Ур йылғаһы үҙәненә бер шәһәр бина итеүҙең тейешлеген һәм был шәһәр бина булғас, Башҡортостандың Русиәгә тамам берегәсәген, Бохара, Хиуа, Бәдәхшан кеүек бай ерҙәрҙе лә ҡулға керетеү мөмкин буласағын аңлатты.

Императрица Анна Кирилловтың был планын бик муафиҡ тапты, ләкин башҡорттар күп ваҡыттарҙан

бирле тынысһыҙланып торғанлыҡтан, был шәһәрҙе бина ҡылыу ваҡытында ла фетнә сығарасаҡтары мәғлүм ине. Шуның өсөн был эштәрҙе майҙанға сығарыу ваҡытында хөкүмәткә садиҡ башҡорттарҙың булыуы бик кәрәк ине. Кирилловтың бәхетенә ҡаршы, былдай кешеләр башҡорт араһында ла табылды. Был әҙәмдәрҙең береһе һәм хөкүмәткә бөйөк сәдаҡәт менән хеҙмәт иткәне Таймаҫ Шаимов тигән әҙәм ине. Был әҙәм башҡа башҡорт старшиналары кеүек үҙенең ҡуйы араһында һүҙе йөрөүсе старшина ине. Таймаҫ Шаимов 1720 йылда бер төлкө менән бер һыуһарҙы терелətə Петербургка алып барып императрица Аннаға һәдиә ҡылды. Императрица аҡыллы бер ҡатын булғандан, Таймаҫ Шаимовтың ихласына ҡаршы бөйөк илтифаттар күрһәтте. Силәбе тирәһенән үҙенә олуғ бер ер һәдиә ҡылып, еренә ҡайтҡас, башҡорттарҙы вәғәз вә нәсихәт ҡылыуға, хөкүмәткә тоғролоҡ менән хеҙмәт итеүгә, һалынған налогтарҙы тейешенсә ада ҡылыуға өндәүгә ҡушты. Таймаҫ Шаимов императрица хәҙрәттәренең илтифаттарын бушҡа ҡуймайса бик тырышып хеҙмәт итте һәм был хеҙмәттәре күҙгә күренеп, бик тиҙлек менән тархан дәрәжәһе алды. Кирилловтың планы үҙрә Ырымбур шәһәре бина булғанында фетнә сығармаҫҡа башҡорттарҙы өгөт вә нәсихәт ҡылып йөрөнө вә бының өсөн падишаһ хәҙрәттәре тарафынан үҙенә бер ҡылыс ихсан булынды. Бынан һуң Шаимовтың бөйөк хеҙмәттәре күренде.

Петр Великийҙың беренсе планы Урта Азия тарафтарына юлды асыу вә әкренлек менән был ерҙәрҙе лә Русиә мәмләкәтенә ҡушыу ине. Ки юғарыла ҙекер булынған ине, ләкин был планды тамам еренә килтермәк өсөн фәҡәт Башҡортостанды ғына Русиәгә бәйләү кифая итмәйсә, Башҡортостандың күршеһендә булған ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ таифәләрен дә ҡулға керетмәк лазым ине. Дәүләтебеҙҙең бәхетенә ҡаршы ун һигеҙенсе ғасырҙың баштарында ҡаҙаҡтарҙың үҙ араларында фетнәләр башланды. Быны ғәнимәт белеп, күршеләрендә булған таифәләр ҡаҙаҡтарҙы йәберләй башланылар. Жәнүб-ғәрби тарафынан ҡалмыҡтар, шимал тарафынан башҡорттар һәм себер

казактары, шәреҡ тарафынан жунгар хандары һәр төрлө зарарҙар килтерҙеләр. Эстән дә, тыштан да фетнәләр булғанға күрә, 1710 йылда Русиә дәүләтенең химаяһына кереү фекеренә төштөләр, ләкин үҙҙәренең истиҡлалдарын юйыуға намыҫланып, Бүкәй хан тигән бер ҡаҙаҡ олоһо үҙе дошмандарын зәғифләтеп, ҡаҙаҡтарҙы тыныҫландырмаҡ уйына төштө. Шул маҡсат менән ҡаҙаҡтарҙан оло ғәскәр йыйып, дошмандары булған ҡалмыҡтарға һөжүм итеп уларҙы еңде, ләкин төньяғынан башҡорттар һәмишә һөжүм итеп торғанлыҡтарынан ахырында үҙҙәрен үҙҙәре һаҡлай алмаясаҡтарын белеп, Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ хандарынан Әбелхәйер хан Петр Великийға мөрәжәғәт итеп, үҙенең һағына ҡабул итеүен үтенде. Ләкин, Петр Великий бер йәһәттән Швеция менән һуғышта булғанлыҡтан, икенсе йәһәттән ҡаҙаҡтарҙың үҙ араларында низағ бик ҡеүәтле булғанлыҡтан, быларҙың тәбәғәлеген ҡабул итмәне. Ҡаҙаҡтарҙың иң оло дошмандары булған жунгар ханы Русиә дәүләтенең ҡаҙаҡтарҙы үҙ химаяһына ҡабул итмәгәнен белгәс, яңынан ҡаҙаҡтар өҫтөнә һөжүм итергә башланы. Шул сәбәпле, ҡаҙаҡтар үҙ ерҙәрен ташлап, Русиә сигенә табан күсеп китергә мәжбүр булдылар.

Ҡаҙаҡ халҡы үлтереү, талау кеүек ярамаҫ эшкә өйрәнгәнлектән, Русиә сигенә килгәс тә тик кенә тора алманы.

Бер тарафтан быларҙың зарарҙары һәмишә тейеп торғанлыҡтан вә икенсе тарафтан Урта Азияға сығыу өсөн быларҙың ерҙәренән үтеү мотлаҡан лазым булғанлыҡтан, Русиә дәүләте нисек тә булһа быларҙы үҙенә ҡушыуға ҡарар бирҙе. Петр Великий Швеция менән һуғышты тамам иткәс һәм Төркиә менән солох ҡылғас, ҡаҙаҡтарҙы тыныҫлыҡ менән генә ҡулға керетеү һәүәҫенә төшөп, үҙенең баш тәржемәндәренән Ҡотлөмөхәммәт Тәфкилевте Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ хандарынан Әбелхәйер ханға илсе итеп күндереүгә ниәт ҡуйған ине. Шул арала яңынан Әбелхәйер хан тарафынан Петр Великийға «ҡаҙаҡтарҙы үҙ химаяһына ҡабул итеүен эстәп» ике илсе килде. Петр Великий был илселәрҙе бик ҙурлап ҡабул итте һәм үҙ химаяһына ҡабул итеүҙең шарттарын һөйләшеп ҡайтыу өсөн

шул ике илсе менән бергә Ҡотломөхәммәт Тәфкилевте бик ҙур һәдиәләр менән Әбелхәйер ханға күндерҙе. Ләкин Тәфкилев барып еткәс эштең башҡа төҫлө булғанын күрҙе. Әбелхәйер хан менән яҡындары быға риза булһалар ҙа, ғөмүмән, ҡаҙаҡтар быға риза түгелдәр ине, хатта Тәфкилевтең ниндәй уй менән килгәнен белгәс, ҡаҙаҡтар аҙ ғына үлтермәйсә ҡалдылар. Шул барыуында Тәфкилев Әбелхәйер хан янында ике йыл ҡалды вә бик күп мәшәҡәттәр сикте, вә ҡаҙаҡтар ҡулында тотҡон хөкөмөндә булып торҙо. Шулай ҙа Тәфкилевтең был тороуы файҙаһыҙ булманы. Тәфкилев телгә бик оҫта булғанға, шул ике йыл эсендә һөйләй торғас, ҡаҙаҡтарҙың олуғтарын Русиә тәбәғәлеген ҡабул итеүгә күндереп бөтөрә яҙҙы. Уларға һәр төрлө файҙалы эштәр менән вәғәҙәләр ҡылды һәм Ур йылғаһы тирәһенә бер шәһәр бина буласағын һөйләп, уларға бик ҙур өмөттәр бирҙе. Әммә, хәҡиҡәт хәлдә был шәһәрҙе бина ҡылыуҙан бер маҡсат — ҡаҙаҡтарҙың баштарына йүгән кейҙермәк ине.

Шул арала ҡарағалпаҡ хандарына юлығып, Русиә тәбәғәлеген ҡабул итеүгә уларҙы ла димләп күндерҙе.

Ҡаҙаҡ халҡы, ҡарағалпаҡ таифәһе Русиә тәбәғәлеген ҡабул итеүҙең шарттарын һөйләшеп ҡайтыу өсөн Петербургка һәр ырыуҙан илселәр һайлап күндерҙеләр. Әбелхәйер хан үҙенең тоғролоғона дәлил булһын өсөн Солтан исемендәге улын Русиә дәүләтенә аманат итеп күндерҙе. Уны үҙе менән бәрәбәр Тәфкилев алып ҡайтты. Тәфкилев йәнәптәренең был ҡәҙәр садаҡәт менән хеҙмәттәре буш ҡалманы. Был хеҙмәттәре ҡаршыһына полковниклыҡ дәрәжәһе ихсан булынды. Үҙ ихтыяры менән Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткән өсөн Әбелхәйер ханға падишаһ хәҙрәттәре тарафынан тәшәккер яҙыуҙары күндерелде.

Юғарыла Кирилловтың Ур йылғаһы буйына бер шәһәр бина итеү хосусында императрица хәҙрәттәренә бер проект тәҡдим иткәне вә был проекттың императрица тарафынан бик муафиҡ күрелгәне ҙекер ителгән ине. Һуңра был проект буйынса шәһәр бина итеү Кирилловтың үҙенә тапшырылды һәм быны ярҙамсылығына Ҡотломөхәммәт Тәфкилев тәғәйен ителде.

Ырымбур шәһәренең бинаһы үҙенә тапшырылғас, Кириллов үҙенең юлдаштары менән Петербургтан шул урынға турылап сығып китте. Китешендә Уфаға туҡтап бер аҙ ваҡыттар ҡалды. Шул ваҡытта, ғөмүмән, башҡорттар тарафынан һайланып, Кирилловҡа ике илсе килеп, был шәһәрҙе бина итеүгә риза түгел икәнлектәрен бәйән иттеләр. Тәбиғи, Кириллов быларҙың һүҙҙәрен ҡолаҡҡа алманы вә үҙҙәрен тотоп бәйләтте, бынан һуң Уфанан сығып китте. Кирилловтың янында ун биш рота ғәскәр менән егерме биш ғадәд тубы ла бар ине, йәнә бер полк һалдат Кирилловҡа ҡушылмаҡ өсөн бер аҙҙан һуң Уфанан сығып китте. Ләкин Уфанан йөҙ алтмыш саҡрым киткәндән һуң башҡорттар тарафынан был полкка һөжүм ителде. Был һөжүмдә полкта махсус поп менән ун һигеҙ атлы һалдат, утыҙ ике йәйәүле һалдат донъянан үтте. Кириллов ваҡиғанан хәбәр алып, был полкка ярҙам өсөн бер аҙ ғәскәр күндерҙе. Ләкин, башҡорттар бик күп булып, былар аҙ булғанлыктан барып ҡушыла алманылар. Кириллов йәнә икенсе мәртәбә күндерҙе. Был мәртәбәһендә күп мәшәҡәт менән генә барып ҡушылдылар. Кириллов та Ур йылғаһының Яйыҡ йылғаһына ҡушылған еренә бик оло мәшәҡәт менән генә барып етте. 1735 йылдың 6 авгусында Ырымбур (хәҙерге Орск) шәһәренең нигеҙен ҡорҙо һәм шул уҡ йылдың 7 сентябрендә кире Уфа тарафына китте. Нәҡ шул ваҡыттарҙа Себер юлы Силәбе, Шадрин, Златоуст тарафтары башҡорттары барсаһы баш күтәргәндәр ине. Ҡотломөхәммәт Тәфкилев Кирилловтан айырылып бер аҙ ғәскәр менән шуларҙы баҫырға китте, ләкин Тәфкилев килеп еткәнсе башҡорттар хөкүмәткә бик күп зарарҙар ирештергәндәр ине. Хатта Верхнеурал крепосындағы барса һаҡсы һалдаттарын боғаҙлап, бар нәмәләрен талап алғандар ине. Тәфкилев Әй йылғаһы буйына еткәндә башҡорттар аңһыҙҙан үҙҙәре Тәфкилевкә һөжүм иттеләр. Ләкин, Тәфкилев башҡорттарҙы еңде һәм илле ҡәҙәре фетнәгә ҡатнашҡан башҡорт ҡәрйәләрен ут менән яндырҙы вә тотконға төшкән башҡорттарҙың бик уҫалдарынан бер нисә йөҙләбен буш амбарҙарға бикләп ут менән яндырҙы, вә башҡорттарға үлем язаһы

менән хөкөм итеп, шул хәлдә үк язаларын йөрөттө. Башҡорттар шул дәрәжәлә уҫалланмыштар ине ки, Тәфкилевтең был язалары ла тәьҫир итмәне. Яуызлыҡтары һәмишә арта ғына барҙы, өгөт вә нәсихәт тә ҡолаҡтарына кермәне.

Шәһәр нигеҙен ҡорғас, Кирилловтың кире Уфаға киткәне ҙекер булған ине. Был да һәм тыныс ҡайта алманы. Уфаға йөҙ утыҙ саҡрым ҡалғас, алты мең башҡорт берҙәм быға һөжүм иттеләр, ләкин бик ҡаты һуғыш һуңында еңелделәр. Кириллов фетнәгә ҡатнашҡан бик күп башҡорт ҡәрйәләрен яндырып, ер менән тигеҙ итте. Шул тариҡса бик күп мәшәҡәт һуңында Уфаға ҡайтып етте.

Башҡорттар барсаһы атлы булып, йәйәүле ғәскәр өсөн былар менән һуғышыу ситен булғанлыҡтан, башҡорттарҙы баҫтырыу өсөн түрәләр Волга буйындағы ҡалмыҡтарҙан өс мең, Дон казактарынан бер мең, Яйыҡ казактарынан ике мең атлы ғәскәр йыйып, Башҡортостанға килтерҙеләр.

Нәҡ шул ваҡыттарҙа Кириллов менән Румянцев бер лаихә төҙөп императрица Аннаға тәҡдим иттеләр. Был лаихәнең бәғзе маддәләре шуларҙыр: Башҡортостанда тарханлыҡ исеме бөтөрөләп, барсаһын яһаҡлы итеп ҡалдырыу, ә араларында тороусы типтәр вә мишәр таифәләренең хөкүмәткә тоғролоҡта булғанлыҡтары өсөн башҡорттарҙан арендаға алған (әжергә) ерҙәрен бөтөнләй милек итеп үҙҙәренә биреү. Өйҙәрендә ҡорал аҫрауҙан тыйыу. Өйәҙҙәрҙә тимерселек тотоуҙы бөтөрөү. Шәһәрҙәрҙән ауылдарға тимерселәр, көмөшселәр сығып йөрөүҙе лә тыйыу. Башҡорт сәхрәләренә крепостар, ҡәлғәләр бина итеү. Һәр волостан ике старшина һайлап, уларҙы һәр эштә мөсәүил итеү. Һәр юлда берәр генә ахун ҡалдырып, рөхсәтһеҙ яңы мәсет вә мәҙрәсәләр һалмаҫҡа, хөкүмәткә хилаф өгөт вә нәсихәттәрҙә булмаҫҡа ант иттереү. Ҡазан губернаторының рөхсәтенән башҡа Ҡазан татарҙары менән ҡыҙ алып ҡыҙ бирешмәҫкә, әгәр Ҡазан губернаторы рөхсәт итһә, был туйҙарынан налог итеп бер йә ике ат алырға. Башҡорт ерҙәрен теләгән кешегә һатып бирергә.

Был лаихәне тәсдиҡ ҡылдырыу өсөн Кириллов 1745 йылда Петербургка китте. Нәҡ шул ваҡытта Нуғай юлы, Ҡазан юлы башҡорттарының, ғөмүмән, баш күтәреү хәбәрҙәре ишетелде. Императрица Анна был хосуста Кириллов менән кәңәш итеште. Кириллов башҡорттарҙың хәлдәрен бик яҡшы белгәнгә күрә, императрицаға «башҡорттарға бик ҡаты яза бирелмәгәндә фетнәләренән тынысլап булмаç» тип кәңәш бирҙе. Бынан һуң императрица Румянцевҡа «иң элек башҡорттарҙы өгөт вә нәсихәт менән итәғәткә килтерергә тырыш, әгәр ҙә улай тыңламаһалар бик ҡаты язалар менән баç» — тип фарман күндерҙе. Был фарманды алыу менән Румянцев башҡорт сәхрәләренә сығып китте вә фетнә урынына барып етеп, иң элек яҡшылыҡ менән әйтеп ҡараны. Яҡшылыҡ менән һүҙ тыңларлыҡ булмағас, яза менән тыңлатырға кереште. Ике мең ҡәҙәреһен ҡылыстан кисерҙе, бик күп фетнәгә ҡатышҡан ауылдарҙы ут менән көйҙөрҙө, ләкин фетнә бының менән генә баçылманы. Шул арала Кириллов та Петербургтан Уфаға ҡайтып етеп, бик тиҙлек менән ғәскәр алып Нуғай юлына сығып китте. Был юлда фетнә усағы тамам ҡыҙып еткән ине. 26 мартта барып етеп ете йөҙ ҡәҙәре фетнәсе башҡортто ҡылыстан кисерҙе. Йөҙ илле һигеҙ ҡәҙәреһен тотҡонға алып быларға ла үлем язаһы бирҙе. Йөҙ алтмыш ҡәҙәре тотҡондоң туҡһан һигеҙе һалдат хеҙмәтенә алынды, алтмыш ике ҡәҙәреһе мөһәжирҙәргә өләшенеп бирелде, ике йөҙ ҡәҙәр ауылдарын яндырҙы. Шул арала Кириллов ауырый башлап Уфаға ҡайтып китте. Бының еренә Румянцев килде. Башҡорттарҙы еңә башланылар, шуның өсөн башлыҡтарынан йөҙ ун туғыҙ әҙәм йәмәғәттәрен Дим һыуының юғары тарафына күндереп, үҙҙәре Румянцевтан ғәфү үтенделәр, ләкин усаллыҡтары бик үтә киткәнлектән, Румянцев ғәфү итмәне. Барсаһын ҡулға алып, Дим һыуының юғары тарафына китте. Бер ни ҡәҙәр баргас, йәнә мең ҡәҙәре фетнәсе башҡортто ҡылыстан кисерҙе, алты мең ҡәҙәреһен тотҡон итте, йөҙгә яҡын ауылдарын ут менән көйҙөрҙө һәм Аҡай Күсем, Солтанморат исемле башлыҡтарын йөҙ егерме иптәштәре менән ҡулға алды. Бынан һуң Румянцев

Минзәлә тарафындағы фетнә урынына барҙы. Бында ла биш йөҙ ҡәҙәре фетнәсе башҡортто ҡылыстан кисерҙе.

Бәғзе әҙәмдәрҙең кәңәштәре менән Румянцев, ҡулында тотҡонда Солтанморат исемле башлыҡтарын Нуғай юлындағы фетнәсе башҡорттарҙың башлыҡтары Килмәк абыҙға өгөт вә нәсихәт ҡылыу өсөн күндерҙе, ләкин Солтанморат хыянат итте вә кире ҡайтманы, Килмәк абыҙ янында ҡалды һәм Килмәк абыҙҙы Румянцев менән һуғышырға ҡотортто. Бының ҡотортоуы менән Килмәк абыҙ Нуғай вә Ҡазан юлдарынан ете мең ҡәҙәре ғәскәр йыйып, Ағиҙелде арҡылы кисеп, Уфанан йөҙ егерме саҡрым ҡәҙәр ерҙә Румянцев ғәскәренә һөжүм итте. Һалдаттарҙан йөҙ һикһән ҡәҙәреһе донъянан үтеп, алтмыш ҡәҙәреһе мәжрүх булды. Мәжрүхтәр эсендә Усов исемендә бер полковник та бар ине. Башҡорттарҙың ниәттәре Румянцевтың үҙен үлтермәк йәки терелэтә ҡулға алып, һуңра үҙ тотҡондары менән алмаштырмаҡ ине. Ләкин, был маҡсаттары булманы, ике йөҙ ҡәҙәреһе үлтерелеп ҡасып китергә ихтыярһыҙ булдылар.

Шулай ҙа Килмәк абыҙ менән иптәштәренең дәрттәре һүнмәне, һәмишә һуғышты дауам итергә ниәт итеп ғәскәр йыя башланылар. Нәҡ шул ваҡыттарҙа Румянцевҡа ярҙам өсөн алты мең Яйыҡ казагы күнderелгән ине. Юлда барған ваҡытта башҡорттар быларға ла һөжүм иттеләр. Араларында оло һуғыш булды, ләкин башҡорттар бында ла еңелделәр, алты йөҙ ҡәҙәреһе донъянан үтте, өс йөҙ ҡәҙәреһе тотҡонға төштө, Ыҡ йылғаһы тирәһендәге ике йөҙләп ауылдары ут менән яндырылды. Был ваҡиғанан күп үтмәне, башҡорттар яңынан Эйек йылғаһы тирәһендә был казактарға һөжүм иттеләр. Һуғыш шул ҡәҙәре ҡеүәтле булды, хатта һуғыш иртәнән кискә ҡәҙәр дауам итте. Еңеү вә еңелеү ҡайһы тарафта икәнлеге мәғлүм булманы. Һуңға табан йәнә казактар еңә башланылар, башҡорттар Утик тарафына табан ҡасып киттеләр. Казактар арттарынан ун саҡрымлап ҡыуғас, арттарынан етеп, күбеһен ҡылыстан кисерҙеләр, ҡалғандары тау араларына кереп кенә ҡотолоп ҡалдылар. Юғарыла Килмәк абыҙ эйәрсендәренең Румянцев

тарафынан еңелеп, ике йөҙ ҡәҙәреһе үлгәндән һуң ҡасып киткәндәре ҙекер булынған ине. Бәхетһеҙлектәренә ҡаршы былар ҙа юлда Яйыҡ казактарына юлыҡтылар. Араларында һуғыш булып, быларҙың да күбеһе казактарҙың ҡылыстарынан кистеләр. Яйыҡ казактарынан биш йөҙ ҡәҙәрлеһе Табын тарафына китмеш ине һәм былар менән башҡорттар араһында һуғыш булды. Башҡорттар бында ла еңелеп, барсаһы тиерлек һәләк булдылар.

Кирилловтың ауырып Уфаға ҡайтҡанлығы ҙекер булынған ине. Кириллов сәләмәтләнеп, шул йылдың июлендә ғәскәр менән Ырымбур (хәҙерге Орск) шәһәренә китте. Юлда киткән ваҡытында төньяҡ вә көнсығыш яғындағы башҡорттар менән ҙур ваҡиғалар булды вә башҡорттарға тейешле язаларын бирҙе. Шулай итеп, Ырымбурға етте. Башҡорттар ҙа тамам арып ҡуҙғалырлыҡ хәлдәре ҡалманы. Ике йыл дауам иткән башҡорт фетнәһенә шуның менән ниһайәт һуң бирелде. Был фетнәләрҙә башлап йөрөгән Килмәк абыҙ, Аҡай Күсем, Ғүмәр Тархан, Һабан вә Йосоп исемендәгеләре ҡулға алынып, барсаһы Минзәлә шәһәрендә үлем язаһына хөкөм ителделәр. Башҡалары ла төркөм-төркөм килеп, ғәфү үтенделәр вә бынан һуң бик итәғәттә булырға ант иттеләр, ләкин түрәләр уҫаллыҡтары бик үтә киткәнлектәренән ғәфү итмәнеләр, гонаһтарына күрә тейешле язаларын бирҙеләр.

Махсус, фетнәсе башҡорттарҙың эштәрен ҡарау өсөн, Минзәлә шәһәрендә бер хөкөм комиссияһы асылды. Был хөкөм комиссияһының ҡарары менән фетнәсе күп башҡорт ҡәрйәләре ут менән яндырылды йәки туҙҙырылып юҡ ителде. Биш мең ҡәҙәр башҡорт йыраҡ ерҙәргә ебәрелеп, ярарлыҡтары һалдат хеҙмәтенә алынды, ярамаҫлыҡтары ҡара хеҙмәткә ҡушылды. Быларҙан ҡалған бала-саға, ҡатын-ҡыҙ тәрбиәселәре булмағанлыҡтан теләгән кешеләргә өләшеп бирелде. Киләсәк ваҡыттарҙа башҡорттарҙың фетнәләренән тыныслыҡ табыу өсөн Кирилловтың тәдбирҙәре менән шул крепостар бина булынды: Среднебердинск, Кириллов, Караульный, Быҙаулыҡ, Бурск, Красносамарск, Табын, Красноуфимск, Миәс, Ҡыҙылташ, Сыбаркүл һәм быларҙан башҡалар. Шул

тариҡса 1734 йылдарҙа башланған башҡорт фетнәләре ике йыл ҡәҙәре дауам итеп, Кирилловтың тәдбире, Татищев вә Тәфкилевтәрҙең ярҙамдары менән баҫтырылды. Ләкин был фетнәләрҙә ғазапланып йөрөй торғас, Кирилловҡа чахотка ауырыуы эләгеп, 1737 йылдың 14 апрелендә донъянан үтеп, кәүҙәһе Һамарҙа иҫке собор янында дәфен булынды.

## 7

Кирилловтың үлеүе менән 1737 йылдың 1 майында уның еренә Татищев тәғәйен булынды. Бының ваҡытында башҡорттар араһында һәр ни ваҡ-төйәк тыныcһыҙлыҡтар булып торһа ла телгә алырлыҡ ҙур эштәр булманы. Бына шулай башҡорттар тыныcһыҙланып ҡына торғанда бер мәртәбә Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткән Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ хандарынан Әбелхәйер хан үҙгәреп китте. Башҡорттарҙың хөкүмәткә дошманлыҡтарынан файҙаланмаҡ булып, уларға бер улын хан ҡылыу өмөтөнә төштө һәм шул маҡсат менән 1737 йылдың яҙында Башҡортостанға килде. Әбелхәйер хан бик хәйләле бер кеше булғанлыҡтан, үҙенең ниңә килеүен йәшереү өсөн түрәләргә: «Мин башҡорттарҙы Русиәгә итәғәткә өндәргә килдем», — тине. Ләкин Татищев бының ни уй менән килгәнен белде. Шулай ҙа һис дошманлыҡ изһар ҡылманы, бәлки, бының был эше өсөн рәхмәттәр әйткән булып, бер аҙ бүләктәр ҙә биргән булды.

Әбелхәйер хан башҡорттарға артығыраҡ мөнәсәбәт хасил итеү өсөн бер башҡорт ҡыҙын ҡатынлыҡҡа алды. Әбелхәйер хандың был сәйәсәттәре бушҡа китмәне, шул килсүендә үк башҡорттар үҙҙәренә Әбелхәйер ханды хан итеп танынылар һәм Әбелхәйер хан да асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ изһар итә башланы, башҡорттарҙа ла йәнә асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ ғәләмәттәре беленә башланы. 1738 йылдың апрелендә Әбелхәйер хан бер ҡәҙәр башҡорттарҙы эйәртеп Ырымбур (хәҙерге Орск) шәһәренә барып, үҙенә эйәрмәгән башҡорттарҙың хайуандарын талап алып, бер ҡәҙәр штраф түләткәндән һуң ғына ҡайтарып

бирҙе. Майор Останков Әбелхәйер ханға кеше ебәреп, үҙенең был эшкә риза түгел икәнен аңлатһа ла һис файҙа сыҡманы. Әбелхәйер хан барған кешегә ҡылысын сығарып: «Ырымбур шәһәре минең өсөн бина ҡылынған шәһәрҙер, бында минең камил ихтыярымдыр, кем дә кем быға ҡаршы килһә, ошо ҡылыс менән башын сабып өҙәсәкмен», — тине. Бына, эштәр шулай ҙурайып китеп, йәнә оло фетнә ишектәре асылмаç элек, Татищевтың хәйлә вә тәдбирҙәре менән барсаһы яйланып, һис ҡан түгелмәйенсә Әбелхәйер хан был уйынан ҡайтып, яңынан Русиә тәбәғәлеген рәсми ҡабул итте.

Башҡорт фетнәләре бер аҙ баçылғас, 1738 йылда Татищев рөхсәт алып Петербургка китте һәм императрицаға доклад яһап, Ырымбур шәһәрен икенсе урынға күсереү тейеш икәнен аңлатты. Был доклад буйынса министрҙар мәжлесендә кәңәш булып вә был кәңәштә Татищев үҙе лә булып, Ырымбур шәһәрен Ҡыҙылтау тигән урынға күсерергә ҡарар бирелде. Һуңра Татищев был сәфәренән ҡайтып, оҙаҡ та тормай, өçтөнән күп доностар булыу сәбәпле, урынынан төшөрөлдө.

1739 йылда Татищев урынынан төшкәс, бының урынына Ырымбур тарафының баш хакимы булараҡ Урусов тәғәйен булынды. Был тәғәйен булыныу менән хөкүмәт тарафынан шул фармандар садр булынды: Ырымбур шәһәрен Ҡыҙылтау тигән ергә бина итеп, иçке Ырымбур шәһәрен Орск крепосы исемендә ҡалдырыу, ә Яйыҡ йылғаһы буйынса Верхнеуральскиға ҡәҙәр крепостар бина итеү. Ҡазан өйәҙен Башҡортостандан айыра торған сиктәрҙә тора торған ғәскәрҙәрҙе Һамар вә Ырымбур әтрафына күсереү. Крепостарға великорустарҙы һәм крәçтиәндәрҙе ҡабул итмәү, әүәлдән барып урынлашҡандарын ситкә күсереү. Татищев ваҡытында уҡ Русиә тәбәғәлеген ҡабул итеүгә теләгән Урта Йөҙ ҡаҙаҡтарын Русиә тәбәғәлегенә ҡабул итеү.

Был урынға тәғәйен итеү менән Урусов Ырымбур тарафына сәфәр итте. Шул ваҡыт янында низамлы вә низамһыҙ барыһы 5877 ғәскәре бар ине. Нәҡ шул ваҡыттарҙа Аллаңдиязғол исемендәге бер әҙәмдең

ҡул аҫтында башҡорттарҙа яңынан сыуалыу ғәләмәттәре һиҙелә башланы һәм Ырымбур тарафының башҡорттарынан Миңлеғол исемле вә һаҡалы ҡара булған өсөн Ҡараһаҡал лаҡәпле бер ишан ҡаҙаҡ эсендә зоһур итеп хөкүмәтте ҙур борсоуға төшөрҙө.

## *8*

Был ишан әүәл зоһури ваҡыттарында утыҙ ике йәшендә булып, бик таҙа бәҙәнле, ҡорал тоторға вә ат өҫтөндә йөрөргә бик оҫта булып, хатта был оҫталығы менән бөтөн башҡорттарҙы ғәжәпкә ҡалдырыр ине. Был ишан үҙенең баҙарын күтәрер өсөн: «Мәккә вә Мәҙинәлә булдым, Ҡәғбәтулланы тәуаф иттем, Рауза-и мотаһарәне зыярат ҡылдым, пәйғәмбәребеҙҙең зыяратына ла йөҙөмдө һөрҙөм, Зәм-зәм шәрифиәлә эстем, унда булған барса ишандарҙы ла күреп хәйерфатихаларын алдым», — тип һөйләп үҙен хажи тип танытмаға муафиҡ булды. Бының ишанлығына вә хажилығына ышанмаҫҡа мөмкин дә түгел ине, сөнки һәр ваҡыт салманан йөрөй, үҙенән төрлө кирәмәттәр садр булғаны ла һөйләй. Тауышы шәп булғанлыҡтан Ҡөрьәнде лә бик матур уҡый, төнгө намаҙҙарҙы ла бер ҙә ҡуймай, тәсбихте лә бер ҙә ҡулынан төшөрмәй ине. Күп йөрөгәнлектән Урта Азияла булған телдәрҙән дә хәбәрҙар ине һәм ғәрәпсәне лә белгеләй ине. Бының фиғелдәре вә һөйләгән һүҙҙәре наҙанлыҡ мәзажына бик муафиҡ булғанлыҡтан, ҡаҙаҡтарҙың барсаһы мөкиббән китте. Ишан хәҙрәт эштең алға киткәнен күргәс, ишанлыҡ менән генә кәйефләнмәйсә, ҡайҙа булһа ла бер ергә хан булмаҡ һәүәҫенә төштө. Шулай был ишан күп ерҙәрҙә йөрөй торғас, Ҡубан тирәһенә барып жунгар ханының улы Солтангәрәйҙең хәленән хәбәр алды. Солтангәрәй атаһынан ҡасып Волга буйындағы ҡалмаҡ араһына китеп, унда донъянан үткән ине. Һуңра Ҡараһаҡал ҡаҙаҡ араһына килеп, үҙ-үҙен атаһынан ҡасҡан жунгар ханының улы Солтангәрәй тип иғлан итте вә ялған шәһаҙәтнамәләр күрһәтеп бер ҡатлы ҡаҙаҡ халҡын ышандырҙы. Жунгар халҡы мәжүси булғанлыҡтан Ҡараһаҡал: «Мин әүәл мәжүси инем, хаҡлыҡты табып, ислам

диненә килдем, Аллаһының вә пәйғәмбәребеҙҙең ярҙамы менән жунгар ерендә ханлыҡты уҫал ҡәрендәшем ҡулынан алып, улар араһына дин исламды нәшер итәсәкмен», — тип һөйләп йөрөнө. Урта Йөҙ, Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ хандарына барып, барса ялған шәһаҙәтнамәләрен күрһәтеп, уларҙы ла үҙенең хан балаһы икәнлегенә тамам ышандырҙы. Хөләсә: ҡаҙаҡ ерендә бының һүҙенә ышанмаған кеше ҡалманы, барса ҡаҙаҡ халҡы вә хосусан йәштәре бының бойороҡтарына итәғәт итергә әҙерҙәр ине.

Шул арала Ҡараһаҡал ишандың хәбәре Башҡортостанға ла килеп етте. Башҡорттарҙың һис ҡайһыһы бының хажилығын да, ишанлығын да, ханзада икәнен дә шөбһә итмәне. Бының һәр төрлө кирәмәттәре ауыҙҙан ауыҙға күсте. Башҡорттар араһында күп һүҙҙәр вә күп кәңәштәр булды, ахырында наҙанлыҡтарының саиҡәһе менән быны үҙҙәренә хан ҡылыу өсөн саҡырыуға илселәр күндереүгә ҡарар бирелде, ләкин илселәр барып еткәнсе Ҡараһаҡал үҙе Башҡортостанға килеп етте вә күрешеү менән меҫкен наҙанлыҡҡа иҫергән башҡорттар тарафынан был ялғансыға ханлыҡ ғарыз ителде. Ләкин Ҡараһаҡал бик хәйләле кеше булғанға, был һүҙҙе ишеткәс тә шашып китмәне, үҙ-үҙен тота белде һәм быларға: «Мин жунгар ханының улымын вә жунгар еренең шәрғи ханымын, ҡәрендәшем тарафынан золом менән алынған хаҡымды ҡайтарырға йөрөйөм, ләкин шулай ҙа һеҙ мосолмандарға хеҙмәт итергә әҙермен. Хәҙер үк ханлыҡты ҡабул итмәйәсәкмен. Ҡасан ҡафыр менән һуғышып хеҙмәт күрһәтһәм, шул ваҡытта ғына ҡабул итһәм итермен», — тип быларға бик бәләндлек күрһәтте. Ләкин үҙенең маҡсаты шул хәлдә үк хан булмаҡ ине. Шуның өсөн төрлө хәйләләр төҙөп итәк аҫтынан шул хәбәрҙе таратты: «Әгәр ҙә хәҙер үк хан итһәләр, һуғыш өсөн әҙерләп ҡуйған ғәскәрем бар. Улар ҙа хәҙер үк килеп етәсәктәр һәм төрөк солтаны менән дә дуҫлығым бар, хәбәр күндерһәм, төрөк ғәскәре лә Әстерханға киләсәк. Хижазда булған ваҡытымда барса ишандар пәйғәмбәрҙең ҡәбере янында ҡафыр менән һуғыш ҡылыу менән миңә әмер иттеләр вә ҡафырҙы үлтермәк өсөн ҡулыма доғалы

ҡорал бирҙеләр». Бисара бер ҡатлы башҡорт халҡы бының барса яҙғандарына ышандылар вә Русиә кеүек оло бер дәүләт менән ҡаршы тороп һуғыш ҡылырға башҡорттар бының тирәһенә йыйылмаға башланылар, сәғәт — бисәғәт иштәре күбәйә барҙы. Башҡорттар мөнтазам урыҫ ғәскәренә вә туптарына ҡаршы барасаҡтарын бер ҙә хәтерҙәренә килтермәйҙәр ине. Ялғансы Ҡараһаҡал ишанда булған ҡеүәт мәғәнәүиә арҡаһында урыҫтарға бик тиҙ генә ғәләбә табыуҙарына ышаналар ине. Ҡараһаҡалдың мәдехе былар араһында көн-бәкөн арта барҙы. Һәр көн быңарҙан икһеҙ вә сикһеҙ кирәмәттәр күсерелде, уны маҡтап шиғырҙар тәртип булынды, был шиғырҙарҙы оло вә кесеһе көйләп-көйләп уҡымаҡталар ине, хатта бының хаҡында шундай ялғандар таралды, гүйә: «Ҡараһаҡал ишан шундайын доға Исме Әғзәм булырға кәрәк белә икән, шул доғаны уҡыһа утта янмай, һыуға батмай, ҡафырҙың һис бер төрлө ҡоралы уға зарар тейҙерә алмай икән. Бер ваҡыт ҡафыр менән һуғышҡа барғанында быға зарар килтермәк маҡсаты менән шайтан өс башлы йылан сүрәтендә булып юлына ҡаршы төшкән. Ҡараһаҡал ишан шул доғаһын уҡыған да йыланға һуҡҡан. Йылан шул хәлдә үк төтөнгә әйләнеп юҡҡа сыҡҡан. Икенсе бер ваҡыт ҡафыр менән һуғышҡа барғанда бер баһадир ҡиәфәтендә булып, уттан булған айғырға атланып ҡаршы сыҡҡан. Бынынында ла ишан доғаһын уҡыған да шайтан юҡ булған».

Ишан хәҙрәт аҫтыртын ғына ни ҡәҙәр тырышһа ла башҡорттар быны хан итмәнеләр, фәҡәт үҙҙәренә башлыҡ итеп һуғышҡа керештеләр. Ләкин Ҡараһаҡал ишан еңелеү тәҡдирендә ҡасып ҡотолоу еңел булһын өсөн ҡаҙаҡ сигенән күп эскә кермәне, һәр ваҡыт шул сик тирәһендә генә урыҫтар менән һуғыш ҡылды. Шул арала Силәбе комендантына «Фетнәсе башҡорттарға тейешле язаларын бирмәк, Ҡараһаҡалдың үҙен нисек булһа ла тотоп алмаҡ» тигән фарман күндерелде. Был хәбәрҙе ишетеү менән башҡорттар барсаһы иттифаҡ менән ялғансы Ҡараһаҡалды үҙҙәренә хан тип иғлан иттеләр һәм Ҡараһаҡалдан Уфа шәһәрен барып алыуын үтенделәр. Ләкин Ҡараһаҡал Уфаға ҡәҙәр барырға ҡурҡты вә ҡаҙаҡ сиктәренән күп эскә

китмәне. Хөкүмәт ғәскәрҙәре менән фәҡәт шул тирәлә һуғыш ҡылды.

Башҡорттарҙың уҫаллыҡтары шул дәрәжәгә ирешәте ки, ҡулдарына бер урыҫ енесе төшһә, уны төрлөсә яза ҡылып үлтерҙеләр, үлгәндән һуң өҫтөндә төрлөсә вәхшәттәр ҡылдылар, хосусан урыҫтарҙың изге иғтиҡад ителгән кешеләре өҫтөндә быңдай ҡәбәхәтлектәрҙе күберәк ижра ҡылдылар. Мәҫәлән, Табын тигән ҡасабаны һәм шунан йыраҡ та түгел заводты алған ваҡытта быңдай вәхшәттәрҙең һис ҡайһыһын ҡалдырманылар, ҡулдарынан килгән һәр төрлө уҫаллыҡтарын ҡыла бирҙеләр. Шул ваҡыт Урусов Минзәлә шәһәренә китеп бер хөкөм комиссияһы асты. Был хөкөм комиссияһы ҡарары менән ҡулға төшкән фетнәсе башҡорттарҙан һис береһен язаһыҙ ҡалдырмай гонаһына күрә, төрлөһөнә төрлөсә язалар бирелде. Урусовтың әмере менән Ырымбур шәһәрендә һәм шул рухтағы бер хөкөм комиссияһы асылып, шуның кеүек язалар бирелде. Быны күреү менән бик күп башҡорттар ғәфү истәп, түрәләр ҡаршыһына килделәр. Ләкин, гонаһтары бик көслө булғанға һәм ҡалғандарына ғибрәт күрһәтеү маҡсаты булғанға, һис ҡайһыһы ғәфү ителмәне, бәлки күрелгән береһенә гонаһына күрә язалар бирелә барҙы. Бәғзе бер бик яуыздары ҡоралдарын ташламай, һуғышып үлергә ҡарар бирҙеләр вә бәғзеләре төрмәләрҙә ашамай-эсмәй үҙ-үҙҙәрен һәләк ҡылдылар. Урусов Ҡараһаҡалдың ялғансы икәнен аңлатмаҡ өсөн башҡорт араһына махсус кешеләр сығарҙы. Ҡараһаҡалды тотоп биргән кешенең ғәфү ителәсәге, йәшереп аҫраған кешенең үҙе вә йәмәғәттәре үлтереләсәге менән иғландар таратылды, ләкин башҡорттарҙың һис ҡайһыһы Ҡараһаҡалды тотоп бирергә риза булманы. Фетнә көн-бәкөн ҙурая барҙы, Урал тауының көн тыуыш вә ҡояш батыш тарафтары барсаһы баш күтәрҙе. Урусов фетнәне баҫтырмаҡ өсөн һәр төрлө сәбәптәргә кереште. Силәбе әтрафындағы ҡеүәттәргә генә таянмай, Бутагин, Языков тигән әҙәмдәрҙең ҡул аҫтында атлы вә йәйәүле ғәскәрҙәрҙән ғибарәт йәнә оло бер ҡеүәт күндерҙе. Был ҡеүәт барып етеү менән нисә мең фетнәсе башҡорттарҙы ҡылыстан кисерҙе вә күп

ауылдарҙы яндырып, фетнәсе башҡорттарҙың малтыуарҙарын ғәниматкә алды. Ҡараһаҡал мөнтазам хөкүмәт ғәскәренә ҡаршы тора алмаясағын аңланы, ниһайәт әкрен-әкрен сигенеп ҡаҙаҡ сигенә барып етте, янында булған кешеләре ҡырылып бөтә яҙҙы, ғаҡәбәт Ҡараһаҡал үҙе лә яраланып илле ҡәҙәре юлдашы менән ҡаҙаҡ эсенә кереп ҡасты. Павлодский нам генерал бының артынан ҡыуып, ҡаҙаҡ еренә кереүгә батырсылыҡ ҡыла алманы. Шулай ҙа, бер нисә кеше ебәреп правительство исеменән Ҡараһаҡал менән юлдаштарын тотоп биреүҙе ҡаҙаҡтарҙан һораны. Ҡаҙаҡтар күптән түгел генә Русиә тәбәғәлеген ҡабул итеп, Ҡаҙағстанда булған һәр бер ғәйепле кешене бирергә ғәһед биргән булһалар ҙа был ғәһедтәрендә торманылар һәм: «Ҡараһаҡалдың иптәштәрен аҙ-маҙ тотоп алдыҡ, малдарын талап, үҙҙәрен үлтерҙек, Ҡараһаҡалдың үҙенә килһәк, ул үҙе жунгар ханының улы Солтангәрәйҙер, һәм был хәлдә ул беҙҙең ҡунағыбыҙҙыр. Бер йәһәттән хан улы, икенсе йәһәттән ҡунаҡ булыуы сәбәпле, хәҙергә беҙ уны тотоп бирә алмайбыҙ», — тип яуап ҡайтарҙылар. Павлодский бынан һуң да ҡаҙаҡ сигендә оҙаҡ ваҡыттар тороп, ике-өс мәртәбә илсе күндереп ҡаҙаҡтарҙан биреүҙе һораны иһә лә һәмишә шул яуапты алды, һуңра ваҡиғаны бәйән итеп, Урусовҡа мәктүп күндерҙе.

Ҡараһаҡалдың еңелеп ҡаҙаҡ эсенә китеүе менән фетнә баҫылды вә ғәфү үтенеп, Ырымбурҙа Урусовҡа биш мең башҡорттар берҙән заһир булдылар. Быларҙы Ырымбурҙың (хәҙерге Орск) ун ике саҡрым ситтә бер ергә йыйылып, һаҡлау өсөн ҡеүәтле ғәскәр ҡуйылды һәм былар янына мишәр таифәләре менән фетнәгә ҡатнашмаған башҡорттарын да йыйып килтерелде. Кенәз Урусов ул ваҡытта үҙе Ырымбурҙа булмағанлыҡтан, үҙе ҡайтҡансы көтөп тороу менән әмер итте. Меңдәрсә кешеләр бер ергә уҡмашып, унынсы августҡа ҡәҙәр кенәз Урусовты көтөп торҙолар. Унынсы августа кенәз Урусов Ырымбурға ҡайтып, һуңра шул ергә барҙы. Урусовты күреү менән нисә мең кеше бының аяҡ аҫтына йығылдылар вә баштарын ерҙән күтәрмәй, ҡан йәштәрен ағыҙып

ғәфү итеүен үтенделәр. Урусов барыһына сәждәнән ҡалҡып уҡыясаҡ нимәләрен ҡолаҡ һалып тороуҙарына әмер итте. Барыһы баштарын күтәрҙеләр. Урусов ҡаты тауыш менән уҡый башланы, башҡорттар тәбиғи, быны аңламанылар, шуның өсөн бер татар тәржемәне аҡрын-аҡрын ғына йөмлә-йөмлә ҡылып, башҡорттарға төшөндөрә барҙы. Был яҙыуҙа башҡорттарҙың яманлыҡтары ҙекер булынған ине. Урусов уҡып бөткәс, башҡорттар яңынан ғәфү эстәп ергә йығылдылар. Урусов, фарман садр булғанса, тауышланмай тыңлап тороуҙары менән барһына әмер итте. Һуңра Урусов шул ерҙә бер хөкөм комиссияһы асып, мишәрҙәрҙән һәм фетнәгә ҡатнашмаған башҡорттарҙан һорашып, шуларҙың шәһаҙәттәре менән хөкөм йөрөтөргә әмер итте. Иң элек мишәрҙәр, һуңра фетнәгә ҡатнашмаған башҡорттар үҙҙәренең күргән вә белгәндәрен һөйләп, ҡайһыһы ғәйепле вә ҡайһыһы ғәйепһеҙ икәнен асып бирҙеләр. Шул урыҫса шәһаҙәт алып бөтөргәндән һуң, Ырымбурҙан (хәҙерге Орскиҙан) алты саҡрым йыраҡлығында булған бер тауҙың башына шул диңгеҙгә оҡшаулы халыҡты йыйып алып барҙы. Шул урында элек батшаның указын уҡыны, һуңра егерме бишенсе августа шул уҡ урында фетнәселәргә язалар йөрөтөлә башланы. Ҡараһаҡалдың беренсе иптәштәренән Кантур Максимов сыуаштан мосолман булған кеше, Юныс Исмәғилов, Янғол, Ҡарабаш, Яҡуп Кәсишев — былар таш бағаналарға ултыртылған, тимер ҡаҙыҡтарға ултыртылып үлтерелделәр, һикһән кеше епкә аҫылды, ун бер кеше (былар Ҡараһаҡалдың есаулдары) ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫылдылар, егерме бер кешенең баштары балта менән сабылып өҙөлдө. Башы өҙөлгәндәр йөмләһенән Ангулов фамилияһында бер үлгән кеше лә бар ине. Был әҙәм тотҡонға алынып, Ырымбурға килтерелгәс, тотоштан ун көн ашамай-эсмәй ҡасда үҙүҙен үлтергән ине, шулай ҙа ҡылынған хөкөм өжрә булһын өсөн башын сабып өҙөлдө. Урусов бында эшен бөтөргәс, етенсе ноябрҙә хәҙерге Ырымбурҙан утыҙ саҡрым йыраҡлыҡта Сакмарский городок тигән урынға барып, яңынан хөкөм комиссияһы асты, бында йөҙ егерме биш кешегә үлем язаһы йөрөтөлдө,

өс йөҙ ҡәҙәр кешенең ҡолаҡтары вә морондары киҫеләп, ҡәрйәләренә күндерелде. Бынан мәҡсуд башҡаларына ғибрәт күрһәтмәк ине. Заманаһында мәшһүр Саймонов исемле генералдың риәсәте тәхетендә Минзәлә шәһәренә бер мәхкәмә асылып, шул юғарылағы рәүештә фетнәсе башҡорттарға язалар йөрөтөлдө. Бына Ҡараһаҡал ишандың ҡотортоу нәтижәһе шул булды. Был хаин меңдәрсә ислам ҡанының түгелеүенә вә меңдәрсә бала-сағa, вә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәтим ҡалып хур вә рисуа булыуҙарына сәбәп булды. Бының ялғанына ышанып, ни ҡәҙәр мосолмандар аяҡ аҫтарында иҙелгәндәр икән, был выжданһыҙ һәмишә үҙенә Солтангәрәй исемен биреп, һис ҡайғыһыҙ ҡаҙаҡ эсендә ҡунаҡтан ҡунаҡҡа йөрөмәктә ине һәм милләт исламиәгә был ҡәҙәр генә зарар килтереү менән кифаяланмай, икенсе тарафтан ҡаҙаҡ мосолмандарын харап итте. Шулай итеп, иң әүәл йөрөп-йөрөп ҡаҙаҡ мосолмандарын жунгар халыҡтары менән һуғышҡа ҡыҙҙырҙы. Быларҙы тамам ҡыҙҙырып еткергәс, ҡаҙаҡ хандарының рөхсәте менән ете мең ҡәҙәр ат һатып алды, һуңра ҡаҙаҡтарҙан ғәскәр йыя башланы. Бер йәһәттән ҡаҙаҡтар быны жунгар ханының уғлы ҭиеп белгәндәренән вә икенсе йәһәттән Ҡараһаҡал үҙе наҙан халыҡ алданырлыҡ суфый ҡиәфәтендә булғанлыҡтан, ғәҙәттән тыш тиҙлек менән ҡаҙаҡтар бының тирәһенә йыйыла башланылар. Ҡараһаҡал ишан йыйылған ғәскәр менән жунгар еренә һөжүм итте. Үлтереү, талау кеүек вәхшәттәрҙең, һис берен ҡалдырмай өжрә ҡылды. Һуңра жунгар ханы Галадан аҙ ваҡыт эсендә егерме мең самаһында ғәскәр йыйып вә ни ҡәҙәр туптар әҙерләп, Ҡараһаҡал менән һуғышҡа кереште. Аҙ ваҡыттың эсендә ҡаҙаҡтарҙы еңеп, күбеһен тотҡон итеп, күп малдарын ғәниматкә алды. Ҡараһаҡал үҙе Башҡортостанда булғаны кеүек, дошман ҡулына төшмәне. Меҫкен ҡаҙаҡ мосолмандарын ут аҫтына ташлап, атының йүгереклеге арҡаһында ҡасып ҡотолдо. Ҡаҙаҡтар ҙа эштең нисек икәнлеген һиҙгәс, үҙ ерҙәренә ҡаса башланылар. Жунгар халҡы арттарынан ҡалмай, ҡыуып Ҡаҙағстанға киттеләр, Ҡараһаҡал менән булған ҡаҙаҡтарҙың ҡайһыһы үлтерелеп вә ҡайһыһы тотҡон булып,

барыһы тиерлек һәләк булып бөттөләр. Быларҙан да бигерәк эшкә ҡатнашмаған гонаһһыҙ ҡаҙаҡтар мөбтәлән булдылар, сөнки жунгар халҡы Ҡаҙағстанға кергәс, кәрәк ир вә кәрәк ҡатын булһын — күҙгә күренгән барыһын ҡылыстан кисерҙеләр, хатта ҡаҙаҡтарҙы үлтерә-үлтерә Яйыҡ йылғаһының уң ығына Ырымбур (хәҙерге Орск) шәһәренең ҡаршыһына килеп сыҡтылар. Түрәләр был хәлде аңһыҙҙан күреп хайранға ҡалдылар, жунгар ханына кеше ебәреп, Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткән Ҡаҙағстанға кереп, бындай эштәрҙе эшләмәҫенә протест иттеләр, ләкин жунгар ханы Ҡараһаҡал менән иптәштәрен ҡыуа килеүенән, ҡаҙаҡтарҙың Русиә химаяһында икәнлеге хәбәре булмағанлығын бәйән итте. Талауға ҡатнашмаған ҡаҙаҡтарға ни өсөн бындай эштәр ҡылдығыҙ тигән һорауға хан: «Ҡаҙаҡтар беҙҙең иҫке дошмандарыбыҙҙыр, былай ҡылғаныбыҙ үҙҙәренең иҫке ҡылған уҫаллыҡтары бәрәбәренәлер, шулай булһа ла Русиә тәбәғәлектәрендә икәнлеген белгән булһаҡ былай ҡылмаған булыр инек», — тип яуап бирҙе һәм был ҡылған эштәр өсөн шәһәр комендантынан ғәфү үтенде. Комендант та ғәфү эстәүен ҡабул итеп: «Ҡаҙаҡтар Русиә тәбәғәлектәрен ҡабул иткәндәренән уларҙы химая итмәк беҙгә бурыстыр, бынан һуң бындай эштәре булһа, үҙегеҙ хөкөм итмәй беҙгә белдереүегеҙ тейештер. Русиә хөкүмәте тәфтиш итеп, тейешле язаларын үҙе бирәсәктер, бынан һуң бындай эштәрҙе ҡылһағыҙ, беҙҙең тарафтан ғәфү итмәйәсәктәр», — тине. Һуңра жунгар ханы ғәскәрен алып ҡайтып китте.

Шулай итеп, башҡорт фетнәләре баҫылып бөткәс, 1740 йылда Урусов Орск крепосына сәфәр итеп, барышында бәғзе башҡорттарҙың күрһәтеүе менән, был крепосҡа тура юл бар икәнен белде. Был юл әлектән бирле башҡорттарға мәғлүм булһа ла башҡорттар үҙҙәре генә файҙаланыу өсөн йәшереп торалар ине. Бынан һуң Урусов оҙаҡ тормай, 1741 йылда донъянан үтеп, кәүҙәһе Һамар шәһәрендә күмелде.

Хөкүмәттең ярҙамы вә Кириллов, Татищев, Урусовтарҙың ижтиһадтары менән Ырымбур әтрафының бер ҡәҙәре тәртипкә ҡуйылыуы юғарыла ҙекер булынмыш ине. Бынан һуң етешмәгән ерҙәрен етештереү Петр Великийҙың иң яратҡан әҙәмдәренән Неплюевтың өлөшөнә төштө. Неплюев Русиәлә булып кискән олуғ әҙәмдәрҙең береһе булғанлыҡтан, урыҫса лисанда бының тәржемәи хәле бик тәфсил менән яҙылмыштыр. Был урында бер аҙ тәржемәһен яҙмаҡ беҙҙең өсөн дә файҙаһыҙ булмаç тип ғоман итәмен. Неплюев хәҙерге Ырымбур шәһәренең ҡороусыһы, Ырымбур губернаторҙарының беренсеһелер. Үҙе задакандәрҙән булып, 1693 йылда Новгород губернаһында атаһының милкендә (имениеһында) донъяға килмештер. Атаһы Иван Неплюев Нарва аҫтында Карл XII менән булған һуғышта йәрәхәтләнеп, шул йәрәхәтенән төҙәлә алмайса донъянан үтмеш һәм Неплюев та ун алты йәшлек хәлендә атаһыҙ ҡалмыштыр. Неплюев ун һигеҙ йәшкә етер-етмәç үк өйләнеп, бер балаһы булғандан һуң ҡатыны вә балаһын ҡалдырып, бер монастырҙың зыяратына китеп, бер йылдан артыҡ йөрөп ҡайтмыштыр. Неплюев уҡыу өсөн һис ҡайҙа бармаған вә һис мәктәп күрмәгән, фәҡәт инәһенән генә уҡыу-яҙыу өйрәнгән ине вә бынан һуң уҡыу һәүәçенә кергәне юҡ ине. Шул арала Петр Великий тарафынан бер указ нәшер булынып, дворян балаларын хисаптан иғмал әрбаға менән мәбади һәндәсәне белеү мәжбүри ҡылынды. Хатта шул ваҡытҡа ҡәҙәр өйләнмәгән дворян балаларының ҡулдарында шул нәмәләрҙе белеүгә шәһәҙәтнамәләре булмаһа, өйләнеүҙән маниғ булынды. Шул сәбәпле Неплюев мәҙкүр фәндәрҙе өйрәнмәк өсөн инәһен, ҡатын вә балаларын ҡалдырып, Новгородта яңы асылған школаға китергә ирекһеҙ булды, ләкин инәһе бындай һөйөклө улының ирекһеҙ рәүештә уҡырға китеүенән ҙур ҡайғыға төшөп, оҙаҡ та тормай ҡайғыһынан үлеп китте. Неплюев тиҙлек менән Новгородтан Нарва шәһәрендәге школаға күсерелде. Нарвала өс айҙан артыҡ торорға тура килмәне, сөнки 1715 йылда Петербургта Морская

Академия асылып, өс йөҙ ҡәҙәре дворян балаларын шунда алырға падишаһ тарафынан фарман сыҡмыш ине. Һайланмыш дворян балалары араһында Неплюев та булып, шул мөнәсәбәт менән 1715 йылда Петербургка килеп ирешелде.

Петр Великийҙың уйында төньяҡ тарафынан Балтик диңгеҙенә, төшлөк яғында Ҡара диңгеҙгә сығыу рәғәбәте бик оло ине. Тәбиғи, был эш өсөн элек кешеләр әҙерләмәк кәрәк ине. Шул сәбәпле Петр Великий диңгеҙ ғилемдәрендә етешкән егеттәр әҙерләмәк өсөн үҙе тарафынан майҙанға килтергән академия менән генә кифаяланмай, Ғәрби Аурупа мәктәптәренә ҡәбилиәтле егеттәрҙе күндермәгә ҡарар бирҙе: ҡайһыһын Англияға, ҡайһыһын Голландияға, ҡайһыһын Италия ярымутрауындағы Венеция йөмһүриәтенә күндерҙе. Был, һуңғыһына күндерелгәндәрҙең һаны утыҙ ҡәҙәре булып, Неплюев та шул йөмләнән ине. Ул ваҡыт Төркиә дәүләтенең иң бөйөк дошмандарынан береһе Венеция булып, диңгеҙ тарафынан Төркиәне рәхәтһеҙ итә ине. Беҙҙең Русиә моряктары (бәхериәләре) барғас, Төркиә менән араларында яңынан һуғыш башланды. Был һуғышҡа ла Неплюев үҙенең иптәштәре менән иштирак итте вә иптәштәре араһында артыҡ баһадирлыҡ күрһәтеп, адмирал тарафынан маҡтау ҡағыҙы алды. Бында ике йыл торғандан һуң, 1719 йылда Петр Великий Неплюев менән иптәштәренә уҡыу өсөн Испанияға барыу менән әмер күндерҙе. Был әмерҙе алыу менән Испанияға китеп Кадикс шәһәрендәге диңгеҙ ғилемдәре өйрәтелә торған академияға керҙеләр, ләкин Испания теленән хәбәрҙәре булмау сәбәпле файҙа итә алманылар. Испанияла торған ваҡыттарында аслыҡ, яланғаслыҡ кеүек һәр төрлө ҡатылыҡтарҙы күрҙеләр. Шул сәбәпле тиҙерәк ҡайтарыуын үтенеп Петр Великийға мәктүп күндерҙеләр. Петр Великий ҡайтыуҙарына рөхсәт итте. Һуңра Неплюев та биш йылдар ҡәҙәре сит мәмләкәттәрҙә сәйәхәт иткәндән һуң юлдаштары менән Петербургка ҡайтып килде. Ҡайтҡандың дүртенсе көнөндә бар юлдаштары менән Петр Великийға тәҡдим булынып, шул күрешеүҙә үк Петр Великийҙың Неплюевҡа күҙе төштө. Бер айҙан һуң

күп кешеләрҙең хозурында Петр Великий быларҙы имтихан ҡылды. Был имтиханда Неплюев Петр Великийҙың һәм башҡаса әҙер булған әҙәмдәрҙең диҡҡәттәрен йәлеп ҡылды. Шунан һуң, Петр Великий Неплюевты ҙур бер дәрәжәгә тәғәйен ҡылып, үҙенең хауаһы йөмләһенә алды.

Шул рәүешсә Неплюев Петербургка ерләшкәс, алты-ете йылдарҙан бирле күрмәй торған ҡатыны вә балаларын бергә тороу ниәте менән Петербургка алдырҙы. Ләкин бында ла оҙаҡ торорға тура килмәне, сөнки бер йыл булыр-булмаҫтан уҡ консуллыҡҡа тәғәйен булынып, Истанбулға китте. Консул булып торған ваҡыттарында Неплюев Русиә дәүләте өсөн бик файҙалы эштәр ҡылырға муафиҡ булды. Нисә мәртәбәләр Кавказ тарафтарында Төркиә менән Русиә араһында һуғыштар сыға башлап, Неплюевтың тәдбире менән сыҡмай ҡалды. Ул ваҡыт Төркиә дәүләте бик ҡеүәтле булып, Русиә дәүләте зәғиф булғанлыҡтан, Төркиә менән һуғышмаҡ Русиә өсөн мотлаҡан ҡурҡыныслы ине. Петр Великий Неплюевтың был хеҙмәттәрен тәҡдир итеп, ҡаршыһына дүрт йөҙ крәҫтиән менән оло бер ер һәдиә ҡылды. Неплюев Истанбулда шулай бер оҫталыҡ менән торҙо, министрҙар мәжлесендә ниндәй бер йәшерен эш эшләнһә, үҙенең ясустары арҡылы барсаһынан хәбәр алып тора ине. Хатта төрктәрҙең бәғзеләре Неплюевтың Төркиә өсөн зарарлы икәнен белеп, ағыулап үлтерергә лә ниәт ҡылмыштар ине, ләкин ясустары арҡылы был үлемдән дә ҡотолоп ҡалды.

Шул хеҙмәт менән Истанбулда бер ҙә ҡайтмаҫтан ун дүрт йыл торҙо. Ахырында бик ныҡ бер ауырыуға мөбтәлә булып тереклеге икеле булғас, Петербургка ҡайтып килде. Ҡайтҡандан һуң сәләмәтләнеп, оҙаҡ та тормай 1740 йылда Киев шәһәренең губернаторлығына тәғәйен булынды, ләкин шул ваҡыттарҙа Астерман нам министр яңы тәхеткә ултырған Елизавета Петровнаны тәхеттән төшөрөү ҡасдында булыу менән ғәйепләнеп үлем язаһына хөкөм булынды. Неплюев иҫкенән бирле Астерман менән мөнәсәбәттә булғанлыҡтан, Неплюевты ла «был эштә мөдәхәләһе бар» тип шөбһәләнеп, урынынан төшөрҙөләр һәм барса

миҙалдарын вә һәдиә ителмеш ер вә һыуҙарын хазинаға алып, үҙен хибескә яптылар. Ләкин, һуңынан гонаһы юҡлығы беленеп, хибестән сығарылды вә кире, алынмыш барса нәмәләре үҙенә ҡайтарылды вә императриҵаның фарманы буйынса 1742 йылда Ырымбур тарафына губернатор булараҡ тәғәйен булынды.

Ырымбур әтрафының идараһы төрлө ваҡытта төрлөсә аталды иһә лә Неплюев үтенеүе буйынса 1744 йылда Сенат тарафынан Ырымбур губернаһы исеме бирелеп, вәлиһен губернатор тип тәсмиә иттеләр. Шуның өсөн Неплюев урыҫса әҫәрҙәрҙә Ырымбур губернаторҙарының беренсеһе тип ҙекер булыналыр.

Ул ваҡыт Ырымбур губернаторлығына хәҙерге Ырымбур губернаһы камилән дәхил булған кеүек, хәҙерге Уфа губернаһы камилән, Һамар вә Пермь губерналарының күп ерҙәре дәхил ине һәм яңы ғына Русиә тәбәғәлеген ҡабул иткән ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ таифәләренә, һәмишә фетнә сығарып торған Яйыҡ казактарына, Ставрополь ҡалмыҡтарына наҙарат итмәк тә Ырымбур губернаторына тапшырылмыш ине. Был ҡәҙәре ергә наҙарат итмәк яңғыҙ бер кешегә ауыр булғанлыҡтан, Уфа әтрафына наҙарат итмәк өсөн Уфа шәһәрендә губернатор наибы исемендә бер хаким торалыр ине.

Был әйтелмеш ерҙәрҙә урыҫ ғонсары бик аҙ булып, барсаһы башҡорт, мишәр, типтәр, ҡаҙаҡ кеүек төрлө исем аҫтындағы халис төрк енесенә мәнсүб мосолмандар булғанын, ул ваҡытта быларҙың Русиәгә ҡаршы баш күтәреүгә даимән форсат күҙләп торғанлыҡтарын мөләхәҙәгә алынһа, ул ваҡыттағы губернаторҙарҙың өҫтәрендә ни ҡәҙәр бөйөк эш булғанын аңламаҡ мөмкин булыр.

Неплюевҡа ҡәҙәр булған вәлиҙәр күбеһенсә Һамарҙа торғанлыҡтарынан тәғәйен ителгәндән һуң Неплюев та 1742 йылдың 25 апрелендә Һамар шәһәренә килеп, идара эштәрен ҡулына алды һәм шул уҡ заманда Сенат тарафынан «әгәр ҙә башҡорттарҙа ихтилал ғәләмәттәре күренә башлаһа, ни рәүешле баҫырға кәрәк» икәнлегенә даир әмерҙәр бирелде. Шул йылдың июлендә Неплюев Уфа арҡылы Ырымбур (хәҙерге Орск) шәһәренә китеп, бер ҡәҙәр

ваҡытта Уфаға туҡталды һәм губернатор наибы Урусовтан шул тарафтың хәлдәрен һорашып, барса эштәрен тәфтиш итте. Башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн падишаһ тарафынан садр булған күп эштәрҙең еренә еткерелмәүен аңланы.

Нәҡ шул ваҡыттарҙа башҡорттарҙа яңынан тынысһыҙлыҡ ғәләмәттәре күренә башланы. Ҡазан юлында Ҡайынлытамаҡ тигән ауылдың башҡорттарынан Мөслим Күсемовтың йәшерен йәмғиәттәр яһап, башҡорттарҙы ҡотортоп йөрөүенән үҙенең шымсылары васитаһы менән хәбәр алды. Махсус шул эште тәфтиш өсөн Исаков тигән полковникты Минзәлә шәһәренә күндерҙе. Күп ваҡыттан бирле хибестә ята торған Әғләш исемендәге бер башҡорт муллаһын аҫып үлтерергә шул йылдың 15 ноябрендә Сенат тарафынан фарман садр булды һәм Уразай исемендәге ҡасып йөрөй торған юлдашын да, нисек булһа ла табып, үлем язаһы йөрөтөргә әмер ителде.

Кенәз Урусов ваҡытында Ҡараһаҡал тигән башҡорт ишаны зоһур итеп, башҡорт вә ҡаҙаҡ мосолмандарын бәләгә дусар иткәне, үҙенә ауырлыҡ килә башлағас та атына менеп ҡаҙаҡ сәхрәһенә кереп ҡасҡаны юғарыла ҙекер булынмыш ине. Бының үҙенең ҡайҙа икәнлеге асыҡ беленмәһә лә һәмишә тере булып башҡорт вә ҡаҙаҡ мосолмандарын ҡоторттоп йөрөгәнлеге ишетелә ине. Башҡорт араһында бының кирәмәттәре һөйләнә вә һәр көн бының тураһында яңы хәбәрҙәр тарала, быны мәдех итеп тәртип ителгән шиғырҙар һәр тарафта уҡыла ине. Был хәбәрҙәрҙе ишетеп түрәләр, тәбиғи, бер аҙ тыныcһыҙлана вә һәр төрлө юлдар менән бының хаҡында тоғро хәбәрҙәр эҙләнә ине. Шул арала Ҡараһаҡалдың ҡулында тотҡонда булған Лапин фамилияһындағы бер урыҫ ҡотолоп Русиәгә ҡайтты. Саймонов менән күрешеп, үҙенең хәлен бәйән иткәндән һуң: «Тиҙ көндә Ҡараһаҡал ишан урыҫ түрәләренең алдына ғәфү үтенеп киләсәк», — тип Саймоновҡа хәбәр бирҙе. Саймонов быны ишетеү менән Сенатҡа белдерҙе. Сенат Саймоновҡа: «Әгәр Ҡараһаҡал килһә, күҙгә күренеү менән тотоп алып, Һамарға ебәреп бик ныҡ йәшерен бер урынға хибес ҡылып ҡуйырға», — тип

бойороҡ күндерҙе. Ләкин Ҡараһаҡал килмәне. Һуңра Саймонов аҡсаға хирес халыҡ аҡсаға ҡыҙығырҙар тип уйлап, «Ҡараһаҡалды тотоп биргән кешегә биш йөҙҙән мең һумға ҡәҙәр аҡса биреләсәк» тип иғландар таратты. Ләкин быны̇ң да артыҡ файҙаһы күренмәне. Шулай итә торғас, бер аҙ ваҡыттар үтеп китте. Ҡараһаҡал ишан да онотола башланы. Ҡаҙаҡ сиктәрендә булған түрәләр ҙә был турала артыҡ мәшәҡәтләнеүҙе ҡуйҙы. Ләкин шул арала Ҡараһаҡал ишандың дошмандарынан вә ҡаҙаҡ таифәһенең ололарынан Хужабирҙе исемендәге бер ҡаҙаҡ: «Ҡараһаҡал ишан хәҙер беҙҙең ҡаҙаҡ араһында тора, ҡаҙаҡтар менән араларына дошманлыҡ төштө. Бынан һуң ҡаҙаҡ араһында тормайса тиҙ көндә йыраҡ ергә күсеп китәсәк», — тип түрәләргә хәбәр бирҙе һәм Хужабирҙе үҙе Семипалат крепосының тирәһенә күсеп йөрөгәнлегенән, әгәр Ҡараһаҡал шул тирәгә килһә, быны тотошоуҙа урыҫ ғәскәренә ярҙам итәсәге менән вәғәҙә бирҙе.

Хужабирҙенән был һүҙҙәрҙе ишетеү менән Киндерман тигән генерал Сенатҡа белдерҙе. Сенат 1745 йылдың 30 апрелендә: «Әгәр Ҡараһаҡал Семипалат тирәһенә килһә, Хужабирҙе ҡаҙаҡтың ярҙамы менән тоторға вә яза бирергә», — тип Неплюевҡа бойороҡ күндерҙе, ләкин ни ҡәҙәр көтөлһә лә Ҡараһаҡал ишан күренмәне. Ҡылынған тәдбирҙәр барсаһы бушҡа китте. Бынан һуң Ҡараһаҡал ишан да бөтөнләй юҡҡа сығып, ни ергә киткәнлеге вә ни өйҙә булыуы төптән мәғлүм булманы.

Ырымбур әтрафындағы төрки ҡәбиләләр араһында сыуалыуҙар һәмишә булып торғанға, Неплюев тейешле урындарға крепостар бина итеүгә Ырымбур әтрафында урыҫ ғонсарын күбәйтеү өсөн эске Русиәнән халыҡ күсерергә ҡарар бирҙе. Был эштәрҙе майҙанға килтермәк өсөн аҡса кәрәк булғанға, ҡырҡ мең һум аҡса һорап, 1745 йылдың 16 декабрендә Сенатҡа мөрәжәғәт итте. Сенат тарафынан был үтенес ҡабул ителеп, крепостар бина итеүгә муафиҡ урындарҙы ҡарау өсөн Урал, Уй йылғалары буйында ете йөҙ саҡрым ҡәҙәре сәйәхәт итте, ун һигеҙ редут (истихкәм) менән һигеҙ крепость ҡәлғәләр бина ҡылдырҙы.

Сәйәси һәм тижәри бер маҡсат менән Орск крепосының Кириллов тарафынан Ырымбур исеме менән бина булыныуы юғарыла ҙекер булынған ине. Тирәһендә урман юҡлыҡтан вә һауаһы яҡшы булмағанлыҡтан, Русиәнең мәркәздәренә йыраҡ булып, башҡорттарҙың эштәренә күҙ-ҡолаҡ булыр өсөн дә уңайлы булмағанлыҡтан, Татищев ваҡытында уҡ Ырымбур шәһәре Ҡыҙылтау тигән урынға күсерелергә ҡарар бирелгән ине, ләкин Татищев тиҙлек менән урынынан төшөрөлөп, еренә тәғәйен булынған Урусов башҡорт фетнәләре менән мәшғүл булғанлыҡтан, был эш Неплюев ваҡытына ҡәҙәр кисектерелгән ине. Неплюев урынына ултырып баш-күҙ алғас та был эште майҙанға сығармаҡ булды, ләкин Татищев тарафынан тәғәйен ҡылынған урын Неплюевҡа оҡшаманы. Неплюев Орскиҙан ике йөҙ илле ике ярым саҡрым йыраҡлыҡта булған вә иҫке ваҡыттарҙа Басман исемендәге нуғай ханының торған ере булған хәҙерге урынына күсереүҙе муафиҡ тапты. Һуңра яңы Ырымбур шәһәрен шул ергә бина итеүгә, бина иткән ваҡытта эшкә типтәр вә бобылдәрҙе вә ситтән нәмә таҫыу өсөн башҡорттарҙы ҡушыуға рөхсәт һорап, Сенатҡа мөрәжәғәт итте. Сенат рөхсәт бирмәк менән бәрәбәр, башҡорттарға яҡшы мөғәмәлә ҡылыу менән вә эш хаҡтарын ғәҙәлиәт менән биреү менән бойороҡ күндерҙе, ләкин был шәһәрҙең бинаһы ваҡытында ҡурҡыныслы йоғошло ауырыу пәйҙә булып, алты йөҙ егерме бер ҡәҙәр кеше донъянан үтте.

Шәһәр бина ителеп бөткәс, һәр төрлө киңлектәр вәғәҙә ҡылып сит шәһәрҙәрҙән сауҙагәрҙәр саҡырып килтерҙе. Был шәһәр ваҡытына күрә шулай бер тиҙлек менән тәрәҡҡи итте ки, 1747 йылда был шәһәрҙә бары һигеҙ йөҙ утыҙ ете йорт, дүрт сиркәү, бер аптека бар ине. Ун ике йыл һуңра, шәһәр тирәһендәге землянкаларҙы керетмәйсә, 2866 йорт, туғыҙ сиркәү булды. Неплюевтың бик нескәләп тикшереүе арҡаһында Уфалағы губернатор наибы Аксаковтың ҙур хыянаттары беленде вә урынынан төшөрөлдө. Шул уҡ йылда Неплюев Ҡотломөхәммәт Тәфкилевтең дә эштәрен тәфтиш итте.

Котломөхәммәт Тәфкилевтең дәүләтебеҙ өсөн бик оло хеҙмәттәр күрһәткәне, хатта Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ мәмләкәттәренең, фәҡәт Тәфкилев ғәйрәте менән Русиәгә ҡушылыуы юғарыла ҙекер булынмыш ине. Был хеҙмәттәре һәм буш ҡалмайса, бәрәбәренә элек полковниклыҡ, һуңра генераллыҡ дәрәжәләре ихсан булынып, Уфа тирәһенә бик оло вә яҡшы ерҙәр вә күп крәҫтиәндәр ҙә һәдиә ҡылынмыш ине. Ләкин һуңға табан ни сәбәплелер Тәфкилев халыҡ менән вә ингүсән үҙ ҡулындағы крәҫтиәндәр менән тупаҫыраҡ мөғәмәлә ҡыла башланы. Шул сәбәпле крәҫтиәндәре асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡ күрһәтә башланылар. Бал-тас, Мордвинка ҡәрйәләренең крәҫтиәндәре бөтөнләй урман араларына ҡастылар. Урман араларынан сығып, Тәфкилевтең имениеларына һөжүм итеп, ирлосә зарарҙар ирештерҙеләр, хатта Тәфкилевтең үҙ йөненә ҡәҫәр ҡасд иттеләр. Тәфкилев Уфа мәх-кәмәһенә хәлен белдерҙе. Уфа мәхкәмәһе был ҡасҡан крәҫтиәндәргә яҙыуҙар ебәреп, буйһоноуға өндәне, ләкин һис файҙаһы күренмәне, итәғәтһеҙлектәре һаминә дауам итте. Бүтәнсә сара табылмағас, былар-ның оҫтәренә Тихомиров вә Измайлов исемле әҙәм-дәрҙең ҡул аҫтарындағы ғәскәрҙәр күндерелде. Крәҫтиән татарҙар ғәскәргә ҡаршы тороуҙы истәне-ләр, ләкин булдыра алмай, барсаһы ҡулға алындылар, фәҡәт өсәүһе ҡасмаға муафиҡ булып, быларҙың береһе Хәбибулла исемендәге башлыҡтары ине.

Неплюев эштең ҙурға китеүен уйлап, Сенаттан: «Киләсәк ваҡыттарҙа был крәҫтиәндәр менән нисек мөғәмәлә ҡылырға кәрәк?» — тип бойороҡтар һо-рашы. Дүрт айҙан һуң Сенат шул бойороҡтарҙы күн-дерҙе: «Юғарыла мәҙкүр ҡәрйәләрҙең крәҫтиәнлектән баш тартҡандарын Уфаға саҡырып яуап алыу, ғәс-кәрҙәргә ҡаршы торған крәҫтиәндәрҙе тәфтиш итеү. Хөкөмгә буйһонмай торған крәҫтиәндәргә ғасиларға ҡылынған мөғәмәлә менән мөғәмәлә итеү. Башлыҡ-тары Хәбибулланы нисек булһа ла табып ҡулға алыу».

Тәфкилевтең крәҫтиәндәренән Юлдаш Ишембаев исем әҙәм Аксаковтың Мәскәүгә киткән ваҡытында

осрап: «Тәфкилевтең беҙҙе крәҫтиән итеп тотоуға хаҡы юҡ, беҙҙең бабаларыбыҙға падишаһтар тарафынан бирелгән азатлыҡ указы бар һәм бының кеүек татарса яҙылған яҙыуҙарыбыҙ ҙа бар», — тип һөйләп, указын да һәм татарса яҙыуҙарын да Аксаковтың ҡулына биргән ине, ләкин һуңға табан был яҙыуҙар барсаһы Аксаков ҡулында заиғ булып, Неплюев эште дөрөҫлөк менән бөтөрөү өсөн был яҙыуҙарҙы ни ҡәҙәре эҙләһә лә таба алманы. Ахырында Неплюев был эште тәфтиш ҡылыу өсөн Уфа мәхкәмәһенә тапшырҙы. Уфа мәхкәмәһе эште тәфтиш ҡылып, Тәфкилевте артыҡ ғәйеп итерлек эш тапманы һәм мәхкәмәнең был ҡарары Неплюев тарафынан да тәсдиҡ ителде. Бынан һуң да Тәфкилевтең хеҙмәттәре лә булынып, Уфа тарафын ислах вә иғмар тураһында күп ярҙамдар ҙа тейҙерҙе, хатта Неплюев үҙе Мәскәүгә йәки Петербургка киткән ваҡытында бар лазымын Тәфкилевкә тапшырып китә торған булды.

Башҡорт ерҙәренең киңлеге вә яҡшылығы, олуғ урмандарында һәр төрлө ҡош-ҡорт вә йәнлектәрҙең күплеге, башҡорт араһында булған кешеләрҙең башҡорттан хисап булынып ғәскәри хеҙмәттән ғәфү булыныусылығы, яһаҡтың аҙлығы, тоҙ күлдәренән тоҙҙоң буш алыныусылығы иҫке ваҡыттан бирле сит халыҡтарҙы ҡыҙыҡтыра, һәр көн вә һәр сәғәт был ерҙәргә килеүселәр артып тора ине. Килеүселәр һәр төрлө таифәнән бар ине иһә лә күберәге Ҡазан губернаһындағы татар, сирмеш, сыуаш, вотяк, мордва кеүек таифәләрҙән ғибәрәт ине. 1710 йылда башҡорттарҙың һаны 35—40 меңдән артыҡ түгел икән, 1730 йылда шул ситтән килеүселәрҙең күплеге сәбәбенән 100 меңдән ашып китте. Башҡорт ерҙәре башҡорттарҙың милке хисап ителеүенән, ситтән килгән әҙәмдәр ер өсөн башҡорттарға аҡса түләп торорға ихтыярһыҙҙар ине. Мишәр таифәләре, башҡорт ерҙәренә килгән әҙәмдәрҙең бик иҫкеләре булыуҙарынан, бәғзеләре үҙҙәренә махсус ерҙәргә маликтар ине иһә лә, быларҙың да күбеһе башҡорттарға аҡса түләп торалар ине. Ләкин 1736 йылда падишаһ тарафынан бер указ нәшер булынып, башҡорт ерҙәре ҡаҙнаға алынды вә быны менән бәрәбәр башҡорттарҙың

ергә хужалыҡтары бөтөрөлөп, был ерҙәрҙә булған башҡа таифәләр ҙә башҡорттарға ҡол хөкөмөндә булыуҙан азат ителде. Ситтән килгән әҙәмдәргә былай иркенселек булғас, килеүселәрҙең һандары тағын нисә өлөш артты, беренсе хисап буйынса типтәр вә бобыль таифәләренең һандары 11294 һандан ғибәрәт икән, икенсе хисапта 29820 һанға еткән ине.

Кәрәк башҡорт вә кәрәк башҡа булһын, Башҡортостанда тороусы аһәлиәнең ҡаҙнаға биреүҙәре доход (бирге) бик аҙ ине. Мәҫәлән: йорт хисабы 8395 ирешкән ясачный башҡорттарҙан йылына 2054 һум 78 тин яһаҡ алынып, һәр береһе бер нисә йәмәғәттән ғибәрәт булған йорт башына 25 тин көмөштән артыҡ төшмәйҙер ине, әммә 1431 йорттан ғибәрәт булған тархандар был яһаҡты ла түләмәйҙәр ине. Мишәр таифәләре әүәлдәрҙә яһаҡ түләйҙәр ине иһә лә, башҡорт фетнәләре араһында күп зарар күреүҙәренән хөкүмәт был яһаҡты ла уларҙан киҫмеш ине. Барыһы 5655 йорттан ғибәрәт типтәр вә бобылдәргә лә бер ваҡыт йән башынан түләү һалынмыш ине, ләкин ауырһыныуҙары сәбәбенән үҙҙәренең үтенеүҙәре буйынса бер аҙ ваҡытҡа ҡәҙәр кисектереп, йорт башынан фәҡәт 49 тин ҡәҙәр генә яһаҡ алына ине һәм былар был ҡәҙәр аҙ яһаҡ өҫтөнә тоҙҙо ла һатып алмайҙар, ғәскәр ҙә бирмәйҙәр ине. Шул хәлдә эске Русиәлә йән башына 13 һум 70 тин имана түләйҙәр, ғәскәр ҙә бирәләр, тоҙҙо ла ҡаҙнанан һатып алалар ине. Русиә эсендә халыҡ һәмишә килеп торғанға ҡаҙнаға күп зарар ирешмәктә һәм Башҡортостан аһәлиенең башҡаларға ҡарағанда былай аҙ яһаҡ түләмәктәре ғәҙәләтһеҙлек кеүек күренмәктә ине.

Бына, шул сәбәптәргә бинаән хөкүмәт Башҡортостанда тороусы аһәлиәне лә Русиәнең башҡа аһәлие менән бер дәрәжәгә ҡуйыуҙы эстәп, иң әүәл типтәр, мишәр, сыуаш, бобыль таифәләренән йән башына бер ҡәҙәр яһаҡ һәм быларҙан ғәскәр алыу тураһында Неплюевтың фекеренә мөрәжәғәт итте. Неплюев быларҙан йән башына 80 тин яһаҡ алыуҙы муафиҡ күрҙе, әммә ғәскәр алыу тураһында бер аҙ сабыр итеүҙе муафиҡ табып, хәҙергә биш йорттан бер кеше алып, крепостарға ебәреп, хеҙмәт иттереүҙе муафиҡ

тапты. Сенат Неплюевтың был фекерен мәғкүл күреп, 1747 йылдың 11 майында быларҙан йән башына 80 тин яһаҡ ала башларға фарман күндерҙе. Неплюев фарманды алыу менән урыҫса вә татарса телдәрҙә иғландар баҫтырып тейешле урындарға таратты һәм старшиналарға ярты йыллыҡ яһаҡты бик ғәҙәләт менән йыйып, килтерергә ҡушты. Яһаҡ йыйыу ваҡытында тәртип вә низамды күҙәтеү өсөн 16 дана офицерҙы Башҡортостанға күндерҙе. Был офицерҙарға, халыҡ араһында аҙ ғына яңы низамдан ризаһыҙлыҡ ғәләмәттәре күренә башланы иһә, тейешле урынына хәбәр биреү менән әмер әйләне.

Ҡушылған кешеләр яңы яһаҡты килеп һорай башлағас та халыҡ бер ауыҙҙан ҡарыштылар һәм был фарман фәҡәт губернаторҙың үҙе тарафынан ғына сығарылған, падишаһ хәҙрәттәренең белеүе менән булған эш түгел, тип жаһләнә фекерҙә булынып, ғөмүмән, түләмәҫкә булдылар. Себер юлында яһаҡ йыйыуҙы күҙәтеү өсөн Иван Мусиев тигән әҙәм күндерелмеш ине. Был әҙәм Һөйөш Абзаков нам старшинаның ҡул аҫтындағы Мәләкәс исемле ауылға барып яңы яһаҡ йыйыласағын белдерҙе. Ишетеү менән шунда йыйылған сыуаш, сирмеш, татарҙарҙан ғибәрәт йөҙ-ҡәҙәр кеше быға һөжүм иттеләр. Мусиев үҙенең иптәштәре Бахметьев, Рахманҡолов, Йәнбирҙин, Михаил Барушин менән иҫке бер өйгә кереп бикләнделәр, ләкин халыҡ ишекте ватып кереп, Бахметьевтың аяҡ-ҡулын бәйләп ҡарауылға бирҙеләр, Йәнбирҙин көс-хәл менән ҡотолоп Талыш ҡәрйәһенә Һөйөш старшинаға ҡасып китте, Барушиндың күҫәк менән һуғып ҡулын имгәттеләр. Шул арала Һөйөш старшина ла тиҙлек менән Мәләкәс ҡәрйәһенә килеп етте. Халыҡ быны ла тотоп алып күҫәк вә ҡамсылар менән ҡыйнап телһеҙ вә иҫһеҙ ҡылып ҡарауылға бирҙеләр, һуңыраҡ Мусиевҡа: «Бына һин Уфаға ҡайт, бындағы хәлдәрҙе генералға әйт, үҙең икенсе мәртәбә бындай эш менән бында килеп йөрөмә, килһәң сәләмәт китмәҫһең», — тип ҡыйнамай-һуҡмай Уфаға ҡайтарып ебәрҙеләр. Был эштә башлап йөрөүселәр: татар енесенән Исмәғил, Миңледияр, Уразаев; сирмеш енесенән Кинйәбай Илбурысов, Ишморат

Тилебаев, Ҡунаҡбай Бикрижов; сыуаш енесенән Сирбай Катикеев, Батыршаһ, Аҡъегет, Чирибабиков исемле әҙәмдәр ине.

Уса юлында Кирәмәт Иҙелов тигән старшинаның ҡул аҫтындағы типтәрҙәргә яңы яһаҡты иғлан итеү өсөн Питкарский фамилиялы бер урыҫ барған ине. Типтәрҙәр Питкарскийҙың үҙенә тейməһәләр ҙә янындағы Айгилде исемле сотникты ҡыйнап ташлағандар ине.

Неплюев был фетнәләрҙән хәбәр алыу менән бер кәңәш мәжлесе йыйҙы. Был мәжлестә әтрафлыса уйлашҡандан һуң, башҡорт вә типтәрҙәрҙең телдәрен, әхлаҡ вә ғәҙәттәрен яҡшы белгәнлектән Семен Кублицкий исемле полковникты фетнә урынына ебәреп өгөтләргә ҡушты һәм был яңы яһаҡтың ҡуйылыуы падишаһ хәҙрәттәренең әмере менән булыуын белдерергә бойорҙо. Неплюев шул тирәнең мишәр вә башҡорттарына фетнәсе типтәр вә бобылдәрҙе баҫышыуға, башҡорттарҙы ҡайҙа күрһәләр унан тотоп алыуға вә Уфаға күндереүгә әмер күндерҙе. Себер юлы тирәһендә тороусы полковник Луткинға ниңә икәнен үҙҙәренә белдермәйсә генә мишәрҙәрҙән бер полк ғәскәр әҙерләп, кәрәк ваҡытта типтәрҙәрҙе баҫырға әҙер булып торорға ҡушты. Шул арала Луткин Мәләкәс ҡәрйәһендә 300 ҡәҙәр әҙәмдең йыйылыуынан Неплюевҡа хәбәр бирҙе. Неплюев яңынан кәңәш мәжлесе яһап, генерал Штукманнды 1749 ҡәҙәр ғәскәр менән Уфаға күндерҙе. Быларҙың 1535 ҡәҙәреһе монтазам ғәскәрҙән, ҡалғаны мишәр, башҡорт, тәнәссер иткән ҡалмыҡтарҙан ғибәрәт ине. Вәғәз вә нәсихәт өсөн Ырымбурҙан күндерелгән Кублицкий ҙа фәҡәт мишәр вә башҡорттарҙан ғына төҙөлгән бер фирҡә менән күндерелгән ине һәм өгөт тариҡы менән әйтелгән һүҙҙе тыңламаһалар, йыйылған халыҡты таратып ебәрергә, башҡорттарҙы ҡулға алып Уфаға күндерергә әмер бирелгән ине.

Неплюев, түрәләргә Уфаның һәр тарафындағы башҡорттарға шымсылар күндереп, хәл вә хәрәкәттәренән хәбәр алып торорға ҡушты, сөнки Неплюев башҡорттарҙың да типтәрҙәргә ҡушылып китеү ихтималын уйлайҙар ине.

Юғарыла фон Штукманндың бер ҡәҙәр ғәскәре менән Уфаға күндерелеүе зикер булынған ине, был зат киткән ваҡытында Неплюев быға фетнә урынына барғандан һуң мөмкин ҡәҙәр яҡшылыҡ менән һүҙҙе тыңлатырға, бер ҙә мөмкин булмағанда ғына ҡорал истиғмал итергә вә һәр хәлдә ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаларға вә малдарына теймәҫкә әйтеп ебәрҙе һәм Неплюев, фетнә ҙурға китеп ҡалһа-нитһә әҙер булып торһон өсөн 1500 Яйыҡ казактары менән бер полк ғәскәр ҙә тәртип ҡылып ҡуйҙы. Шул арала фетнә ҙурайып китте, һис көтөлмәгән ерҙән Ҡазан юлындағы вә Уса юлындағы бәғзе волостарҙа сыуала башлауҙар ишетелде. Бәғзе бер ялғансылар халыҡ араһында: «Хөкүмәт һәр юлдан мең баш ат, һикһән егет, һикһән ҡыҙ һәм бер ни ҡәҙәр ашлыҡ йыя икән», — тип хәбәрҙәр тараттылар. Бындай хәбәрҙәр типтәр вә бобылдәрҙе бөтөнләй шаштырҙы һәм һәр ҡайһының ҡәлбенә бер төрлө дошманлыҡ урынлашты. Әммә мишәр вә башҡорттарҙың был фетнәгә ҡараштарына килһәк, Сөләймән Диваев тигән старшинаның ҡул аҫтындағы мишәрҙәр менән башҡорттар был фетнәгә ҡатнашыу түгел, хатта барсаһы быға ҡаршы торорға, типтәр вә бобылдәрҙең башлыҡтарын хөкүмәткә тотоп бирергә һүҙ бирҙеләр. Мишәр старшиналарынан Яныш, Салих, Айыт, Сөләймән вә башҡорт старшиналарынан Әхмәр, Яҡуп, Баҡый, Ажиғол, Мәсғут үҙ ҡул аҫтындағы башҡорт вә мишәрҙәрҙән 555 ҡәҙәр ғәскәр йыйып, Кублицкийға ҡушылдылар. Шулай итә торғас, фетнәләр аҙлап ҡына һүнә башланы. Бынан һуң эште тәфтишкә керешеп, Неплюев фон Штукманнға, фетнәлә башлап йөрөүселәрҙе ҡулға алыу менән, ҡулға алғандан һуң фетнә сығарыуҙан маҡсаттары ни икәнен һорашыу менән әмер әйләне.

Бынан һуң йыйыласаҡ яһаҡтарҙың ярымын йәй көнө ҡыҙыу эш ваҡытында йыйырға, ярымын ҡыш урталығында йыйырға ҡарар бирҙе, сөнки Неплюевтың уйынса был ике ваҡытта типтәрҙәргә фетнә сығарыуға уңайһыҙ булып, сыҡҡан ваҡытта ла фетнәне баҫыу хөкүмәткә еңел буласаҡ ине.

Неплюев шул өс төрлө эште һорап Сенатҡа мөрәжәғәт әйләне: был фетнәне баҫышҡан типтәр вә

мишәр старшиналарына гәрсә осһоҙло ғына булһа ла берәр ҡылыс бүләк итеп биреү, ә фетнә сыҡҡан урындарҙа ҡышлау өсөн, мөмкин булһа, ике полк, бер ҙә мөмкин булмағанда бер полк һаҡлыҡ өсөн ғәскәр ҡалдырыу. Уфа әтрафындағы халыҡ бик фәҡир булыуынан, ҡышлау өсөн ҡалған ғәскәрҙәргә аҙыҡ һәм башҡаса кәрәк-яраҡты етештереү өсөн Сенат тарафынан аҡса күндереү. Сенат Неплюевтың бар һорауҙарын ҡабул итте вә еренә еткерҙе һәм шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙәге Сенатская контораға, һәр бере ете-һигеҙ һум самаһында торорлоҡ туғыҙ дана ҡылыс һатып алып Неплюевҡа күндерергә ҡушты, Сенатская контора Мәскәүҙәге ҡорал кибеттәренән бындай ҡылыстар таба алманыҡ вә етештереп биреү өсөн бер ай мөҙҙәт һораны. Шул бер ай мөҙҙәт зарифында Сенатская контора туғыҙ дана ҡылысты хосус кешеләрҙән һатып алып, махсус бер һалдат менән Неплюевҡа күндерҙе. Неплюев был ҡылыстарҙы алғас, 1748 йылдың 16 апрелендә старшиналарҙы Ырымбур шәһәренә саҡырып ҡылыстарын үҙ ҡулдарына тапшырҙы һәм һәр береһенә: «Падишаһҡа тоғро хеҙмәт иткәндәре өсөн бирелде», — тип яҙылған ҡағыҙҙар бирелде. Был бүләктәрҙе алған кешеләр: мишәр старшиналарынан Яныш Ғәбиҙуллин, Салих Мөслимов, Айыт Ялтин, Сөләймән Диваев. Башҡорт старшиналарынан: Әхмәр Хәсәнов, Яҡупйән Мурзин, Шәриф Макаров, Ажиғол Аҡшиев, Баҡый Апажев тигән кешеләр ине. Был бүләктәрҙе мәҙкүр старшиналар алып ҡайтҡас, башҡорт старшиналарынан Зайсан Йосопов менән сотник Ибраһим Ҡотоев тигән әҙәмдәр Неплюевҡа килеп: «Беҙ ҙә Кублицкийҙың ғәскәрҙәре араһында булып, фетнәне баҫышыуға хеҙмәт иттек, ни өсөн беҙгә бүләк юҡ?» — тип һүҙ сығарҙылар. Неплюев, хәтерҙәре ҡалмаһын өсөн, быларға ла берәр сәкмәнлек менән падишаһҡа садаҡаттары яҙылған ҡағыҙҙар биреп ебәрҙе.

Фетнә башлыҡтары барсаһы берәм-берәм Уфа хибесханаһына алынып бөткәндәр ине. Быларҙың ун һигеҙе татарҙарҙан, етәүһе мишәрҙәрҙән, бишәүһе вотяктарҙан, икәүһе сирмештәрҙән ине. Фетнә башлыҡтарының күбеһе татарҙарҙан булыуы түрәләрҙе

йылы уйҙарға ҡалдырҙы һәм Бөрө крәҫтиәндәренән Петр Плотников тигән урыҫы ла ғәйепләнеп ҡулға алынды. Был урыҫ, иҫерек хәлендә 1 һум 10 тин аҡсаға ялланып, йыйылған халыҡҡа аҙ яһаҡ түләү хаҡында иҫке ваҡыттарҙа сығарылған бер указды уҡыған ине.

1747 йылда Уфа шәһәрендә фетнәселәргә хөкөм йөрөтөлә башланы. Ғәйебе бик көслө булғандарын башҡаларға ғибрәт булһын өсөн бик ҡаты ҡамсы менән ҡыйнағандан һуң ғүмер буйына хөкүмәткә Рогервик шәһәренә күндерелде, ғәйебе бер аҙ ҡайтыш булғандарын ҡыйнағандан һуң билдәле бер мөҙҙәт менән мәҙкүр шәһәргә күндерелде, ғәйебе аҙ булғандарын ҡыйнағандан һуң старшиналарҙың кифалаттарына бирелде. Плотников тигән урыҫты ҡамсы һуҡтырғандан һуң өс йыл мөҙҙәт менән Ырымбур губернаһына һөргөнгә күндерелде. Шулай итеп, фетнәгә ниһайәт бирелде. Әгәр был ваҡытта Неплюев кеүек тәдбирле хаким булмаһа, бөтөн Ырымбур губернаһының ут эсендә ҡалыуы бик ихтимал ине.

Был ваҡиғаларҙан һуң биш-алты йылдар үтеп китте, был арала фетнә вә ҡарышыу әҫәрҙәре беленмәне, Башҡортостанда булған түрәләр ҙә тыныслыҡ таптылар. Башҡорттар ҙа аҡрынлап, яңы тәртип вә низамдарға күнә башланылар. Хөкүмәт һәр насәбә волость өсөн ике йәхүд өс старшина тәғәйен итеп, быларҙы һәр эштә мөсәүил әйләне. Борон да ахундар башҡорт араһында бик күп булыусан ине, хөкүмәт ахундарҙы һирәкләтеп һәр юлға бер генә ахун тәғәйен әйләне. Бөтөн Башҡортостан дүрт юлға бүленгәндән барыһы дүрт ахун булырға тура килә. Бына, эштәр шулай тәртип менән генә барғанда, 1754 йылда хөкүмәт тарафынан бер указ сығарылып, элек тә буш файҙаланып килгән тоҙ күлдәренән тоҙҙо һатып алыуға лазым ҡылынды. Был эш йәнә башҡорттарҙың сыуалыуҙарына сәбәп булды. Неплюев был хәлде ишетеп башҡорттарҙы өгөт вә нәсихәт ҡылыу өсөн Уфаға Ҡотломөхәммәт Тәфкилевты күндерҙе. Тәфкилев барып етеп, башҡорттарҙы өгөтләне, бының өгөтө әҫәр итте, барсаһы ҡарышыу уйынан дүнделәр, һәр

шғэ хөкүмәткә буйһоноуға вәғәҙә бирҙеләр, ләкин Тафкилевтең китеүе менән эштәр үҙгәрҙе. Башҡорт араһында Ғабдулла мулла Батыршин тигән кеше сығып башҡорттарҙы ҡотортоуға башланы.

## *11*

Ғабдулла мулла үҙе мишәр таифәһенән булып, урта буйлы, көслө, хәйләкәр ҡиәфәтле, телгә бик оҫта, һүҙен аҡыл менән һөйләй, башҡорт араһында бик шөһрәт тапҡан, ғилеме менән һәр башҡортто үҙенә мөслим иткән ине. Үҙендә уҡыуын тамам иткәс, Башҡортостандың һәр ерендә сәйәхәт әйләне, барған ерендә вәғәз вә нәсихәт менән булып, ваҡыты еткәндә балаларҙы ла уҡыталар ине. Үҙе ибтидаи ғилемлекте Каинск волосында Илшаһ мулла тигән кешенең ҡаршыһында тәхсил итмеш ине.

Бер ваҡыт бер мулла Мөслим тигән старшинаның ауылына барҙы. Мөслим старшина бының хөрмәтенә бик ҙур мәжлес төҙөп кеше йыйҙы, бик күп ит вә ҡымыҙ әҙерләне. Халыҡ йыйылып бөткәс, итте ашарға, ҡымыҙҙы эсергә керештеләр. Ҡымыҙҙы эсә торғас, ҡыҙып китеп сәйәсәт бабына барып еттеләр, ҡымыҙ ҡыҙыуы менән һөйләй торғас, алдын-артын уйламай, Ғабдулла мулланы башлыҡ итеп, хөкүмәткә ҡаршы баш күтәрергә кәңәш иттеләр. Ғабдулла мулла бында эште ойошторғас, йыраҡта түгел Һалйоғот ауылына, Златоуст өйәҙендә булырға кәрәк, китте, бында ла быны мәжлесенә етмешкә яҡын башҡорттар йыйылышып килгәндәр ине. Быларҙы ла димләп шул эшкә күндерҙе. Бынан Урта тигән ауылға барып та шул эште ҡылды. Ғабдулла мулла бер аҙҙан Ырымбурға барып, Ырымбурҙың ахуны Ибраһим Бутчиев һәм губернатор ҡаршыһында тәржемәнлек ҡылыусы Гуляев тигән әҙәм менән күрешеп, улар менән шул хаҡта һөйләште.

Ғабдулла мулла Ырымбурҙан ҡайтҡас, яҙып-яҙып башҡорт араһына дәғүәтнамәләр таратты, был дәғүәтнамәләрендә барса башҡорттарҙы бер юлы баш күтәреүгә өндәп, быны ваҡытын 1755 йылдың 10 июлендә тип тәғәйен иткән ине һәм шул уҡ ваҡытта икенсе

бер башҡорт муллалары тарафынан шиғырҙар тәртип ителеп, башҡорт араһына таратылды. Ғабдулла мулланың дәғүәтнамәләре менән башҡа муллаларҙың шиғырҙары Башҡортостандың һәр тарафына барып етте вә башҡорттарға ғәҙәттән тыш тәьҫир итте. Башҡорттар ҙа барсаһы аҡрын-аҡрын ғына һуғышҡа йәхүд башҡа төрлө итеп әйткәндә, үҙҙәрен үҙҙәре утҡа һалырға әҙерләнә ине. Ләкин башҡорттар Ғабдулла мулланың һүҙҙәрен тыңлап еткермәнеләр, 1755 йылдың 25 майында уҡ эшкә керештеләр.

Неплюев башҡорттарҙың хәл вә хәрәкәттәренән хәбәр алып Сенатҡа белдерҙе һәм ҡулындағы ғәскәрҙәргә Исаков тигән полковникты башлыҡ итеп тейешле урынға күндерҙе. Шул арала Бөрйән башҡорттары министрҙар тарафынан фарфор яһарға яраҡлы балсыҡ эҙләү өсөн күндерелгән чиновникты үлтерҙеләр вә быға башҡа ни ҡәҙәр чиновниктарҙы бала-сағалары менән һәләк ҡылдылар. Быларға әҙәп биреү өсөн күндерелгән һалдаттарҙың да унауһын үлтереп егерме туғыҙын яраланылар һәм хөкүмәткә ҡаршы тороуҙа үҙҙәренә ҡушылмаған өсөн Ғәбделваһаб исемендәге бер мишәр старшинаһы менән бер мосолман писарҙе лә үлтереп ташланылар. Бынан һуң икенсе ерҙәрҙә лә фетнәләр башланды. Түңгәүер, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ волостарындағы башҡорттар ҙа баш күтәрҙеләр, төрлө бүлектәргә бүленеп, мөһәжир урыҫтарҙы талай-талай, үлтерә-үлтерә Яйыҡ йылғаһына табан киттеләр, бынан маҡсаттары, еңелә башлаһалар ҡасырға еңел булһын өсөн ҡырғыҙ сәхрәләренә яҡынлашмаҡ ине. Был башҡорттарҙың артынан Неплюев бер рота ғәскәр биреп, Бахметьев тигән полковникты күндергән ине. Был ғәскәрҙәр барсаһы бер тар ерҙә башҡорттар тарафынан һәләк ителеп, бары биш ҡәҙәре генә ҡасып ҡотолдо.

Шул ваҡыттарҙа дәүләтебеҙ, олуғ вә ҡурҡыныслы дошманы булған Прусиә короле Фридрих II менән һуғышҡа әҙерләнә ине. Былдай ваҡытта башҡорттарҙың тынысһыҙланыуҙары, әлбиттә, дәүләтебеҙ өсөн күңелле булманы. Шуның өсөн башҡорттарҙы йомшаҡлыҡ менән генә баҫырға, бер ҙә мөмкин булмағанда ғына ҡорал истиғмал итергә тейеш тип,

Неплюевҡа бойороҡ күндерҙе. Был ваҡыттарҙа Неплюевтың хәжәтен үтәрлек ғәскәре юҡ ине. Шуның өсөн иң әүәл ғәскәрен күбәйтеүҙе тейешле күреп, Яйыҡ ғәскәренән мең ҡәҙәрен саҡырҙы һәм Дундукдаш тигән ҡалмыҡ ханына илсе ебәреп, мең ҡәҙәр атлы ҡалмыҡты ярҙамға ебәрергә ҡушты. Ул ваҡыт ҡалмыҡтар менән ҡаҙаҡтар араһында дошманлыҡ бик көслө булғанлыҡтан, ебәргән кешеһенә ханға, ҡаҙаҡтар менән һуғышырға саҡырҙы тип әйтергә ҡушты. Неплюев Ҡазан татарҙары менән ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға ҡушылып китеүҙәрен уйлап, ҡаҙаҡ сиктәренә һәм Ҡазан губернаһының тейешле ерҙәренә ҡарауыл өсөн ғәскәрҙәр ҡуйҙы. Һәм башҡорттарҙы баҫыр өсөн яҡынан ун ике полк ғәскәр һорап алды, үҙенә кәңәш вә мәслихәт өсөн аҡыллы ләмдәрҙән үҙенә ярҙамсылар тәғәйен итеүен үтенеп Сенатҡа мөрәжәғәт итте. Тиҙлек менән ярҙамға Салтыков, Ушаков тигән генералдарҙы күндерҙе. Неплюев, Нурғәле ханға мәктүптәр вә һәдиәләр күндереп, ҡаҙаҡтарҙы башҡорттарға ҡатнашыуҙан тыйып торорға ҡушты һәм бер нисә Ҡарғалы мосолмандарын ебәреп, ҡаҙаҡ араһына дәғүәтнамәләр таратырҙы. Был дәғүәтнамәләре ҡаҙаҡтарҙы тыныслыҡҡа ондәүҙән, башҡорттарҙың баш күтәреүҙәре Ҡөрьән вә шәриғәткә хилаф иткәнлеген бәйәндән ғибәрәт ине. Неплюев шундай мөһим тәдбирҙәр менән мәшғүл икән, башҡорттарҙың барсаһы тиерлек баш күтәрҙеләр, күҙҙәренә күренгән бер урыҫ енесен үлтерҙеләр вә таланылар. Бынан һуң Неплюев Ырымбур ахуны исеменән башҡорт араһына иғландар тараттырҙы. Был иғландарҙа башҡорттарҙы Ғабдулла муллаға эйәрмәҫкә, яҡшылыҡ менән итәғәткә килергә ондәлгән ине. 1755 йылдың 20 сентябрендә падишаһ хәҙрәттәре тарафынан 580-се манифест ҡағыҙы татарсаға тәржемә ителеп, башҡорт араһына таратылды һәм бында фетнәсе башҡорттарҙан ҡайһыһы ҡоралды ташлап килһә һәм ғәфү үтенһә, уға ғәфү булынасағын, ҡаҙаҡ эсенә ҡасып кереп киткәндәре алты ай эсендә ерҙәренә ҡайтып урынлашмаһалар, барса нәмәләре һәм ер вә һыуҙары фетнәгә ҡатнашмаған башҡорттарға бүленеп биреләсәге әйтелгән ине.

Башҡорттарҙың был фетнәләренә типтәр вә мишәрҙәр бер ҙә ҡатнашманылар, бәлки мөмкин ҡәҙәр ҡаршы тороп, хөкүмәткә ярҙам иттеләр, башҡорттарҙың фетнә башлыҡтарын күберәк шулар тотоп бирҙеләр.

Неплюевтың быңдай тәдбирҙәре башҡорттарҙы баҫа башланы. Башҡорттарҙың да бәғзеләре итәғәткә килеп, аҡрын-аҡрын өйҙәренә ҡайтмаға башланылар, ләкин күбеһе итәғәткә килергә разый булмай, Яйыҡ йылғаһы арҡылы Ҡаҙағстанға китеүгә ҡарар бирҙеләр. Ләкин юғарыла башҡорттарҙы ҡаҙаҡтарға ҡатнаштырмаҫҡа ҡарауылдар ҡуйылыуы ҙекер ителгән ине, был ҡарауылдар ни ҡәҙәр сығармаҫҡа тырышһалар ҙа бөтөнләй тыя алмайса илле мең ҡәҙәреһе ҡасып-боҫоп бала-сағалары менән барыбер Яйыҡ йылғаһынан үтеп киттеләр, бик күбеһе шул ерҙә һаҡсылар тарафынан үлтерелделәр, арттараҡ ҡалған башҡорттар йылғанан үтеүҙең ҡыйынлығын күргәс, кире ерҙәренә ҡайтып, Неплюевтан ғәфү үтенделәр. Шулай итеп, башҡорт фетнәләренә ниһайәт бирелде.

Яйыҡ йылғаһынан кисеп киткән илле мең башҡорт ҡаҙаҡ сәхрәһенә барып керҙеләр, ләкин бында кереү менән үҙҙәрен үҙҙәре утҡа һалдылар, сөнки Ырымбур тарафынан барған бәғзе Ҡарғалы мосолмандарының ҡыҙҙырыуы менән ҡаҙаҡтар үҙҙәренә һығынып килгән башҡорттарға һөжүм итеп, ҡатын-ҡыҙҙарын талап алып, ирҙәрен үлтереп төрлөсә хәҡарәт иттеләр. Башҡорттар был рисуайлыҡты күреү менән сыҙаша алмай мөҡабәләгә керештеләр, ләкин, тәбиғи, ҡаҙаҡтар үҙ ерҙәрендә башҡорттарҙы еңеп, ҡайһыһын үлтерҙеләр вә ҡайһыһын йәрәхәтләнеләр вә ҡалғандары көс-хәл менән йәндәрен ҡотҡарып Яйыҡ йылғаһына табан ҡасып киттеләр.

Неплюев үҙенең кешеләре арҡылы был эштәрҙең барсаһынан хәбәр алып торалар ине. Яйыҡ йылғаһы тирәһендәге һаҡсы ғәскәрҙәргә, ҡасып ҡайта торған башҡорттарҙы тыймау менән әмер итте, башҡорттар Яйыҡ йылғаһын кисеп Неплюевҡа килделәр. Неплюев барсаһынан үткән гонаһтарын ғәфү итте.

Башҡорттар ҡаҙаҡтар тарафынан күргән рисуайлыҡтарҙы күтәрә алмай барып үс алырға ҡарар бир-

рҙәләр вә олуғ ғәскәр йыйып, Яйыҡ йылғаһын кисеп, ҡаҙаҡтар өҫтөнә һөжүм иттеләр. Ҡаҙаҡтар иһә башҡорттарҙың килеүҙәрен уйҙарына ла килтермәй, ғөтҡонға алған йәш ҡыҙ вә йәш ҡатындар менән көйеф-сафала ята инеләр. Башҡорттар ҡаҙаҡтарҙың ни ҡәҙәреһен ҡылыстан кисерҙеләр, ни ҡәҙәр ҡатын-ҡыҙҙарын, хайуан вә малдарын талап алып, ерҙәренә ҡайтып киттеләр.

Нурғәле хан был йәберҙәрҙе ишетеп Неплюевҡа кеше ебәрҙе вә был уҫаллыҡтары өсөн башҡорттарға язалар йөрөтөлөүен үтенде, ләкин ҡаҙаҡтар башлап үҙҙәре башҡорттарҙы рисуай иткәнлектән, Неплюев Нурғәле хандың был үтенестәрен иғтибарһыҙ ҡалдырҙы.

Ихтилал башлығы Ғабдулла мулла тигән әҙәм икәне юғарыла ҙекер булынмыш ине. Был әҙәм фетнә баҫылғандан һуң, хөкүмәт күҙенә күренергә ҡурҡып үҙенең шәкерттәре менән бәрәбәр урман араларына ҡасты. Хөкүмәт, был сәләмәт булған хәлдә тотоп алыуҙы истәүенән бер әҙәм был мулланы терелә тә хөкүмәткә тотоп тапшырһа, ул әҙәмгә биш йөҙ һум бүләк биреләсәк тип, 1755 йылдың 11 үктәбрендә һәр тарафҡа иғландар таратты. Былай ҙа булмағас, был мулланы тотоп хөкүмәткә тапшырған әҙәмгә мең һум бүләк биреләсәк тип, 1756 йылдың 1 апрелендә яңынан иғлан иттелде.

Шул уҡ сәнәлә 8 августа Уфанан йөҙ илле саҡрым мосафәдә был мулла Сөләймән нам мишәр старшинаһы тарафынан ҡулға алынды. Шулай итеп, был мулла күп ваҡыттар урман араларында ҡасып йөрөй торғас, аптырап Аҙаҡ исемле ҡәрйәлә Ишназар исемле әүәлдән белеш кешеһенә килмеш ине. Был әҙәм өйҙә булмағас, ни маҡсат менәндер шул илдең мәсетенә керҙе. Иттифаҡи булараҡ, шул ваҡытта бер әҙәмдең әйбере юғалып, шул әйберҙе эҙләргә тентеү сыҡмыш ине. Шул ваҡытта тентеүгә сыҡҡан әҙәмдәргә нисек булһа ла мәсеттә бер әҙәм барлығы мәғлүм булып, ҡараҡ булыу ғоманы менән бәғзеләре ҡарарға барҙы. Был меҫкен, кеше килә башлағас, ҡурҡып, ҡырға табан сығып йүгерҙе. Сөләймән нам старшина атҡа менеп ҡыуып тотто һәм кем икәнен бик тиҙ аңлап,

оло бер ҡарауыл менән Уфаға күндерҙе. Уфанан Ырымбурға, унан Петербургка ебәрелде. Петербургта эше бағылдыҡтан һуңра, «Шлиссельбург» крепосына ғүмере буйына хибес ителеү менән хөкөм ителде. Был крепоста биш йыл ҡәҙәр торғандан һуң, һаҡсылар йоҡлаған ваҡытта ҡасып сығып, балта менән бер юлы биш һаҡсы һалдаттарының баштарын ярып үлтерҙе. Шул ваҡытта уҡ үҙе лә шул крепостың янында донъянан үтте. Ләкин үлеменә сәбәп ни булғаны асыҡ мәғлүм булманы. Зирә, тәнендә һис бер йәрәхәт әҫәре юҡ ине. Һуңынан крепостың арт тарафында бер соҡор ҡаҙылып, кәүҙәһе шул соҡорға ырғытылды. Тотоп хөкүмәткә тәслим иткән Сөләймән аға ла вәғәҙә ҡылынмыш мең һумды алғансы үлеп китте. Үҙенән һуң ун дүрт йәшлек өлкән улы Петербургка саҡырылып, унда императрицаның үҙе тарафынан оло илтифат вә ихсандар күреп, мең һум аҡсаны алып ҡайтты.

# ГЛОССАРИЙ

**ада ҡылыу** — үтәү

**баб** — тема, бүлек, әлкә
**бәдәнле** — тәнле
**бирге** — налог
**бәшәнәк** — печенег
**бәдәүиәт** — күсәбәлек
**бәрәбәр** — тигеҙ, бер тигеҙ
**би мәғәнә** — мәғәнә менән
**бәғзе** — ҡайһы бер

**вәли** — хужа
**вустанан** — уртаһынан
**ваҡаиғ булыу** — барлыҡҡа килеү
**васита** — сара

**гәһан** — ҡай саҡта
**ғариз итәғәт** — буйһоноу
**ғарыз иткелде** — еткерелде
**ғәнимәт** — трофей
**ғаҡәбәт** — ахырҙа
**ғәһед** — ант
**ғасый** — баш күтәреүсе, буйһонмаусы
**ғадәд** — һан; дана, нөсхә
**ғөләмә** — ғалим, уҡымышлы кеше
**ғәрби** — көнбайыш
**ғоман** — фараз, ихтимал
**ғәләбә** — еңелеү
**ғәҙәлиәт** — ғәҙеллек

**ғимарәт** — ҡаралты, төҙөлөш, ҡоролма бина
**дәғүәтнамә** — иғланнамә, саҡырыу
**диҡҡәт** — иғтибар
**дүндеҙәр** — ҡайттылар

**жөз** — өлөш
**жаһләнә фекерҙә** — наҙан фекерҙә
**жәнүб-ғәрби** — көньяҡ-көнбайыш

**зоһур** — беленеү
**ҙекер итеү** — телгә алыу
**затән** — шулай уҡ
**заләләт** — яһиллыҡ
**задакан** — дворян
**заиғ** — әрәм
**зарфында** — дауамында

**ижарә** — аренда, ваҡытлы файҙаланыу
**ихтилаф** — айырма
**истиғмал** — файҙаланыу
**иғмал әрбәғә** — сағыштырмалы геометрия
**ифрәнж** — европалы
**ихсандар** — яҡшылыҡтар
**инабат** — ышаныс
**ибтидаи** — башланғыс

**истиклал** — ireклек, бойондороҡһоҙлоҡ
**истәгән** — теләгән
**иттифаҡ** — фекерҙәшлек, ризалыҡ, союз
**иттифаҡи** — осраҡлы
**иғтикад** — инаныу, ышаныу
**ижтиһад** — ниәт, тырышлыҡ
**иштираҡ итте** — ҡатнашты
**йәхүд** — йәки
**йөмлә** — иҫәптә, һәммә

**камилән дәхил** — тулы эске
**ҡәүем** — халыҡ
**кифая** — етерлек
**кифалаттарына** — ҡарамағына
**ҡасд** — ниәт, теләк, маҡсат; яуыз ниәт
**китәреү** — ҡырыу

**лөғәт** — тел
**лисан** — тел
**лазым** — кәрәк
**ләфз** — һүҙ
**ләзиз** — тәмле
**лаихә** — проект

**мөҡабәлә** — еңелеү
**маддә** — пункт
**мөсәүил** — яуаплы, бурыслы
**мөтталиғ** — ирешкән
**маниғ булынды** — тыйылды
**мәбади һәндәсә** — практик геометрия
**мөттафиҡ** — союздаш
**мәүкиғ** — урын, берәй эш урыны, уңай ваҡыт
**мәнсуб** — ҡараған
**мәҡбул** — ҡабул
**мөҡәфәт** — ярашлы
**мәдех** — маҡтау
**мөҡәддәм** — элек, борон
**мөхәсәрә хаттары** — ҡамау һыҙыҡтары
**мәзлум** — иҙелгән, йәберләнгән
**малик** — эйә
**мәжрүх** — яраланған
**мөләхәҙә** — иғтибар, диҡҡәтләү
**мөҙҙәт** — осор, миҙгел
**мәдфүн** — ерләнгән

**тәбәғә** — ҡул аҫтындағы халыҡ (подданные)
**тәнәссер** — суҡынған
**тәҡдир итеп** — күреп
**тәжәүез** — баҫып инеү
**тәдбир** — тырышлыҡ, сара
**тәрәҡҡи** — прогресс, үҫеш
**таифә** — йәмәғәт, халыҡ төркөмө, ҡәбилә
**тижарәт** — сауҙа
**тәклиф итеү** — баҫыу, көсләү
**табиғ** — буйһоноусы (подданство)
**тәбәғәлек** — подданство
**тәшәккер** — рәхмәт
**тариҡ** — юл, ысул
**тәужиһ** — иғтибар
**тарз** — ысул
**тәшрих** — комментарий
**тәхминән** — яҡынса
**тәсдиҡ ҡылыу** — раҫлау
**мөнкариз** — һәләк булыу, юҡҡа сығыу

**муафиҡ** — маҡсатҡа ярашлы
**мәбәни, мәбнә** — нигеҙләнгән, ҡоролған
**мәзаж** — тәбиғәт
**мөәррих** — тарихсы
**монасип** — бәйле
**мөҡәбәрәләр** — ҡәберлектәр
**мәғишәт** — йәшәйеш
**мосәфәдә** — йыраҡлыҡта, арала

**мөжәһир** — күскенсе, эмигрант
**мөбтәлән булдылар** — бәхетһеҙлеккә дусар булдылар
**мәғруф** — билдәле
**мәзамин** — хурланған
**мәүағиз** — өгөт
**мәғҡүл** — урынлы, аҡыллы

**ғилме нәсәб** — этнография
**нәсәбән** — нәҫеле буйынса
**нәбатат** — ботаника
**наиб** — ярҙамсы
**низам** — нигеҙ, закон
**низамлы** — регуляр
**нәсаихкә мөштәмәл** — нәсихәттәр эсенә кергән

**пот** — идол

**ратубәтле** — еүешле, дымлы
**риғәйә** — ололаусылары
**рибасы** — процент алыусы
**риәсәте** — етәкселеге, рәйеслеге

**саикә** — йүнәлтеүсе
**садиҡ** — дуҫ, ышаныслы
**садаҡәт** — ышаныс
**сахих** — ысын

**тәфтишкә керешеү** — тикшереү
**тәғзимләү** — ололау
**тәсмиә ителеү** — аталыу

**төрбә** — мавзолей
**тәдбир вә шәжәғәт** — тейешле сара һәм батырлыҡ
**ғилем тәхсил итеү** — ғилем алыу

**фирҡә** — төркөм, партия
**фасиҡ** — боҙоҡ, насар

**хәҡарәт итеү** — түбәнһетеү, кәмһетеү, йәберләү
**хәндәҡ** — соҡор, канау
**хирыс** — ҡомһоҙ
**химая** — яҡлау
**хөләсә** — ҡыҫҡаһы, резюме
**хибесхана** — төрмә, зиндан
**халис** — саф; ысын, ҡатнашмаған

**шәһаҙәтнамә** — танытма
**шәрех** — комментарий
**шимал** — төньяҡ

**ясус** — шымсы
**ядына** — иҫтәлегенә

**әтраф** — тарафтар

**һәҙер** — бушҡа әрәм булыу
**һәйәт** — комиссия
**һәдиә** — бүләк

**үәзендәр** — йүнәлештәр
**үәжеһ** — йүнәлештәр, юлдар

## БАШҠОРТ ҠӘҮЕМЕНЕҢ ФӘЛӘКӘТЕ

Рычков үә ғәйреләрҙең хәбәрҙәренә күрә, 1735—1740 йылдарҙа 700 миҡдарында башҡорт ҡәрйәһе ут менән яндырылмыш, 3300 ҡәҙәре башҡорт каторгаға ебәрелмеш. 8200 ҡәҙәре ҡатын-ҡыҙ, бала-саға рус байҙарына бүленеп бирелеп, уларға ҡол һәм йәриә хөкөмөнә ҡылынмыш, 16893 ҡәҙәре башҡорттоң хөкөм менән баштары киҫелмеш. Һуғыш ваҡытында тәләф булған башҡорттар был иҫәпкә дахилдыр. Быларҙан бөтөнөһө йөҙ меңдән артыҡтыр. Халыҡтың үрсеү ҡағиҙәһенә бинаән ошо йөҙ мең башҡорттан бөгөн бер миллион башҡорт булыр ине, был иһә Ҡаратағ хөкүмәтенең бөтөн халҡының өс-дүрт миҫалына бәрәбәр киләлер.

Шура. 1910. № 21. 666-сы бит

*Абдрахман ФӘХРЕТДИНОВ*

# *БАШҠОРТ ТАРИХЫ*

*Өфө – 1925*

## Бик боронғо замандарҙа кешеләр нисек торғандар? Хәҙер вәхши тормошло пишәр халҡы нисек йәшәй?

Беҙҙән ун мең саҡрымдан да алыҫыраҡта — Америка өлкәһендә — Утлы ер тигән бер утрау бар. Был утрауҙа пишәр тигән бер халыҡ тора. Быларҙың һаны бик аҙ — өс меңгә лә тулмай. Пишәрҙәр уҡыу-яҙыу белмәйҙәр, әлифбалары ла юҡ. Улар йорттар һалмайҙар, мал да аҫрамайҙар, иген дә сәсмәйҙәр, хөкүмәттәре һәм идаралары ла юҡ; һәр кем үҙе теләгәнсә йәшәй бирә. Көн һыуыҡайып китһә, йәки ямғырҙар яуа башлаһа, улар башҡа йәнлектәр кеүек, тау тишектәренә, йәғни ағас ҡыуыштарына ышыҡланып торалар, кейем киймәй йыл әйләнәһе яланғас йөрөйҙәр. Бары ҡыш көнө һыуыҡ көндәрҙә генә берәр йәнлек тиреһе менән ҡапланалар.

Былар төрлө емеш, үлән һәм тамыр йыйнап, баҡа, кеҫәртке, йылан кеүек төрлө хәшәрәттәрҙе тотоп, шулар менән тамаҡ туйҙыралар. Әгәр ҙурыраҡ берәр йәнлек тоторға кәрәк булһа, йыйналышып уны һәр яҡтан ҡамап алып, таш һәм күҫәк менән бәреп төшөрөргә тырышалар. Ҡайһы берҙәрендә осона үткер балыҡ һөйәге ултыртҡан уҡ менән яндар ҙа була. Пишәрҙәрҙең теле бик ярлы, телдәрендә һүҙ төрө йөҙҙән аҙға арта. Быларҙа һанау ҙа юҡ. Бер, ике, өс тигән һандар булһа ла унан артығын һанамай, бармаҡ менән генә күрһәтәләр, йәиһә күп тип кенә йөрөтәләр.

Тормоштары ошолай түбән, белемдәре бик аҙ булған халыҡтар күптән түгел Африка өлкәһенең уртаһында һәм Австралия өлкәһендәге ваҡ утрауҙарҙа

бик күп ине. Хәҙер былар аҡрынлап ҡырылып бөтөп баралар. Иҫән ҡалғандары башҡа халыҡтар менән ҡатнаша, уларҙан өлгө ала, тормош рәүештәрен яҡшырталар, сит телдәрҙән һүҙҙәр алып, телдәре лә байый, белемдәре лә арта.

Бына ошолай тормоштары бик түбән булған халыҡтарға «кейек» (вәхши) халыҡ тип йөрөтәләр.

Бик боронғо менән бер нисә мең йылдар элек бөтә донъя халҡы ошолар кеүек вәхши булып йәшәгәндәр.

## Бик боронғо халыҡтарҙың тормошо

Хәҙер ғалимдар төрлө тау мөғәрәләренән һәм ер өҫтынан бик боронғо ваҡыттарҙа донъяла торған кешеләрҙең һөйәктәрен, былар янында булған һәр төрлө ҡорал һәм ҡатып ҡалған аҙыҡтарын аҙлап табалар. Быларға ҡарап, уларға хәҙер төрлө урындарҙа йәшәгән кейек халыҡтарҙың тормоштары, ҡиәфәттәре һәм һәр төрлө нәмәләре менән сағыштырып, боронғо халыҡтарҙың нисек йәшәгәнлектәрен асыҡ белеп була.

Бик боронғо халыҡтар менән күп мең, йылдар элек былай йәшәгәндәр: кешеләр ҡайһы бер йәнлектәр кеүек, урмандарҙа көтөү-көтөү булып йөрөгәндәр. Уларҙа хәҙерге кеүек семья (ғаилә) булып тороу булмаған, һәр бер көтөү үҙе бер айырым ғаилә һаналған; унда тыуған балалар шул көтөүҙең уртаҡ балалары булып йөрөгәндәр. Һәр бер көтөү аҙыҡты бергәләшеп уртаҡ йыйнаған, һис бер нәмә һинеке, минеке тип бүленмәгән, йәғни айырым милек булмаған. Бындай боронғо коммунизм тормошо, йәғни аҙыҡты берләшеп йыйнау, берләшеп балыҡ һәм йәнлек тотоу, уртаҡ ашау әле ҡайһы бер вәхши халыҡтарҙа һаҡланып килә.

## Бик боронғо тел һәм мәҙәниәт

Эт дошманға өргәндә бер төрлө, хужаһы янында юхаланғанда икенсе төрлө, ҡыйнағанда өсөнсө төрлө тауыш сығара. Шуның кеүек башҡа йәнлектәр ҙә тауыштарын төрлөсә үҙгәртеп, бер-береһенә үҙҙәренең теләктәрен аңлаталар.

Кеше башҡа йәнлектәр араһында үҙенең кәүҙәһенә сағыштырып үлсәгәндә, мейе иң ҙур бер хайуан булғанлыҡтан, аҡыл тураһында башҡа йәнлектәрҙән бик күп өҫтөн тора. Шулай уҡ ул төрлө-төрлө тауыш сығарыуға башҡа йәнлектәрҙән оҫтараҡ. Шул сәбәпле бик боронғо халыҡтар төрлө ваҡытта төрлө тауыш сығарып, бер-береһенә үҙҙәренең теләктәрен яҡшы ғына аңлата алғандар.

Шул ваҡыттарҙа кешеләрҙең тормошо бик ябай, кәрәк-ярағы бик аҙ булып, бер-береһенә аңлатырға тейешле теләктәре лә (маҡсаттары) күп булмаған. Шул сәбәпле бындай тауыштар (хәҙергесә әйткәндә һүҙҙәр) бик аҙ, тел бик ярлы булған. Бындай ярлы телдәр хәҙер ҙә вәхши халыҡтар араһында бар, быларҙа икмәк, тимер, шырпы, быяла кеүек һүҙҙәр һәм ашлыҡ исемдәре лә юҡ.

Боронғо кешеләрҙә хөкүмәт тә булмаған, кейек ҡаҙ көтөүе ҡарт бер ата ҡаҙ артынан эйәреп йөрөгән кеүек, кеше көтөүе лә арала тәжрибәлерәк бер ҡарт (аҡһаҡал) артынан эйәреп йөрөгән.

Ул ваҡыт халыҡ яҙыу-һыҙыу, дин, йорт һалыу, иген сәсеү, мал аҫрау, аш бешереү кеүек нәмәләрҙең береһен дә белмәгән. Ҡоралдары бары ағастан һындырып алған күҫәк менән ырғытырға уңайлы таш ҡына булған. Табаҡ-һауыт, өй йыһазы кеүек нәмәләрҙе яһай ҙа белмәгәндәр; кәрәге лә булмаған.

## Ырыуҙар төҙөлөү

Кеше көтөүҙәре үҫә-үҫә бер ерҙә генә барыһына ла туйынырлыҡ аҙыҡ табылмай башлағас, аҡрын-аҡрын ситкә таралғандар. Сит ерҙәрҙә тәбиғәт башҡа-сараҡ булып, был арҡала халыҡтың тормошона байтаҡ яңы үҙгәрештәр керә. Мәҫәлән, яңы йәнлек һәм үләндәр табылып, уларға яңы исемдәр ҡуша башлай.

Һыуығыраҡ яҡҡа киткән халыҡтарҙа һалҡындан һаҡланыу өсөн берәр нәмә менән ҡапланырға кәрәк булып, был турала яңы һүҙҙәр сыға башлай. Ҡар күрһәләр, уға ла исем килеп сыға. Шулай итеп, бер-береһенән айырылышып ике яҡҡа киткән ике көтөүҙең, бер аҙ ваҡыттар үткәс яңынан бергә осрашһалар,

бер-беренең телен бик ҡыйын аңларлыҡ хәлгә киләләр. Бер-береһенән тағы ла алыҫ китеп, аҙаҡ яңы ерҙә осрашмай йәшәгән халыҡтарҙың телдәре бара-бара шулай үҙгәрелеп, бер-беренән бөтөнләй башҡаса булып, бөтөнләй аңламаҫлыҡ хәлгә киләләр. Араларында бик борон замандан ҡалған уртаҡ һүҙҙәр бик һирәк осрай. Бер тирәләрәк йыйылып йәшәп теле бер төрлө ҡалған ҙур көтөүҙәр үҫә-үҫә ырыу атала башлағандар. Шулай итеп, донъяның төрлө яғында телдәре бер-беренә башҡасараҡ бик күп ырыуҙар төҙөлгән.

Башта һәр бер ырыуҙа бөтә кешеләр бер семья һаналып, уртаҡ аҙыҡ йыйнағандар, дошмандан берләшеп һаҡланғандар, берләшеп тамаҡ туйҙырғандар, балалар ырыуҙың уртаҡ балаһы булған, ырыу тәжрибәле аҡһаҡал артынан эйәреп йөрөгән; ҡыҫҡаһы, ырыу боронғо коммунизм тормошо менән йәшәгән. Бара-бара ҡайһы бер ырыуҙар бик үрсеп, ҙурайып китеп, үҙҙәре бер нисә ырыуға бүленгәндәр. Ләкин былар үҙ-ара ҡатнашыуҙарын юғалтмау сәбәпле телдәре лә, тормоштары ла бер-беренә яҡын булып, быңдай ырыу йыйнаҡтарына ҡәбилә (племя) тиҙәр.

Бынан ике-өс мең йылдар элек, хәҙерге Себерҙең Алтай һәм Саян тауҙары тирәләрендә һәм Ҡытай мәмләкәтенең төньяҡ өлөштәрендә тел һәм ҡиәфәттәре, тормош рәүештәре бер-беренә бик оҡшаған шундай күп ырыу һәм ҡәбиләләр тороп, быларға төрк ырыуҙары, уларҙың телдәренә төрк теле тип йөрөткәндәр. Быларҙың төньяғында тел һәм тормоштары бер аҙ башҡасараҡ булған фин ырыуҙары, көньяҡтарында ҡытай һәм монгол халыҡтары торған. Хәҙерге башҡорт халҡы шул төрк ырыуҙарының балалары булып, быларҙың бик боронғо төп иле шундалыр.

## Боронғо халыктарҙа ата һәм әсә

Йәнлектәрҙең һәр береһендә балаға атаға ҡарағанда, әсә яҡыныраҡ була. Баланы әсәләр имеҙеп, тәрбиәләп үҫтерәләр. Ата йәнлектәр күп ваҡытта балаларын ташлап китәләр. Шулай итеп, семья әсә менән балаларҙан ғына төҙөлөп ҡала. Шуның кеүек

бик боронғо кешеләрҙә балалар ырыуҙың уртаҡ балаһы һаналһалар ҙа күберәк әсәләре тирәһендә йыйылып, балаларҙы фәләндең (ҡатындың) балаһы тип йөрөткәндәр. Был ғәҙәттең ҡалдығы хәҙер ҙә Азия уртаһында Тибет тигән мәмләкәттә юғалып бөтмәгән: унда балаларҙың кем балаһы булыуын әйткәндә атаһы менән түгел, бәлки, әсәһенең исеме менән йөрөтәләр.

## Боронғо халыҡтарҙа игенселек нисек башланған?

Боронғо кешеләр күберәк йыртҡыс йәнлектәрҙән ҡурҡып урмандарҙа ағас баштарында, ағас ҡыуыштарында һәм тау мөғәрәләрендә тороп, кәрәк булғанда унан сығып, аҙыҡ йыйнағандар. Былар ситтән орлоҡ йыйнап ҡайтҡан мәлдә, ҡайһы бер орлоҡтарҙың юлда ҡойолоп ҡалып киләһе йылда был урындарҙа орлоҡ шытып, тишеп сығып үҫкән. Бындай хәлде күп тапҡыр һынап күргәс, күп кешеләр орлоҡ эҙләп алыҫ ерҙәргә йөрөмәҫ өсөн, үҙҙәре торған урын тирәһендә ергә орлоҡ һибеп ҡалдыра башлағандар. Орлоҡтар йомшаҡ ергә төшһә яҡшыраҡ үҫкәнлеген күргәс, күп кешеләр ерҙе ҡаҙаҡ менән тырмап йомшартырға тотонғандар. Шулай итеп, донъяла иген сәсеү башланған.

Хәҙер төрлө тау мөғәрәләрен һәм ер аҫтын ҡаҙығанда иң аҫта табыла торғаны — ҡатып ҡалған орлоҡтар. Шуға ҡарап халыҡтың иң башлап үҫтергән ашлыҡтары тары булырға кәрәк, тиҙәр. Арыш, һоло кеүек ашлыҡтар хәҙер донъяның төрлө яҡтарына таралған төрлө төрк ҡәбиләләрендә төрлөсә аталғанда, тары һүҙе барыһында ла уртаҡ булыу ҙа быны күрһәтә. Төрк халыҡтарының күбеһендә тары һүҙе менән баҫыу һәм сәсеү тураһында ҡулланылған һүҙҙәр араһында ҙур бәйләнеш бар. Мәҫәлән, борон замандарҙа торған уйғыр төрктәр теләндә баҫыуҙы тарҡ, ашлыҡ сәсеүҙе тарҡатыу тигәндәр.

Алтай һәм теләүет төрктәре әле лә ер һөрөүҙе ҡара тараныу тиҙәр. Хәҙер Тубыл яҡтарында йәшәгән төрктәр менән, бынан бер мең йылдар элек, хәҙерге Украинала йәшәгән ҡоман төрктәре баҫыуҙы таралыу тигәндәр. Анатолий төрктәре әле лә тарла тиҙәр.

Боронғо төрк һәм татарҙарҙа күп ер биләгән байҙарҙы тархан тигәндәр. Баҫыу хужаһы тигән һүҙ була.

Халыҡтың былай ашлыҡ сәсә башлауҙары уларҙың хәлен элеккенән күп еңеләйткән, алыҫ ерҙәрҙә ем эҙләп йөрөүҙән ҡотолғандар, халыҡ туҡ тора башлап, аслыҡтан ҡырылыуҙар кәмегән.

## Ҡорал яһау, мал аҫрау нисек башланған?

Боронғо халыҡтар төрлө йыртҡыс йәнлектәрҙән һаҡланыр һәм үҙҙәре төрлө йәнлекте бәреп үлтереп ашар өсөн ҡорал ҡулланырға тейешле булғандар. Башта ҡорал ябай ағас киҫәге менән таш ҡына булған. Ләкин осраған бер күҫәк һәм таш менән йәнлеккә барыу һәм һуғыу уңайһыҙ булғас, халыҡ уларҙы һуғырға һәм бәрергә уңайлы һәм йәнлекте яраларлыҡ үткер итеп яһарға тырышҡандар. Ул ваҡытта бысаҡ, балта кеүек тимер-томор ҙа булмаған. Шул сәбәпле халыҡ үткер ҡырлы таш табып, уның менән ҡыра-ҡыра күҫәкте һуғырға уңайлы суҡмар иткәндәр. Бәрә торған таштарҙың ситтәрен үткерләгәндәр. Шулай ҡырып яһалған нәмәләр ҡорал тип аталған. Бара-тора ҡайһы бер кешеләр суҡмар башына таш йәки үткер балыҡ һөйәге ҡыҫтырып, бәйләп ҡуйып, ҡоралды тағы ла яҡшыртҡандар.

Кешеләр, башҡа йәнлектәр кеүек, шәп йүгерә алмай. Шул сәбәпле башҡа бер-бер йәнлекте тоторға кәрәк булһа, бик күп халыҡ йыйналып, йәнлекте төрлө яҡтан ҡамап, ҡыҫырыҡлап тоторға тейешле булғандар. Шундай һунар ваҡытында ҡайһы бер кешеләр ҡайһы бер йәнлектәрҙең балаларын терeләй тотоп, үҙ мөғәрә йәки ҡыуыштарына алып ҡайтҡылап, һаҡлап тороп, йәнлек тота алмай ас ҡалған ваҡытта ғына уларҙы үлтереп ашай башлағандар. Бының тормош өсөн уңайлылығын күреп башҡа кешеләр ҙә бынан өлгө алып, кейек йәнлектәрҙе ҡулға эйәләтә башлағандар.

Шулай итеп, халыҡта мал аҫрау башланған. Башта былар бары ит һәм тире өсөн генә аҫраһалар ҙа бара-бара халыҡ уларҙың һөтөн һауып, үҙҙәренә атланып, егеп йөрөй ҙә башлаған.

Донъяла иң элек ҡулға өйрәтелгән йәнлек — эт (боронғо төрктәрҙәге төп аҙыҡтың исеме булған ит һүҙенең эт һүҙенә оҡшауы ла быны күрһәтә), унан һуң һыйыр, кәзә, һарыҡ, унан һуң ғына ат.

Ҡорал яһау, иген сәсеү һәм мал аҫрау халыҡтың тормошон элеккенән бик яҡшырта, тормошто үҙгәртә, шуның менән бергә халыҡта хосуси (частный) милек тигән нәмәне тыуҙыра. Сөнки был эштәргә һәр кемдең үҙ көсө генә тотолоп, һәр кем үҙе яһаған ҡоралды үҙе генә ҡулланырға, үҙе сәсеп үҫтергән игенде ашарға, үҙе ҡарап аҫрап үҫтергән малдан үҙе генә файҙаланырға тырыша башлай. Балалы ҡатындар һунарсылыҡҡа оҫта булмайынса, балаларын туйындырыу өсөн иген сәсеү һәм мал аҫрауға бигерәк мохтаж булғанлыҡтан, был эштәрҙе башлап алға ебәреүселәр — ҡатындарҙыр. Хәҙер ҙә Австралия өлкәһендәге күп вәхши халыҡтар балыҡ һәм йәнлектәрҙе берләшеп тотоп уртаҡ ашағанда, үҙҙәре яһаған ҡорал менән үҙҙәре аҫрап үҫтергән йорт хайуандарын үҙе айырым биләй.

## ·Ут, табаҡ-һауыт һәм йорт йыһазы

Бик борон заманда халыҡ ут яндыра белмәгән, шул сәбәпле аҙыҡты бешермәй ашаған. Бара-тора халыҡ йәшен һуғып ут сығып янған урмандарҙа янып, бешеп ҡалған йәнлектәрҙең итен ашап, уның тәмлерәк һәм ашарға еңелерәк булыуын аңлағас, шундай урындарҙан утлы күмер һәм киҫәүҙәр алып ҡайтып, аш бешерергә өйрәнгәндәр. Бындай утты бик-бик һаҡлап, мәҫәлән, утлы күмерҙе көл аҫтына күмеп һәм ваҡыт-ваҡыт уға ағас һалып яндырып торғандар.

Һуңынан халыҡ ағастан ҡырып ҡорал яһай башлағас, бик ҡоро ике ағасты бер-береһенә оҙаҡ ышҡып торғас, ағастың ҡыҙып яна башлауын күреп, ошо юл менән ут таба башлағандар. Бындай ғәҙәт әле вәхши халыҡтар араһында һаҡлана. Һуңғараҡ халыҡ таштан ҡорал яһай башлағас, таш араларынан тимер һәм саҡматаш табып, быларҙың нимә икәнлектәрен белмәйенсә, бер-береһенә һуға-һуға тигеҙләргә тырышҡан мәлдә ут осҡондары сығып, бик ҡоро үләнгә йәки

серек ағаска төшкәс, ут кабынғанлығын күреп, утты сакматаш менән яндырырға өйрәнгәндәр.

Халыктар урман һәм яланды ағас тамыры — орлок, вак йәнлек тотоп кына ашап йөрөгәндә уларға аҙык йыйнап һакларға табак-һауыт кеүек нәмәләрҙең кәрәге булмаған, улар уны яһай белмәгәндәр. Иген сәсеү, мал аҫрап унын ит-һөтөн һаклау, аш бешереү кеүек эштәр башланғас, халыкка һауыт-һабалар кәрәк булған. Башта һауыт-һаба урынына ташбака кабығын һәм кош күкәйе, кабак, карбуз кабығы кеүек нәмәләр кулланған, бара-тора халыкта һунар арткас, ағас һәм таштың уртаһын кырып, уйып йәки тиренән тегеп табак-һауыт һәм турһык яһай башлағандар. Аш бешергәндә кабак кабығы кеүек нәмәләр янмаһын өсөн унын эсен-тышын мәте менән каплағандар. Был мәте утта бешеп балсык сүлмәккә әйләнгән, ошоно күреп халыкта мәтенән сүлмәк яһау башланған. Был вакытта халыкта һөнәр арта башлай; халык күҫәк башына осло таш һәм балык һөйәге куйып һөңгөләр, ян-ук, таш балта һәм бысак, шулай ук орлокто иҙеп йомшартыр өсөн кул тирмәндәре яһарға керешәләр. Хәҙер мөғәрә һәм ер аҫтынан шул вакытта яһалған таш нәмәләр һәм коралдар бик күп табылып, музейҙа һаклана. Былар араһында тимер-томор, бакыр кеүек нәмәләр осрамай. Бынан, ул вакытта халык мәғдәнде (тимер кеүек нәмәләрҙе) белмәгәнлек аңлашыла.

Корал эшләү бер аҙ якшырғас, элек урмандарҙа ағас кыуыштарында һәм тау мөғәрәләрендә генә торған кешеләр, әгәр ундай уңайлы урын тапмай башлаһалар, ерҙе уйып (каҙып) өҫтөн каплап яһалма мөғәрә каҙып, шунда тора башлағандар. Бара-тора тупрак һәм ағастарҙан уйып кыуыш яһарға керешкәндәр. Дошмандарҙан һакланыу һәм һунарсылыкта бер-беренә ярҙамлашыу анһатырак булһын өсөн һәр бер ырыу бер тирәгәрәк йыйылып башкорттар ауылға әйләнгәндәр. Боронғо төрк телен тикшереүсе ғалимдар башта ерҙе, уйыу һүҙенән — өйөү һүҙе килеп сыккан, унан өй һүҙе килеп сыккан тиҙәр.

Ошолай итеп, кешеләр үҙ тормоштарын яҡшыртыу өсөн төрлө нәмәләр яһап, иген сәсеп, мал аҫрап тора башлағас һәм был арҡала хосуси милек тыуғас халыҡтың тормошона бик ҙур үҙгәрештәр керә. Хәҙер халыҡ элекке кеүек бөтөнөһө бергә уртаҡ көтөү булып йәшәмәй, һәр кем үҙ кәрәк-ярағын үҙе ҡарай, үҙе айырым эшләй башлай. Бындай эштәргә бер генә кеше өлгөрә алмағас, һәр бер кеше үҙ тирәһендә күберәк эш көсө йыйнарға тырыша. Көслөрәк ырыуҙар көсһөҙөрәк ырыуҙарға һөжүм итеп, уларҙы әсир итеп алып ҡайтып, үҙҙәренә эшләтә башлайҙар. Был ҡолдар ҙа башҡа йәнлектәр кеүек, үҙҙәрен терелəй тотоп алып ҡайтҡан кешеләрҙең хосуси милке булалар. Башта күберәк ҡолдар — ҡатын һәм ҡыҙҙар. Сөнки уларҙың байтаҡ ғүмерҙәре бала табып, бала аҫрап үткәнлектән, улар ҡорал яһарға, һуғышҡа оҫтара алмағандар, хәлһеҙерәк булғандар. Ир ҡолдар әсирлектән гелән ҡасып китә алғандар — ҡатындар йөклө булыу — яңы йәш балаһы булыу арҡаһында ҡасып китмәгәндәр.

Һәр бер ырыуҙа иҫкенән, халыҡ көтөү генә булып йәшәгән ваҡыттан ҡалған ғәҙәт буйынса, ырыу ағзаһы булған һәммә ҡатын-ҡыҙҙар тулы ирекле булып, теләһә кем менән торһалар, шул сәбәпле семья тигән нәмә булмаһа, был ситтән тотолоп ҡайтҡан ҡатын-ҡыҙ ҡолдар (кәнизәктәр) гелән хужалары янында ғына тороп, уларға ғына эшләгәндәр, уларға ғына ҡатын булып торғандар.

Шулай итеп, донъяла семья тормошо башлана. Ҡатын-ҡыҙҙың быға хәтле ирҙәр ҡулында айырым ҡол булып тороуҙары — бына шул ваҡыттан ҡалған бер ғәҙәт.

Бындай кәнизәктәрҙең балалары ла элекке кеүек ирекле әсә балаһы булмаған, бәлки, был кәнизәктең хужаһы булған иренең малы һаналып, уның янында торған, уға эшләгән, был арҡала балалар ата исеме менән йөрөтөлөү һәм бер кеше булһа, уның бөтөн малы ошо балаларға ҡалыу (мираҫ ғәҙәте) башлана.

Башҡа ырыу һәм ҡәбиләләрҙән ҡатын-ҡыҙҙы урлап алып ҡайтып өйләнеү ғәҙәте һуңғы ваҡытҡа хәтле Африка һәм Азияла байтаҡ халыҡтарҙа һаҡлана ине. Был ваҡыттан ҡалған бер ғәҙәт башҡорттар араһында ла һаҡланып килде: кейәү килгәндә ҡыҙҙы йәшереү, борон замандарҙа ситтән егет һәм ирҙәр килһә, ҡыҙҙарҙы урлап китмәһен тип бөтә ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәшергәндәр. Ҡайһы бер ваҡыттарҙа берәүҙең малы аҙ булып, ситтән ҡолдарҙы (ҡатын-ҡыҙҙарҙы) кәрәгенән күберәк алып ҡайтһа, быларҙы малы күп, ләкин ҡолдары аҙ кешеләргә малға алыш-ҡандар. Ҡыҙ һатыу — ҡалым алыу ғәҙәте лә шул ваҡыттан ҡалған насар бер ғәҙәт. Халыҡтың былай ырыу булып йәшәүҙәрен патриархальный тормош тиҙәр.

## Тормош төрлөләнеү

Халыҡтың тормошо торған еренең тәбиғәт һәм һауаһына ҡарап йөрөй. Үләнгә бай киң яландарҙа мал аҫрап, үрсетеп туйҙырыу еңелерәк булып, бындай урындарҙа халыҡ күберәк мал аҫрау юлына керә. Ләкин күп малды гелән бер урында ғына утлатып тотоп булмай, бер урында сүп бөткән, тапалған һайын мал үләне мулыраҡ ергә күсә бара, мал артынан хужалары ла күсә баралар. Халыҡ үҙе менән йорт һәм йыһаздар ҙа күсереп алып барырға тейеш булыу сәбәпле, бындай халыҡтар ер ҡаҙып, йорт-ҡаралты һалмайҙар, төрлө еңел һүтеп күсереп була торған ҡыуыш һәм тирмәләр генә һалалар. Бындай халыҡты күсмә халыҡ тиҙәр.

Яландары аҙ, ләкин ашлыҡтарҙы уңдыра торған урындарҙы, бигерәк тә йылға буйҙарында, халыҡ былай күсеп йөрөргә ихтыяж күрмәй, бында торған урындан күсмәй генә ашлыҡ сәсеп торорға мөмкинлек була. Бындай урындарҙа халыҡ күберәк бергә йыйналып, ауыл булып игенселек менән кәсеп итә башлайҙар. Шул сәбәпле унда ер ҡыҫынҡы — малды күп аҫрап булмай. Бындай халыҡ ултыраҡ халыҡ һанала. Боронғо төркиҙәр бындай халыҡты уйғыр тигәндәр.

Ҡайһы бер көсһөҙөрәк ырыуҙар йәки ырыуҙан айырылған семьялар дошмандар һөжүменә ҡаршы тора алмай ҡасып, урман араларына кереп тора башлайҙар, урман араларында мал аҫрау ҙа, игенселек менән маташыу ҙа байтаҡ ҡыйыныраҡ. Шул сәбәпле башта был кешеләрҙең тормошо бик ауыр була. Улар асҡа үлмәҫ, үҙ-үҙҙәрен һаҡлар өсөн кәсептәрен тағы ла төрләндерергә мәжбүр булалар. Йыртҡыс йәнлектәр менән көрәшеү өсөн һунарсылыҡты тамаҡ туйҙырыу өсөн баҡсасылыҡты арттырырға мәжбүр булалар. Бының өсөн ҡорал әҙерләү арҡаһында уларҙа һөнәрҙәр алға китә. Урман халҡы иркен күсеп йөрөй алмай; бер урында ҡышлау ауылдар һалып, йәй көнө генә малдарын туйҙырыу өсөн тирә-яҡтағы бушлыҡтарға күсеп сығалар. Мал аҫрауға уңайһыҙ урмандарҙа халыҡ бөтөнләй һөнәрселек менән генә йәшәргә мәжбүр булған.

Һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡ бергә йыйылып торорға ярата. Ләкин һунарсылар өсөн был эш мөмкин түгел. Халыҡ йыйналған урында йәнлек йөрөмәүе; шул сәбәпле былар үҙҙәре йәнлек күп ерҙәргә таралып йөрөй башлағандар.

Быңдай тормош — иң ауыр бер тормош булған. Күсмә халыҡ шат күңелле, еңел холоҡло булғанда, тау-урман халҡының бик етди, аҙ һүҙле, сыҙамлы булыуының сәбәбе — тау һәм урман тормошоноң ҡыйынлыҡҡа өйрәтеүе нәтижәһендәлер.

## Ауыл, ҡала, байлыҡ, батшалыҡ нисек башланған

### Ауыл

Юғарыла һөйләнгән рәүештә тормош төрләнеү һәм хосуси милек башланыу халыҡтың үҙ-ара мөнәсәбәтенә үҙгәрештәр индерә. Мәҫәлән, ауылдар башта ырыу булып торалар. Ләкин быңдай ауылдарға күсмә ырыуҙар һөжүм итеп ашлыҡ һәм йорт йыһаздарын талап китә башлағас, һәр бер ауыл быларға ҡаршы тороу өсөн ҙурайырға, үҙенең көсөн арттырырға тырыша; шул сәбәпле был ауылға ситтән килеп игенсе булып ултырырға теләгән һәр бер кешене шатлыҡ

менән араға ала. Күсмә ырыуҙарҙың һөжүмдәре ыңғайһа, ауылды уларҙан һаҡлар өсөн айырым һаҡсылар ҡуйып, ырыу башлығы уларҙың башлығы булып тора.

Был һаҡсылар дошманға ҡаршы торғанда үҙ кәсептәре менән маташа алмаған ваҡытта ауыл халҡы уларға эш һәм иген-фәлән менән ярҙам бирә башлай, йәғни улар халыҡ хисабына аҫрала башлайҙар. Боронғо төрк ырыуҙарында шундай һаҡсылы (ғәскәрле) ауылдарға урҙа тигәндәр. (Төрктәр әле лә ғәскәрҙе ырду тиҙәр.) Дошманға ҡаршы һаҡлау көсөн арттырыу өсөн бер-береһенә күрше урҙалар ҙа һүҙ беркетеп берләшкәндәр. Был ваҡыт улар көстәренең бер урҙа башлығы быларҙың барыһына уртаҡ башлыҡ булып торған. Бындай беркетмәләргә боронғо төрктәр улус тигәндәр (волос).

Ултыраҡ ауыл тормошонда халыҡ өсөн эш — күсмә халыҡтарынан күберәк, мәҫәлән, ауылда игенселек ҡоралдары, йыйнаған ашлыҡты һаҡларға амбарҙар, тороу өсөн оҙаҡҡа сыҙамлы йорттар һалырға кәрәк. Күсмә халыҡ көслө дошман килә башлаһа, киң яланға күсеп китеп, ҡасып ҡотола алған ваҡытта, ауыл халҡы ауылын ташлап китә алмай. Шул сәбәпле дошман һөжүменән һаҡланыу өсөн ҡоралды күберәк етештерергә һәм яҡшыртырға кәрәк. Шул сәбәпле ултыраҡ ауылдарҙа һөнәр ҙур урын тота башлай. Ләкин һәр кем үҙе оҫта һөнәрсе булып бөтә алмай һәм һөнәр өсөн кәрәкле нәмәләрҙе әҙерләп бөтөрә алмай. Игенселек өсөн дә, дошмандан һаҡланыу өсөн дә яҡшыраҡ ҡоралдар тотоу артығыраҡ булғанлыҡтан һәм һәр кем үҙенең һәләте булған эште эшләргә ярата төшкәнлектән, ауылда хеҙмәт бүленеше башлана. Мәҫәлән, оҫта һөнәрселәр игенселекте ташлап, гел нәмә яһарға биреләләр ҙә яһаған нәмәләрен игенселәрҙең ашлыҡ һәм етештергән башҡа нәмәләренә алыштыралар. Был эш игенселәр өсөн дә бик уңай була.

Шулай итеп, ауылда игенсе һәм ғәскәр халыҡтан тыш һөнәрселәр синыфы ла тыуа.

Уртаҡ ауыл халҡында ауылда кейемлек һәм башҡа кәрәктәр өсөн йөн, тире-яры кеүек нәмәләр аҙ, үҙҙәренә етерлек булмай. Ә күсмә халыҡтарҙа бындай

нәмә күп булһа ла ашлыҡ һәм оҫта һөнәрселәр яһаған төрлө йыһаз булмай. Бына шул сәбәпле уртаҡ халыҡ менән күсмә ырыуҙар араһында мал алышыу (алыш-биреш) башлана.

Башта һәр кем барып үҙенең артыҡ тауарын кәрәк тауарға алышһа ла ваҡ-төйәк өсөн алыҫ ерҙәргә йөрөү ҡыйын булғанға, ҡайһы бер кешеләр малдарын алыштырырға мохтаж кешеләрҙең нәмәләрен йыйнап, уларҙы был тауарҙарға мохтаж ерҙәргә күпләп алып баралар ҙа кәрәкле нәмәләргә алыштырып алып ҡайтып тараталар. Юл мәшәҡәте өсөн үҙҙәренә өлөш алып ҡалалар.

Шулай итеп, ауылда һатыусылар синыфы ла тыуа. Былар башта ике генә халыҡ араһында васитасы ғына булып йөрөһәләр ҙә бер аҙ сумма йыйнағас, һатыуҙы үҙҙәренә тағы ла табышлыраҡ төҫкә индерәләр: һөнәрселәргә ауыл халҡынан заказ бик аҙ, йәғни эш хаҡы осһоҙ миҙгелдәрҙә уларға ҡушып күп үтемле тауар яһатып ҡуялар ҙа был тауарҙарға кинәт һорау артып киткәс, һөнәрселәр халыҡ заказын эшләп өлгөртә алмаған ваҡытта был әҙер тауарҙы ҡыйбат хаҡҡа ҡуйып алышалар. Был арҡылы һатыусылар байып капитал хужаһына әйләнәләр һәм бара-тора кәрәкле материалдарҙы үҙҙәре әҙерләтеп, һөнәрселәрҙе эшсе итеп яллап, уларҙан эшләтеп һата башлайҙар. Шулай итеп, һатыусыларҙан сәнәғәтселәр (производительный капиталистар) килеп сыға.

## Ҡалалар төҙөлөү

Улустар төҙөлгәс, улус башлыҡтары ғәскәр көсөн арттырыу өсөн уларҙы ваҡ урҙаларҙа тарҡау тотмай, баш урҙаға йыйнап тора башлағандар. Дошман һөжүме ваҡытында таланыуҙан ҡурҡҡан байыраҡ кешеләр ҙә (һатыусылар, эре сәнәғәтселәр) шул улус ғәскәре торған ергә йыйналғандар. Һөнәрселәр өсөн үҙ тауарҙарын ауыл һайын йөрөп алышыу, игенселәргә лә үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрен, ауыл һайын һөнәрселәргә барып һайлап йөрөү ҡыйын булғас, улус башлығы торған урын бөтөн улус өсөн уртаҡ тауар алышыу урыны булып китә. Күп һөнәрселәр

шунда күсеп киләләр. Шулай итеп, был урҙала баҙар төҙөлә, ситтән халыҡ күсеп килеп, урҙа ҙурая. Урҙаға былай килмешәктәр тулыу, унда ырыу тормошон да юғалта; урҙа башлығы был килмешәктәргә үҙ ҡәрҙәше тип ҡарамай, уларҙы дошмандан һаҡлаған өсөн уларға яһаҡ (налог) һала һәм ғәскәргә таянып, быны мәжбүри түләтә башлай. Халыҡ күбәйеп ер ҡыçырыҡланғас, көслө улус башлығы күрше көсһөҙ улустарға һөжүм итеп, уларҙың ерҙәрен баçып алып, хосуси милек итеп, халҡын ҡол итеп үҙҙәренә эшләтә башлайҙар. Шулай итеп, көслө улус башлыҡтары башҡа ырыуҙарҙы ла биләп, уның ғәскәрҙәре еңеп алған ауылдарҙың ерҙәрен бүлешеп үҙҙәре биләй башлайҙар. Былары — тархан тип аталалар. Тар — боронғо төрк телендә баçыу, ер мәғәнәһендә булып, тархан — ер ханы, йәки ер хужаһы (баяр) тигән һүҙ була.

Бик ҙур көс йыйған байҙар башҡа шундай вағыраҡ байҙарға һөжүм итеп, уларҙы уҙ ҡулдарына алһалар, хан (батша) тип атала башлағандар. Бына бындай хәл уртаҡ тормошҡа күскән һәр халыҡтарҙа булып үткән. Ә күсмә халыҡтарҙа эш башҡасараҡ барған. Уларҙа айырым ғәскәр төҙөлмәгән, дошман һөжүм итһә йәки үҙҙәре башҡаларҙы талап ҡайтырға теләһәләр, барыһы ла ҡоралға йәбешкәндәр. Уларҙа һөнәрсе һәм һатыусы синыфтары ла рәтләп тыумаған, сөнки күсеп йөрөгән саҡта былар бик уңайһыҙ эш. Ләкин быларҙа ла башҡа ырыу һәм улустарға һөжүм итеп, улар халҡынан яһаҡ түләтеүҙәр булған. Бындай көслө ырыуҙар байлыҡ, ә башлыҡтары бай тип аталғандар. Быларҙа ерҙе хосуси милек итеп алыу булмаған. Ҡайһы бер ваҡытта көслө ҙур башҡа бик күп халыҡтарҙы ла һуғышып алып, ханлыҡ төҙөһәләр ҙә бындай ханлыҡтар оҙаҡ һуҙылмаған, башлыҡтары үлеү менән тарҡалғандар йәки үҙ ҡул аçтарына алған уртаҡ халыҡ менән ҡатнашып, күсмәлектәрен юғалтҡандар.

Бына ошолай байлыҡтар тыуып, бер аҙ халыҡтың бай булып, башҡаларын биләп йәшәгән тормоштары феодальный тормош тип атала.

## II БУЛЕК

### Башҡорттарҙың төп иле – Алтай тауҙары

Бынан ике мең йылдан борондараҡ хәҙерге Ҡытай мәмләкәтенең төньяғында, хәҙерге Монголия һәм Жунгария тигән өлкәләрҙә һәм Себерҙә Алтай тауҙары тирәләрендә төрлө исемдә төрк ырыуҙары мал аҫрап күсеп йөрөгәндәр. Былар араһында ҡатай, мең, там, табын, ҡаңлы, барын, тиләү, йөрөү, мәркетле, туңғатар һәм шундай башҡа исемлеләре булған. Байтаҡ ырыуҙар үҙҙәре торған тау һәм йылға исеменә бәйләнеп Дыуан, Түңгәүер, Йылайыр (был тау исемдәре әле лә Алтайҙа һаҡлана), Әй (был йылға исеме Себерҙә хәҙер ҙә бар) ырыуҙары тип йөрөгәндәр. Киң яландарҙа күсеп йөрөгән ырыуҙарҙы күберәк ҡыпсаҡ (төп боронғо төрк һәм монгол телендә буш ялан мәғәнәһендә булып, хәҙер ҙә Монголияның иң ҙур сүле — Ҡопа сүле атала) тип йөрөткәндәр.

Мал аҫрап, яландарҙа күсеп йөрөгән был ырыуҙар бер яҡтан үҙҙәренән көньяғында булған Ҡытай һәм Монгол халыҡтары менән, икенсе яҡтан үҙҙәренән төн һәм ҡояш батышы яғында булған һәр төрлө фин нәҫеленән булған ырыуҙар (тунгус, бөрйән, әстәк, вагул, маджар кеүек ҡәбиләләр) менән әле саҡлы ялан һәм мал өсөн көрәшеп, әле алыш-биреш итеп ҡатнашып торғандар. Ниндәй халыҡ менән күберәк ҡатнашыуға ҡарап, быларҙың телдәренә шул халыҡтан байтаҡ һүҙҙәр кергән. Шулай итеп, был ырыуҙар араһында байтаҡ шиуә (тел) айырмаһы торған. Ҡиәфәттәре лә бер-береһенә бер аҙ оҡшашҡан.

Былар араһында ул мәлдәрҙә уртаҡ йәшәп, мәҙәниәт тә байтаҡ алға киткән. Ҡытай, Монгол, Тунгус

халыҡтары менән күп ҡатнашҡандары улар тәьҫире менән үҙҙәре лә ултыраҡланып мәҙәни тормош төҙөгәндәр. Быларҙы уйғыр төрктәр тип йөрөткәндәр. Алтай тауҙарында, урман араларында торған төрк ырыуҙары иркен рәүештә мал аҫрай алмаған, һунарсылыҡҡа керсшеп, ағастан һәр төрлө ҡорал яһарға өйрәнгәндәр; араларында кустарлыҡ күбәйгән. Улар араһында һөнәр артыу арҡаһында ерҙән баҡыр һәм тимер сығарылып, унан ҡорал яһау ҙа башланған. Ләкин ул ваҡытта баҡыр, бигерәк тә тимер сығарыу бик ауыр эш булып, был нәмәләр бик ҡыйбат һаналғандар. Халыҡтың күберәгендә ҡорал ағастан яһалып, башына үткер балыҡ һөйәге ултыртҡан уҡ менән яндан ғибәрәт булған. Тимер ҡылыс һәм бысаҡ кеүек нәмәләр бары ырыу башлыҡтарында, йәғни байҙарҙа ғына булған. Бынан мең дә биш йөҙ йыл элек яҙылған бер Ҡытай китабында: «Төрк ырыуҙарынан береһенә Ҡытай илсеһе килгәс, уларға бик ҡыйбатлы бүләк итеп бер киҫәк тимер бирелгәнлек һөйләнә». Был ваҡиға ул ваҡытта тимерҙең ниндәй һирәк һәм ҡәҙерле нәмә булыуын асыҡ күрһәтәләр.

Был ырыуҙарҙың ултыраҡ булғандары һәм урманда тороп яртылаш ултыраҡ булғандары тары менән арпа сәскәндәр. Быларҙа урман киндерен йыйнап, унан киндер һуғып кейеү ҙә булған. Ҡыпсаҡ булғандары, йәғни мал аҫрап гелән күсеп йөрөгәндәре бөтә байлыҡты мал аҫрауҙан табып, кейемдәре тире менән йөндән, аҙыҡтары ит, ҡымыҙ, һөт, ҡорот булған.

Ырыу башында аҡһаҡалдар тороп, ҙурыраҡ ырыу башлыҡтары үҙ ҡул аҫтында бер нисәшәр ырыуҙы берләштереп, бей булғандар. Ләкин был ваҡытта бейҙәрҙең правоһы бик кескенә булған. Сөнки ялан бик күп булып, халыҡ бер урынға ла нығынып ултырмаған, халыҡты тотоп булмаған. Бейҙәр урын осон кәрәкле эштәрҙе ағайҙар менән кәңәшләшеп эшләгәндәр.

Бер нисә ырыу өсөн уртаҡ мәсьәләләр сығып, уларҙы сисергә кәрәк булһа, быларҙың барыһының аҡһаҡал һәм ағайҙары йыйналып, ҡоролтай үткәргәндәр. Мәсьәләләр шунда ҡаралған.

Шул миҙгелдәрҙә (бынан ике мең йылдар борон) хәҙерге Ҡытайҙың төньяҡ өлөшөндә, хәҙер Хуанхэ тип йөрөтөлгән Һыуынһыу йылғаһы буйында, Һун исемле ҙур һәм көслө бер төрк халҡы тора ине. Һундар күршеләре булған ҡытайҙар һәм тунгус халҡы менән яландар өсөн оҙаҡ ваҡыттар һуғышҡылап торғас, бынан мең һигеҙ йөҙ йыл элек еңелеп, бер аҙы ҡытай халҡы ҡулында ҡалып, ҡытайлаштылар. Ҡалғандары тунгус ҡулына керергә риза булмай ҡояш батышына табан күсеп китеп, юлда барғанда юғарыла бер аҙының исемдәре күрһәтелеп үткән бик күп төрк ырыуҙарын һуғышып алып, йәки башҡаса үҙҙәренә эйәртеп, Тянь-Шянь тауҙарына килеп, бында ҙур бер ханлыҡ төҙөнөләр.

Был урындарҙа (Урта Азияла) һәр бер өс йөҙ илле — дүрт йөҙ йыл һайын бер тапҡыр бик ныҡ ҡоролоҡ осоро килеп, нисәшәр йылдар рәттән ҡоролоҡтар һуҙыла, йәй көнө үләндәр бөтөнләй көйөп бөтә, малға аҙыҡ ҡалмай. Бына шундай осорҙа һундар үҙҙәренә ҡушылған ырыуҙарҙың байтағын эйәртеп, тағы ла көнбатышҡа табан үләнле ялан эҙләп киткәндәр. Башта Урал диңгеҙе буйына, унан тағы ла үләнгә бай яландар менән тулған хәҙерге Украина сәхрәләренә һәм Кавказдың төньяҡ өлөштәренә килеп, шунда урынлашҡандар. Бында Һун ханлығы бик ҙурайып, хәҙерге Польша, Румыния, Мажарстан мәмләкәттәрен дә үҙ ҡулдарына алып, бер аҙ ваҡытҡа бөтә Европа мәмләкәттәрен тетрәтеп торҙолар.

Һундар өс йөҙ йыл самаһы һуҙылған был ҡояш батышына табан күсеү хәрәкәттәре ваҡытында юғарыла һаналған төрк ырыуҙарын да бергә уҡмаштырҙылар һәм ул мәлдәрҙә Себерҙең Обь һәм Иртыш йылғалары буйында тороп, фин — вагул нәҫеленән булған мажар халҡы менән Арал диңгеҙе буйында торған булғар атлы төрки халҡын да һеперә ҡыуып Иҙел менән Дон (ул мәлдә Танаис йылғаһы аталған) йылғаһы араһына килтереп, бында уларҙы үҙ ҡулдарына алдылар.

Тарихта ҙур күсеү аталған был хәрәкәт ваҡытында Себер менән хәҙерге Төркөстан һәм хәҙерге ҡаҙаҡ

сәхрәләре лә буш ҡалманы. Һундарҙың һәм уларға ҡушылған ырыуҙарҙың бер аҙы юл өҫтөндә ҡала килде. Шулай итеп, һәр бер ырыуҙың бер аҙ халҡы төп иләндә ҡалһа, бер аҙы нисә меӊ саҡрымдар килеп, башҡа ырыуҙарҙың бер аҙ өлөшө менән ҡушылып ҡалды. Бер аҙы Яйыҡ буйҙарына килеп етеп урынлашты, бер аҙы унан да уҙып китеп Мажарстанға барып, унда мажарҙар менән ҡатышып юғалды.

Бына шул ваҡытта төрлө төрк ырыуҙарынан бик күп халыҡ Яйыҡ (хәҙерге Урал) йылғаһы буйында туҡырап, унан үләнгә бик бай булған хәҙерге Башҡортостан яландарына килеп, бында ерләштеләр. Был ырыуҙар хәҙер Бохара һәм Төркмәнстан мәмләкәтендә булған Башхурт тауҙары буйында йәшәгән ырыуҙарҙың бейҙәре ҡул аҫтында килгән булһалар кәрәк. Бөтәһе бергә башҡорт тип йөрөтөлә башланылар. Башҡорт ырыуҙарының күбеһенең исеме хәҙер төркмән, үзбәк һәм башҡа төрк милләттәрендә осрауҙың сәбәбе — шул күсеү ваҡытында һәр бер ырыуҙың бүлгеләнеп төрлө урында тарҡалып ҡалыуылыр.

## Башҡортостандың боронғо хәле

Башҡорт ырыуҙары хәҙерге илдәренә килгән ваҡытта бында фин нәҫеленән булған халыҡтар тора ине. Быларҙы тарих китаптарында һәм халыҡ телендә чудь халҡы тип йөрөтәләр.

Был финдар һун хәрәкәтенән байтаҡ элек төрк ырыуҙары тарафынан ҡыҫырыҡланып, Себер урмандарына кереп һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ менән кәсеп итә башлаған, шул сәбәпле кустарлыҡ һәм һөнәр байтаҡ алға киткән халыҡ булып, уларҙа аҡрын-аҡрын ҡояш батышына табан килеп, Урал тауҙарында урынлашҡандар һәм бында алтын, баҡыр сығарып, унан һәр төрлө нәмәләр яһай башлаған ваҡытта мәҙәниәте бер халыҡ ине. Быларҙың байтағы (хәҙерге Эстон, Финляндия халҡы һәм башҡалар) Урал тауҙарын киҫеп Балтик диңгеҙенә хәтле барып еткәндәр. Хәҙерге Рәсәйҙең бөтөн төньяҡ өлөшөн тултырған инеләр. Урал буйындағы (хәҙерге Башҡортостан һәм Пермь) өлкәһендә торған финдар (чудтар) ул ваҡыт-

тарҙа бер яҡтан Шимали Двина йылғаһы арҡыры, хәҙерге Швеция — Норвегия мәмләкәттәрендәге халыҡ менән; икенсе яҡтан Иҙел арҡыры Каспий диңгеҙе буйындағы мәмләкәттәр менән алыш-биреш йөрөтәләр ине. Хәҙерге Пермь округында ер ҡаҙығанда боронғо Персия аҡсалары күп табылыуы быны күрһәтә.

Башҡортостандағы чудтар һөнәрле халыҡ булһалар ҙа тарҡау йәшәгәнлектән, ныҡ уҡмашҡан һәм һуғышсы башҡорт ырыуҙарына ҡаршы тора алмай, ҡырылып бөтәләр йәки илдәрен ташлап төньяҡҡа табан китеп, ундағы башҡа халыҡтар менән ҡатнашып юғалдылар. Ләкин уларҙың ҡалған әҫәрҙәре Башҡортостанда күп табыла. Урал тауҙарында уларҙың ҡаҙыған баҡыр шахталары бар.

Уларҙың ҡәберлектәренән үлектәр менән бергә күмелгән байтаҡ алтын-көмөш һәм баҡыр нәмәләр табыла. Быларға ҡарағанда, улар тимер эштәре белмәгәндәр; ҡәберлектәренән (быларға курган тиҙәр) тимер нәмәләр табылһа ла улар ситтән килтерелгән нәмәләр. Урал тауҙарында һәм Башҡортостанда чудтарҙан элȇк баҡыр сығарыу ғына түгел, хатта ташты ҡырып-уйып ҡорал яһай ҙа белмәгән бик боронғо халыҡтар ҙа торған. Ләкин быларҙың ниндәй нәҫелдән икәнен белеп булмай.

Хәҙерге Башҡортостан сәхрәләре Кама һәм Иҙел йылғаһы араһында, ҡояш сығышында Урал тауҙарына, көньяғына Яйыҡ буйҙарына хәтле һуҙылып, үләнгә бик бай, мал аҫрап күсеп йөрөүгә бик уңай ине.

Был урын башҡорттар өсөн бик тыныс булды. Сөнки был сәхрә оло юл өҫтөндә түгел, ҡояш сығышында арҡыры халыҡ үтә алмаҫлыҡ бейек һәм ҡара урманлы Урал тауҙары булған кеүек, күрше-тирәләрендә ныҡ ойошҡан көслө халыҡтар ҙа юҡ ине.

Башҡорттар бында килеү менән оҙаҡ та үтмәй, һун дәүләте емерелде. Дон йылғаһы буйҙарында торған сыуаш атлы төрк халҡы һәм улар артынан бик яҡын ҡәрҙәш булған Булғар төрктәре лә Иҙел буйлап юғары менеп, сыуаштар хәҙерге Сыуаш өлкәһендә, булғарҙар Кама-Волга йылғалары ҡушылған ерҙәрҙә урынлашып, Булғар ханлығы төҙөнөләр. Башҡорто-

стан менән күрше Минзәлә һәм Бөгөлмә кантондарының байтаҡ ере булғарҙар ҡулында булып башҡорттар булғар халҡы менән нығ ҡатыша башланылар.

## Башҡорт – Булғар мөнәсәбәттәре

Һун хәрәкәте ваҡытында Урта Азияның Урта диңгеҙе тирәһенән Кавказ янындағы Кубань өлкәһенә һәм Дон йылғаһы буйына килгән күсмә булғарҙар, Һун ханлығы еңелгәс, бында үҙҙәренә айырым ханлыҡтар төҙөп, ул ваҡытта бик мәҙәни халыҡ булған грек, әрмән һәм башҡалар менән ҡатнашып, игенселеккә, һөнәр һәм сауҙаға өйрәнгән инеләр. Быларҙың бер аҙы мажарҙар менән хәҙерге Мажарстанға китеп, шунда мажарҙар менән ҡатышып бөттө. Бер аҙы Дунай йылғаһы буйына барып, славяндарҙы ҡулға алып, хәҙерге Булғария дәүләтен төҙөнө. Ҡалғандары Волга һәм Кама йылғаһы буйҙарында, хәҙерге Татарстан йөмһүриәте булған урындарға килеп үҙҙәре менән яҡын ҡәрҙәш сыуаштар менән берләшеп, Булғар ханлығын төҙөнөләр. Был урын Биярмә (Пермь) чудтары Волга баштарындағы урыҫтар һәм Каспий диңгеҙе (ул ваҡытта Ҡоҙғон диңгеҙе тигәндәр) буйындағы Персия, Төркөстан һәм Кавказ мәмләкәттәре араһындағы ҙур сауҙа юлы өҫтөндә булыу арҡаһында Булғарға был мәмләкәттәрҙең һәр береһенән сауҙагәрҙәр килеп тулып, Булғар мәмләкәте бик тиҙ арала сауҙа мәркәзенә әйләнде. Бында һөнәр ҙә бик юғары күтәрелде. Килеүсе һатыусылар һәм һөнәрселәр араһында иң ҙур урынды ул ваҡытта мәҙәниәттә бик алда торған мосолман халыҡтары тотҡанлыҡтан һәм Булғар төрктәренең иң ҙур алыш-биреш һәм ҡатнашыуҙары мосолман мәмләкәттәре менән булып, сауҙа хаттары һәм хисаптары ғәрәп хәрефе менән йөрөтөлгәнлектән, бында мосолманлыҡ тиҙ таралып, бынан тап мең йылдар артығыраҡ элек Булғар хандары ла рәсми мосолманлыҡ ҡабул итеп, Булғар шәреҡ мәҙәниәтен ҡабул иттеләр.

Булғар мәмләкәте һәм халҡы башҡорттар менән күрше тороп, араларында ҙур тауар алышыу бара, булғарҙар башҡорттарҙан һәр төрлө ҡыйбатлы йәнлек

мехы, һәм тире-яры алып шәреҡ мәмләкәттәренә оҙаталар, быға ҡаршы башҡорттарҙы ашлыҡ, ҡорал, кейемлек һәм зиннәт нәмәләре менән тәьмин итәләр ине. Был алыш-биреш араһында башҡорттар менән булғарҙарҙың араһы бик татыу булып, Булғар мәҙәниәте, шуның менән бергә ислам дине һәм ғәрәп хәрефе менән яҙыу-һыҙыу ҙа башҡорттар араһында тарала башлай.

Бынан мең йылдан артыҡ элек Төркөстанда башҡорт иле арҡыры Булғар ҡалаһына ҙур бер сауҙа каруаны менән килгән ғәрәп мәмләкәте илселәре башҡорттарҙың Булғар менән Төркөстан араһында каруан йөрөтөүгә ҡатнашыуҙарын һәм араларында мосолман да барлығын яҙалар.

Ул ваҡытта башҡорттарҙың байтағы Булғар менән Төркөстан араһындағы юл өҫтөндә булған, хәҙерге Ҡаҙағстандың Урал һәм Аҡтүбә губерналары ла ул ваҡытта башҡорт иле булған. Әгәр Булғар мәмләкәте тиҙ үк бөтмәй, оҙағыраҡ йәшәһә, башҡорттар шәреҡ менән алыш-биреш эшенә нығыраҡ керешеп китеп иҡтисади тормошта һәм мәҙәниәттә ҙур урын тотасаҡ инеләр, ләкин Булғар мәмләкәтенең ваҡытһыҙ бөтөрөлөүе башҡорттарҙың тәрәҡҡиҙәренә ҙур кәртә булып төштө. Сөнки бының арҡаһында башҡорттарҙың ситтәр менән иҡтисади һәм мәҙәни ҡатнашыуҙары өҙөлдө.

## Башҡорттарҙың Татар ханлығы ҡулына кереүе (бынан биш йөҙ йыл элек)

Бынан ете-һигеҙ йөҙ йыл элек Ҡытай мәмләкәте күршеһендәге монгол енесенән татар халҡы бик көсәйеп, элекке һун хәрәкәте кеүек ҡояш батышына ҡаршы хәрәкәт башлап, Урта Азияла ҡалған бик күп төрк ырыу һәм ҡәбиләләрен үҙ ҡул аҫтарында ойоштороп, бер аҙы Волга буйҙарына ла килеп сығып, бында Алтын Урҙа ханлығы төҙөнөләр. Алтын Урҙаның башында татарҙар торһа ла ғәскәре вә халҡы күберәк төрлө төрк халыҡтары ине. Хәҙер Кавказда һәм Ҡырымда торған нуғайҙар, Төркөстанда торған үзбәк халҡы, Рәсәйҙең күп урындарында таралған

мишәрҙәр ошо Алтын Урҙа кешеләре. Татарҙар менән бик күп һөнәрсе, ғалим йәки һатыусы фәрис (персиян) кешеләре лә килеп, улар ярҙамы менән Алтын урҙа ханлығы ҙур ҡалалар һалдырҙылар (Сарай ҡалаһы кеүек). Ул ваҡытта көнбатыш яғында урыҫ халҡы көсәйеп, булғарҙарға йыш-йыш һөжүм итеп, Булғар ҡалаһының иҡтисади көсөн емергән инеләр. Татарҙар килеп урыҫтарҙың тәжәүәз хәрәкәтен емерһәләр ҙә Булғар артыҡ аяҡҡа баҫа алманы, сөнки Урта Азиялағы татар хәрәкәте арҡаһында Булғар — Төркөстан сауҙаһы бөткән кеүек, Волга сауҙаһын да Сарай ҡалаһы үҙ ҡулына алды. Татар хәрәкәте башҡорттар өсөн иҡтисади бик әһәмиәтле булған Булғар — Төркөстан араһындағы сауҙаға ҙур зыян килтереп, башҡорт халҡының тормошон насарлатҡанлыҡтан, башҡорттар уны яҡшы ҡаршы алманылар. Татарҙар үҙҙәре лә күберәк мал аҫрап йәшәп, киң яландарға мохтаж инеләр, бының өсөн улар Волга — Яйыҡ араһындағы башҡорттарҙың яландарын ҡулға алырға тырыштылар. Мәсьәлә ике арала ҙур һуғышҡа барып етте; башҡорттар ҙур көс йыйнап татарҙарға ҡаршы сығып, Яйыҡ — Үҙән йылғалары буйҙарында башҡорттар менән татар хандарынан Бату ғәскәре араһында ҙур һуғыш булды. Башҡорттар иҫкенән төрк ырыуҙары араһында иң ғәйрәтле һәм һуғышсан бер халыҡ булһалар ҙа, татарҙар ҙа ғәскәрлек тәртибе яҡшыраҡ, иҡтисади көс ҙурыраҡ, шәберәк булыу сәбәпле был һуғыш башҡорттарҙың бик нык еңелеүҙәре менән бөтөп, башҡорт халҡы Алтын Урҙа ханлығына буйһоноп, билдәле яһаҡ түләргә мәжбүр булды. Бату хан Башҡортостанға яһаҡ йыйнап тороу өсөн айырым кенәздәр ебәрҙе һәм ҡайһы бер башҡорт бейҙәренә кенәзлек бирҙе.

Хәҙер Башҡортостан оло иҡтисади-сәйәси бәрелеш һәм ҡатнаш юлдарынан ситтә ҡалып, татарҙар бында бары яһаҡ йыйнау менән генә ҡәнәғәтләнделәр, татарҙар башҡорттарҙың эске эштәренә һәм ғөрөфғәҙәттәренә ҡыҫылманылар. Яңы сауҙа һәм мәҙәниәт мәркәзе булған Сарай ҡалаһы Башҡортостандан алыҫ булып, ул башҡорттарға иҡтисади һәм мәҙәни тәьҫир итеүҙә элекке Булғар ханлығы ҡалаларының урынын

тотмай. Бер аҙҙан Сарай сауҙагәрҙәренең ҡотҡоһо менән 1361 йылда Алтын Урҙа ханы Булат Булғарға килеп, уны бөтөнләй емереп тарҡатҡас, башҡорттарҙың ситтәр менән иҡтисади ҡатнашыуҙары бөтөнләй бөттө. Быға хәтле күберәк патриархальный тормош менән торған башҡорттарҙың татар ҡулына кереүе быларҙа феодальный тормош башлата.

## Алтын Урҙа ханлығы бөткәс башҡорттар

Хәҙерге Рәсәйҙең бик күп урындарын үҙ ҡулында тотҡан Алтын Урҙа ханлығы оҙаҡ йәшәмәй емерелеп, уның татарҙар ҡулында ҡалған ерҙәрендә өс ханлыҡ төҙөлдө. Баштарында татарҙар торған боронғо булғар төрктәре төҙөгән Ҡазан ханлығы һәм Әстрхан вә Себер ханлыҡтары, Алтын Урҙа халҡының ҙур бер өлөшө булған нуғайҙар, үҙҙәренә айырылып сығып, хәҙерге Дон буйы менән Украинала, ә бер аҙы Волга йылғаһының ҡояш сығышында күсеп йөрөй торған ярым мөстәҡил кенәзлектәр төҙөнөләр. Элек Булғар ханлығы булған ерҙәр Ҡазан ханлығы ҡулында ҡалып, хәҙерге Минзәлә кантонының күбеһе улар ҡулында, Бөгөлмә, Бөрө кантондары, Һамар губернаһы, Башҡортостан, Ырымбур губернаһы һәм Ҡаҙағстандың, Урал губернаһы булған ерҙәр ваҡ нуғай кенәздәре ҡулында ине. Нуғай кенәздәренең бер аҙы Урал тауҙарының аръяғына сығып, Урал тауҙарындағы һәм унан ҡояш сығышындағы башҡорттарҙы биләйҙәр ине.

Был ваҡ нуғай кенәзлектәре бер урында нығып урынлашмай йәшәп, тәртипле дәүләт төҙөй алмай, Ҡазанға тартым булғандары Ҡазан ханлығына, Әстрханға тартым булғандары Әстрхан ханлығына, Урал тауҙары менән уның ҡояш сығышында булғандары Себер ханлығына ҡарап, уларға еңел генә яһаҡ түләнеләр. Шуның менән бергә уларҙың идара эштәренә ҡыҫылып, кәрәк булғанда уларға ғәскәр ҙә бирәләр ине. Ҡазан ханлығында рәсми яҡтан хандан ҡала иң ҙур урын тотоп, ә ваҡиғала хандарҙы үҙ ҡулдарында уйнатып йөрөткән «Карачилар диваны» тип аталған дүрт кешелек органда нуғайҙарҙан һәр ваҡыт тиерлек берәр вәкил була ине.

Булғарҙар ваҡытында ҙур сауҙа юлы өҫтөндә булыу һәм булғарҙар менән алыш-биреш итеү арҡаһында яҡшы ғына алға бара башлаған башҡорт хужалығы, Сарай идараһында ваҡытта түбән төшә башлап, нуғайҙар идараһында торған саҡта бөтөнләй насарланды. Нуғайҙарҙың баш кенәздәре Яйыҡ йылғаһының Каспий диңгеҙенә ҡойған ерендә Сарайсыҡ ҡалаһында тороп, Башҡортостанда уларға баш эйгән ваҡ кенәздәр генә үҙ ырыуҙары менән генә күсеп йөрөйҙәр ине.

Былар башҡорттарҙы һуғышып еңеп алыусылар правоһы менән файҙаланып, бөтөн Башҡортостан яландарын үҙ-ара бүлешкәндәр, башҡорттарға үҙҙәренең тәбәғәһе тип ҡарап, уларҙың киң яландарынан файҙаланыуҙан тыш, уларҙан йыл һайын мал һәм сырье менән билдәле хәтле яһаҡ түләтәләр ине. Нуғайҙар ул ваҡытта мәҙәниәттә ярайһы ҙур урын тотҡан Сарай мәмләкәтенең ҡалдыҡтары булыу сәбәпле, мәҙәни тормошта башҡорттарҙан юғары булып, игенселек һәм сауҙа эштәре менән таныш инеләр. Ләкин Башҡортостандың был ваҡыттағы хәле быларҙың ултыраҡланып мәҙәни һәм ултыраҡ бер дәүләт төҙөүҙәренә ирек бирмәне. Быны сәбәптәре:

1) Башҡортостан арҡыры үткән оло Булғар — Төркөстан сауҙаһы бөтөү.

2) Быны урынына Себер ханлығының ҙур ҡалаларынан Тара яҡтарында Бохаранан килмешәк сауҙагәрҙәр күбәйеп, Төркөстан һәм Бохара менән Себер араһында сауҙа башланыу.

3) Яңы төҙөлгән Себер һәм сауҙа эшендә элекке Булғарҙың урынын тота башлаған Ҡазан ханлығының Төркөстан менән сауҙаһы ул Себер Бохаралылары ҡулына кереү һәм быларҙа сауҙа юлы Башҡортостандың төньяғында Сулман (Кама) йылғаһынан уҙыу.

4) Нуғайҙарҙың һаны бик күп булмау арҡаһында башҡорттарҙан йыйналған яһаҡтарҙың һәм мал аҫрау хужалығының быларҙың тормоштарын яҡшы тәьмин итә алыуы.

Нуғайҙар үҙҙәре етештергән һәм яһаҡ итеп башҡорттарҙан йыйған мал һәм сырьеларын Ҡазан ҡалаһы арҡыры Мәскәү дәүләтенә илтеп, унан ҡыҙыл мал, әҙер кейем, бысаҡ, тимер табаҡ-һауыт, энә, балта, ҡағыҙ кеүек тауарҙар алып ҡайталар, ләкин был сауҙа аҡсаға түгел, бәлки әйберҙәр алышыу юлы менән түләү ине. Шул сәбәпле Башҡортостанды былар биләгән осорҙа Башҡортостанда аҡса хужалығы урынлаша алманы, был сауҙа мурзалар ҡулында булып, айырым һатыусы синыфы тыуманы. (1534 йылда нуғай мырҙалары Мәскәүгә 8000 йылҡы илтеп нәмәгә алмашҡанлыҡ иҫке документтарҙа күреләә.)

Нуғайҙарҙа һөнәр кәсебенең бик түбән торғанлығын, уларҙың Мәскәү тауарҙарына бик мохтажлығы күрһәтә. Мәҫәлән, Ҡазан ханлығы яғынан нуғайҙарҙы Мәскәү дәүләтенә ҡаршы һуғышҡа саҡырғанда нуғай хандарынан Исмәғил: «Мәскәү менән алыш-бирешебеҙ бөтһә — үлһәк күмергә кәфенлек таба алмаҫбыҙ», — тип риза булмауын асыҡ күрһәтә.

Мәскәү хөкүмәте нуғайҙарҙың былай Мәскәү сәнәғәт тауарына бик мохтажлығы менән файҙаланып, уларҙың Мәскәүгә һатырға илткән мал һәм сырьеларына бик ҙур пошлина һала ла үҙе уларға осһоҙ хаҡ бирә ине. Шул сәбәпле нуғайҙар Мәскәүгә оҙатыр өсөн аяҡлы мал һәм мехты башҡорттарҙан һатып йәки нәмәгә алышып алмай, налог рәүешендә бушлай алалар ине. Был арҡала башҡорттоң бөтә йыллыҡ тапҡаны нуғай кенәздәренә налог һәм бүләк түләүгә китеп, үҙҙәренә башҡалар менән алыш-биреш алып барыу өсөн байлыҡ ҡалмай ине.

Нуғайҙар ваҡытында башҡорттар йәй көнө кейеҙ өйҙәрҙә бер урындан икенсе урынға аҡрынлап күсеп йөрөп, ҡыш көнө ҡышлауҙарға ҡайтып өҫтө һәм тирәяғы тупраҡ менән ҡапланған землянкаларҙа торалар. Хәҙерге кеүек ауылдар юҡ, һәр бер ырыу бер тирәләрәк йыйналып, уларҙың халҡы ауыл булмай, тарҡалып ултыра ине. Был ваҡытта башҡорттар иген сәсмәй, быларҙа арба, ат егеү юҡ, йөрөштәре бары һыбай була ине.

Башҡорт ырыуҙарының бей һәм аҡһаҡалдары нуғай кенәздәренең бойороҡтарын үтәргә, уларға

башҡорттарҙан яһаҡ йыйып бирергә мәжбүр инеләр. Элек һундар менән бергә килеп, хәҙерге Башҡортостанға килгән мәлдә чудтар менән һуғышҡан, унан һуң Булғар — Төркөстан араһында карауан һаҡсыһы булып йөрөгән ваҡыттарында һуғышсы һәм батыр бер халыҡ булған башҡорттар Сарай ханлығы тарафынан еңелеп, ике йөҙ йылдан артыҡ нуғайҙар ҡул аҫтында торғанда, күршеләре менән һуғышырға тура килмәй тыныс тормош һөйә торған көсһөҙ бер халыҡҡа әйләнеп ҡалдылар. Ләкин быныӊ бер яҡшы яғы ла булды: башҡорттарҙыӊ һаны артты.

## Башҡортостанда нуғайҙарҙан ҡалған тарихи әҫәрҙәр

Нуғайҙар ғәскәре бер ойошма булып, бер төркөм булып күсеп йөрөйҙәр, ҡыш еткәс тә бер урынғараҡ килеп, бергә уҡмашып ҡышлайҙар ҙа ултыралар ине. Шул сәбәпле уларҙыӊ землянкаларҙан төҙөлмә ҙур ҡышлау урындары була ине. Ләкин былар ваҡытлы ғына торлаҡ булып, ҡалаға әйләнеп китә алманылар. Уларҙан оҙаҡҡа сыҙарлыҡ ҙур ғимарәттәр ҡалманы. Уларҙан һуӊғы ваҡытҡа тиклем һаҡланып килгән әҫәрҙәр бары ҡайһы бер ҙур түрәләрҙеӊ ҡәберлегендә һалдырып ҡалған төрбәләр генә. Былар араһында бынан биш йөҙ-ете йөҙ йыл борон һалынып, әлегә тиклем һаҡланып килгән ике ғимарәтте күрһәтергә мөмкин.

Быларҙыӊ береһе Өфө ҡалаһынан илле саҡрым ерҙә, Шишмә станцияһынан алыҫ түгел, Дим йылғаһына яҡын бер ерҙәге нуғай имамдарынан Хөсәйенбәк әмир Ғүмәр уғлыныӊ ҡәбере өҫтөндәге төрбә. Был төрбә, иңе икешәр сажин самаһында таштан һалынған дүрт мөйөшлө булып, өс тәҙрәһе һәм бер ишеге бар. Түбә рәүешендә яһалған түшәме хәҙер емерелеп төшөп, ҡалмаған.

Хөсәйенбәк, нуғай кенәздәренән Барач хандыӊ саҡырыуы буйынса Төркөстандан килеп, башҡорттар араһында мосолманлыҡ урынлаштырыу менән мәшғүл булып, алты йөҙ йыл самаһы элек вафат булған.

Бындай боронғо нуғай ғимарәттәренеӊ быға хәтле һаҡланып килгән икенсеһе, Өфөнән Ҡазанға бара

торған оло юлда Түбән Тирмә ауылы янында булған бер бина. Иңе ун сажин самаһы, бейеклеге дүрт ҡатлы йорт хәтле булған бер таш бинаның төбө дүрт мөйөшлө булып, бер аҙ менгәс һигеҙ мөйөшләгә әйләнә. Түшәме куб рәүешендә. Эсе элек штукатурланған булған, бәләкәй генә бер тәҙрәһе булып, эсе ҡараңғы. Һис бер таҡта һәм тимер ҡатнаштырмай быңдай ҙур бина, бигерәк тә уға куб һала алыу нуғайҙарҙа һөнәр эйәләре булып та уларҙың ҡалалар һалмауы — бары башҡорттар хисабына күсмә йөрөмөш уларҙың мәғишәтен яҡшы тәьмин итмәүҙән килгәнлекте күрһәтә. Иҫке риүәйәттәргә күрә, был бина 1400 йылдан һуң Себерҙән күсеп килгән Слаҡ йылғаһы буйындағы башҡорттарҙы бидәп, оҙыуы менән бында күсеп йөрөгән нуғай кенәзе Тура хандың һарайының ҡалдыҡтарылыр. Был бинанан яҡын ғына бер нисә ҡәбер ташы булып, береһендә: «Бында ханбикә Сәхиб Жәмәл күмелде», — тип яҙып ҡуйылған.

Башҡортостанда нуғайҙарҙан ҡалған тағы ла ошондай байтаҡ ғимарәттәр булғылаһа ла улары ваҡыт үтеү менән харап булып бөткәндәр. Хәҙерге Өфө, Бәләбәй, Ырымбур ҡалалары боронғо нуғай хандарының ҡышлау ҡалалары булғандар.

## Башҡорттарҙың урыҫтар менән беренсе осрашыуҙары

Ҡазанда татар ханлығы булған ваҡытта уҡ, Рәсәйҙең төньяҡ өлөшөндәге Новгород ҡалаһы халҡы Мәскәү дәүләтенә буйһонмай айырым йөмһүриәт булып йәшәп, Швеция һәм башҡа Европа мәмләкәттәре менән сауҙа, алыш-биреш итәләр ине. Былар Европаға һатыу өсөн кәрәкле мех, алтын, тоҙ кеүек тауарҙарҙы Биәрмә өлкәһенә килеп, ундағы чудтарҙан һатып, ә күбеһенсә талап алып китә инеләр, гелән ғәскәр менән йөрөгән был талаусы Новгород купецтары үҙҙәренең байлыҡ шишмәһе булған Биәрмәне киткән һайын үҙ ҡулдарына нығыраҡ эләктереп, унда хужа булыу өсөн аҡрын-аҡрын көнсығышына — Урал тауҙарына табан күсеп урынлаша башланылар һәм бер аҙҙан Ҡазан халҡынан төньяҡта булған хәҙерге Вятка һәм Пермь тирәләрендә тултырҙылар.

Ләкин шул уҡ ваҡыттарында шәреҡтән, Бохара һәм Төркөстан менән алыш-биреш итә торған Себер ханлығы татар сауҙагәрҙәре (Төмән татарҙары) ҡул һуҙып чудь тауарҙарын үҙ ҡулдарына алырға тырыша башланылар. Шулай итеп, был урын, ике ил купецтары араһында тартыш майҙанына әйләнде. Ул ваҡытта Бохара һәм Төркөстан заманына күрә ҙур мәҙәниәт һәм һөнәр мәркәзе булып, уларҙың тауарҙары яҡшыраҡ һәм осһоҙораҡ төшә, төньяҡ (һыуыҡ) тауарҙары Төркөстанда ҡәҙерлерәк була ине. Шул сәбәпле Бохара менән эш йөрөткән Төмән сауҙагәрҙәре чудь тауарҙарын һатып (тауарға алышып) ала иненәр, ә Новгород купецтары Европаға юлдар ҡыйынораҡ һәм Европала төньяҡ тауарҙарының хаҡы бигерәк күтәренке булмау сәбәпле, быларҙы күберәк талап алыу яғын ҡарай инеләр. Шул сәбәпле был көрәш ваҡытында Биәрмә яҡтарының халҡы булған чудтар (вагул, зирән һәм башҡалар) был көрәштә Себер татарҙары яғын тотҡайны.

Был урыҫ сауҙагәрҙәре үҙҙәренең ялланма ғәскәрҙәре менән ваҡыт-ваҡыт кәмәләр менән Вятка йылғаһы буйлап Кама йылғаһына, унан Ағиҙел тамағына төшөп, башҡорттарға һөжүм итеп китә инеләр. Ләкин урыҫтарҙың был осорҙа башҡорттарға булған киң, ҙур һөжүмдәре икенсе йыл менән булды; бер мең дүрт йөҙ алтмыш һигеҙенсе йылда Ҡазанға һөжүм иткән Мәскәү кенәзлеге ғәскәрҙәре Ҡазан тураһынан үтеп, Кама менән Ағиҙел тамағына килеп, башҡорттарҙы талап киттеләр. Бына бындай ваҡиғалар Ағиҙел тамағы буйы башҡорттары өсөн Ҡазан ханлығының әһәмиәтен бик арттыра. Ҡазан ханлығы көсһөҙләнһә, башҡорттарҙың урыҫ кенәз һәм сауҙагәрҙәренең ҡулында ҡол буласағын аңлата ине. Шул сәбәпле был тирә башҡорттары һәр ваҡыт Ҡазан ханлығы менән ҡатнашалар, уларға ярҙамлашалар ине.

## Ҡазан ханлығы бөткәс (1452–1500 йылдар)

Мәскәү кенәзе Иван Грозный 1552 йылда ҙур ғәскәр менән Ҡазанға һөжүм итеп, был ҡаланы алып, халҡын ҡырып татар ханлығын бөтөргәс, Кама буйлап Ағиҙел тамағына ҡасып ҡотолған татарҙар

ханлыкты кире ҡотҡарыу өсөн көрәш башланылар. Был көрәштә нуғайҙарҙың ярҙамы менән файҙаланыу өсөн нуғай кенәздәренән Ғәли Әкрәмде хан итеп һайланылар (Ғәли Әкрәм Ҡазандағы ҡатын-батша Сөйөмбикәнең туғаны ине). Ул ваҡыт Башҡортостанда торған нуғайҙарҙың күбеһе татарҙарҙы яҡлап, Мәскәү кенәзлегенә ҡаршы һуғыш башларға теләһәләр ҙә Мәскәү менән ҙур сауҙа йөрөтөп, файҙаһы Мәскәү менән дуҫ тороуҙа булған нуғай кенәзе Исмәғил быға ҡаршы тороп, арттан һөжүм менән ҡурҡытыу сәбәпле, был эш нәтижәһеҙ ҡалды. Ғәли Әкрәм еңелеп, һуғышта үлтерелде. Татар көрәшселәренән хисапһыҙ күбеһе ҡырылып, иҫән ҡалған бер аҙы Себергә табан, ҡалғаны Ағиҙел буйлап Башҡортостан эсенә керҙеләр.

Ҡазан ханлығы идараһында иң ҙур көрәштәрҙең береһе руханиҙар булып, былар дәүләт эштәренә күп ҡатнашалар, хатта Шәрифҡол аталған баш рухани хан юҡ ваҡытта хандың урынбаҫары булып тора ине. Руханиҙар ҡоролтайҙарға ҡатнашалар, бөтә мәғариф эше улар ҡулында ине. Ҡазан ханлығы бөтөп, унда Мәскәү кенәзлеге дин тураһында бик ҡыҫынҡы юл тотоп, суҡынырға риза булмаған татарҙарҙы Ҡазан ҡалаһынан ҡыуа, һәммә мәсеттәрҙе емертә башланы, байтағы баяр булған мосолман руханиҙары, Мәскәү юлынан алыҫ Башҡортостан дала һәм урмандарына ҡасып, унда халыҡ араһында Мәскәү хөкүмәтенә ҡаршы дошманлыҡ тарата башланылар.

Мәскәү хөкүмәтенең шәреҡкә табан көслө килеүен күргәс, Башҡортостанды биләгән нуғайҙар ҙа Мәскәү менән берләшмәҫ өсөн аҡрынлап көньяғына табан күсә башлап, бер нисә йыл эсендә хәҙерге Башҡортостан тупрағынан сығып бөттөләр.

Сөнки, берҙән, Мәскәү ғәскәрҙәрендә ҡорал яҡшыраҡ (туп һәм мылтыҡтар булыу) сәбәпле, нуғайҙар уға ҡаршы көрәшә алмаҫлыҡ булыу; икенсенән, нуғай бойороғона баш итеп, уларға яһаҡ түләп торорға риза булмаған элекке башҡорт бейҙәренең был форсат менән нуғайҙарға ҡаршы Мәскәү ярҙамы менән файҙаланыуға тырышыуҙары нуғайҙарҙың бында тороуҙарын бик уңайһыҙлаштыра ине.

Шулай итеп, бер нисә йөҙ йыл нуғай кенәздәре идараһында торған башҡорттар хәҙер бер аҙға ирекле, ләкин һис бер дәүләт ойошмаһы булмаған, үҙ-ара берекмәгән хәлдә ҡалдылар.

Ләкин башҡорттар был ирек менән оҙаҡ файҙалана алманылар, Башҡортостандың хужаһыҙ, ғәскәрһеҙ, идараһыҙ ҡалыуын күреп, ул ваҡыттарҙа хәҙерге Ҡытай мәмләкәтенең Жунғария өлкәһенән көнбатышына табан күсә башлап, Башҡортостан күршеһенә килеп еткән ҡалмыҡтар менән ҡаҙаҡтарҙың (ҡырғыҙҙарҙың) Башҡортостанға һөжүм итеп, талауҙары күбәйҙе. Нисә йөҙ йылдар буйына үҙҙәренең, берек һәм ғәскәри ойошмалары булмаған башҡорттар был бәләнән бары ниндәй булһа ла берәр ҙур көс ҡанат аҫтына кереп кенә һаҡлана аласаҡ инеләр; күҙ алдында бындай көс бары Мәскәү дәүләте генә ине.

## Башҡорттарҙың Мәскәү кенәзлегенә ҡушылыуҙары

Иван Грозный Ҡазан ханлығын алғас та хан, мырҙа һәм башҡаларҙың һәммә ерҙә милектәрен үҙ милкенә алып, бынан Ҡазанға ҡаршы хыянат итеп, Мәскәү ғәскәренә ярҙамлашҡан татар баяр һәм мырҙаларына байтаҡ өлөш һәм башҡа бүләктәр таратты.

Был ваҡиға нуғайҙар ҡулында элекке хоҡуҡтарын юғалтҡан башҡорт бейҙәренә ҡыҙығырлыҡ бер өлгө булды. Шул сәбәпле былар бер мең биш йөҙ илле алтынсы йылда Мәскәүгә Иван Грозныйға вәкилдәр ебәреп, үҙҙәренең Мәскәү дәүләтенә ҡушылырға теләүҙәрен белдерҙеләр. Ҡалмыҡ һәм ҡаҙаҡ һөжүменән интеккән башҡорт халҡы был эшкә ҡаршы килмәне. Иван Грозный башҡорттарҙың был һорауын шатлыҡ менән ҡаршы алып, Башҡортостанды Мәскәүгә ҡушыуын иғлан итте. Ул бер мең биш йөҙ етмеш икенсе йылда үҙенең улына яҙған васыят ҡағыҙында Башкирдия мәмләкәтен дә уға ҡалдырыуын белдерә.

Башҡорттар Мәскәү дәүләтенән бары үҙҙәрен химая өмөт итһәләр, Иван Грозный уларҙы Мәскәүҙең көсөнән ҡурҡытып, һуғышмай уҡ Мәскәүгә әсир бирелгән бер халыҡ һанап, шуға күрә эш башланы. Мәҫәлән, башҡорттарға ул ваҡыт өсөн байтаҡ ауыр

булған яһаҡ һалды: һәр бер башҡорт хужалығы Мәскәүгә егерме биш тингә хисаплап бер төлкө, йәки һуҫар тиреһе, йәиһә билдәле хәтле бал бирергә мәжбүр螺 ителде. Бынан тыш Мәскәү кешеләренә юлда йөрөргә бушлай ылау бирергә, Мәскәү ғәскәрҙәренең аттарына кәрәк хәтле аҙыҡ бирә торорға, урыҫ түрәләренә бушлай бесән ташырға, хөкүмәт ғәскәрҙәренә он тартыу өсөн һалынасаҡ тирмәндәрҙә бушлай эшләргә мәжбүр ителделәр. Оҙаҡ тотманы: башҡорттарҙан ғәскәр ҙә алына башлап, улар һәр өс йортҡа бер кешене ғәскәрлеккә бирергә тейеш булдылар. Быларҙан айырым ғәскәр фирҡәләре төҙөлөп баштарында урыҫ главалар ҡуйылды.

Мәскәүҙең яһаған иң ҙур үҙгәреше ер мәсьәләһендә ине. Иван Грозный быға хәтлем Башҡортостанда ер биләгән кешеләрҙең (нуғай кенәздәренең) ергә булған һәммә хоҡуҡтарын бөтөрөп, бөтөн ерҙе Мәскәү батшаһы ере тип иғлан итте лә шунан үҙе бүләк итеп бирергә тейеш тапҡан кешеләргә, был йөмләлә Мәскәү яғына хеҙмәт күрһәткән башҡорт бей һәм ырыуҙарына айырым грамоталар йәки бойороҡтар менән өлөш айырып бирә башланы. Бынан, бер яҡтан, сәйәси маҡсат һәм Ҡазан һуғыштарында татарҙарға ярҙамлашҡан нуғай ҡалдыҡтары бөтөрөү булһа, икенсеһенән, нуғай кенәз һәм баярҙарының биләгән ерҙәрендә күсеп йөрөгән башҡорттарҙың нуғайҙарға теләгән яғын Мәскәү ҡаҙнаһына алыу ине.

Ул ваҡыт, бер яҡтан, күп һуғыштар арҡаһында матди хәле байтаҡ насарланған, икенсе яҡтан, Европа мәмләкәттәре һәм Персия менән алыш-биреш башлап ситкә тауар (күберәк мех) һатырға тейешле булған Мәскәү дәүләте Башҡортостандан яһаҡты мөмкин хәтле күберәк йыйнауҙы тейеш таба, ә нуғай мырҙаларына ла яһаҡ түләгән тәҡдирҙә, башҡорттар Мәскәүгә налог түләй алмаясаҡ инеләр.

Был налог башҡорттарға бик ауыр тойолдо. Берҙән, башҡорттар башҡа фин халыҡтары кеүек тәбиғи һунарсы түгел, быларҙа һунарсылыҡ кәсептән бигерәк спорт рәүешендә бер эш булып, кәрәк хәтле мех етештереү ҡыйын ине. Икенсенән, ул ваҡыт башҡорттарҙың матди хәле бик насарланғайны. Сөнки,

берҙән, нуғайҙар менән китешле бик күп мал әйҙәп алып киткәндәр, икенсенән, башҡорттар борондан килгән ғәҙәттәре буйынса мал өсөн ҡышлыҡ аҙыҡты йәйҙән әҙерләп ҡуймайынса, ҡыш көнө малдары тибендә йөрөп, йыш-йыш килгән йот йылдарында башҡорт малының күбеһе ҡырылып, башҡорттар ваҡыт-ваҡыт бик бөлгөнлөккә төшөп ҡала инеләр. Бынан тыш яһаҡтарҙы Ҡазан ҡалаһына илтеп тапшырыу халыҡ өсөн бик ҡыйын ине. Башҡорттарҙа ул ваҡыт ат егеп йөрөү һәм ҡышҡы юлдар булмағанлыҡтан, яһаҡты ҡыш көнө саңғылар менән Ҡазан ҡалаһына илтеп тапшырырға тура килә ине. Шул сәбәпле Мәскәү ҡанаты аҫтына кереүҙе шатлыҡ менән ҡаршы алған башҡорт халҡы бик тиҙ үҙенең алданғанын аңланы; халыҡта быға ризаһыҙлыҡ көсәйә башланы. Башҡорттарҙың хөкүмәткә яһаҡты кәметеүҙе һорап биргән ҡат-ҡат үтенестәре ҡабул ителмәгәс, быға ҡаршы башҡа саралар күрергә тейеш тигән уй тыуҙы. Бөтөрөлгән Ҡазан ханлығынан Мәскәүгә ҡаршы асыу һаҡлап ҡасҡан груһтар башҡорт халҡының был ризаһыҙлығы менән файҙаланып, Ҡазан ханлығын яңынан ҡоткарып аяҡҡа баҫтырыу уйына төштөләр.

Ул ваҡыттарҙа Ермак тигән бер Дон казачийы ҡул аҫтындағы урыҫтарҙан еңелеп бөтөрөлгән Себер татар ханлығының Себер яландарына ҡасып ҡотолған Күсем һәм уның балалары ла башҡорттар ярҙамы менән яңынан Себер ханлығын тергеҙеп, тәхеткә менеү өсөн Башҡортостанда ҡотҡо һала башланылар. Шулай итеп, Башҡортостан башҡорттар менән Мәскәү дәүләте араһында икс йөҙ йылға һуҙылған ҡорал менән көрәш майҙанға әйләнеүгә аяҡ баҫты.

## Өфө ҡалаһының һалыныуы

Мәскәү хөкүмәте бына ошо хәлде һиҙеп, Башҡортостан эсенә күп ғәскәр ҡуйырға тейеш тапты. Уның планы буйынса:

1) Башҡортостан бер нисә өлөшкә бүленеп, быларҙың араларында крепостар (ул ваҡытта баструк тигәндәр) һалырға.

2) Быларға ғәскәр ҡуйып, баструктарҙың тирәяғына, кәрәк булғанда был ғәскәргә ҡорал менән ярҙам һәм уларҙы аҙыҡ менән тәьмин итеү өсөн урыҫтар күсерергә.

3) Шулай итеп, төрлө өлөшкә бүленгән башҡорттарҙы бер-береһе менән ҡатнашыу һәм ҡушылыуҙан тыйырға кәрәк ине. Ошо маҡсат менән Мәскәү хөкүмәте Башҡортостан эсенә Ағиҙел буйлап ғәскәр ебәреп, хәҙерге Бөрө ҡалаһы урынында Архангельский исемендә бер баструк һалдырҙы, бер аҙҙан Башҡортостандың йөрәгенәрәк ғәскәр ебәреп, Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының бер-береһенә ҡойошҡан ерендә, электән Ҡаратау тип йөрөтөлгән урынында (хәҙерге иҫке Өфө), Өфө ҡалаһын һалдыртты. Өфө өсөн урын 1574 йылда һайланып, бында ҡала һәм баструк 1586 йылда Иван Нагой тигән баяр ҡул аҫтындағы ғәскәр тарафынан һалынды. Өфө һалыныуға Мәскәү грамотаһы буйынса күп ер алып, уларҙы үҙ ҡулдарында биләгән башҡорт бей һәм ырыуҙары ла ярҙамлашалар. Шул сәбәпле Өфө һалыныуға «башҡорттарҙың теләп һорауы буйынса һәм уларға яһаҡ түләүҙе еңеләйтеү өсөн» тигән төҫ бирелде. Дөрөҫ, башҡорттарға яһаҡты Ҡазанға илтеп түләү ҡыйын ине. Ләкин Өфө һалынмаҫ борон Өфө һәм уның көньяғындағы башҡорттар Мәскәүгә баш эймәй һәм налог түләмәй инеләр.

Өфө һалынған урында борон заманда чудтар торғандар. Хәҙер Өфө тирәһендә ер ҡаҙығанда уларҙан ҡалған байтаҡ әйберҙәр табыла. Чудтар китеп бер аҙ ваҡыт үтеп, башҡорттар нуғай кенәздәре ҡулына күскәс, бында Дим буйын биләгән нуғай кенәздәренең ҡышлауҙары булған. Был ҡышлау Өфө тип аталған булһа кәрәк. 1501 йылда Ҡазан ханы Мөхәммәт Әминдең Мәскәүгә, Мәскәү батшаһы менән һөйләшеүгә ебәргән илселәре араһында Өфө кенәзенә лә барғанлыҡ күренә. Быларҙың һуңғы ханы Турабәбәт ҡылыс атлы булып, урыҫтар Ҡазанды алғас Өфөнө ташлап, Кавказ яғына күсеп киткән. Өфөнөң башлап һалынған урыны хәҙер иҫке Өфө тип атала.

Өфө һалыныу Себер ханлығы ҡалдыҡтарына ҡаршы бер эш булыуын һиҙеп, мәмләкәте бөтөрөлөп, үҙе

ҡыуылған Себер ханы балаларынан Аблай менән Түгәй быға ҡамасаулап бында баструк һалдыртмаҫ өсөн Өфөгә һөжүм итһәләр ҙә Ҡазан ун биш саҡрым ерҙә Себер өйөндә, еңелеп әсир төшөп, әсиргә оҙатылдылар.

Мәскәүҙән бүләк итеп ер алып, Мәскәү йырын йырлаған башҡорт бейҙәренең был һуғышта ҡатнашы булған. Икенсе яҡтан, Башҡортостандың көнбатыш һәм көньяғында ҡалған — китеп бөтмәгән нуғай кенәздәре лә (Урыҫ исемле хан), Мәскәү хөкүмәтенең Өфөнө һалыуына протест итеп ҡараһалар ҙа ҡорал көсө менән ҡаршы торорға көстәре етмәне.

Өфө өс яҡтан ҙур йылға, бер яҡтан ур менән ҡамалған көслө бер крепосҡа әйләнеп, ҡалаға Мәскәүҙән ебәрелгән баяр балалары менән ғәскәр урынлаштырылды. Күсеп килеүселәргә ҡала һалынғайны һәм уны ҡорал менән һаҡлап тороуы өсөн хеҙмәт хаҡы урынына ҡала тирәһенән ер таратылды, былар иген сәсергә керештеләр. Ошоноң менән Башҡортостанда урыҫ колонизацияһының беренсе дәүере — ғәскәр һаналған игенселәр колонизацияһы башланылар.

## Башҡортостанға урыҫтар күсеп килеүҙең башлыса сәбәптәре

Иван Грозный батша булған ваҡыт Мәскәүҙең бик ҙур иҡтисади үҙгәрештәр башлаған осоро, ул ваҡыттарҙа Анатолий мәмләкәтендәге төрк хөкүмәте көсәйеп, Рәсәйҙең көньяҡ өлөштәре (хәҙерге Украина) менән ҙур алыш-биреш иткән Византия мәмләкәтен (мәркәзе хәҙерге Станбул ҡалаһы булған грек императорлығын) бик ҡыҫырыҡлап, бөтөнләй бөтөрөп, ҡулға алырға тырыша, шул уҡ ваҡыт Польша мәмләкәте менән Ҡырым татарҙары Украинаға йыш-йыш һөжүм итә инеләр. Был арҡала Украинала халыҡ ҙур иҡтисади уңайһыҙлыҡҡа төшөп, төньяғына, Мәскәүгә табан күсә ине. Мәскәү бик үҫте, тирә-яғында халыҡ тығыҙланды. Был халыҡты туйҙырыу өсөн тирә-яҡтан Мәскәүгә ашлыҡ килтерергә кәрәк булып иген йыйнаусы сауҙагәрҙәр пәйҙә булды, ҡалала һөнәрселәр күбәйеп, һөнәр һәм сәнәғәт башланды. Шулай

итеп, тиҙ арала Мәскәүҙә көслө буржуазия синыфы яралды. Мәмләкәт идараһы күп ерле ҙур баярҙар ҡулында булыу — буржуазия өсөн уңайһыҙ, сөнки бөтә закондар күп ерле баяр файҙаһын күҙәтеп төҙөлә, буржуазияға күп налогтар һалына ине. Шул сәбәпле былар мәмләкәт идараһын ҙур баярҙарҙан тартып алып, үҙ ҡулдарына эләктереү уйына төштөләр.

Ҙур баярҙар ҡулында хеҙмәтсе булырға мәжбүр булған ваҡ баяр һәм дворяндар ҙа үҙ тормоштарын яҡшыртыу өсөн был көрәштә буржуазия менән берләшеп, ҙур баярҙарға ҡаршы көрәш астылар. Ҙур баярҙар ҡулында уйынсыҡ булып торорға теләмәгән Мәскәү кенәзе лә (Иван Грозный) уларҙың праваларын бөтөрөп, улар хисабына үҙ ҡаҙнаһын байытыу өсөн был яңы аяҡҡа баҫҡан көстәр менән файҙаланырға тейеш тапты. Шулай итеп, бер яҡтан Мәскәү дәүләтендә буржуазия менән хеҙмәт кешеләре (ваҡ дворян һәм баяр) синыфтары көс ала; икенсе яҡтан Мәскәү кенәзе үҙ праваһын арттырып, самодержавный булырға тырыша ине. Шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙә өсөнсө груһ ҙур көс ала — руханиҙар. Төрктәр Византия мәмләкәтен бөтөргәс, унда электән күп ер һәм милек биләп, иҡтисади һәм сәйәси тормошта ҙур урын биләгән грек монастырҙарын һәм сиркәүҙәрен иҫән ҡалдырһалар ҙа ер һәм крәҫтиәндәре төрк ғәскәре башлыҡтарына биләргә тип бүлеп бирҙеләр. Быны менән грек руханиҙарының һәм сиркәүенең иҡтисади үҫеүенә ҙур кәртә ҡуйыла. Улар эстән быға риза булмай; ул ваҡыт берҙән-бер көслө православие мәмләкәте булған Мәскәү дәүләтенең ярҙамы менән яңынан төрктәр ҡулынан ҡотолоп, элекке хакимлыҡтарын ҡайтарыу өсөн Мәскәү кенәзен православие һаҡсыһы итеп ҡарай башлайҙар. Византия тажы Иван Грозныйға тапшырыла.

Шулай итеп, Иван Грозныйға православие дин башлығы һәм киләсәктә Византияны үҙ ҡулына алырға тейешле вариҫ ителеп ҡарауы Мәскәүҙә руханиҙарҙың көсөн бик арттыра. Төркиә идараһынан ҡасҡан грек руханиҙары Мәскәүгә тулалар.

Бына был өс синыф өсөн Мәскәү кенәзлегенең шәреҡҡә һөжүм башлауы кәрәк ине. Руханиҙар

мәсьәләгә дин таратыу һәм мосолман халҡын бөтөрөү һәм шәреҡкә сиркәү-монастырҙар өсөн ер-байлыҡ алыуға кәрәкһенәләр. Станбул төрктәр ҡулына күскәс, ул яҡтар менән алыш-бирештәре киҫелгән буржуазия шәреҡ-Һиндостан, Төркөстан һәм Ҡытай менән алыш-биреш итеп табыш күреү өсөн юл эҙләй, ваҡ дворяндар хөкүмәткә ғәскәр һәм түрә булып ялланып, шәреҡтә тамаҡ туйҙырырға, ерҙәрен арттырып байып ҡалырға тырышалар ине. Башҡортостан Мәскәү хөкүмәте ҡулына кергәс тә Мәскәү буржуазияһы:

1) Башҡортостанда халыҡ һирәк һәм бик ярлыланып ҡалған булыу;

2) Мәркәз хөкүмәт башҡорттарҙың тәбиғи байлыҡтарын (мех, сырье кеүек) налог рәүешендә алып, буржуазияға быларҙы мәркәз ҡалаларҙа Ҡазандан ғына һатып алыу осһоҙораҡ һәм уңайыраҡ төшөү;

3) Был налогты түләгәндән һуң башҡорттарҙа һатырлыҡ нәмә һәм тауар һатып алырлыҡ байлыҡ күп булмау;

4) Башҡортостан арҡылы Төркөстан һәм Һиндостанға сауҙа юлы элек уйламаған рәүештә яҡын һәм уңайлы булмау, Мәскәү сауҙа аппараттары киң яландар арҡылы карауандар йөрөтөргә әҙерлекле булмау сәбәпле Мәскәү буржуазияһы Башҡортостанға килмәй, Волга буйлап Астрахань арҡылы Персия һәм Кавказ менән эш йөрөтөргә керешге.

Ә ваҡ баяр һәм түрәләр (күберәк Ҡазанды алыуҙа хеҙмәт итеп тә шунан үҙҙәренә кәрәк хәтле ер ала алмай ҡалғандар, шулай уҡ руханиҙар) киң башҡорт ялан һәм урмандарын өләшеп алып, хужа булыу өсөн Башҡортостанға тула башланылар. Мәскәү дәүләте һуғышҡа ҡатышҡан был ғәскәр һәм түрәләргә аҡсалата жалованье түләй алмағас, уларға хеҙмәт хаҡын ер-урман менән бирә һәм башҡорттарҙы түләгәнсе байлыҡ талап йыйнарға права биргәйне.

Шулай итеп, Башҡортостанға беренсе башлап килеүсе колонизаторҙар ғәскәр һәм түрә (баяр) булды. Бынан тыш Мәскәү хөкүмәте мәркәздә тотоу ҡурҡыныслы булған сәйәси ышыныстыҙ кешеләрҙе лә бында һөрә башланы.

## Башҡортостанда колонизацияның беренсе осоро (дәүере)

Башҡортостанға башлап колонизация ни рәүештә барғанлыҡты ошо хисаптар асыҡ күрһәтә: 1625 йылдан 1636 йылға хәтле ун ике йыл эсендә Мәскәү яғынан барыһы 560 түрә һәм 2700 самаһы ғәскәр һәм бер аҙ самаһы ышаныслыҙ кеше күсертелеп ултыртылған. Былар Өфө ҡалаһы тирәһенә ултыртылып, ҡаланың һәр яғында утыҙ-ҡырҡ саҡрымлыҡ ер быларға бүленеп бирелгән. Революция алдында Өфө тирәһендә ер биләгән баярҙарҙың күбеһе ошо ваҡытта килеп урынлашҡан баяр балалары нәҫеленән ине. Шул уҡ мәлдәрҙә Башҡортостанда Мәскәү яғындағы монастырҙарҙа күп ер алып, быларҙа монастырҙар һалынды. Унда монахтар килеп тулдылар һәм монастырь ерҙәрен эшләтеү өсөн байтаҡ монастырь крәҫтиәндәре күсерелде.

1665 йылда Мәскәү батшалығы Польша мәмләкәте менән һуғышып, хәҙер былар Русиә йөмһүриәте булған ерҙәрҙе алғас, ундағы үҙенә ҡурҡыныслы поляк көстәрен бөтөрөү өсөн бик күп поляк дворян һәм крәҫтиәндәрен дә Башҡортостанға күсереп, хәҙер Татарстанда ҡалған Минзәлә һәм Бөгөлмә кантондарында, аҙы Шишмә, Тинский баструктарын һалып, шунда ултыртты. Бынан һуң Башҡортостанға ғәскәр һәм игенселәр күсереү көсәйеп, 1663 йылда Бөрө ҡалаһы, шул уҡ йылда Өфөнөң көньяғында Ағиҙелдән алыҫ түгел Ысулка йылғаһы буйында Табынский бастругы һалынып, бында тоҙло йылғанан тоҙ сығарыла башлай. Шул уҡ мәлдәрҙә Урал тауҙарының аяғында, Мәскәү сәйәсәтендә хеҙмәт итеп, бының өсөн үҙенә тарханлыҡ һәм бик күп ер бирелгән Таймаҫ Шаимов тигән башҡорт бейенең ерендә, уларға ҡаҙаҡтар менән һуғышта ярҙам өсөн тиеп, Силәбе баструғы һалына. Быларҙың һәр береһенә семьялары менән ғәскәр ҙә күсерелеп урынлаштырыла.

Шулай итеп, бер яҡтан Башҡортостан төньяғынан көньяғына табан баструк һәм крепостар менән икегә айырылған кеүек, ҡояш батышынан башлап ҡояш сығышына табан да икегә айырыла.

Башҡортостанға башлап колонизация, бер яҡтан, ошолай хөкүмәт планы буйынса билдәле бер тәртип менән алып барылһа һәм башлыса бында ғәскәр халҡы һәм түрәләр (баярҙар) күсерелһә, шул уҡ ваҡыт бында тәртипһеҙ рәүештә ваҡ милләттәр һәм йәбер-золомдан ҡасыусылар ҙа ситтән тулҡын кеүек ағылып килә башлайҙар.

Мәскәү дәүләтендә булған дин ҡыҫыуҙарҙан ҡасҡан раскольниктар (православие сиркәүҙән айырылып сығыусылар), Рәсәйҙә баярҙарҙың сикһеҙ эшләгән йәбер һәм ҡыҫыуҙарынан ҡасҡан ҡол крәҫтиәндәр, ҡаҙна тарафынан ер һәм милеге тартып алынған халыҡ, төрлө енәйәт эшләгәс яза бирелеүҙән ҡурҡып ҡасҡан кешеләр киң Башҡортостандың ялан һәм ҡараңғы урмандарына ҡасып ҡотолоу өсөн бында тулалар. Ҡазан өлкәһендә ерҙәре тартып алынып баяр һәм монастырҙарға таратылған йәки хөкүмәттең көсләп суҡындырыуынан ҡурҡҡан татар, мари, сыуаш һәм арҙар, ул баяр һәм монастырҙар ҡулында ҡол булып ҡалмаҫ өсөн груһ-груһ бында киләләр. Шул уҡ ваҡытта ҡаҙаҡ Бохара һәм Хиуала ҡол булып торған төрлө милләт кешеләре ҡоллоҡтан ҡасып китеп, Башҡортостанға килеп һыйыналар. Киң Башҡортостан яландары быларҙың барыһын да һыйындыра, туйындыра, һаҡлай. Былар үҙҙәре менән Башҡортостанға игенселек алып килеп, иген сәсә башлайҙар. Былар баструк тирәһендә урынлашмай, Башҡортостандың эсенә, ҡараңғы мөйөштәргә тарҡалалар. Башҡорт халҡы быларҙы яҡшы ҡаршы ала. Башҡортостанда халыҡ арта.

Ғәскәрҙәр баструктарҙа (бәләкәй крепость) тороп, баструктарҙың ниндәй ауыл булыуын Табынский баструғының рәүеше асыҡ күрһәтә: Табынский һәр яҡтан тәрән соҡор һәм ур, уның эсенән бүрәнә ҡойма менән ҡамалған, эсендә казачий менән ярты рота йәйәүле ғәскәр һәм бер нисә туп ҡуйылғайны. Баструктың уртаһында хөкүмәт канцелярияһы булып, уның тирә-яғында халыҡ йорттары һәм сиркәү һалынғайны.

## Башҡортостанды идара яғынан бүлеү

Ҡазан ханлығы халыҡтан налог йыйнау эшендә бер нисә «Даруга»ға (Малиә төбәгенә) бүленгәйне. Үҙенең идара аппараттарын Ҡазан ханлығынан өлгө табып төҙөгән Мәскәү батшаһы Башҡортостанды алғас, уны шулай дүрт даруғаға бүлеп идара итә башланы (был һүҙ урыҫса юл мәғәнәһендәге «дорога»ға оҡшау сәбәпле бара торғас, уны «юл» тип йөрөтә башланылар). Башҡортостандың Ҡазан ҡалаһына тартым ерҙәре Ҡазан даруғы, Уса ҡалаһына тартым ерҙәре Уса даруғы, Себергә яҡын ерҙәре Себер даруғы, Ҡазан ҡалаһына тартым көньяҡтары элек бында нуғайҙар тороу сәбәпле — Нуғай даруғы тип аталды. Һәр бер даруға улустарға (волосҡа), улустар аймаҡтарға бүленде.

Улус башында башҡорттар тарафынан һайланған старшиналар ҡуйылды. Ләкин, ғәҙәттә, былар гел элеккe бейҙәр нәҫеленән һайлана ине. Өфө ҡалаһында воевода ҡуйылып, хәҙерге Башҡортостандың Йылайыр кантонынан башҡа бөтә урындары һәм Минзәлә, Уса яҡтары был воевода ҡарамағына тапшырылды. Воеводаларға Өфө өлкәһендә тынысльҡ һаҡлау, халыҡтан яһаҡ йыйнау, иҫерткес һәм суд эштәре өсөн пошлиналар йыйнау, баярҙарға ер хоҡуҡтарын һаҡлау кеүек эштәр тапшырылғайны. Хәҙерге Арғаяш, Силәбе, Тамъян-Ҡатай Исәт өлкәһе аталып, унда айырым воеводалыҡ ҡуйылды. Воеводалар һәм улар янындағы башҡа ҙур түрәләр ҡаҙнанан жалованье алмай хеҙмәт итәләр, бәлки, үҙҙәре воевода булыу һәм был урынын һаҡлау өсөн батшаға һәм хөкүмәт башындағы кешеләргә гел бүләктәр биреп торорға тейеш инеләр. Бының өсөн һәм үҙ тормоштарын тәьмин итеү өсөн былар Ҡазанға налог йыйнауҙан тыш үҙ файҙаларына ла халыҡтан (башҡорттарҙан) ришүәт һәм башҡаса (талап) байлыҡ йыйнарға мәжбүр булалар ине. Башҡорттарҙа яһаҡ ауырлыҡҡа, бындай талауҙарға һәм бушлай хөкүмәт эштәрендә эшләтеүгә ризаһыҙлыҡ бик көсәйеп, тулҡынланыуҙар башланғас, Рәсәйҙең төрлө ерҙәренән ҡасып килеп урынлашҡан халыҡтар ҙа был турала башҡорттар менән бер

һүҙҙә булғанлыҡ аңлашылғас, хөкүмәт бары ғәскәре колонизаторҙар менән генә башҡорт болаларын баҫа алмаясағын һиҙеп, башҡорттарҙан, үҙ араһынан хөкүмәткә ярҙам итерлек груһтар тыуҙырыу сараларын көсәйтте. Былар:

1) Тархандар. Һәр ваҡыт хөкүмәткә ярҙамлашып, кәрәк булғанда ғәскәр булып хеҙмәт иткән һәм батша грамотаһы менән үҙҙәренә биләргә ер бирелгән ырыу башлыҡтары. Быларҙың ерҙәренә тейелмәй, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылалар.

2) «Служилый» башҡорттар. Былар хөкүмәткә ялланып ғәскәр булып хеҙмәт итәләр, быларға яһаҡ һалынмай, өҫтәүенә үҙҙәренә ҡаҙнанан жалованьс бирелә ине. Быларҙан ҡалған башҡорттар ясачный аталып, ҡаҙнаға яһаҡ түләйҙәр һәм башҡорттарға мәжбүри рәүештә йөкләтелгән башҡа повинностарҙы башҡара инеләр. Тархан һәм служилый башҡорттар ясачныйҙарҙы хөкүмәткә буйһондороп тороуҙа хөкүмәт ҡулында ҡорал хеҙмәтен үтәй инеләр.

## Колонизация башында хөкүмәттең ер сәйәсәте

Иван Грозный башҡорттарҙы үҙ химаяһына алған саҡта бөтә башҡорт ерен хөкүмәт һәм батша милке һанап, шунан хөкүмәткә ярҙамсы ышаныслы башҡорттарға вә ырыуҙарға бары айырым «мәрхәмәт» рәүешендә генә айырым грамоталар буйынса ер бирә, быларҙан тыш һәммә ерҙәр хөкүмәт ҡулында ҡалып, бында ғәскәрлек һәм башҡа хеҙмәттәргә ебәрелгән кешеләргә һәм монастырҙарға таратыла ине. Ҡазан яғынан, Мәскәү дәүләтенә ҡаршы көрәшеп ҡасҡан татар, сыуаш һәм башҡа ваҡ милләттәрҙең бында туп-ланып ултырып көс йыйнауынан ҡурҡып, шулай уҡ Мәскәү баярҙары ерендә тороп та улар файҙаһына эшләгән крәҫтиәндәрҙең, баяр ҡулынан ҡотолоуы өсөн ирек эҙләп Башҡортостандан ҡасып бөтөү-ҙәренә юл бирмәҫ өсөн хөкүмәт башҡорттарҙың хөкүмәттән рөхсәтһеҙ быларға ер биреүҙәренә уңын һыҙлы, уларға башҡорт ерҙәрен ижарога алып ултырыуға ғына рөхсәт итә ине. Шул сәбәпле улар ҡараңғы мөйөштәргә тарҡалалар ҙа башҡорттар менән килешеп, үҙҙәрен башҡорт тип күрһәтәләр һәм

хөкүмәткә түләгән яһаҡтан тыш башҡорттарға ла айырым оброк түләп, башҡорт еренән ваҡытлыса файҙаланалар, йәиһә берәр баяр менән аңлашып, уның именияһы тирәһенә йыйналып ултырып, уның крәҫтиәне булып яҙылалар, уның химаяһында ер менән файҙаланалар ине.

Ғәскәрлек һәм хеҙмәттә булып Башҡортостанға килгән һәм күп ер алған баярҙар, бында эшселәр таба алмау сәбәпле башта хужалыҡ ҡора алмай тороу, ерҙән файҙалана алмау арҡаһында ҙур ауырлыҡ күрәләр, ярлы торалар ине. Быларҙың файҙаһын күҙәтеп төҙөлгән был закон уларҙы эшсе менән тәьмин итте. Улар үҙ ерҙәрен крәҫтиәндәрҙән эшләтеп файҙалана һәм тиҙ ҙур иҡтисади көс йыйнай башланылар. Ер биләүселәрҙең былай крәҫтиән көсө менән файҙаланыуҙары баярҙарҙа ер арттырыуға тырышыуҙы күбәйтте. Иван Грозный, грамоталары менән күп һаташып тормай, башҡорттарға мәңгелеккә тип бирелгән ерҙәрҙе лә тартып алып биләй башланылар. Был хәл башҡорттарҙа киләсәктә бөтә башҡорт ере шулай тартылып алынасаҡ, тигән ҡараш тыуҙырҙы. Был хәл, бер яҡтан, ер өсөн көрәш уйын тыуҙырһа, икенсе яҡтан, ерҙең ҡәҙерен дә бөтөрөп, башҡорттарҙың, барыбер буш тартып алынасаҡ ерҙәрҙе мөмкин булһа аҙ ғына булһа ла аҡсаға һатып рәхәтен күреп ҡалыу ғәҙәттәре башланыуға юл әҙерләне.

## Башҡорт болалары башланыу

Мәскәү дәүләте ҡулына кереп оҙаҡ торманылар, башҡорттар ошо хәлде кисерә башланылар:

1) Ноғайҙар киткән саҡта, бик күп малдары таланып алынып китеү сәбәпле, башҡорттар бик ярлыланып ҡалғандар. Унан һуң мал бер аҙ үрсей башлаһа ла башҡорттарҙа мал өсөн йәйҙән ҡышлыҡ аҙыҡ һәм бесән әҙерләп ҡуйыу ғәҙәте булмай, малдың яҙмышы тәбиғәттең килешенә бәйле булып, юҡ йылдарҙа мал бик күп һәләк була; халыҡ тағы ла ярлылана ине. Был халыҡҡа хөкүмәткә һәр хужалыҡ башына егерме биш тинлек налог түләү бик ауыр ине. (Ул ваҡыттағы егерме биш тин хәҙерге алтын егерме биш тин түгел,

бәлки унан һигеҙ-ун тапҡыр ҡыйбатыраҡ йөрөгән аҡса, ул ваҡытта бер һыуһар йәки төлкө тиреһе егерме биш тингә иҫәпләнеп йөрөгән.)

2) Хөкүмәт был яһаҡҡа ғына ҡәнәғәт итмәй, башҡорттарға туй налогы һалырға булып, уларҙың бик асыуын килтерә.

3) Воеводалар, баяр һәм дворяндар башҡорттарҙы бик талайҙар, малдарын да, файҙаланған ерҙәрен дә тартып алып, был ерҙәрҙә мал йөрөтөүҙе тыялар, был ерҙәргә ингән малдарын баҫып, үҙҙәренә алалар.

4) Һәр бер ҡала һәм баструк һалынғас, уның тирәһе урыҫтар менән тултырылып, шул тирәләге бөтә башҡорттар ситкә ҡыуыла.

5) Ҡазан яғынан ер һәм милектәре тартып алынғас, ҡасып килеүселәр башҡорттар ярҙамы менән, элекке хакимиәт һәм милектәрен кире ҡайтарып алыу өсөн башҡорттарҙы Мәскәү хөкүмәтенә ҡаршы көрәшкә димләй. Тархан була алмай ҡалған һәм ерҙәре тартып алынған башҡорт ырыу башлыҡтары ла ҡотҡоға ярҙамлаша.

Бына ошо хәлдәр башҡорттарҙың Мәскәү хөкүмәтенә ҡаршы ҡорал менән аяҡланып, көрәш асыуҙарына майҙан әҙерләне.

Башҡорттарҙың беренсе бындай көрәше 1584 йылда уҡ ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтар ярҙамы менән Яйыҡ буйҙарында сыҡты. Былар Мәскәүгә яһаҡ түләргә риза булмай, ҡарышып аяҡландылар. Ләкин был бола оҙаҡҡа бармай, хөкүмәт быларҙан яһаҡ һорауҙы туҡтатҡас та баҫылды. Был беренсе хәрәкәттең уңышлы бөтөүе башҡорттарҙа ҡорал менән үҙ хәлдәрен еңеләйтә алыуға ышаныс тыуҙырҙы.

Бынан һуң ҡуҙғалған икенсе ҙур бола — 1645 йылда хәҙерге Борай һәм Минзәлә кантондарындағы башҡорттарҙың болаһы. Быларҙың аяҡланыуына бик күп ерҙәре ситтән күсерелгән урыҫ һәм поляк колонистарына тартып алынып бирелеп башҡорттарға яланда күсеп йөрөргә һәм мал йөрөтөргә яландар аҙайып ҡалыу, колонизаторҙар еренә кергән башҡорт көтөүҙәрен улар тотоп ябыуҙар күбәйеү булды. Башҡорттар быға асыуланып быларҙың ауылдарына һөжүм итеп яндырҙылар, таланылар һәм Минзәлә

ҡалаһына ла һөжүм иттеләр. Ләкин шунда башҡорттар еңелеп, бик күбеһе тотолоп атылды, үлтерелде. Был болаға Ҡазан яғынан килмешәк татарҙар бик нығ ҡатышҡайны. Шул сәбәпле хөкүмәт 1649 йылда башҡорттарҙың Ҡазан килмешәктәренә бер нисә генә йылға булһа ла арендаға ер биреүҙәрен тыйып бойороҡ сығарҙы. Ситтән ярҙам бирелеп сығарылған беренсе боланың уңышлы сығып та, ситтәр ҡатышынан башҡа аҙ ғына бер урында сыҡҡан был боланың уңышһыҙ сығыуы башҡорттарҙа ҡотолоу өсөн көрәштә тыштан ярҙам кәрәк, тигән фекерҙе тыуҙырҙы. Оҙаҡ та үтмәй, ситтән шундай ярҙам күрһәтеүселәр табыла башланы. Хәҙер Башҡортостанда ер менән файҙаланыу хоҡуғынан мәхрүм ителгән татар, мишәр, сыуаш һәм башҡа ваҡ милләттәр ҙә бик ауыр матди хәлгә төшөп, ер менан файҙаланыу правоһын ҡайтарыу өсөн хөкүмәткә ҡаршы нығ көрәшкә әҙерләнә башланылар.

## Себер тэьҫире менэн сыҡҡан болалар

Был ваҡыт элекке Себер ханлығын бөтөрөп, уның ерҙәрен алған Рәсәй ғәскәрҙәре киткән һайын ҡояш сығышына һәм көн яғына табан йәйләп, Рәсәйҙең колонияларын арттыралар. Себер халҡы быға ҡаршы көрәшһәләр был хәрәкәтте туҡтата алмай ине. Был һуғыштар Төркөстан һәм Бохараның Себер менән булған сауҙаһын туҡтатты. Бынан зыян күргән Төркөстан сауҙа капиталы, Рәсәйҙең был хәрәкәтен туҡтатып, Себерҙе яңынан үҙ баҙарына әйләндереү өсөн Башҡортостанда бола сығарып Рәсәйҙең Себер юлын киҫәргә тейеш таптылар. Элек Себер тәхетендә ултырып та хәҙер тәхеттән яҙып, ҡаҙаҡ яландарына ҡасып, шунда торған Күсем фамилияһы (хан нәҫеле) был эштә ҡорал ителеп файҙаланылды. Былар бабаларының тәхетен ҡайтарыу өсөн тип хәрәкәт башлап, 1651 йылда хәҙерге Арғаяш кантонына һәм уның тирәләренә килеп, Урал тауҙарындағы байтаҡ урыҫ ауыл һәм ҡалаларын алып яндырҙылар. Ләкин Башҡортостандың башҡа яҡтарындағы халыҡ был хәрәкәттән хәбәрһеҙ һәм әҙерлекһеҙ булыу арҡаһында

быға ҡушылманы, шул сәбәпле был бола еңелеү менән бөттө, ләкин 1662 йылда был хәрәкәт яңынан ҡуҙғалып, быныһына башҡорттарҙан тыш, Исәт өлкәһендәге татар менән мариҙар ҙа ҡушылды. Былар күп урыҫ ауылдарын яндырып, халҡын үлтереп, малдарын талап киттеләр. Эштең былай уңышлы барыуы башҡорттарҙың рухын күтәреп, бола хәҙерге Красноуфимск һәм Кунгур яҡтарына ла йәйелде. Бында ла башҡорттар менән Ирән татарҙары берләшеп шул тирәләге бөтә урыҫ ауылдарын яндырҙылар һәм Кунгур бастругын һуғышып алып, халҡын ҡырҙылар. Шул уҡ ваҡытта Күсемдәр егерме мең ғәскәр менән Төмән, Турин, Верхотур яҡтарына һөжүм итеп Себер ханлығын тергеҙергә тырыштылар. 1663 йылда Себер ханлығын даулаусыларҙан Көсөк хан байтаҡ ғәскәр менән Эрбет ҡалаһына һөжүм итте. Ләкин был һуғыштар себер татарҙарының да, башҡорттарҙың да ныҡ еңелеүҙәре менән бөттө. Бының сәбәптәре:

1) Себер хандарының был һуғышҡа башҡорт халҡын ҡотҡарыу өсөн тип ҡарамай, бары үҙҙәренә тәхет ҡайтарыу өсөн бер ҡорал тип кенә ҡарауы. Шул сәбәпле арала ныҡ берлек булмай, бер-береһенә ныҡ ярҙамлашмау.

2) Рәсәй ғәскәренең ул ваҡытта һуң ысулда булған ҡоралдар (туп, мылтыҡ) менән файҙаланыуы, ә башҡорттар менән себер татарҙары араһында уҡ, һөңгө кеүек кенә ҡоралдар булыу.

3) Башҡортостан һәм Себер яландарында борондан крепостар һалыу ғәҙәти булмағанлыҡтан, себер һәм башҡорт ғәскәренең крепостарға ҡаршы һуғыш тәртибен белмәүҙәре. Хәлбүки, урыҫ ауыл һәм ҡалалары һәр береһе бер крепосҡа әйләндерелеп, башҡорт һәм себер ғәскәрҙәренә оҙаҡ ваҡыт ҡаршы тороп, уларҙың тиҙ алға барыуҙарына ирек бирмәүҙәре.

4) Мәскәү дәүләтенең айырым тәрбиәләнгән ғәскәре булғанда оҙаҡ ваҡыттар үҙҙәренә дәүләт тота алмай йәшәгән башҡорт һәм Себер татарҙарында бындай ғәскәр синыфы һәм дисциплинаһы булмау.

5) Рәсәй ғәскәре бер урында ҙур көс йыйнап, башҡорт һәм Себер татарҙарының төп көстәренә удар яһау, һуңынан ваҡ-төйәк отрядтарҙы бөтөрөү юлын

тотҡанда башҡорт һәм татарҙар хөкүмәт ғәскәренең төп ғәскәренә удар яһарға тырышыу урынына башта уҡ тарҡалып, айырым-айырым ауыл һәм баструктарға һөжүм итеп, үҙ көстәрен бөтөрөү.

6) Ҡыш аҙағында башҡорт аттары, ҡар тәрәнәйгәс, аслыҡтан хәлһеҙләнеп һуғышҡа яраҡһыҙланыу.

## Сәйет яуы

Был һуғыштар еңелеү менән бөтһәләр ҙә башҡорттарҙың көрәшен, рухын һындырманы, бәлки арттырҙы. Сөнки был һуғыштарҙа:

1) Башҡорттар араһынан һуғышсылар (ғәскәр) груһы бер аҙ әҙерләнеп ҡалды.

2) Хөкүмәт башҡорттарҙы баҫҡан саҡта бик күптәре таланып, хужалыҡтары бөтөнләй емерелде, ерҙәре тартып алынды. Хәҙер былар бары һуғыш һәм талау арҡаһында ғына тамаҡ туйҙыра алырлыҡ йолҡош булып ҡалдылар.

3) Үткән һуғыштарҙа бик ҙур хата — көстәрҙе ныҡ берләштермәй, айырым-айырым хәрәкәт итеү булғанлыҡты һуғышсы груһтар яҡшы аңлап, береккән план менән эш йөрөткәндә, хөкүмәт ғәскәрен еңеү мөмкинлеккә ышаныу тыуҙы.

Был фекер муллалар арҡылы Башҡортостандың бөтә мөйөштәренә йәйелә башлай. Халыҡ әҙерләнеп өлгөргәс, 1664 йылда Сәйет атлы старшина ҡул аҫтында бик ҙур бола башланып, бының тулҡындары биш йылғаса һуҙыла. Был болала Өфө башҡорттары, мариҙары, Башҡортостандың төньяғында булған Уржум, Вятка һәм Ирән татарҙары берләшеп эш күрәләр. Өфө һәм Ҡазан яҡтарында бик күп урыҫ ауылдары яндырылып, халҡы ҡыуыла. Башҡорттар Өфөнө емереү өсөн Өфөгә лә яҡынлашалар. Хөкүмәт башҡорттарға һәр төрлө еңеллектәр вәғәҙә ҡылып ҡараһа ла быға хәтле хөкүмәт вәғәҙәләренә ышанғылап, уның аяныслы нәтижәләрен күргән башҡорттар хәҙер быға ышанмайҙар. Шул сәбәпле хөкүмәт Украина һәм Яйыҡ буйҙарынан (хәҙерге Уральск губернаһы) бында күп казачийҙар килтертеп, былар ярҙамы менән 1680 йылда был боланы баҫты.

Был бола башҡорт хәрәкәтенә яңы төҫ бирә. Хәҙер уның башында (ҡотҡосолар) тәхет ҡайтарырға тырышҡан Себер хандары түгел, бәлки муллалар. Сәйет старшина үҙе башҡорттар араһында Сәйет Йәғәфәр аталып йөрөгән атаҡлы бер мулла булып, халыҡ уны әүлиә һанай ине. Был хәл ул мәлдәрҙә Башҡортостанда мулла синыфы бик көсәйеп ҙур урын тота башлағанлыҡты күрһәтә. Шул сәбәпле бынан һуң булған башҡорт болаларына дини төҫ тә бирелә башлай, дин ҡорал ителеп тотола.

## Алдар-Күсем яуы

Сәйет болаһы бик ҡатылыҡ менән баҫылды, тағы ла хисапһыҙ күп башҡорт хужалыҡтары емерелде (малдары таланды), Башҡортостан йортһоҙ, малһыҙ, тамаҡлыҡ эҙләп ҡасып йөрөгән башҡорттар менән тулды. Мал һәм милкен йәшереп ҡалған башҡорттарға болаға ҡатнашҡандары өсөн яза урынына яңы налог һәм штрафтар һалынды. Халыҡ быларҙы түләй алмағас, уларҙың мал вә милектәрен көсләп тартып алыуҙар башланды. Шулай итеп, был башҡорттар ҙа хужалығынан айырылып ҡасып йөрөргә мәжбүр булып ҡалдылар. Быларҙың таланған малдары быларҙы баҫыусыларға таратылып, халыҡтың быға бик асыуы килә, уларҙы кире талап алып китергә тырыша башланы. Башҡорттар өсөн тамаҡ туйҙырырға берҙән-бер таланған милектәрен кире урлап, әйҙәп китеү булып ҡалды. Колонистар быға юл бирмәҫ өсөн ҡоралланып, ҡайҙа башҡортто осратһа, уға ҡараҡ тип ҡарап һөжүм итә, үлтерә башланылар. Һәр бер түрә имениеһы һәм уның ҡулында булған урыҫ ауылы бәләкәй бер крепосҡа әйләнде. Ҡояш байый башланы иһә, баҫыуҙа һис кем ҡалмай. Малдар ҡалдырылмай, ауылға алып ҡайтылып бикләнә, ауылдың төрлө яғына ҡоралды һаҡсылар ҡуйыла, ауыл халҡы баҫыу эштәренә сыҡҡанда ҡоралланып бергә йыйылып сығалар, яҡын-тирәлә башҡорт күрҙе иһәләр, уға аталар ине. Шулай итеп, хөкүмәттең бер яҡтан башҡорт малын урыҫ халҡына тартып биреүе, икенсе

яктан башҡорт хәрәкәтенә етәкселекте үҙ ҡулына алған муллаларҙың, был болаларға дини төҫ биреүҙәре, башта бер-береһенә дуҫ булып татыу торған башҡорт массаһы менән урыҫ крәҫтиәндәрс араһына ла дошманлыҡ индерҙе. Хөкүмәт был дошманлыҡты арттырыу өсөн православие руханиҙарын мобилизовать итеп, улар ҡара халыҡ массаһын христианлыҡ исеменән башҡорттарға ҡаршы ҡоторта башланылар.

Башҡортостанға Рәсәйҙән ҡасып килгән, һөргөнгә ебәрелгән йәки һалдат булып килеп тә бында урынлашып ҡалған ирҙәр бик күп булып, быларға ҡатынҡыҙ ҙа етешмәй, былар семья төҙөй алмай аптырайҙар ине. Поптар быларҙы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын көсләп урлап суҡындырып өйләнеүгә ҡоторта башланылар. Бындай ваҡиғалар күбәйҙе. Бына бындай әхүәлдә яңынан башҡорт болалары башланасағы тәбиғи ине. Шул сәбәпле 1705—1707 йылдарҙа Башҡортостанда Алдар-Күсем яуы исеме менән йөрөтөлгән ҙур бер ҡуҙғалыш сыҡты.

Был болала ҙур урын тотҡан кешеләрҙең береһе Ҡырым, Кавказ һәм Истанбулда йөрөп уҡыған бер башҡорт муллаһы булып, уны урыҫ тарихтарында «Әүлиә Солтан» тип йөрөтәләр. Ул Кавказға барып ундағы нуғай, татар, ҡумыҡ һәм башҡа милләттәрҙе һәм Мәскәүҙәге дини ҡыҫыуҙарҙан ҡасҡан урыҫ раскольниктарын ойоштороп, Рәсәйгә ҡаршы ҡорал менән көрәш аса. Ләкин бының ғәскәре 1707 йылда Кавказда Терек йылғаһы эргәһендә Мәскәү ғәскәре тарафынан еңелеп тарҡалды, ул Башҡортостанда башланған көрәшкә ярҙамға килә алманы.

Ә шул уҡ мәлдәрҙә Башҡортостандың үҙендә Уса юлында Күсем, Ҡазан юлында Исмәғил, Нуғай юлында Алдар ҡул аҫтында башланған ҙур болала башҡорттар Ағиҙел, Кама һәм Һамар йылғаһы буйындағы ауылдарҙы яндырып, Өфө, Бөрө һәм Минзәлә ҡалаларын ҡаманылар һәм Ҡазан ҡалаһына ла һөжүмгә китеп, унда барып етмәҫ борон Ҡазандан утыҙ саҡрым ерҙә еңелделәр.

Ул ваҡытта Рәсәй мәмләкәте бик ҙурайып императорлыҡҡа әйләнгән, эш башында император Петр I тора ине. Петр I был ҡуҙғалыш сыҡҡанда Рәсәйҙең

күршеһе булған Швеция мәмләкәте менән һуғышын маташа ине. Шул сәбәпле башҡорттарҙы баҫырға күп ғәскәр ебәрә алмай, башҡорттарҙың күршеләре булып хәҙерге ҡаҙаҡ далаларында күсеп йөрөгән ҡалмыҡ хандарынан ярҙам һораны. Уларға башҡорттарҙы теләһә ни хәтле таларға һәм ҡол итеп алырға ирек бирәсәген белдерҙе.

Ул ваҡытта ҡалмыҡтар Рәсәйҙең ҡояш сығышындағы сит өлкәләренә һөжүм иткеләп халыҡты тотоп киткеләйҙәр һәм Бохара вә Хива мәмләкәттәренә баҙарҙарға илтеп ҡол итеп һаталар, ҡол һатыу ҡалмыҡ хужалығында бик табышлы һәм ҙур кәсеп ине. Шул сәбәпле Рәсәй ярҙамы менән башҡорттарҙы талап, меңдәрсә халыҡты ҡол итеп алып һатыу мөмкинлеге уларҙы бик ҡыҙыҡтырҙы. Улар һәр береһе унар мең кешелек икс ҡалмыҡ урҙаһы булып Башҡортостанға һөжүм иттеләр. Хисапһыҙ күп башҡорт ауылдарын талап яндырҙылар. Меңдәрсә ир халыҡты һуйып, тағын да күберәген ҡатын, бала-сағалары менән әсир итеп малдары менән бергә әйҙәп алып киттеләр: былар шулай итеп быларҙы баҫһалар ҙа ҡалмыҡтар китеү менән бола яңынан күтәрелде. Быныһына ҡалмыҡтарҙан ҙур зыян күргән татар, мишәр һәм башҡа ясачный ваҡ милләттәрҙән тыш, ҡалмыҡтарҙың дошмандары булған ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡтар ҙа ҡушылды. Күсемде тотоу өсөн Өфөнән туғыҙ йөҙ кешелек, Ҡазандан ете йөҙ етмеш кешелек атлы отряд менән бер нисә полк һалдат ебәрелде. Ләкин Өфөнән ебәрелгән Хохлов тигән берәү ҡул аҫтындағы отряд ҡаланан тукһан саҡрымда Йөрәктау тигән ерҙә ҡамалып дүрт йөҙ һалдаты башҡорттарға әсир төштө; ҡалған һәммә хөкүмәт ғәскәре Табынский крепосында йыйналып бикләнделәр. Хәҙер башҡорттан үс алыу, таланған байлыҡтарын ҡайтарыу өсөн урыҫ баярҙарының имениеларын талап, крәҫтиәндәрҙе тотоп Хива, Бохара яҡтарына ҡол итеп ебәрә башланылар. Бола уҙып, уға Ҡазан өйәҙе татарҙары менән сыуаштар ҙа ҡушыла башланы. Ләкин Швеция менән һуғыштан бушағас, Петр I бында ғәскәрҙе күберәк ебәреп Ҡазандан башҡорттарға ҡаршы тәжәүз башлатты. Боласылар хәҙерге Чистай

кантонында, Биләр ауылы янында, еңелеп сигенә башланылар. Һуғыштан арыған халыҡ аҡрынлап ҡорал ташланы, электән Рәсәйгә хеҙмәт итеп йәки льготалар менән файҙаланған һәм үҙҙәре боласылар тарафынан таланыуҙан ҡурҡҡан груһтар (яһаҡ түләмәүселәр) менән файҙаланып, бола башлыҡтарын тотоп хөкүмәт ғәскәрҙәренә тапшырҙылар. Улар яза ҡылынды. Хөкүмәт болаға алданып ҡушылыусыларға ғәфү иғлан итте, халыҡты ышандырыу өсөн быға хәтле башҡорттарға бик ҙур йәбер эшләгән бер нисә урыҫ түрәһен яза ҡылып, береһен аҫтырҙы. Ләкин быға ҡарап Башҡортостанда халыҡты талау бөтмәгәс, бер нисә йылдан башҡорттар яңынан күтәрелергә теләп, Кубань (Кавказда) һәм Ҡырым улустарына берләшеп батша хөкүмәтенә ҡаршы аяҡланырға саҡырып илселәр ебәрһәләр ҙә илселәр юлда хөкүмәт ҡулына төшөп, иттифаҡ була алмай ҡалды, шул сәбәпле бола аҡрын-аҡрын йомшап һүнде.

## Рәсәйҙең Башҡортостанға ҡарата сәйәсәт үткәреүе

Был ҡуҙғалышта ла ҙур урынды Ҡазан яғынан килмешәктәр тоттолар. Шул сәбәпле хөкүмәт Башҡортостанды быларҙан таҙартырға тейеш табып, башҡорттарҙың быларҙы тотоп хөкүмәткә тапшырыуҙарын талап итте. Был талап буйынса 1720 йылдың йәйенән 1722 йылдың март башына хәтле Башҡортостанда Ҡазан яғы ҡасаҡтарынан 19 815 кеше тотолоп Ҡазан ҡалаһына килтерелеп тапшырылдылар; батша хөкүмәте хәҙер Башҡортостанда башҡорттар менән Ҡазан яҡтарынан килмешәк татар, сыуаш һәм башҡаларҙың араһын боҙоп, былар араһындағы дошманлыҡ менән файҙаланыу сәйәсәтен тота башланы, быны өсөн башын күтәргән Рәсәй империализмына ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ сәхрәһе һәм Төркөстан арҡылы бай Һиндостан мәмләкәтенә табан барырға юл асҡан Башҡортостанды көслө ғәскәрле крепостар менән тултырғанға хәтле башҡорттарҙы бер аҙ йомалап, уларҙың хәлен еңеләйтеп тороуға кәрәк тапты. Ул ваҡытта Рәсәй мәмләкәте сәнәғәт дәүеренә кереп, Рәсәйҙә сәнәғәт капиталы үҫә башлап, Урал

тауҙарындағы мәғдән байлығынан файҙаланырға кәрәк, ә бының өсөн Башҡортостандың тыныс тороуы тейеш ине.

Был сәйәсәт үҙгәреү нәтижәһендә башҡорттар үҙ зарҙарын Мәскәүгә тыныс юл менән ишеттерә башланылар. 1728 йылда дүрт юл башҡорттары исеменән Мәскәүгә башҡорт старшиналарынан Йәркәй Янчурин ҡул аҫтында делегация барып, былар воеводаларҙың халыҡты талауынан, башҡорттарҙың үҙҙәренә грамота менән ҡалдырылған ерҙәрен талап алыуҙарынан, башҡорттарҙан аманат (залог) ителеп алынған кешеләрҙе ауыр эштәрҙә ҡулланыуҙарҙан зарландылар. Хөкүмәт башҡорт вәкилдәрен яҡшы ҡабул итеп, уларҙың күп теләктәрен ҡабул итте. 1729 йылда башҡорттарҙы ғәскәрлеккә алыу законын бөтөрөп, шуның менән бергә Башҡортостанға айырым әһәмиәт биреп, уның идараһын Ҡазандан айырып, тура Петербурға ҡаратты; Башҡортостанда идара эштәре яңы нигеҙгә ҡуйыла башланы.

## Башҡортостанда сәнәғәт башланыу

Башҡортостанға урыҫтар күсеп башта төньяҡ өлөштәренә, хәҙерге Свердловск (Екатеринбург) һәм Уса яҡтарында булып, унан көньяғына табан йәйелә барҙы. Хөкүмәттең башҡорттар тураһында тотҡан сәйәсәте үҙгәреү осорҙарында Башҡортостандың төньяҡтарында урыҫ колонизацияһы бик нығып, унда урыҫтар күпселек булғайнылар.

Петр I заманында Рәсәйҙең эске сауҙа капиталы бик ҙурайған, сөнки был капитал башлыса батша һәм баярҙар ҡулында булып, былар мех, иген, тоҙ һәм ул ваҡытта уҡ бик ҙур табыш килтергән араҡы сауҙаһын үҙ ҡулдарында монополия итеп тоталар, уларҙың сауҙаһы налог түләүҙән ҡотҡарыла, йәки налог аҙ һалына, улар сауҙа йөрөтөү өсөн ҡаҙна аппараттары менән файҙаланалар ине. Петр I Балтик диңгеҙе буйҙарында һуғышып алып, Рәсәй менән Аурупа араһында тура юл асҡас, осһоҙло Рәсәй сырьеһы, сырье ҡыйбат булған Аурупа баҙарҙарына сығып, тағы ла ҙурыраҡ табыштар килтерҙе.

Бының нәтижәһендә сауҙа капиталы Рәсәй өсөн кәрәктән артып, эшһеҙ ҡала башланы. Был капиталдан файҙа итеү өсөн берҙән-бер сара — уны сәнәғәткә тартыу ине. Ул ваҡыттарҙа иң ҡыйбатлы тауар мәғдәндән яһалған нәмәләр булып, капитал тығыу өсөн мәғдәнселек киң һәм табышлы бер майҙан булаcаҡ ине. Ҡорал һәм флотты һуңғы ысулға ҡуя башлаған Рәсәй хөкүмәте былар өсөн дә тимер һәм баҡырға мохтаж ине. Ләкин ул ваҡытта Рәсәйҙә тимер һәм баҡыр барлығы беленмәне, былар табылмай, шул сәбәпле уларҙы ҡыйбат хаҡ менән сит мәмләкәттәрҙән алырға тура килә ине.

Чудтар ваҡытынан уҡ Урал тауҙарында баҡыр сығарылыуҙы ишетеү һәм бында тимер ҙә табылыу Рәсәй капиталының Уралға йөҙ әйләндереп, бынан мәғдән сығарырға тырышыуҙарына сәбәп булды. Капиталдарын табышлы бер эшкә тығырға тырышҡан сауҙагәр менән рибасы батша һәм баярҙар ҡулында булған хөкүмәт был эшкә һәр бер еңеллекте күрһәтергә булды: Уралдан мәғдән сығарасаҡ купецтарға һәр төрлө льготалар бирелде. Шул сәбәпле Рәсәйҙең купец һәм сәнәғәтселәре берәм-берәм Ҡазан һәм хәҙерге Свердловск (Екатеринбург), Пермь яҡтарына килеп фабрика, заводтар ҡора башланылар. Былар өсөн идара мәркәзе һәм баҙар ителеп Екатеринбург ҡалаһы һалынды. Сәнәғәтселәр бынан аҡрын-аҡрын көньяғына табан күсеп, хәҙерге Башҡортостандың тау байлыҡтарынан файҙаланырға ынтыла башланылар. Хөкүмәт быға ла һәр бер еңеллекте күрһәтергә теләп Өфө өлкәһендә (Башҡортостанда) тимер һәм баҡыр сығарасаҡ заводтарҙы һәм уларҙа эшләгән бөтә крәҫтиәндәрҙе налогтан бөтөнләй азат итеп закон сығарҙы. Был ваҡытта Уралдың хәҙерге Башҡортостанға булмаған ерҙәрендә заводтар бик күбәйеп ҡырҡҡа тулған, былар һәр йыл бер нисә миллион бот тимер сығара һәм бер нисә йөҙ мең һум табыш килтерә башлағайнылар.

1735—1740 йылдарҙа хөкүмәт мөәссәсәләре лә, частный урыҫ байҙары ла (купецтары) Башҡортостан тауҙарында мәғдән эҙләй башлайҙар; баҡыр йәки тимер рудаһы бар ерҙәрҙе күрһәткән башҡорт

старшиналарына ҙур бүләктәр биреп, был эшкә башҡорттарҙы ла хеҙмәт иттерәләр, бының нәтижәһендә Сембер ҡалаһының Твердышев атлы купецы 1745 йылдарҙа хәҙерге Стәрлетамаҡ кантонында Нөгөш йылғаһына ҡойған ҙур Тур йылғаһы буйында баҡыр ҡайната торған Воскресенск заводын һалдыра. Шуның менән Башҡортостанда заводсылыҡ һәм сәнәғәт колонизацияһы башлана. Башҡорттар элек-электән һөнәрсән һәм сауҙагәр халыҡ булмау арҡаһында был эштән ситтә ҡалдылар.

Хөкүмәт Башҡортостанда заводсылыҡты алға ебәреү өсөн ошо юлды тотто: завод һалыусылар кәрәкле ер һәм урманды башҡорттарҙан һатып алалар. Заводсылар үҙ заводтарын һаҡлау өсөн үҙ хисаптарына ғәскәр һәм ҡорал тота, шулай уҡ һәр бер мең бот баҡыр сығарыу өсөн илле дуп крәстиән һатып ала алалар. Бунттарға ҡатышҡан башҡорттарҙың ерҙәре ҡаҙнаға тартып алынып заводсыларға файҙаланырға бирелә. Һәр бер заводсы күпме баҡыр сығарғанын яҙа барырға, уларҙы ҡалаға илтеп ҡаҙнаға һатырға тейеш, бөтөн доходтың ундан бер өлөшө ҡаҙна файҙаһына бирелә ине.

Твердышев башҡорт ерен һатып алыуға ирек менән бик оҫта файҙаланып бик тиҙ арала хисапһыҙ күп башҡорт ерҙәрен һатып ала башланы.

Бер яҡтан, башҡорт старшиналарын бүләкләп, икенсе яҡтан, хужалығы емерелгән ярлы башҡорттарҙы ағас ҡырҡып заводҡа ташыуға яллап, уларҙың күңелен тапты. Үткән һуғышта малдары ҡырылып, таланып бөтөп ер һәм урмандан файҙалана алмай ятҡан башҡорттар заводтар арҡаһында көнкүрештәре бер аҙ яҡшырасағын күреп, ер һәм урмандарын Твердышевҡа бик осһоҙ хаҡҡа меңәр-меңәр дисәтинәләп һаттылар. Твердышев Воскресенск заводының табыш биреүен күргәс, эшен ҙурайтып 1748 — 1753 йылдарҙа хәҙерге Йылайыр кантонында Урман Йылайыр йылғаһы буйында Преображенск, Ағиҙелгә яҡын Богоявленск, Сим йылғаһы буйында Архангельск, Тур йылғаһы буйында Верхотурск заводтарын да һалды, Твердышевтан күрмә, Тула ҡалаһы заводсыларынан Масалов та 1751 йылда Ҡама йылғаһы

буйында Кано-Никольский, Сембер купецы Мясников Өфөнән түбән Ағиҙел буйында Благовещен заводтарын һалдылар. Шулай итеп, Башҡортостанда заводтар йылдан-йыл арта, заводсылар быларҙа эшләү өсөн эске Рәсәйҙән крәҫтиәндәр һатып алып килтереп ултырта һәм заводтарын башҡорттарҙан һаҡлау өсөн был крәҫтиәндәрҙе ҡоралландыра башланылар, йөҙ меңдәр дисәтинә менән башҡорт урман һәм яландары юҡ хаҡҡа заводсылар ҡулына керә тора ине. Берәм-берәм Златоуст, Биләрит, Тирлән, Әүжән, Петров һәм башҡа заводтар һалынып бик тиҙ арала Башҡортостанда баҡыр заводтары ун бишкә, тимер заводтары ун өскә етте. Былар эргәһендә утыҙ меңләп крәҫтиән һәм төрлө ҡасаҡтарҙан йыйналған эшселәр урынлашты.

Ул ваҡытта завод эшенең ни хәтле табышлы булыуын ошо хисаптар күрһәтә: заводсының, үҙенә һәр бер мең бот баҡыр 1600 — 2250 һумға төшә. Ул унының йөҙ ботон бушлай ҡаҙнаға биреп, ҡалғанының алты йөҙ ботон биш һум илле тиндән ҡаҙнаға, өс йөҙ ботон ун бер-ун ике һумдан частный баҙарға һата. Шулай итеп, һәр мең бот баҡырға биш мең һум самаһы саф табыш керә ине. Был арҡала заводсылар бик тиҙ байып миллионерға әйләнәләр. Быға ҡыҙығып Башҡортостанға яңынан-яңы заводсылар килә тора, заводсылар тирәһенә уларҙан туйыныу өсөн халыҡ йыйнала ине. Ул ваҡытта сәнәғәттән табыш менән мал аҫрауҙан һәм һөнәрселектән доход араһында айырма барлыҡты ошо хисап асыҡ күрһәтә: ҡала баҙарында ҡуй етмеш тин, ат ун биш-егерме һум, төлкө һикһән тин, һыуһар илле тин, аҫ (горностай) ун ике-ун биш тин, тейендең тиҫтәһе егерме тин, айыу тиреһе һикһән тин-бер ярым һум. Шулай итеп, бер бот баҡыр ун алтылап һарыҡ, туҡһан-йөҙләп аҫ мехы урынына йөрөй ине. Тауарҙың башҡорт кәсебе булған аяҡлы мал һәм мехҡа ҡарағанда былай ҡыйбат йөрөүе мал аҫраусы башҡорт халҡын бөлгөнлөккә төшөрә ине. Был ваҡытта тыуған башҡа сәнәғәттәр араһында ҙур бер урынды тоҙ сығарыу тота. Башҡорттар элек тоҙҙо Ҡазандан һатып алалар ине; 1700 йылдарҙа хәҙерге Ырымбурҙан көньяғында Тоҙтүбә тоҙ шахталары

табылып, унан башҡорт, ҡаҙаҡ һәм мишәрҙәр тоҙ сығара башланылар. Хөкүмәт сығарылған һәр бер бот тоҙға ҡаҙна файҙаһына өс тин пошлина һалды. Башҡорт һәм мишәрҙәр был тоҙҙо хәҙерге Башҡортостанда нәрһәгә (әйбер — *ред.*) алышыу менән генә ҡалмай Ҡазан яҡтарына илтеп һатып, хужалығы емерелгән башҡорттар өсөн тоҙ кәсебе яҡшы бер кәсепкә әйләнә башланы. Ләкин был хәл оҙаҡ һуҙылманы, заводсылар бында крәстиәнде етәрлек күсереү менән башҡорттар ағас ҡырҡыу эшендә лә ҡулланылмай башланылар. Башҡорттарҙың тоҙ сығарып, тоҙ ташыу һәм һатыу правоһы ла бөтөролдө. Быны арҡаһында уларҙың аяҡҡа баҫып килә башлаған хужалығы яңынан емерелде.

## Башҡорттарҙың ер һатыуҙарының сәбәптәре

Башҡорттар бик иҫкенән мал аҫрап күсеп йөрөгән бер халыҡ булғанлыҡтан, бары киң һәм үләнгә мул яландарҙа ғына торалар, тау-таш һәм урман араһына инергә яратмай, унда инеп урынлашһа — бары быға мәжбүр булып ҡына (ситтән дошман һөжүм иткәндә, ҡасып) керәләр ине. Был ваҡыттарҙа Башҡортостанда ағас бик мул булып аҡсаға һатылмай, һис бер хаҡы булманы. Шул сәбәпле Урал тауҙарындағы урманлыҡтарҙың башҡорт өсөн һунарсылыҡ менән умарта ҡорто балы йыйнауҙан башҡа һис бер файҙаһы юҡ ине. Һуңғы болаларҙа башҡорттарҙа мал һаны ла бик кәмеп, яландар ҙа бушап ҡалды.

Күп урындарҙағы яландарҙа мал әйҙәп йөрөүселәр бөлгөнлөккә төшөп ситкә ҡастылар. Шулай итеп, хужаһыҙ (файҙаланылмай ятҡан) ерҙәр бик күбәйҙе. Түрәләрҙең теләгән һайын башҡорт ерҙәрен бушлай тартып алыуҙары ерҙе ышанысһыҙ, ҡулдан китәсәк бер байлыҡ итеп күрһәтте. Шул уҡ ваҡытта хөкүмәт башҡорттарҙан боғаҙҙарына йәбешеп налог һорай ине. Бына был хәлдәр башҡортта ерҙе юҡ хаҡҡа һатыуға сәбәп булдылар.

Урал заводсыларына башҡорт ерҙәре ни хәтле осһоҙ һатылғанлыҡты ошо хисаптар асыҡ күрһәтәләр:

1) Хәҙер баҡыр һәм ағасҡа бик бай урындарҙан һаналған Ҡыштым заводтары урынын йөҙ илле мең дисәтинәне заводсы Демидовтар етмеш ике һумға алғандар.

2) Твердышев Белорецк заводы тирәһендә өс йөҙ мең дисәтинә ҡаралтылыҡ урманды өс йөҙ һумға алған, ун дисәтинәһе бер тин.

3) Заводсы Масалов хәҙерге Златоуст ҡалаһы әйләнәһендә бер нисә йөҙ мең дисәтинә ер һәм урманды Һеңрән волосы аҫаба башҡорттарынан егерме һумға һатып алған.

4) Твердышев Ҡатау-Иван заводы ерҙәрен — йөҙ ҙә етмеш өс мең дисәтинәне — йөҙ алтмыш һумға һатып алған. Йүрүҙән заводтары урынын да йөҙ алтмыш биш мең, дисәтинә урманды йөҙ алтмыш һумға алған.

Башҡорттарҙың был ерҙәрҙе һатҡан договорҙарҙа үҙҙәренә ошо хоҡуҡтар һаҡланып ҡалынасағы шарт ителә ине:

1) Был ерҙәрҙе һатыусылар ошо урмандарҙа һунарсылыҡ итергә ирекле булырҙар.

2) Бынан бал йыйнай алырҙар.

Бына был ике шарт Башҡортостандың һәм башҡорттарҙың ул мәлдәге тормошонда урмандарҙы былай осһоҙ һатыуҙары бик тәбиғи бер эш булыуҙы күрһәтә: ер менән ағастан халыҡҡа доход урмандан ағас ҡыуыштарындағы кейек умарта ҡорттарының балын йыйнауҙан килгән доход хәтле лә булмаған; башҡорттар ағасҡа һис бөтмәҫ, төкәнмәҫ, айырып биләргә кәрәкһеҙ бер нәрһә — мәҫәлән, һауа менән диңгеҙ һыуы кеүек итеп ҡарағандар.

## Ырымбур ҡалаһы һалыныу. Башҡорттарҙың уға ҡаршы көрәштәре

1734 йылда Башҡортостанда воеводалар идараһы бөтөрөлөп, уның урынына генерал-губернатор ителеп генерал Кириллов тигән кеше ебәрелә. Быға задача итеп Башҡортостанды һәр яҡтан ғәскәри крепостар менән ҡамау, былар янына урыҫ ултыртыу, шулай итеп башҡорттарҙы йоҙроҡ эсенә алыу йөкләтелә. Был эштә башҡорттарҙың үҙ көстәре менән дә

файҙаланыу өсөн атаҡлыраҡ башҡорт старшиналары тарханлыҡҡа мендерелеп, төрлө ҡыйбатлы бүләктәр менән бүләкләнә. Былар араһынан Урал аръяғындағы Ҡаратабын Барын волость старшинаһы Таймаҫ Шаимов Петербурға саҡырылып ул ваҡытта Рәсәй тәхетендә булған императрица Анна Ивановна һарайында хөрмәт менән ҡаршы алына. Ул яҡ башҡорттарынан яһаҡ йыйнап ҡаҙнаға тапшырыу уға тапшырыла. Шулай итеп, башҡорт старшиналары хөкүмәт сәйәсәтен йөрөтөргә ҡорал ителеп, ҡулланыу арта. Был саҡтарҙа ҡаҙаҡтарҙың ҡояш батышына тәжәүездәре күбәйеү сәбәпле, был башҡорт старшиналары ҡаҙаҡтарға ҡаршы көрәшкә ҡотортола. Ҡаҙаҡ һәм башҡорттар араһында йәйләү һәм бер-беренән мал урлашыу өсөн сыҡҡан дауҙарҙы ике арала һуғыш һәм ҡырылышҡа әйләндерергә тырышыла, мәҫәлән, Таймаҫ Шаимов (уны башҡорттар Таймаҫ батыр тип йөрөткәндәр) шундай бер бәрелеш ваҡытында, хөкүмәт ҡотҡоһо буйынса ҡаҙаҡтарға ун мең башҡорт менән һөжүм итеп, ҙур зыян килтерҙе. Шулай итеп, хөкүмәт башҡорт-ҡаҙаҡ дошманлығын тыуҙырырға тырыша. Был эштәр һәр береһе ҡаҙаҡтың да, башҡорттоң да көсөн бер юлы бөтөрөү, башҡорттарҙың хөкүмәткә ҡаршы көрәшкән көстәрен ҡаҙаҡтарға ҡаршы йүнәлтеү һәм шул форсат менән файҙаланып Башҡортостанды һәр яҡтан крепостар менән ҡамап, крепостар тирәһендә урыҫ колонизацияһы яһау өсөн эшләнәләр.

Ысынлап та, шул юл менән уңайлы бер заман әҙерләнгәс, Кириллов башҡорттарҙы ҡаҙаҡ һөжүменән һаҡлау һылтауы менән (ә ҡаҙаҡтарға —башҡорттарҙы ҡаҙаҡ далаһына һөжүм итергә үткәрмәҫ өсөн тип) бик күп ғәскәр менән Өфө яғынан Урал тауҙары аръылы киҫеп, Яйыҡ (Урал) йылғаһы буйында Юғары Яйыҡ (хәҙерге Верхноурал) крепосын һалдыра. Бынан һуң, башҡорт ырыуҙарын тикшереп һәр бер ырыуҙың хисабын алдыра, башҡорт тархандары менән мишәрҙәрҙе ғәскәрлек хеҙмәтенә, типтәрҙәрҙе ҡара эшкә мобилизовать итә һәм быларҙы эйәртеп Ур йылғаһынан Яйыҡҡа ҡойған урынында (хәҙерге Орск ҡалаһы) Ырымбур исемендә бер крепость һалды-

рырға була. Был эштә уға ярҙамсы ителеп Мәскәү янындағы Ҡасим ҡалаһындағы татар мырҙаларынан полковник Ҡотломөхәммәт Тәфкилев бирелә.

Төп Төркөстандан Килмәбайҙар нәҫеленән булған, бик яҡшы уҡымышлы һәм Петр I заманында уҡ тәржемән булып сит эштәрҙе ҡарай торған урындарҙа хеҙмәт итеп тәжрибә алған Шәреҡ менән бик яҡшы таныш, шул уҡ ваҡытта хөкүмәт ҡаршында ышаныслы был мырҙаның Башҡортостанға хеҙмәткә ебәрелеүе, ул ваҡытта хөкүмәттең Шәреҡ мәсьәләһенә айырым әһәмиәт биреп Төркөстанға һәм Төркөстан арҡылы Һиндостанға юл асырға әҙерләнеүен асыҡ аңлаталар.

Башҡорттарҙың быға хәтле Мәскәү хөкүмәтенә ҡаршы көрәшеп килгән груһтары Кирилловтың Яйыҡ буйында ҡалалар һалыуҙан төп уйы Башҡортостанды һәр яҡтан ҡамап ус эсенә алыу булғанлыҡты төшөнөп ирек бирмәҫ өсөн көрәш асалар. Был көрәштең башында Килмәк абыз (абыз тип мулла халҡын йөрөткәндәр) мҿнән Хыятколов, Ираҡколов, Рысанбай тигән старшиналар һәм Ҡазан яғынан ҡасып килгән Әминев исемле кеше торалар. Былар ҡул аҫтында берләшкән башҡорттар хәҙерге Стәрлетамаҡ һәм Йылайыр кантондарында ойошоп Кириллов ғәскәренә ҡаршы сығалар. Был ғәскәрҙең алдынғы отряды Юрматы волосында башҡорттарға осрап һуғышһа ла һуғышта еңелә. Ләкин, арттан Кирилловтың, ун биш рота һалдат, өс йөҙ илле казак, алты йөҙ мишәр, йөҙ тархан башҡорт, утыҙлап туптан ғибәрәт булған туп ғәскәре килеп етеп башҡорттарға һөжүм итеп, уларҙы еңеп тарҡата, шунан һуң Кириллов 1735 йылда, йәй көнө Ур тамағына барып етеп, унда типтәрҙәрҙе эшләтеп бер крепость һала. Уға Ырымбур исеме бирелә.

Кириллов бер аҙ ғәскәрен шунда ҡалдырып үҙе кире Өфөгә табан ҡайта, юлдар алда Күсем болаһында ҙур урын тотҡан Күсемдең улы Аҡай Күсем ҡул аҫтында алты меңләп башҡорт ҡаршы сығып, юл бирмәҫкә тырышалар, ләкин ҡыҙыу һуғышта еңелеп Юрматы һәм Табынский тирәләрендә бик күп башҡорт ауылдары яндырыла, халҡы туҙҙырыла, бола башлыҡтары ҡулға алынып үлтерелә.

Шул уҡ ваҡытта Урал аръяғындағы башҡорттар ҙа аяҡланып, Юғары Яйыҡ крепосына һөжүм итеп, уны алып яндыралар, халҡын ҡыралар. Минзәлә башҡорт һәм татарҙары ла был форсаттан файҙаланып, аяҡланып күп урыҫ ауылдарын яндырып, Минзәлә ҡалаһына һөжүм башлайҙар.

Кириллов был боланы башҡорттар яңынан ҡуҙғалмаҫлыҡ рәүештә ҡаты саралар менән баҫырға тырышты. Мәҫәлән, Себер юлы башҡорттарын баҫырға барған полковник Тәфкилев хәҙерге Мәсәғүт кантонында Әй йылғаһы буйында иллеләп башҡорт ауылын яндырып, башҡорттарҙы йөҙәр-йөҙәр амбарҙарға бикләтеп яндыртты, меңдәр менән үлтертте. Бала һәм ҡатындарын һалдаттарға таратып ситкә оҙаттырҙы.

Хөкүмәт был планды муафиҡ күреп, бөтә боласыларҙы ҡырып бөтөрөргә, ауылдарын яндырырға, бөтә мал һәм милектәрен ҡаҙнаға, йылҡыларын атлы полктарға алырға, эшкә яраҡлы ирҙәрен Балтик диңгеҙе буйына ебәреп ғәскәр һәм флотҡа һәм Рогервик исемле портта эшсе итеп ҡулланырға, ҡатын һәм бала-сағаларын урыҫ ҡалаларына илтеп, һатып алырға теләгән кешеләргә ҡол итеп таратырға ҡушты. Быңдай ҡаты юл тотоуҙың сәбәптәре былар:

1) Ул ваҡытта хөкүмәттең тиҙерәк Һиндостан һәм Төркөстан юлын асырға, бының өсөн ҡаҙаҡ далаһын ҡулға алырға теләү ине. Юл өҫтөндәге башҡорттарҙың былай бола сығарып тороуҙары быға ирек бирмәй.

2) Башҡорттарҙы былай ҡырыу Рәсәй байҙарының (алпауыттарының) файҙаһына ла муафиҡ ине. Сөнки эске Рәсәйҙә баярҙар бик күп крәҫтиән биләһәләр ҙә игенселек хужалығы ҙур табыш бирмәй. Сит мәмләкәттәргә ашлыҡ сығарырға яҡшы юл да юҡ. Ҡол крәҫтиәндең хужаға эшләгән эше насар була. Баярҙар крәҫтиәнде теләһәләр ни хәтле йәберләһәләр ҙә матди файҙаны күп күрә алмайҙар, шул сәбәпле ул ваҡытта бик табышлы булған кәсепкә (Урал тауҙарынан мәғдән сығартыу) тотоноп, бында ер алып крәҫтиәндәрен дә бында күсереп, уларҙы сәнәғәттә файҙаланырға теләйҙәр. Бының өсөн, бер яҡтан,

башҡорт ерҙәрен бушлай тиерлек алырға, икенсенән, заводтарға башҡорттар һөжүм итеү ҡурҡынысын бөтөрөргә кәрәк булыу.

* * *

Бына ошо сәбәптәр буйынса Башҡортостанға Ҡазан арҡылы яңынан бик күп ғәскәр һәм ваҡ милләттәрҙән төҙөлгән ополчендар ебәрелеп башҡорттарҙы ҡырыу башланды. Уса һәм Себер юлдарында байтаҡ башҡорт ауылдары яндырылып һигеҙ мең башҡорт үлтерелгәс, Кириллов Нуғай юлына сығып Ағиҙел, Өршәк, Һәләүек, Тур, Нөгөш йылғалары буйында ике йөҙ башҡорт ауылын яндырып, меңләп башҡортто үлтереп, байтағын Петербург аръяғында Балтик портҡа һөргөнгә ебәртте, бер аҙ ҡатындарҙы, балаларҙы Өфө тирәһендәге урыҫ ауылдары халҡына тараттырҙы.

Икенсе бер отряд Дим буйына барып унда меңдән артыҡ башҡортто үлтертеп, йөҙләп ауылды яндырҙы. Бола башлыҡтарынан Аҡай Күсем байтаҡ кешеләр менән ҡулға төшөп Минзәләгә ебәрелде. Унда биш йөҙләп башҡорт менән бергә үлем язаһы менән язаланды. Биш йөҙ-алты йөҙ башҡорт ҡатындары һәм балалары колонистарға таратылдылар. Быға ҡарамай Килмәк абыз Өфөнән йөҙ егерме саҡрым ерҙә Стәрле кантонында һуғыш дауам иттереп урыҫ ғәскәренә һөжүм итеп, башта байтаҡ зыян килтерһә лә һуңынан башҡорттар еңелеп ҡастылар, бынан һуң Кириллов һәм башҡорт ҡарттарын аманат итеп алып, балалары ҡорал ташламаған ҡарттарҙы үлтереү менән ҡурҡытһа ла, йәштәр һаман да буйһонмай, партизан һуғышын алып барҙылар, атлы башҡорт партизандарын тотоу хөкүмәт ғәскәре өсөн бик ауыр булғас, Яйыҡ буйынан ике мең казачий ғәскәре килтерелеп башҡорттарҙы баҫыуға ҡушылдылар. Былар Эйек йылғаһын кисеп, хәҙерге Йылайыр һәм Стәрлетамаҡ кантондарында ике йөҙләп башҡорт ауылын яндырып иң күп башҡорттарҙы ҡырҙылар. Казачийҙар Эйек йылғаһы — Уралтау һәм Табын тирәһендә булған бик ҡаты һуғыштарҙа ла башҡорттарҙы еңеп Килмәк абыз

ғәскәренең бөтә көсөн бөтөрҙөләр. Килмәк абыз һәм башҡа башлыҡтар ҡулға эләктеләр. Шулай итеп, ике йыл һуҙылған был бола ла баҫтырылды.

## Килмәк абыз болаһының нәтижәләре

Килмәк абыз болаһының нәтижәһе бер меңгә яҡын башҡорт ауылы яндырылып, малдары таланыу, һуғыштарҙа ҡырылған ун меңдән артыҡ башҡорттан тыш бер меңгә яҡын башҡорттоң аҫылыуы, биш меңдән артыҡ башҡорттоң Балтик диңгеҙе буйындағы порттарға эшсе, һалдат һәм матрос итеп оҙатылыуы, байтаҡ мең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һәм балаларының урыҫ баяр, түрә һәм крәҫтиәндәренә тартылып суҡындырылып юғалыуы булды.

Был бәләнән ҡотолоп ҡалған башҡорттарҙың иҡтисади хәле бик насарланды, сөнки былар:

1) Хөкүмәт ғәскәренә бушлай аҙыҡ һәм мал аҙығы биреп, уларҙы үҙ елкәләрендә туйҙырырға мәжбүр螺 ителделәр.

2) Башҡорттарҙың үҙҙәре старшиналар һайлау правоһы бөтөрөлөп старшиналар быға хәтле гелән хөкүмәткә ышаныслы хеҙмәт иткән кешеләр билдәләнеп ҡуйыла башланылар. Һәр бер ауылға шундай уҡ ышаныслы кешеләрҙән сотник һәм десятниктар ҡуйылып, былар халыҡтың тыныс тороуы, һис бер бола сыҡмау өсөн мәсьүл ителделәр. Былар халыҡ араһындағы хөкүмәттән һәм түрәләрҙән аҙ ғына ризаһыҙлыҡ белдереүсе булһа, уны хөкүмәткә тотоп бирергә тейешле булдылар. Былар ул ваҡыттағы законһыҙлыҡ менән файҙаланып, халыҡты хөкүмәткә тотоп биреү менән ҡурҡытып теләгәнсә талай инеләр.

3) Элек-электән хөкүмәткә ярҙамлашып килгән кешеләрҙән башҡа башҡорттарға уҡ, ян һәм башҡа төрлө ҡоралдар тотоу бик ҡаты тыйылып, халыҡтың ҡоралдары йыйылып алынды.

4) Был болаларға муллалар бик ныҡ ҡатышыу сәбәпле һәр бер юлға берәр генә ахун ҡалдырылып, ауылдарҙа мулла тотоуҙар тыйылды. Хөкүмәттән рөхсәтһеҙ мәсет һалыу, мәктәп асыу тыйылды.

5) Быға хәтле башҡорттарҙың бола сығарып һәм башҡа туралағы кәңәштәре борондан ҡалған һәм халыҡ ҡашында әүлиә тип йөрөтөлгән кешеләрҙең ҡәбере өҫтөндә һалынған төрбәләрҙә, йәки мәсеттәрҙә була ине. Былар барыһы ла яндырылды, емертелде.

6) Төрлө болаларҙа ҡырылып кәмей барған башҡорттар Казан татарҙары менән ҡыҙ алышып-бирешеп, үҙ араларына башҡортлоҡҡа унан килгән кешеләрҙе ала тора, шулай итеп яңынан көс йыйнай инеләр. Быға урын ҡалдырмаҫ өсөн, Ҡазан татарҙары менән ҡыҙ алышыу-бирешеү тыйылды.

7) Башҡорттар араһында бола әҙерләү тураһында кәңәш йыйылыштары яһалмаһын өсөн старшиналарҙан файҙа һәм нәрһә өсөн барыуын күрһәтеп паспорт алмай тороп үҙ ауыл һәм йәйләүҙән ситкә сығыу тыйылды. Паспорт та бары егерме-ҡырҡ көн араһында ғына бирелеп, хөкүмәттән рөхсәтһеҙ Башҡортостандан ситкә сығыусыларҙың үлем язаһы менән язаланасағы иғлан ителде.

8) Башҡорттар ҡоралланмаһын тип, башҡорт төбәктәрендә тимерселек итеү, тимерлек асыуҙар тыйылды. Быны менән һөнәрселек таралыуға кәртә ҡуйылды.

9) Башҡорттарҙың атаҡлыраҡ кешеләренең бала һәм туғандары аманат ителеп алынып, ҡалаларҙа хөкүмәт ғәскәре араһында тотоу ғәҙәте башланды.

10) Яйыҡ (Урал) йылғаһы буйлап байтаҡ яңы крепостар һалынып, улар Һамар ҡалаһына хәтле һуҙылып, унда казачийҙар һәм урыҫ колонистары ерләштерелде; ҡаҙаҡ далаһы менән Башҡортостан араһында ҡораллы бер кәртә ҡуйылды. Быларҙың һәр береһенә туптар, йөҙ-биш йөҙ араһында ғәскәр ерләштерелде. Бына был арҡала башҡорттарҙың артыҡ ҡаршы торорға көсө етмәй, берәм-берәм ҡорал ташлап итәғәткә килергә мәжбүр булдылар.

Башҡортостан бер харабаға әйләнеп ҡалды. Ике йыл һуҙылған был көрәштә башҡорттар бөтөнләй иҙелеп ҡалһалар ҙа, урыҫ халҡы һәм хөкүмәттән күргән зыяны ла аҙ түгел ине: хараба хәленә килгән илдән яһаҡ йыйнап булмай башланы. Шул сәбәпле

хөкүмәт алдында хәҙер Башҡортостан хужалығын яңынан аяҡҡа баҫтырыу задачаһы тыуҙы.

Был эш, бер яҡтан, юғарыла күрһәтелгән рәүештә завод сәнәғәтселеген арттырыу һәм икенсе яҡтан, Башҡортостанда игенселекте арттырыу юлы менән барырға тейеш ине. Шул сәбәпле хөкүмәт башҡорттарҙан ер алып, уларға айырым хаҡ түләп йәшәгән, болаға ҡатнашмаған бөтә мишәр һәм типтәрҙәргә шул ерҙәрен үҙҙәренә ҡалдырып, башҡорттарға аренда түләүҙән ҡотҡарҙы, халҡы ҡырылып буш ҡалған башҡорт ерҙәрен һәм болаға ныҡ ҡатнашҡан башҡорттарҙың ерҙәрен тартып алып, хөкүмәткә ярҙамлашҡан кешеләргә таратты. Был арҡала боронғо топ (аҫаба) башҡорттарҙың бик күбеһе ерһеҙ ҡалдылар, хөкүмәткә ярҙамлашҡан байтаҡ типтәр һәм мишәрҙәр аҫабаға әйләнделәр. Башҡорттарҙың үҙҙәренә ҡалған ерҙәрен һәр кемгә һатып алыу рөхсәт ителде.

Был осорҙарҙа хөкүмәт түрәләренең башҡорттар тураһында нисек эш йөрөтөүҙәрен, Кирилловтан һуң Ырымбур өлкәһенең генерал-губернаторы булып торған Татищевтың яҙып ҡалдырған китабында ошо һүҙҙәре асыҡ күрһәтә: «Командирҙар ришүәт алалар. Инородецтарҙы (йәғни башҡорт һәм ваҡ милләттәрҙе) һис тартынмай талайҙар. Уларҙы таларға һылтау яһау өсөн йүрей төрлө хәйләләр менән, уларҙы хөкүмәткә ҡаршы аяҡланырға мәжбүр итәләр. Полковниктар башҡорттарҙың йылҡыларын ғәскәр өсөн кәрәк тип тартып алып, шуның менән һатыу итәләр йәки үҙ имениеларына оҙаталар», — ти. Түрәләрҙең асыуҙары килһә йәки йүрей мәҙәк өсөн башҡорттарҙы тотоп ҡолаҡ, ҡул һәм аяҡтарын саптырып өҙҙөрөүҙәре, мылтыҡ атырға оҫталыҡтары менән маҡтанышҡанда йүрей һынар өсөн башҡорттарҙы атып тейҙереп ҡарауҙары көн дә булғылап торған ғәҙәткә әйләнгәйне. Үҙе шул ҡараҡ һәм ришүәтсе түрәләрҙең береһе булған Татищев, әлбиттә, баяр һәм түрәләрҙең бөтә йыртҡыслыҡтарын һанап бөтөрмәгән, эш ул һөйләгәндән күп яманыраҡ булған.

## Татищев идараһы

Башҡорт болалары ваҡытында түрә, баярҙарҙың имениелары ла таланғылап байтаҡ зыян килһә лә бола башланғас, был түрәләр бола ваҡытында күргән зыяндарын ҡат-ҡат илтеп түләтәләр, кире ҡайтаралар ине. Шул сәбәпле бындай болалар сығып тороу улар өсөн бик файҙалы булып ҡала ине. Ләкин Урал тауҙарындағы заводсы баярҙар саф табышты тимер һәм баҡыр сығарыуҙан күреп, бола ваҡытында баҡыр һәм тимер йөрөтөүҙәр туҡталыу, заводтарҙағы эшселәр завод һаҡлап эш эшләй алмай тороу, илдә халыҡ ярлыланып ҡалып тимер-баҡыр нәрһәләр һатып ала алмай башлауҙан быларға байтаҡ зыян килә ине.

Был хәл заводсыларҙың Башҡортостанға килеп мәғдән эҙләүҙәренә лә ирек бирмәй ине. Шул сәбәпле былар һуңғы ваҡыттарҙа башҡорт халҡын яҡшылыҡ менән тынысландырыу юлын кәрәкһенеп быларҙың һорауы буйынса Башҡортостанға генерал-губернатор булып Екатеринбург тау округы заводтарының башлығы Татищев тигән кеше ебәрелде.

Ул ваҡытта байтаҡ көс алып килә башлаған заводсылар (сәнәғәт капиталы) ялсыһы булған Татищев илдә сәнәғәт һәм сауҙа яҡшырып, заводсылар табышты күберәк итһендәр өсөн башҡорттар тураһында бер аҙ иркенерәк юл тотоуҙы кәрәк тапты. Бының өсөн башлап идара аппаратын төҙәтеү, хыянат, ришүәт һәм башҡорттарҙы йәбер ҡылыуҙарҙы аҙайтырға тырышты. Ләкин уның был хеҙмәттәре нәтижәһеҙ ҡалды, сөнки:

1) Бығаса власты үҙ ҡулдарында тотҡан дворян-баярҙар бөтөнөһө берегеп уға ҡаршы көрәштеләр, мәркәз хөкүмәткә: уның тотҡан юлы Башҡортостанда Рәсәйҙең көсөн бөтөрөүгә алып бара тип күрһәттеләр; мәркәздәге дворян-баярҙар ҙа был турала уларға ярҙамлаштылар.

2) Уның дин һәм уҡыу эштәрендә иркен юл торорға тырышыуына бөтә православие руханиҙары ҡаршы көрәш асты.

3) Башҡорт халҡын тынысландырыу өсөн уларҙы иҡтисади күтәрергә, бының өсөн бер нисә йылға

һаҡтан ҡотҡарып торорға һәм башҡорттар араһында тимерлек һәм башҡа ваҡ һөнәр предприятиелары асырға кәрәк ине. Ләкин, былай иткәндә башҡорттарҙың яңынан ҡоралланыуҙары мөмкин булғанға, хөкүмәт быға күнмәй ине.

4) Башҡорт хужалығын күтәреү өсөн заводтарға эшкә башҡорттарҙы ла ала башлау кәрәк ине. Бик осһоҙло ҡол крәҫтиәндәр көсө менән файҙаланған һәм уларҙы теләһә нисек эшләткән заводсылар быға һис күнмәй инеләр.

Сөнки башҡорттар, берҙән, бола сыға ҡалһа — завод өсөн ҡурҡыныслы һаналалар; икенсенән, заводта эшләү шарттары ауырыраҡ була башлаһа — тамаҡтары бер аҙ туйғас та заводтарҙы ташлап китеп, иң кәрәк ваҡытта заводтар эшһеҙ ҡалыу мөмкин ине.

5) Быға хәтле хөкүмәт яҡлы булып, элекке хөкүмәт түрәләре менән бер һүҙҙә булып башҡортто талашҡан башҡорт түрә һәм старшиналары ла, йәғни хөкүмәт ҡаршында берҙән-бер ышаныслы башҡорттар ҙа Татищевтың сараларын хөкүмәт өсөн ҡурҡыныслы итеп күрһәттеләр. Шул сәбәпле Татищев үҙенең маҡсатына ирешә алманы, башҡорт хужалығы төҙәлмәне, ерһеҙ, малһыҙ касаҡ булып ҡалған башҡорттар арткандан-артты һәм яңы болалар сығарыуға яңы көстәр әҙерләнде. Хөкүмәт башындағы кешеләрҙең үҙ-ара талашы менән маташыуҙары арҡаһында идара аппараты йомшарып яңынан ҡорал менән күтәрелеп, ҡотолоу сараһын күреү өсөн уңайлы бер форсат ине.

Ошо ваҡытта Әбелхәйер хан ҡул аҫтындағы ҡаҙаҡтар (ҡырғыҙ) Төркөстандан ҡояш батышына күсә башлап, 1738 йылда Башҡортостан сиктәренә яҡынлағандар ине. Рәсәй хөкүмәтенә ҡул аҫтында тороп юғарыла һаналған йәбер вә золомдарға баш эйергә риза булмаған һәм унан ҡотолорға теләгән башҡорттар Әбелхәйер хан янына ҡасып китеп шунда йыйналдылар; унан Башҡортостанды ҡотҡарыу өсөн ярҙам биреүен һоранылар.

Әбелхәйер хан башҡорт ханы ла булыу уйы менән быларға ярҙам бирергә булып үҙ тирәһенә дәрәжәһенән төшөрөлөү сәбәпле Рәсәй хөкүмәте идараһына риза булмай ҡасҡан башҡорт старшина һәм мулла-

ларын йыйнап, улар аркылы башкорттар араһында агитация тарата башланы. Башкорттарға якынлык күрһәтеү өсөн бер башкорт кыҙына өйләнде.

Быға хәтле таланып аска калған башкорттар был хәл менән файҙаланып, якланып беренсе сиратта быға хәтле болаларға катышмай, хөкүмәт яклы булып калған башкорттарға һөжүм иттеләр; уларҙы талай башланылар.

Рәсәй хөкүмәте был бола башланыуҙы Татищевтың йомшаклығынан күреп, уны хеҙмәттән сығартып, уның урынына элекке каты куллы сәйәсәтте алып барыу өсөн кенәз Урусов тигән кешене ебәрҙе.

## Караһакал болаһы

Бөтә малы таланып, тамак туйҙырыу өсөн һуғышып, таланған малын кире кайтарыуҙан башка сараһы калмаған башкорт ярлыларының был хәле менән файҙаланып, башкорт тәхетенә ултырырға теләгән Әбелхәйер хан башта Рәсәйҙең ғәскәр көсөнөң күпме һәм ниндәй булыуы менән танышты. Рәсәйҙең көсө ҙур булып, уны еңеп булмаҫлығын һиҙгәс, был фекеренән кайтты, ләкин ярлы башкорттарҙаситтән көслө ғәскәрле хан килтереп, уның ярҙамы менән был ауыр хәлдән котола алырға өмөтө көндән-көн үҫә ине. Бына ошо хәл менән башкорт тарихында Караһакал тип йөрөтөлгән бер мулла файҙаланып, бола сығарҙы.

Караһакал төп Юрматы башкорттарынан Миндеғол исемле бер мулла. Үткән Килмәк абыз һәм Акай Күсем болаларында бола башында йөрөп ҙур ғәйрәт күрһәткән. Ләкин еңелеп боласылар яза кылынғанда ситкә касып котолған; Мәккәгә барып хаж кылған, донъя күргән. Заманаһының иң белдекле муллаларынан булған. Хәҙер утыҙ ике йәшендә таҙа, һыбай йөрөүгә, ук атыуға, һүҙгә бик оҫта булған. Бер нисә йылдар ситтә йөрөп танымаҫлык булып кайткас, Әбелхәйер хан (каҙактар) ярҙамы менән яңы көрәш башларға әҙерләнеүҙәрен, ләкин Әбелхәйер хандың был уйынан кайтыуын аңлап, бының менән үҙе файҙаланырға уйланы һәм үҙен шул вакыттағы Жунғария (монгол) ханының мосолманлыкка сыккан бер

туғаны тип күрһәтте. Хәҙерге ысын исеме Солтангәрәй булғанлыкты һөйләп һәм халыкты ышандырырға етерлек шәжәрә һәм аргументтар күрһәтте.

Уның элекке иптәштәре күбеһе һуғышта ҡырылғандар йәки тотоп үлтерелгәндәр ине. Ҡалғандары халыкты ышандырыу өсөн уның ысын исемен белһәләр ҙә халыкка уны Солтангәрәй тип күрһәттеләр. Ул был хәрәкәтте үҙ ҡулына алды. Башҡорттарға Жунғария һәм ҡаҙаҡтарҙан үҙе яҡлы кешеләрҙе ярҙамға саҡырып килтереүҙе, өҫтәүенә Төрөк солтанынан да ҙур ярҙам киләсәкте вәғәҙә ҡылды. Башҡорттар быға ышандылар һәм 1740 йылда яңынан ҙур башҡорт болаһы башланды. Ҡараһаҡалдың был болаһы муафиҡиәтле бөтһә, Әстрхан һәм Ҡазан ханлығы кире аяҡҡа баҫыуҙы өмөт итеүе, быға хәтле булған кеүек, был көрәштә лә башҡорттарҙа ике төрлө көстөң берләшеүен күрһәтә. Ғәммә ас булып тамаҡ өсөн һуғыша, юғары ҡатламдар (күберәк мулла һәм эштән ҡыуылған түрәләр) власть өсөн быларҙы уртаҡ дошманға ҡаршы көрәшкә берләштерә. Ҡараһаҡал бик аҡыллы, һалҡын ҡанлы, һуғышҡа оҫта башлыҡ булһа ла, берҙән, боласыларҙың юғары ҡатламы менән түбән массаһы араһында боланан маҡсат бер-беренә башҡаса булыу, икенсенән, башҡорттар араһында һөнәрселек булмау арҡаһында уларҙың ҡоралы насар булыуы сәбәпле, был бола ла бик ҙур ҡатылыҡ менән баҫылды. Яңғыҙ рәсми хисаптарға ҡарағанда ла был боланы баҫҡанда һәм баҫҡас, барлығы 696 башҡорт ауылы таланып, яндырылып, 16 634 башҡорт үлтерелеп, 4 меңдәре төрлө ерҙәргә урыҫ араларына каторгаға ебәрелгән, 9 200 ҡатын-ҡыҙ һәм балалары эске Рәсәйҙәге урыҫ баярҙарына таратылған; башҡорттарҙан 20 меңләп йылҡы-һыйыр һәм байтаҡ аҡса штраф итеп түләнгән. Был хисаптар бары рәсми ҡағыҙҙарға кергәндәре генә һаналып, былай талау һәм үлтереүҙәр менән байтаҡ артыҡ булһа кәрәк. Быларҙан тыш, боласыларҙан бик күп меңдәр менән халыҡ Себергә оҙатылып, түрә, купец һәм урыҫ крәҫтиәндәренә ҡол ителеп һатылды.

## Неплюев дәүере

Кенәз Урусовтан һуң Башҡортостанға генерал-губернатор булып килгән Неплюев бында төрлө үҙ-ара боҙолоштороп, бынан файҙаланып илде идара ҡылыу сәйәсәтен көсәйтә. Бының өсөн быға хәтле хөкүмәткә ышаныслы ҡалған башҡорттарға ҙур льготалар биреп, уларҙан ер алып ултырған типтәр һәм мишәрҙәрҙе башҡорттарға яңынан аренда хаҡы түләргә мәжбүр итә. Икенсе яҡтан, бунтҡа ҡатнашҡан башҡорттарҙың ерҙәрен типтәр һәм мишәрҙәргә бушлай тараттыра. Шулай итеп, ерле башҡорт менән ерһеҙ типтәр-мишәр араһында ла, ере тартып алынған ярлы башҡорт менән уның ерҙәренә ултыртылған мишәр, типтәр араһына ла һалҡынлыҡ һалына. Шулай уҡ ҡырғыҙ, ҡаҙаҡтарҙы, башҡорттарҙы таларға димләп, быларҙы ла бер-береһенә дошман итә. Неплюев башҡорт старшиналарының хоҡуғын кәметеп, уларҙы бөтөнләй хөкүмәт түрәләренә ҡарата. Башҡорт тархандарын үҙ яғына ауҙарыу ысулын, уларға һалына башланған яһаҡтарҙы бөтөрөп, уларҙы жалованье менән хөкүмәт хеҙмәтенә алыуҙы көбәйтә. Ҡышлыҡ ашлыҡ һәм бесән әҙерләмәгән ярлы башҡорттарҙың ҡыш көндәрендә ас ҡалыуҙары менән файҙаланып, аҡса һәм аҙыҡҡа алышып, уларҙың балаларын һатып алып, ситкә ебәреп урыҫ баяр, түрә һәм крәҫтиәндәренә таратып суҡындыра башлай. Хатта, башҡорт ҡыҙҙарын суҡындырып, тәрбиәләп үҫтереп һатыу өсөн айырым мәктәп тә астыра. Мулла һәм абыҙҙар иң ҡурҡыныслы кешеләр һаналып, бөтөнөһө контроль аҫтына алыналар. Ләкин хөкүмәт уларҙы үҙ яғына ауҙарыу өсөн мәжбүри эштәрҙән ҡотҡара. Неплюев башҡорттар менән башҡа ваҡ милләттәр араһын ныҡ боҙоп өлгөргәс, ситтән татар, мишәр, муҡшы, сыуаш һәм мари кеүек ваҡ халыҡтарҙың Башҡортостанға күсеүенә иркен юл аса. Былар Ҡаҙаҡ яҡтарынан меңәрләп килеп, элек үҙҙәренә һалынған душевой налогтан, лашмансылыҡтан, рекрут биреүҙән ҡотолоу йәки быларҙы аҙайтыу өсөн яҙылалар.

Шулай итеп, бер яҡтан һәр бола арҡаһында төп башҡорттар аҙая барһа, икенсе яҡтан, башҡортла-

ныусылар күбәйә. Был осорҙарҙа башҡорт һәм Башҡортостанға күскән мишәр һәм типтәрҙәр налог мәсьәләһендә байтаҡ льготалар менән файҙаланып торалар. Мәҫәлән, Рәсәйҙә урыҫ крәҫтиәндәре ҡаҙнаға йән башына 3 һум 70 тин налог түләгәндә, Өфө өлкәһендә хисапҡа алынып, һандары 1431 йортҡа тулған тархан башҡорттар бер тин дә налог түләмәй, бары йыл һайын хөкүмәт хеҙмәтендә (ғәскәрлек һәм эштә) 280 кеше тоторға, һандары 8 395 йортҡа тулған яһаҡлы башҡорттар урта иҫәп менән йорт башына 25 тин налог түләп, түрәләргә ылау һәм йыл һайын 1043 кешене эшкә бирергә, һандары 5655 йортҡа тулған типтәрҙәр менән ерһеҙ башҡорттар йылына йорт башына 49 тин налог менән һәр йәй көпо крепостарҙа эшләргә 707 эшсе бирергә тейеш инеләр, һандары 1511 йортҡа тулған мишәрҙәр һуңғы болаға ҡатышмайынса башҡорттар тарафынан ныҡ таланыу сәбәпле бары ғәскәрлек үтәргә һәм эшкә йыл һайын 191 кеше бирергә мәжбүр ителә инеләр.

Был халыҡтарҙың башҡа милләт һәм синыфтарға ҡарағанда файҙаланған ҙур бер льготалары үҙ кәрәктәренә бушлай (ботона бары 3 тин пошлина түләп) тоҙ сығарып файҙаланыу хоҡуҡтары ине.

Ләкин үткән бер нисә болалар ваҡытында Башҡортостанда башҡорт, мишәр һәм типтәр хужалығы шул хәтле емерелгән, халыҡ шул хәтле күп зыянланып ярлыланған ине ки, урыҫ крәҫтиәндәренә һалынған налогтарға ҡарағанда бик аҙ булған был налогтар ҙа быларға түләй алмаҫлыҡ ауыр булып төшә ине.

## 1747–1748 йылдарҙа типтәр бунты

Башҡорттарҙы ер өсөн талаштырып, башҡорттарға ҡаршы ҡоралланыу өсөн Башҡортостанға мишәр, типтәр һәм татарҙар тултырыу — сәйәси яҡтан хөкүмәт өсөн файҙа булып сыҡһа ла һәм Башҡортостандың иҡтисади көсөн күтәреүгә сәбәп булһа ла, төп илдәрендә налогты күп түләгән был халыҡтың Башҡортостанға килеп ғәскәрлектән ҡотолоуҙары һәм үҙҙәренән налог аҙ алына башлау ҡаҙна доходына

байтаҡ зыян килтерә ине. Хәлбуки, хәҙер Башҡортостан һәр яҡтан крепостар менән ҡамалып, бында күп ғәскәр ҡуйылғас, быларҙы аҫрау өсөн налогтарҙы арттырырға кәрәк булды.

Шул сәбәпле, хөкүмәт бындағы типтәр, мишәр һәм татар, сыуаш һәм мариҙарға налогты арттырырға тейеш табып, элекке аҙ ғына яһаҡтар урынына 1747 йылда йән башына 80 тин налог һалыныу тураһында бойороҡ сығарҙы. Ул ваҡытта 80 тин аҡса, бигерәк тә Башҡортостанда, бик ҙур сумма ине. Мәҫәлән, 6 йәнлек бер семьянан алынасаҡ 4 һум 80 тингә ҡала баҙарында унлап һарыҡ һатырға кәрәк була ине.

Өфө һәм Бөрө яҡтарындағы типтәр, татар һәм мишәрҙәр быны түләй алмаясаҡ булып, бындай налог түләүгә ҡаршы баш күтәрҙеләр. Неплюев быларға ҡаршы 2 меңләп ғәскәр, бынан тыш был ваҡытта типтәрҙәр менән аралары боҙолоп өлгөргән башҡорттарҙан байтаҡ көс ебәреп, быларҙы баҫтырҙы. Сыуалыш башлыҡтарын (күбеһе татарҙар) тотторол яза ҡылдырҙы. Типтәр, татар һәм мишәрҙәр йән башына 80 тин налог түләргә мәжбүр ителделәр. Ләкин, ысынлап та, быны түләй алмай, өҫтәренә недоимкалар йөкләнә башланы.

## Башҡортостанды урыҫлаштырыу сәйәсәте

Неплюев башҡорт болаларында төп ғәйепле кешеләр тип муллаларҙы һанай, муллаларҙың дин исеменән башҡорт, ҡаҙаҡ, типтәр, татар һәм мишәр халыҡтарын берләштерергә тырышыуҙарына көрәшергә тырыша ине. Шул сәбәпле, ул бында халыҡты суҡындырыуҙа бик кәрәк эш табып, бының өсөн саралар күрә башланы. Мәҫәлән, бындағы халыҡҡа өлгө булһын өсөн Ҡазан яғында элек суҡындырылып өлгөргән байтаҡ крәҫтиәндәрҙе Башҡортостанға күсертеп, хәҙерге Бәләбәй һәм Стәрлетамаҡ кантондарына ерләштерҙе. Бында суҡынған байтаҡ ҡалмыҡтар ҙа күсерелде.

Суҡынырға күнгән ҡаҙаҡ, төркмән, үзбәк һәм башҡа милләттән булған ҡолдарҙы һатып алып йәки ҡасып килгәндәрен ҡотҡарып, башҡорттар араһына

ултырта башланы. Шулай итеп, һәр төрлө керәшен милләттәр берләштерелеп, һуңынан былар нуғайбәк тип йөрөтөлә башланылар. Быларҙың үҙҙәренән уҡытып поптар етештерелеп, уларға муллалар өҫтөнән күҙәтеп тороу, яңы мәсеттәр һалдырыуға ирек бирҙермәү кеүек эштәр йөкләтелде. Шуның менән бергә үк был нуғайбәктәрҙең үҙҙәре лә аҡрынлап урыҫлаштырыр өсөн улар менән урыҫтар араһында ҡыҙ алышыу-бирешеүгә ярҙамлашты. Шәреҡ милләттәрендә электән ҡыҙ өсөн ҡалым алыу ғәҙәте булып, ярлы кеше өсөн ҡыҙ алыу ҡыйын ине. Ә урыҫтарҙа бының, киреһенсә, ҡалым алыу булмай, бәлки ҡыҙға приданое биреү ғәҙәте булғанлыҡтан, күбеһе егет һәм ирҙәр булған керәшендәр араһында урыҫтан ҡыҙ алыу бик көсәйеп, тиҙҙән күбеһе урыҫлаша башланылар. Ашарына таба алмаған башҡорт, татар һәм башҡаларҙан да бүләк һәм льготаға ҡыҙығып (яһаҡтан һәм ылауҙан ҡотҡарылыу) суҡынып, былар янына килеп ҡатнашыуҙар күренә башланы.

Шуның менән бергә үк башҡорттарҙың күп ҡырылып ҡалыуы менән файҙаланып, башҡорттар яңынан хәл йыйнағанға хәтле бында ситтән мөмкин хәтле күберәк мөһажир күсерелеү саралары күрелә башланы: эске Рәсәйҙә баяр золомонан интегеп ҡасҡан ҡол крәҫтиәндәр, дини ҡыҫыуҙарҙан ҡасҡан раскольниктар, йорто янып, малы үлеп, ашлығы уңмай ас ҡалған ауыл кешеләре тулҡын кеүек Башҡортостанға ағылып килә башланылар. Хөкүмәт һәр төрлө енәйәтселәрҙе, берәй ғәйебе булған купец балаларын һәм һөнәрселәрҙең законһыҙ никахтан тыуған йәки документһыҙ кешеләрҙе бында һөрөп ебәрә башланылар. Ситтән Башҡортостанға килгән кешеләрҙең мосолман түгелдәре килгәс өс йыл буйына налогтан һәм мәжбүри эштән бөтөнләй азат ителә, өс йыл буйына быларҙан ғәскәр алынмай ине. Тиҙҙән был килмешәктәр үҙҙәренең төп илдәрендә ҡалған ҡатын һәм бала-сағаларын да бында килтертергә мәжбүр иттеләр. Башҡортостанда хеҙмәт иткән һалдаттарға хеҙмәт срогын тултырғас, бында бушлай ер бирелеп, ауылдарға таратылып ҡалдырыла башланылар. Башҡортостанда ер бик яҡшы булып, осһоҙ һатылыуҙы

күреп, Рәсәй эсенән бик күп баярҙар ҙа ерҙәрен һатып Башҡортостанға килеп ер һатып алырға тотондолар. Ошо саралар арҡаһында Башҡортостанда күсеп килгән урыҫтар бик күбәйеп 1750 йылдарҙа һандары 200 меңгә яҡынлашты.

Ырымбур ҡалаһының урыны Башҡортостанды күҙәтеп тороу өсөн уңайһыҙ һаналып 1742 йылда ул хәҙерге урынынан күсерелеп һалынды. Элекке Ырымбур Орск ҡалаһы аталып ҡалды. Яңы Ырымбур ҡалаһын (крепосын) типтәрҙәрҙән эшләтеп, уларҙың бер нисә йөҙө ошо эштә ауырып һәләк булдылар. Төркөстан һәм Бохараға каруандар йөрөй торған юл өҫтөндә һәр яҡтан биш саҡрымдан оҙон һуҙылған, ике сажин бейеклектә ур һәм таш стена менән ҡамалған, көслө ғәскәрле крепость булған Ырымбур бик тиҙ арала Шәреҡ менән ҙур сауҙа мәркәзенә әйләнеп, бында эске Рәсәйҙән купецтар йыйнала башланылар. Был ҡаланың нисек тиҙ үҫеүен, һалынғас та 18 йыл эсендә унда ҡаҙна һәм ғәскәр йорттарынан тыш 3 меңдән артыҡ йорт булыуы күрһәтәләр.

1744 йылда Башҡортостан Ырымбур губернаһы аталып, Ҡаҙағстан һәм Йайыҡ буйҙары һәм хәҙерге Һамар губернаһының байтаҡ урындары был губерна ҡармағына керетелде. 1755 йылда Йайыҡ (Урал) йылғаһы буйлап һалынған крепость һәм ауылдарҙа ултыртылған ышаныслы Дон һәм Уральск казачийҙары һәм бер аҙ башҡорт, мишәр, ҡалмыҡ һәм татарҙарҙан Ырымбур казачийҙары тип аталып, быларҙы идаралыҡ итеү өсөн айырым казачий идараһы төҙөлдө.

## Батырша болаһы

Неплюев ваҡытында тотолған дини ҡыҫыуҙар муллаларҙың асыуын бик көсәйтеп, былар башҡорттар араһында хөкүмәткә ҡаршы киң агитация йөрөтөп, уларҙы яңынан көслөрәк ҡуҙғалышҡа әҙерләйҙәр ине.

Башҡорт һәм башҡа ваҡ милләттәр хәҙер хөкүмәт һалған яһаҡ һәм налогтарҙы түләргә риза булһалар ҙа күбеһе ярлы булыуы арҡаһында түләй алмай, өҫтәрендә недоимкалары йыйнала бара, уларҙы түләтеү

өсөн ярлыларҙың нәмәләре тартып алынып, һаттырылып бөтөрөлә, ләкин улай ҙа недоимкаларҙы ҡаплауға етмәй ине. Хөкүмәт бына ошо хәлде һәм налог йыйнауҙың ҡыйынлығын иҫкә алып, налог йыйыу ысулын үҙгәртергә тейеш тапты. Йорт һәм йән башынан йыйнала торған налог урынына тоҙ сығарыу эшен ҡаҙнаға алып, уны ҡыйбат хаҡҡа (ботон 35 тингә) һатырға уйланы. Быға хәтле Башҡортостан халҡы араһында күлдәрҙән, Тоҙтүбә тауынан тоҙ сығарылып, уны Ҡазан яғына илтеп һатыу бер аҙ халыҡҡа кәсеп булып әүерелә, уларҙың налог түләүҙәренә ярҙамлаша ине. Был доходтың бөтөрөлөүе һәм беренсе кәрәк нәмә булған тоҙ алыуға аҡсаһыҙлыҡ башҡорттарҙы тағы ла уңайһыҙыраҡ хәлгә ҡалдырҙы. Бынан тыш, һуңғы ваҡыттарҙа Башҡортостанға меңәрмеңәрләп һөрөлгән енәйәтселәр бында хужалыҡ ҡормай, башҡорттарҙы талап йәшәүгә тотоноп, бик интектерҙеләр. Был хәлдән ҡотолоуға берҙән-бер сара — яңынан аяҡҡа баҫып, көрәшеп ҡарау ғына булды. Шулай итеп, дин өсөн көрәшергә тейеш тапҡан муллалар менән сикһеҙ күбәйгән золомдарҙан ҡотолоу һәм тоҙҙоң хөкүмәт монополияһы яһалыуына риза булмаған халыҡ массаһы 1755 йылда яңынан ҡулға-ҡул тотошоп бола сығарҙылар. Был хәрәкәттең башында шул ваҡытта башҡорттар араһында иң атаҡлы муллаларҙан һаналған Абдулла Ғәлиев исемле бер мулла торҙо. Уны халыҡ Батырша мулла тип йөрөтөп, был ғисъянды ла Батырша ғисъяны тип атайҙар.

Батырша башта ауылдан ауылға йөрөп агитация яһағас, Ырымбурға барып ул тирәләге ҡаҙаҡтар менән, Ҡазан яҡтарына кешеләр ебәреп татарҙар менән аңлашты. Өс йыл буйына шундай әҙерлек күргәс, башҡорт халҡын ҡорал менән күтәрелеүгә саҡырып, хитабнамә сығарып, муллалар арҡылы бөтөн илгә таратты. Шулай итеп, башҡорттарҙың йән асыһы менән һуңғы көрәштәре башланды.

## Батыршаның хитабнамәһе

Батырша үҙенең хитабнамәһендә шул ваҡытта башҡорттарҙың күргән һәммә золом һәм йәберҙәрен һанап, башҡорт һәм башҡа мосолман халыҡтарҙың үҙ-ара берегеп быға ҡаршы тораһы урында старшиналарҙың хөкүмәт яғына сығып үҙ халыҡтарына ҡаршы эш күреүҙәрен шелтәләй. Хитабнамәһендә: «Рәсәй хөкүмәте ни хәтле башҡорттарҙы ҡол итеп алып ситкә һөрҙө, һатты, баярҙарға таратты, йәш балаларығыҙҙы ҡол итеп алып суҡындырҙы, ҡыҙҙарығыҙҙы үҙ һалдаттарына көсләп таратты. Бына шундай ваҡытта старшиналарығыҙ һеҙгә ярҙам күрһәтмәй, һеҙҙең хәлегеҙҙе еңеләйтергә тырышмай, бәлки ҡафыр файҙаһын күҙәтеп һеҙгә налогты күбәйтәлер, халыҡ үҙенә һалынған 80 йәки 25 тинлек налогтарҙы түләмәгәс, старшиналарығыҙ ни хәтле халыҡты тотоп биреп һәләк иттерҙеләр», — ти һәм мосолмандарҙы үҙ-ара тартыштан, бер-берен талауҙан, бер-беренең ҡанын түгеүҙән туҡтап, старшиналарға ҡаршы аяҡланырға, ҡаҙнаға налог түләмәҫкә, ҡалалар һалыуға һәм башҡа эштәргә бармаҫҡа, ылау, ғәскәр һәм түрәләргә ат аҙығы бирмәҫкә, ер һатмаҫҡа, түрәләрҙең халыҡты йәберләүҙәренә һәм мыҫҡыллауҙарына ирек бирмәҫкә, хөкүмәт ҡуйған һәммә старшиналарҙы урындарынан бәреп төшөрөргә, был эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн тиҙерәк һуғыш аттары һәм ҡорал әҙерләргә саҡыра. Башҡорттар аяҡланғас, хөкүмәт золомо аҫтында интеккән Ҡазан татарҙарының да быларға ҡушыласағын, ҡаҙаҡтарҙан да ярҙам буласағын вәғәҙә ҡыла. Бүләк һәм дәрәжәләргә алданып батшаға һатылыусыларға ләғнәт уҡый. Башҡорттарға ирекле тоҙ сығарып файҙаланыу бөтөрөлөп тоҙҙо ҡыйбат хаҡ менән ҡаҙнанан һатып алыу бик ауыр буласағын һөйләй. Рәсәй хөкүмәтенең маҡсаты Ҡаҙағстанды, уның арҡылы Төркөстан һәм Шәреҡ мәмләкәттәрен дә алып, уларҙы ла башҡорттар хәленә килтереү булғанлыҡты һөйләп, быға ирек бирмәү башҡорттар өсөн ҙур бурыс булғанлыҡты белдерә һәм бөтә башҡорттарҙы 1755 йылдың 10 июнендә бер юлы күтәрергә димләй.

Батырша мулла үҙенең хитабнамәһенә дини төҫ биреп: «Был азатлыҡ көрәшендә ҡорбан булған кешеләр барыһы ла йәннәтлек буласаҡ», — ти.

## Батырша болаһы нисек баҫылды

Был бола башта бик оҫталыҡ менән һәм сер тотолоп әҙерләнһә лә һуңынан Нуғай юлындағы Бөрйән волосы башҡорттары күрһәтелгән срокты көтмәй, ашығып хөкүмәт түрәләренә һәм үҙ старшиналарына һөжүм итеп үлтерә башланылар. Уларҙан күрмә башҡа ерҙәрҙә лә берәм-һәрәм ҡуҙғалыштар башланды. Шулай итеп, бер көн эсендә бөтөн Башҡортостанда бола сығарыу планы боҙолдо. Тиҙҙән бола Түңгәүер, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ волостарына йәйелеп, былар ҡаҙаҡтарға таянып Яйыҡ йылғаһы буйындағы заводтарға һөжүм итә башланылар. Хөкүмәт быларҙың ҙур майҙан аласағын һиҙеп, Башҡортостан крепостарында булған егерме дүрт меңдән артыҡ ғәскәргә генә ҡәнәғәт итмәй, Урал, Дон өлкәләренән казачийҙар менән суҡынған ҡалмыҡ ғәскәрен һәм эске Рәсәйҙән бер нисә полк яңы ғәскәр килтертте. Бола Ҡазан татарҙары араһында ла таралмаһын өсөн унда ла ауылдарға күп ғәскәр таратылды, был ваҡытта хәҙерге Йылайыр кантонында башланған бола көндән-көн көсәйә, башҡорттар бере артынан бере хөкүмәт яҡлы старшиналарға, купец һәм түрәләргә һөжүм итеп үлтерә, талай инеләр.

Ләкин үҙҙәре срогынан элек ашырып аяҡланған был башҡорттар башҡа ерҙәрҙә һаман да ҡуҙғалыш башланыуҙы күргәс, ҡурҡышып семьяларын алып Яйыҡ йылғаһы арҡылы ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ далаһына ҡасып сығып китә башланылар. Хөкүмәт боланы тиҙерәк баҫыу өсөн башҡорттарҙың үҙ араларын боҙошторорға теләп, Батыршаны тотоп килтереүсегә мең һум аҡса, старшиналыҡ һәм бүләктәр, уның һәр бер шәкертен үлтереүсегә илле һумдан бүләк вәғәҙә итте; Ырымбур ахуны исеменән татарса хитабнамәләр яҙҙырып, башҡорттарҙы Батыршаға ҡаршы өндәп, дини вәғәздәр тараттырҙы. Батыршаға ҡушылған бүтән кешеләрҙең ҡатын һәм бала-сағаларын, һис

ҡалдырмай яза ҡылып, үлтертәсәген иғлан ҡылды, ғисъянға ҡушылған һәммә башҡорттарҙың бөтә ер һәм милектәрен болаға ҡушылмай ҡалған башҡорттарға таратасағын белдерҙе. Татар-башҡорт араһын айырыу өсөн Ҡазан яғындағы татарҙар араһында, хөкүмәткә ярҙамлашып болаға ҡушылған кешеләрҙе тотҡан мырҙа һәм татарҙарға шул кешеләрҙең үҙҙәрен ҡол итеп һәм ерҙәрен бүләк итеп бирәсәген вәғәҙә итте. Айырым рөхсәтһеҙ Башҡортостанға килгән татарҙарҙы, Татарстанға табан барған бөтә башҡорттарҙы юлда тотоп яза ҡылырға бойороҡ сығарҙы. Башҡортостандағы мишәр һәм типтәрҙәр араһына: «Әгәр башҡорттар еңһә, һеҙҙең ҡулығыҙҙағы бөтә ерҙәрҙе кире тартып алып боронғо кеүек һеҙҙән үҙҙәренә аренда хаҡы түләтәсәктәр», — тип прокламациялар таратты. Шулай итеп, иҡтисади файҙа яғынан башҡорттарҙы үҙ-ара ла татар, мишәр һәм типтәрҙәр менән дә бер-беренә ҡаршы итеп күрһәтте.

Неплюевтың башҡорттар менән типтәрҙәр араһында былай ер дауы сығарыуы нәтижәһеҙ ҡалманы: мишәр һәм типтәрҙәр боронғо кеүек башҡорттарға «дань» түләргә мәжбүр булыуҙан ҡурҡып бик күбеһе башҡорттарҙан айырылып был көрәштә хөкүмәткә ысын күнелдән ярҙамлаша башланылар.

Башҡорттар ярҙамһыҙ ҡалғас, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы тора алмаясаҡтарын күреп, Урал тауҙары араларына ҡаса башланылар. Ҡаҙаҡтар менән берләшеп яңы һөжүм яһар өсөн ҡатын һәм балалары менән илле меңләп Яйыҡ аркылы кисеп, ҡаҙаҡ сәхрәләренә ҡасып китте. Яйыҡ буйҙары Дон казачийҙары һәм ҡалмыҡтар менән һаҡлана ине. Былар Яйыҡ йылғаһы аркылы кискәндә меңдәрсә башҡорттарҙы ҡырҙылар, һыуға батырҙылар.

Ҡаҙаҡ сәхрәһенә ҡасҡан башҡорттар киләсәктә ойошоп, көс йыйнап яңынан ҡайтмаһындар өсөн хөкүмәт Ҡаҙаҡ Урҙаһына бүләк һәм илселәр ебәреп: «Һеҙ башҡорттарҙың ирҙәрен тотоп Рәсәйгә тапшырһағыҙ, башҡорттарҙың бөтә ҡатын-ҡыҙҙары, бала-сағалары һәм алып киткән малдары үҙегеҙгә булһын», — тип хәбәр таратты. Ҡаҙаҡтар Бохара һәм

Хива менән алыш-биреш итеп, унда ҡолдар ҡыйбатлы булғанлыҡтан, бының менән файҙаланып, башҡорт ир һәм егеттәрен тотоп бирергә тырышҡас, былар бирелмәç өсөн ҡаршы һуғышып ·касҡан башҡорттарҙың күбеһе һәм ҡаҙаҡтарҙың байтағы был үҙ-ара һуғышта үлтерелде. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәм балалары унар меңләп ҡаҙаҡ далаларында юғалдылар, йәки Урта Азияға һәм Персия мәмләкәтенә ебәрелеп һатылдылар.

Шулай итеп, Батыршаның халыҡты үҙ-ара берегеүгә өндәп сығарған был болаһы халыҡтың үҙ-ара һуғышып, бер-берен ҡырыуҙары менән бөттө.

## Батыршаның тотолоуы һәм үлеүе

Батырша үҙе Башҡортостандан китмәй, эйәрсендәре менән Урал тауҙарында ҡасып ҡалған ине. Ул халыҡты башлап ҡаршы ҡотортоу сәбәпле старшиналар уға бик асыулы инеләр. Былар хөкүмәттең уны тотоп тапшырыусыға күп бүләктәр бирәсәген белеп, уны эҙләй инеләр. 1756 йылда, көҙ көнө Батырша Өфөнән йөҙ илле саҡрым ерҙә, Уса юлында Азик ауылында мәсеттә ҡасып ятҡан урында мишәр старшинаһы Сөләймән Диваев тарафынан табылып ҡулға алынды ла ҡул-аяҡтары бығауланып, йөҙләп ғәскәр ҡарамағында Ырымбурға ебәрелде. Бынан үҙенең быға хәтле тотолған эйәрсендәре менән бергә ҙур конвой ҡарамағында Мәскәү арҡылы Петербург ҡалаһына оҙатылып, Шлиссельбург ҡалаһындағы крепосҡа ябылды. 1762 йылда йәй көнө ул үҙен һаҡлаған бер часовойҙың йоҡлап китеүе менән файҙаланып, уның янындағы балтаны алып һаҡсыларға һөжүм итте, башта өс-дүрт һаҡсыны үлтерһә лә ҡаса алманы, башҡа һаҡсылар тарафынан тотолоп, аҫылып, шул крепоста күмелде. Уның ҡатыны менән йәш балалары ла Мәскәүгә оҙатылдылар. Уларҙың һәм Батыршаның эйәрсендәренең яҙмышы нисек бөткәнлеге билдәле түгел.

Быға хәтле булған болаларҙа башҡорттар һис бер ваҡыт батшаға һәм үҙ старшиналарына ҡаршы аяҡланмай, бары хөкүмәт түрәләренең йәберенән

генә зарланалар, күп ваҡытта боланы йәбергә түҙә алмай үҙҙәренең хәлдәрен батшаға ишеттерсү осон генә эшләнде тип күрһәтәләр ине: беренсе тапҡыр башлап Батырша мәсьәләне икенсе нигеҙгә ҡуйып, баяр һәм түрәләр генә түгел, батшалар, хатта башҡорттарҙың үҙ старшиналары, башҡорт халҡының дошманы булғанлыҡты иғлан итеп, быларҙың барыһына ла ҡаршы көрәшергә саҡырғайны.

Батырша болаһы башҡорттарҙың Шәреҡкә таянып үҙҙәре сығарған һуңғы ҡуҙғалышы булып, бынан һуң башҡорттар Рәсәйҙәге батша хөкүмәтенең золомдарына ҡорал менән протест итһәләр ҙә был протест шундай уҡ мазлум урыҫ халҡының үҙе сығарған аяҡланыуҙарына ҡушылып ҡына сығарылды.

Килмәк абыҙ, Ҡараһаҡал һәм Батырша болаларын баҫҡан ваҡыттар батша хөкүмәтенең милли сәйәсәтен иң асыҡ күрһәткән ваҡыттар.

Ваҡ милләттәр араһына һәр төрлө енәйәтселәр тултырып, был милләттәрҙе сыҙай алмаҫлыҡ хәлгә килтереп, аяҡланырға мәжбүр итеү, элек урыҫ халҡы массаһы менән быларҙың араһын, һуңынан ваҡ милләттәрҙең, бер-береһе менән боҙоштороп үҙ-ара һуғыштырыу, бының өсөн ваҡ милләттәрҙең үҙ башлыҡтарын да дәрәжә һәм бүләктәр менән үҙ яғына ауыштырып, уларҙан файҙаланыу кеүек һәммә саралар күрелде.

Ошо саралар арҡаһында башта ситтән күсеп килеп Башҡортостанда ултырған мишәр, татар, сыуаш һәм урыҫ крәҫтиәндәрен яҡшы ҡаршы алып ҡабул иткән башҡорттарҙың етәкселәре араһында был милләттәргә, быларҙа башҡорттарға милли дошманлыҡ тыуҙырылды.

Бер яҡтан батша хөкүмәте милли дошманлыҡ менән файҙаланып, был милләттәрҙең барыһының да массаһын йөҙ йылдар буйына үҙ ҡулында ҡол итеп тотоп килде. Икенсе ваҡ милләт етәкселәре урыҫтарҙың һәр береһенә шөбһә менән ҡарап, ваҡ милләт массаһының урыҫтар менән яҡынлашыуҙарына, уларҙан мәҙәниәт һәм хужалыҡ эшендә өлгө алыуҙарына аяҡ салып торҙолар.

## Әбей батша (Екатерина II вакыты)

1700—1800 йылдарҙың урталарында Рәсәйҙә ғәскәр һәм хөкүмәт мөәссәсәләрендә хеҙмәттә бик күбәйгән ваҡ (ярлы) дворяндар үҙҙәренең матди хәлдәрен яҡшыртыу өсөн мәмләкәт идараһын үҙ ҡулдарына эләктереү уйына кереп, быныӊ өсөн 1762 йылда Рәсәй императоры Петр III тәхеттән төшөрөп, үлтереп, уның урынына был император менән араһы бик боҙоҡ булған бисәһе Екатерина II тәхеткә мендерҙеләр. Башҡорт һәм татарҙар быны Әбей батша тип йөрөйҙәр. Екатерина төп немец ҡыҙы булып, ире иҫән, тәхеттә ваҡытта уҡ шул дворяндарҙың башлыҡтары менән яҡшы мөнәсәбәттә ине. Екатерина заманына күрә уҡымышлы һәм иркен фекерле бер ҡатын булһа ла тәхеткә дворян ярҙамы менән менеү һәм тәхеттә бары улар ярҙамы менән генә тора алыу уны дворяндар ҡулында уйынсыҡ итте, мәмләкәттеӊ бөтә эске сәйәсәте һәм иҡтисади эштәре дворяндар теләгән рәүешкә инеп китте.

Был эш баяр һәм дворяндар менән крәҫтиәндәр араһындағы мөнәсәбәт мәсьәләһендә бигерәк асыҡ күренә. Екатерина йөҙ меңдән артыҡ хөкүмәт крәҫтиәндәрен үҙен тәхеткә мендерергә ярҙамлашҡан дворяндарға таратты. Быға хәтле баярҙар крәҫтиәндәрен һатһалар, ерҙәре менән бергә ерҙән айырмай һатырға тейешле инеләр. Екатерина баярҙарға крәҫтиәндәрҙе ерҙәренән, хатта семьяларынан айырып һатырға, яза урынында үҙ теләктәре менән (судһыҙ) Себергә ебәрергә ирек бирҙе. Быға хәтле баярҙар үҙ крәҫтиәндәрен ни хәтле йәберләргә, ҡыйнарға аҙапларға ирекле булһалар ҙа үлтерергә хаҡлы булмай — үлтереүселәрҙе судҡа биреүҙәр булғылай ине. Екатерина хөкүмәте ындай ваҡиғаларҙан күҙ йома, хөкүмәт судтары ундай эштәрҙе ҡарамай, ҡараһалар, крәҫтиәнен үлтергән дворяндарҙы бары сиркәүҙә тәүбә иттергән генә булып, язаһыҙ ҡотҡара башланылар. Хәҙер бөтә волость үҙ ҡулдарына ингән дворяндар һис нәмәнән тартынмай, крәҫтиәндәрҙе талай башланылар.

Хөкүмәт айырым указ сығарып, крәҫтиәндәрҙең үҙ хужалары өҫтөнән шикәйәт итеүҙәрен тыйҙы, баярҙарҙан зарланып хөкүмәткә шикәйәт итеүселәр каторгаға ебәреләбашланы.

Бына ошо эштәр арҡаһында крәҫтиәндәр араһында баярҙарға ҡаршы бик ҙур асыу ҡуҙғалып, крәҫтиәндәрҙең аяҡланып бынан ҡотолорға тырышыуҙары өсөн бары уңайлы форсат ҡына кәрәк ине.

Был ваҡытта баярҙарҙан бик күп золом күреү, уларға дошманлашҡан яңы бер синыф тыуҙы: фабрика-заводтарҙа эшләй башлаған крәҫтиән-эшселәр император Петр I ваҡытында Рәсәйҙең төрлө урындарында — былар араһында Урал тауҙарында ла — завод һәм фабрикалар ҡора башлаған купецтар дворянлыҡҡа мендерелеп, заводтарҙа эшләтеү өсөн Рәсәйҙән байтаҡ крепостной крәҫтиән һатып алып ерләштергәндәр (мәҫәлән, юғарыла һөйләнеп үткән заводсы Твердышев ҡына ун биш меңләп крәҫтиән һатып алып күсергәйне). Былар барыһы ла хәҙерге эшселәр кеүек ялланып түгел, бәлки ҡол булып эшләргә мәжбүр, завод-фабриканы ташлап китә алмайҙар, хужалар уларҙы теләһә ни эшләтә ала ине. Хатта былар үҙҙәре иген сәсеп үҙ тамаҡтарын үҙҙәре туйҙырырға, заводтарҙа бушлай — хеҙмәт хаҡы алмай эшләргә тейеш инеләр.

Шулай итеп, баярҙарға ҡаршы ризаһыҙлыҡта крәҫтиәндәргә ошо завод эшселәре лә ҡушылды. Крәҫтиән һәм эшселәрҙең башһыҙыраҡ булғандары был хәлгә түҙә алмай йорт һәм семьяларын ташлап Дон һәм Яйыҡ яландарына ирек эҙләп ҡасалар, арала баярҙарҙы үлтереп ҡасыусылар ҙа була; улар унда берләшеп шайкалар төҙөп, баяр имениеларына һәм купецтарға һөжүм итеп, талап йөшәй инеләр. Тура килгәндә былар крәҫтиәндәрҙе лә талаштырһалар ҙа күберәк бай кешеләргә, йәғни баярҙарға һөжүм итеү сәбәпле, түбән халыҡ массаһы уларға баярҙарҙан үс алыусы итеп, яратып ҡарай ине.

## Яйыҡ казачийҙары

Бынан 400—500 йылдар элек Мәскәү дәүләтенән ирек эҙләп Дон һәм Волга йылғаһы буйҙарына ҡасҡан кешеләр, унда киң яландарҙа үҙ-ара ойошоп һис кемгә буйһонмай казачий булып йәшәйҙәр, быларҙа батша ла, баяр ҙа, дворян да, түрә лә юҡ. Үҙ-ара булған эштәрҙе ҡарау өсөн билдәле срок менән старшиналар һайлап ҡуялар, ерҙе уртаҡ biләйҙәр, мал аҫрайҙар, ваҡыт-ваҡыт тирә-яҡ мәмләкәттәргә йәки халыҡтарға һөжүм итеп талап ҡайталар, ваҡыт-ваҡыт Мәскәү дәүләтенә йә ялланып уның яғынан һуғышҡа ҡатнашалар, ә ҡайһы саҡтарҙа үҙҙәре Мәскәү мәмләкәтенә һәм уның баярҙарына ҡаршы көрәш алып баралар ине. 1580 йылда быларҙың бер аҙы Яйыҡ йылғаһы тамағында булған Нуғай ханлығын бөтөрөп Яйыҡ йылғаһы буйында урынлаштылар һәм Яйыҡ (Урал) казачийҙары тип атала башланылар. Император Петр I Шәреҡкә табан хәрәкәт башлағас, быларҙан ныҡ файҙаланыу өсөн уларҙы үҙ ҡулына алырға тейеш тапты. Быларға ғәскәрлек хеҙмәте өсөн хаҡ түләп хөкүмәт уларҙың һайландыҡ старшиналарын үҙ яғына ауыштырҙы. Халыҡҡа ярамаһа, һәр көн урынынан ҡыуылыуы мөмкин булған старшиналар Рәсәй батшаһы ярҙамы менән үҙ урындарында нығып ҡалырға теләп казачийҙар араһында хөкүмәт сәйәсәтен үткәрә башланылар.

Екатерина ваҡытында хөкүмәт быларҙың элекке кеүек теләһәләр Рәсәйгә ярҙам бирә, теләһәләр ситтә ҡала алыуҙарын бөтөрөп, уларҙы хөкүмәттең бөтә бойороғон еренә еткерергә мәжбүр итеү юлына төштө. Ирекле казачийҙар быға ла казачий старшиналарҙың халыҡ фекере менән хисаплашмай, хөкүмәт тарафынан ҡуйылыуҙарына һис риза булмай «старшиналар партияһы» менән түбән казачий массаһы араһында тартыш китте. Старшиналар Рәсәй хөкүмәте ғәскәрҙәренең ярҙамы менән үҙҙәренә ҡаршы торған казачийҙарҙы тотороп язалата, быға ҡаршы старшина һәм хөкүмәт түрәләренә һөжүм итеп үлтерә башланылар. Шулай итеп, бөтә Рәсәй ярлы мазлум массаһы һуң сиккә еткән ауырлыҡтан

ҡотолоу өсөн форсат ҡына көтә ине. Оҙаҡ үтмәне, былдай форсат килеп сыҡты. Бүгәс бунты исеме менән йөрөтөлгән ҙур халыҡ болаһы башланды.

Батырша болаһы баҫылғанда үлтерелгән, таланған, ерҙәре тартып алынған башҡорттарҙың түрәләргә асыу менән үскән егеттәре лә ас һәм яланғас тороуҙан ҡотолоу өсөн былдай форсат көтөп торалар ине.

Шулай итеп, Әбей батша ваҡытында дворяндарҙың крәстиән, казачий һәм башҡорт тураһында тотҡан ҡаты сәйәсәте был өс груһының файҙаһын берләштерҙе. Быға хәтле Мәскәүгә ялланып, Башҡортостанға барып, башҡорт болаларын ҡатылыҡ менән баҫҡан казачийҙар ҙа баяр һәм түрәләр химаяһын күреп, башҡорт ерҙәренә хужа булырға тырышҡан крәстиәндәр ҙә үҙҙәренең хаталарын асы тәжрибә менән аңланылар.

Сәйет болаһынан башлап Батырша болаһына хәтле башҡорт болалары күбеһенсә муллалар ҡул аҫтында эшләнә ине. Быларҙың күбеһе шул болаларҙа һәләк булып, йәки хөкүмәттең ҡыҫыуҙарына түҙә алмай Бохара яҡтарына ҡасып киттеләр. Шул сәбәпле башҡорт болаларына дини төҫ биреп башҡа милләттәрҙең асыуын килтерергә сәбәп кәмене. Шулай итеп, хәҙер бөтә милләт мазлумдарының берләшеп көрәшеүҙәренә уңайлы заман асылды.

## Бүгәс бунты

Иван Грозный ваҡытында уҡ Рәсәйҙә батшалар бөтә хоҡуҡты үҙ ҡулдарына йыйнап, самодержавный булыу өсөн үҙҙәрен дин башлығы итеп иғлан һәм руханиҙар синыфын үҙ ҡулдарына ҡорал итеп алған инеләр. Руханиҙар иң ҙур баяр һәм түрә булған батшаларҙы ҡара халыҡҡа яҡшы төҫтә күрһәтергә тырыша инеләр. Ваҡиғанан, батшалар халыҡты талағанда үҙ исемдәренән түгел, бәлки түрәләр арҡылы талай, ләкин шул уҡ ваҡыт үҙҙәрен халыҡҡа яҡшы итеп күрһәтеү өсөн төрлө «мәрхәмәттәр» эшләһәләр, уны үҙ исемдәренән эшләй инеләр. Шул сәбәпле халыҡ массаһында: «Беҙҙе батша ҡыҫмай, баярҙар менән түрәләр ҡыҫа. Түрә һәм баярҙар халыҡтың

хәлен һәм теләген башҡаға белдермәй, уларҙы алдап тоталар», — тигән фекер тыуғайны.

Әбей батша тәхеткә менер алдынан һәм менгәс халыҡтың был ҡарашын нығытҡан бер нисә ваҡиғалар булып үтте. Мәҫәлән, Әбей батшаның үлтерелгән ире Петр III крәҫтиәндәрҙе ҡыҫыуҙы бер аҙ йомшартыу тураһында закондар сығарыуы. Петр III төп немец булып, тәрбиәһе алған ине. Был ваҡыттарҙа немецтар дин мәсьәләһенә байтаҡ иркен ҡарайҙар, уларҙа дини ҡыҫыу аҙ ине. Был ваҡыттарҙа бик ныҡ үҫә башлаған Германия сәнәғәт буржуазияһы ла кешене ҡол крәҫтиән итеп хужаға көсләп эшләткәндә, уларҙың эше бик насар була, бәлки крәҫтиәндәрҙе аҡсаға яллап эшләтеүҙе файҙалыраҡ һанайҙар, сөнки кеше урынһыҙ ҡалып аҡса табыу өсөн тырышыбыраҡ эшләй, тиҙәр ине.

Немец тәрбиәһе алған Петр III шул уйҙы артыҡ күреп, Рәсәйҙең иҡтисади хәлен яҡшыртыу өсөн монастырҙар ҡулындағы крәҫтиәндәрҙе азат итеү, заводсыларға крәҫтиән ҡол һатып алыуҙы тыйыу һәм православиенан айырырға раскольниктарҙы яза ҡылыуҙы аҙайтыу тураһында закондар сығара башланы. Шул сәбәпле, крәҫтиән халҡы уға ҙур өмөт менән ҡарап киләсәктә аҡрынлап баяр крәҫтиәндәренең дә азат ителеүен көтә башланылар. Бына шул ваҡытта гвардия полктарындағы дворян офицерҙарының Петр III тәхеттән төшөрөүҙәре халыҡта: «Халыҡты ҡыҫыусы батша түгел, бәлки баяр һәм дворяндар», — тигән ҡарашты нығытты.

Үҙ ирен үлтерткән бер ҡатындың тәхеткә мендерелеүенә, батша үлтереүселәрҙең хөкүмәт башына менеүҙәренә халыҡ насар ҡарар тип, хөкүмәт Петрҙың үлтерелеүен йәшереп, бары уның яңылыш үлеүе тураһында ҡырҡа ғына хәбәр иғлан иткәйне. Ләкин, халыҡ араһында быға ышанмайынса, батша Петр ябылған икән, төрмәнән ҡасып киткән икән, халыҡ араһында йәшеренеп йөрөй икән, бер аҙ ваҡыттан һуң ул халыҡҡа таянып яңынан тәхетте ҡайтарып алып, баярҙарҙы язалап, крәҫтиәндәрҙе ҡоллоҡтан ҡотҡарасаҡ икән, тигән хәбәрҙәр тарала башланы.

Һәр кемдең үҙенә күңелле хәбәргә ышанаһы килә. Шул сәбәпле был хәбәрҙәргә баярҙар ҡулында иҙелгән крәҫтиәндәр ҙә, үҙ старшиналарына ҡаршы көрәшкән казачийҙар ҙа ышандылар һәм Петрҙың килеп сығып халыҡты ҡотҡарыуын көтә башланылар.

Ошо миҙгелдәрҙә казачийҙарҙы ойоштороп, Төркиәгә ҡасып китергә йөрөгән Емельян Пугачев исемле бер казачий был хәбәрҙе ишетеп, Петр килеп сыҡһа, халыҡтың уға эйәреп аяҡланасағын һиҙеп, Яйыҡ казачийҙары араһына барып үҙен ҡатыны менән баярҙар тарафынан тәхеттән төшөрөлөп, төрмәгә ябылған булһа ла унан ҡасып ҡотолған император Петр тип иғлан итте һәм кире тәхеткә менеп, иҫке иректәрен ҡайтарасағын, баярҙарҙы бөтөрөп крәҫтиәндәргә ер-ирек бирәсәген иғлан итте. Казачийҙарҙың хөкүмәткә ҡаршы теш ҡайрап аяҡланырға форсат көтөп торған кешеләре, ваҡиғаның ысынын белһәләр ҙә йүрей уның һүҙҙәрен раҫланылар. Шул сәбәпле, халыҡтың күбеһе уға ышанып, 1773 йылда Яйыҡ казачийҙары араһында ошо ҙур Бүгәс болаһы башланды. -

## Бүгәс болаһының барышы

Бүгәс үҙенең Петр батша булыуын бер утарҙа иғлан итеп, шунан ҡырҡ казачий эйәртеп, Ырымбурға табан хәрәкәт башланы. Был хәрәкәт бик тиҙ тирәяҡҡа йәйелеп, уға ҡушылыусылар көндән-көн арта, юл өҫтөндәге крепостарҙағы казачийҙар уға ҡаршы һуғышмай, уның яғына сыға, крепостарҙа булған хөкүмәт комендант һәм дворян офицерҙарҙы тотоп биреп үлтерә бара инеләр. Былар Ырымбур крепосына барып етеп, уға һөжүм итмәй уҙып, Һаҡмар буйындағы Ҡарғалы биҫтәһе менән бер нисә казачий крепостарын үҙҙәренә ҡушҡас, Ырымбурҙы ҡаманылар. Бүгәстең был яҡҡа килеүенең сәбәбе — эш уңмаһа, ҡаҙаҡ далаһына ҡаршы анһатлыҡ, элек-электән хөкүмәткә ҡаршы көрәшеп килгән башҡорттарҙы үҙенә эйәртеүгә ышаныу һәм Урал заводтарында кәрәкле ҡоралдар яһатырға теләү ине. Ырымбур һәр яҡтан ур һәм таш стеналар менән ҡамалып, 90 туп һәм

4500-ләп ғәскәре булыу һәм хөкүмәт яҡлы казачийҙар (старшиналар партияһы) бында йыйналып, Бүгәскә ҡаршы тороу сәбәпле, алты ай буйына бирешмәй ҡаршы торҙо. Ошо ваҡытта Петр III халыҡҡа ирек биреү өсөн көрәш башлау хәбәре ҡол крәҫтиән һәм завод эшселәре араһына таралып, улар ҙа Бүгәскә ҡушылып баяр һәм заводтарға ҡаршы көрәш аса башланылар. Ә үҙҙәре генә айырым күтәрелергә хәле ҡалмаған башҡорттар ҙа был форсаттан файҙаланып, Бүгәскә ҡушылдылар. Быларҙың башында бик күп ерҙәре Твердышев тарафынан тартып алынған Юлай старшина (хәҙерге Мәсәғүт кантонына) менән уның улы Салауат торҙо. Шулай итеп, Башҡортостандағы завод һәм ауылдарҙың күбеһе Бүгәс килмәҫ борон уҡ уның яғына сыҡтылар. Бынан бола Урал аръяғына һәм Ҡазан губернаһына табан йәйелде. Бүгәстең иптәштәренән Иван Чика 10 000 халыҡ менән килеп, Өфө ҡалаһын ҡаманы. Һамар губернаһында ла халыҡ күтәрелеп Һамар ҡалаһын барып алдылар.

Хөкүмәт Бүгәс болаһының көсәйеүен күргәс, төрлө яҡтан Башҡортостанға күп ғәскәр ебәрҙе. Былар Ырымбур янында Бүгәс отрядтарын ныҡ еңеп, ғәскәренең күбеһен ҡулға төшөрҙөләр. Бүгәс үҙе башҡорт тауҙарына ҡасып ҡотолдо. Өфөнө ҡотҡарырға батша полковник Михельсон ҡул аҫтында килгән хөкүмәт ғәскәрҙәре Чика отрядтары менән башҡорттарҙы ныҡ еңеп, Чиканы ҡулға эләктерҙеләр. Бүгәс Урал тауҙарынан башҡорт һәм завод крәҫтиән эшселәрен йыйнап, Троицкий ҡалаһына барып, уны алғас, оҙаҡламай хөкүмәт ғәскәренә осрап, ике тапҡыр еңелһә лә рухын төшөрмәй, Уса ҡалаһына барып, уның хөкүмәт ғәскәрен еңеп, ҡаланы алды. Унан Кама арҡыры кисеп Иж һәм Воткин заводтарын алып, Ҡазанға барҙы; Ҡазан ҡалаһын яндырып, күп түрә һәм дворяндарҙы үлтертте. Бүгәстең тәртипле ғәскәре юҡ ине. Һәр ерҙә мазлум крәҫтиәндәр һәм ваҡ милләттәр уның киләсәген ишетеү менән баярҙарға һөжүм итеп, үлтерә, талай. Бүгәс килеү менән уға ҡушылалар ине; бер аҙ оҙата, унан һуң айырылып ҡала тора инеләр. Башҡортостан эсендә Бүгәскә ҡушылып һуғышҡан һәм ҡаршы торған заводтарҙы емергән башҡорттар

ҙа шулай уның артынан бармай, айырылып ҡалдылар. Бүгәс Ҡазандан Мәскәүгә барырға әҙерләнһә лә шулай уҡ Мәскәү яғындағы бөтә крәҫтиәндәр уға ҡушылыу өсөн, уның тиҙерәк килеүен көтөп торһалар ҙа Бүгәс үҙ янындағы йыйынтыҡ крәҫтиән көсөнә генә ышанмай (сөнки был ваҡытта уның янында һуғышсы казачийҙар бик аҙайған, башҡорттар айырылып ҡалған инеләр), Дон казачийҙарына барып, унан көс йыйнарға теләп, Волга буйлап Донға табан китте. Шул арҡала Бүгәс хәрәкәтендә иң төп урын тотҡан крәҫтиәндәрҙең күбеһе күтәрелә алмай, күтәрелеп өлгөргәндәре хөкүмәт ғәскәре аяҡ аҫтында ҡалып, сафтан сыҡтылар. Дон казачийҙары кәрәкле ярҙамды бирмәне, шул сәбәпле Бүгәс еңелеү артынан еңелеп, үҙе ҡасырға әҙерләнгәндә, үҙҙәре язанан ҡотолоу өсөн ҡайһы бер иптәштәре уны тотоп хөкүмәткә тапшырҙылар. Ул Мәскәүгә ебәрелеп яза ҡылынып үлтерелде. Хөкүмәт был хәрәкәтте баҫҡанда, башҡорттар бик ҡаты язаландылар. Юлай менән Салауат та тотолоп, башҡорт ауылдары буйынса һуҡтырылып йөрөтөлдө. Унан һуң Балтик диңгеҙе буйындағы Балтик портына хөкөмгә ебәрелделәр.

Башҡорттарҙың был болала яһаған иң ҙур хаталары Бүгәс менән Мәскәүгә табан бармай, унан айырылып ҡалыуҙары һәм форсат менән файҙаланып, батша хөкүмәтенең нигеҙенә (Мәскәүгә) балта сабаһы урында үҙ илдәрендә ҡалып, заводтарға һөжүм итеп, завод эшселәре менән аралары боҙолоу, шул арҡала Бүгәстең көсө кәмеү булды.

Был боланан һуң башҡорттар ҙур Рәсәй революцияһына хәтле үҙҙәре генә лә, башҡаларға ҡушылып та ҡуҙғала алманылар.

## Салауат

Салауат башҡорт хәрәкәтенең иң ҙур ҡаһармандарынан булып, иң һуңғы ваҡытҡа хәтлем уның исеме һәм хәтирәләре башҡорттарҙың күңелендә һаҡланып килде. Уның сығарған йәки уның тураһында сығарылған йырҙар башҡорттар араһында йөҙ илле йыл буйына онотолмай һаҡланды.

Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин Себер юлында Шайтан волосында Юлай ауылында бик бай һәм атаҡлы кеше булып, 1768 йылда старшина булып һайланып, хокүмәт тарафынан тәсдиҡ ителгән. Ул хөкүмәт ҡаршында ышаныслы кешеләрҙән һаналһа ла эсендә хөкүмәткә ҡаршы асыуҙы йәшереп һаҡлаған. Уның ере бик күп булып, был ерҙәрҙе заводсы Твердышев законһыҙ тартып алған. Юлай быға шикәйәт итеп ерҙе кире ҡайтарып алырға тырышһа ла хөкүмәт органдары уны яуапһыҙ ҡалдырғандар.

Бүгәс болаһы башланғанда уның улы Салауат егерме йәшендә булып, һыбай йөрөүҙә, уҡ атыуҙа, көрәшеүҙә тирә-яғында тиңдәшһеҙ отҡор һәм көслө булған. Ул заманаһына күрә яҡшы ғына уҡып, шағирлыҡ көсө лә булған.

Бүгәс болаһы сыҡҡас, 1773 йылда көҙ көнө виләйәт канцелярияһы Юлай старшинаға бойороҡ ебәреп, Яйыҡ казачийҙары араһында Пугачев тигән берәүҙең үҙен император Петр III тип күрһәтеп, бола башлауын белдергән һәм Юлай старшинаның бик ашығыс башҡорттарҙы йыйып, отряд төҙөп, Стәрлетамаҡ пристаненә командир Богданов ҡул аҫтына ебәреүен талап иткән.

Юлай шунда уҡ 96 атлы кешенән отряд төҙөп, үҙ улы Салауат ҡул аҫтында Стәрлетамаҡҡа оҙатҡан.

Богданов Салауатты бик оҡшатып, уға төрлө ерҙән йыйналған тағы ла 1200 башҡорт һәм мишәрҙе тапшырып, Ырымбурҙы Бүгәстән ҡотҡарыу өсөн ярҙамға бара торған генерал Кар ғәскәренә ҡушылыу өсөн Ырымбурҙан етмеш саҡрым бире булған Бикҡол ауылына барырға ҡушҡан. Салауат Бикҡол ауылына бер генә саҡрым ҡалғас та уға ике туплы, ике мең кешелек Бүгәс отряды ҡаршы осраған.

Быны күреү менән Салауат хәнйәренә аҡ сепрәк тағып, Бүгәс отрядына сабып барғанда, үҙенең эшен батша Петрға хеҙмәт өсөн ышаныслы халыҡ ғәскәре менән килеүен белдергән. Унан Салауат Ырымбур янына Бирҙе ауылына барып, Бүгәс менән күрешеп, Пугач уны үҙ янында ҡалдырып, полковник итеп билдәләгән. Бүгәс был болала башҡорттарҙың бик ҙур ярҙам күрһәтә аласағын яҡшы төшөнөп,

башҡорттарға төрлө истиҡлал бирергә, Башҡортостандан урыҫтарҙы сығарырға вәғәҙә ҡылған. Уларҙы быға ышандырыр өсөн үҙенә эйәргән урыҫ ауылдарын яндырып китеүҙән дә тартынмаған. Салауат Бүгәс янында оҙаҡ ҡалмай, Бүгәс менән аңлашып, төрлө крепость һәм хөкүмәт яҡлы ауылдарға һөжүм иткән, башҡорттарҙы димләп аяҡландырып йөрөгән мәлдә, 29 мартта Бүгәс Ырымбур янында һуғышта ныҡ еңелгән ваҡытта, Салауат Башҡортостандың ҡараңғы мөйөштәрендә халыҡты көрәшкә ойоштороп йөрөр булған.

1774 йылдың апрелендә Салауат ике мең ғәскәр менән иленә ҡайтып, быға хәтле һуғыштарҙа еңелеп тарҡалған халыҡтарҙы йыйнап, ул ваҡытта Белорет заводында булған Бүгәскә ярҙамға киткән. Быға саҡлы болаға ҡатышмай, бары итәк аҫтынан ғына ҡотортоп ятҡан Юлай старшина хәҙер үҙе лә болала ҡатнаша, Салауат менән Юлай отрядтары Твердышевтың Сим һәм Ҡатау-Иван заводтарына барып, ундағы крепостной эшселәрҙе үҙҙәренә ҡушҡан. Үҙенә һөжүм өсөн Өфөнән подполковник Михельсон ҡул аҫтында ҙур ғәскәр килеүҙе ишетеп, уға ҡаршы сыҡһа ла еңелеп сигенергә мәжбүр булған. Был ғәскәр Сим заводы янында Салауат ғәскәрен тағы ла осратып, икенсе тапҡыр еңеп, бер нисә туптарын һәм байтаҡ әсир алғандар. Салауат ҡалдыҡ ғәскәрҙәре менән Йүрүҙән йылғаһы артына сыҡһа ла, унда ла Михельсон уны ҡыуып етеп еңгән. Салауат Әй йылғаһы арҡылы сығып, унда нығынһа ла, Михельсон унда ла Салауат отрядын еңеп, дүрт йөҙ кешеһен һәләк иткән. Быны ишетеп, Бүгәс Салауат отрядтарына ярҙамға килеп, улар менән бергә Өфөгә һөжүм итергә уйлаған. Ләкин Саҡты заводы янында Михельсон быларҙы тағы ла бик ҡаты еңеп, ҡасырған.

Бынан һуң Салауат яңынан отряд йыйып, Красноуфимский крепосына барып, уны һөжүм итеп алып яндырған. Бынан Уса ҡалаһына барып, Бүгәс менән берләшеп, был ҡаланы алғандар. Шунан Бүгәс Ҡазанға табан киткән, Салауат артыҡ Бүгәс менән бармай, айырылып ҡалған.

Милли мәсьәләне бик оҫта йөрөтөп, Башҡортостандағы барлыҡ милләт мазлумдарын берләштерә алған Бүгәс бынан китеү менән Башҡортостанда көрәш уңайһыҙ юлға кереп, халыҡ араһында берберeһенә һөжүмдәр башлана. Хөкүмәт Өфө өлкәһендә йөрөгән Салауат отрядтарын тотоу өсөн байтаҡ ғәскәр ебәреп, быларҙы ҡамап яҙалай башлағас, Салауат ғәскәрен ташлап, ҡаҙаҡ далаһына ҡасырға уйлай. 1774 йылда ҡыш көнө яңғыҙ саңғы менән Урал тауҙарын киҫкәндә урман араһында Ҡаратаулы ауылы янында хөкүмәт һалдаттары тарафынан тотола. Был ваҡытта Юлай ҙа ҡулға алынған булған. Былар бер аҙ тикшереү һәм хөкөмдәрҙән һуң халыҡҡа ғибәрәт өсөн үҙҙәренең һуғышып алған завод һәм ауылдарына йөрөтөлөп, һәр береһенә егерме биш-ҡырҡ биш ҡамсы һуҡтырылғас, танауҙарын өҙөп, маңлайҙарына печать баҫылып, Балтик диңгеҙе буйындағы Рогервик йортона һөргөнгә ебәрелделәр.

## Башҡорт болаларының нәтижәләре

Бүгәс болаһына хәтле булған башҡорт болаларының бөтәһендә лә уртаҡ дошманға (түрә һәм баярҙарға) ҡаршы ике төрлө көс берләшә ине. Барыһы юғары ҡатлауҙар. Былар электән Волга һәм Урал буйҙарын Рәсәй алғанға хәтлем хаким булып килгән синыфтар: Ҡазан һәм Себер ханлыҡтарында хөкүмәт эшендә ҙур урын тотоп, күп ер һәм байлыҡ биләгән синыф — муллалар, татар һәм башҡорт түрәләре, улар тарафынан тәрбиәләнеп етештерелгән груһтар. Былар башҡорт халҡының ярҙамы менән Рәсәй ҡулынан ҡотолоп, элекке хакимиәттәрен кире ҡайтарырға тырыша ине.

Икенсеһе: башҡорт һәм башҡа ваҡ милләттәрҙең түбән массаһы. Быларҙың аяҡланыуы — Рәсәйҙә һәм башҡа мәмләкәттәрҙә гелән була торған крәҫтиән болалары кеүек, бары бик ҙур ғазаптар сиккәс, ныҡ таланғас, былай йәшәү менән һуғышып үлеү араһында айырма ҡалмаҫтай хәлгә төшкәс, был хәлдән ҡорал менән генә ҡотолоуға өмөтләү ине.

Уның бөтә теләге бары үҙенең тормошон бер аҙ яңыртыу, бер аҙ иркен һулыш алыу ғына булып башҡа крәҫтиән балаларындағы кеүек, быларҙың алдында киләсәктә тормошо һәм идара төҙөү тураһында һис бер план юҡ ине. Шул сәбәпле быларҙың хәрәкәте ныҡ ойошоп бармай, хәрәкәттәрендә тәртип һәм дисциплина юҡ. Бола башланғас та беренсе эштәре тирә-яҡтағы, бигерәк тә быға хәтле үҙҙәрен йәберләгән баяр һәм кешеләрҙе үлтереп, талап тамаҡ туйҙырыу, күңелдә һаҡланып килгән асыуҙы алыу була ине. Быының менән уларҙың асыуҙары баҫыла, күңелдәре бер аҙ тынысланa, көрәш хисе һүнә башлай. Былар бола башында йөрөгән юғары ҡатлауҙарҙың маҡсаттарын аңламай ҙа, кәрәкһенмәй ҙә инеләр, шул сәбәпле улар артынан һуңғы сиккә хәтле бармай айырылып ҡала инеләр. Шулай итеп, алда уртаҡ бер идея булмау, боласыларҙың маҡсаттары төрлө-төрлө булыу, иң кәрәкле ваҡыттарҙа көстәр тарҡалыу, шулай уҡ башҡорттарҙың үҙ араһында хөкүмәткә хеҙмәт итеп, быының менән тормоштарын яҡшыртыусы груһтар булып, быларҙың был болаларҙы баҫырға тырышыуҙары, боланың еңелеү менән бөтөүенә сәбәп була ине.

Башҡорттарҙа һөнәрселек аҙ булыу арҡаһында ҡоралға ҡытлыҡ (туп, мылтыҡҡа ҡаршы ян, уҡ һәм иҫке ысул мылтыҡтар ғына) булыу сәбәпле уларҙың еңелеүҙәренә сәбәп була ине.

Был болаларҙың башҡорт тормошона һәм Башҡортостан хәленә булған тәьҫирҙәре былай булды: болаларҙа башҡорт халҡының бик күбеһе ҡырылды, һөргөнгә ебәрелде йәки ситкә таратылып баярҙарға ҡол ителеп һатылып юғалды. Быының урынына ситтән бик күп татар һәм башҡа ваҡ милләттәр башҡорттар араһына килеп урынлашып, башҡортлаштылар (яңы башҡорттар). Былар электән ауылдары булып ултырыҡланып йәшәгән халыҡ булғанлыҡтан, башҡорттар араһында ла ауыл-ауыл булып ултырып игенселек менән йәшәй башлауҙы тараттылар. Ләкин болаларҙа ауылдар яндырылыу, ашлыҡтар таланыу был эштең кәрәк хәтле алға китеүенә ирек бирмәне. Башҡорттар ҡыш көнө айырым ҡышлауҙар урынына

ауылда йыйналып тороп, яҙ көнө ауыл янында бер аҙ иген сәсәләр ҙә йәй көнө йәйләүҙәрҙә йөрөп, көҙгә ҡайтып ашлыҡты йыйнайҙар ине. Был килмешәктәр араһында мулла халҡы ла күп булғанлыҡтан, улар үҙҙәре менән бергә башҡорт араһына уҡыу-һыҙыу алып килделәр: уларҙың тәьҫире менән татар теле башҡорттар араһында әҙәби яҙыу теленә әйләнде. (Ул ваҡыттарҙа башҡорттар яҙған документтар барыһы ла татар телендә.)

Бола ваҡыттарында күп ырыуҙар таралды, ҡасып береһе икенсеһе араһына барып керҙе. Болаға ҡатнашҡан ситтән килгән килмешәктәр ҙә төрлө ырыу араларына кереп, ҡатнашып киттеләр. Был арҡала ырыу эсендә иҫке мөнәсәбәттәр үҙгәреп, ырыу тормошоноң әһәмиәте аҙайҙы. Айырым-айырым ырыуҙар бер-береһенә яҡынлашып, башҡорт милләтенә әйләнә башланылар.

Башҡорттарҙың заводтарға һәм ҡалаларға һөжүм итеүҙәренән ҡурҡып, улар ҡала һәм завод тирәһенә яҡын ебәрелмәй; улар янындағы башҡорттарҙың ерҙәре тартылып алынып, үҙҙәре ҡыуыла инеләр. Был арҡала улар мәҙәниәт мәркәздәренән алыҫта ҡалдылар. Башҡорт араһында тимерселек, ҡорал яһау кеүек эштәр тыйылыу арҡаһында уларҙа электән һирәк-һирәк булып килгән һөнәрселәр (мәҫәлән, улар тимер ҡалҡан һәм күлдәктәр яһай инеләр) бөттө, халыҡта һөнәрселек юғалды.

Быларҙа хисапһыҙ күп малдар таланыу, штраф ителеп алыныу һәм үлтерелеү, бер яҡтан, мал һанын бик кәметте, икенсе яҡтан, ваҡыт-ваҡыт башҡорттарҙың үҙ ауылдарынан ситкә сығыуҙары тыйылып, уларҙың малдары ас ҡалып ҡырылыуға сәбәп булды. Иң яҡшы малдарҙың таланып алыныуы һәм һуғыштарҙа ҡырылыуы башҡорт малының нәҫеле боҙолоуға сәбәп булды. Шулай итеп, башҡорттарҙа мал аҫрау хужалығы ла емерелде. Халыҡтың ҡоралы тартылып алыныу, ҡорал ҡулланыу тыйылған өсөн һөнәрселек хужалығын да насарлатты. Бына был арҡала башҡорттарҙа хужалыҡҡа әһәмиәт бирмәй ҡарау, алдағы тормошто ҡайғыртмау, ерҙең ҡәҙерен белмәү кеүек ғәҙәттәр төҙөй. Байыраҡ кешеләр ҙә хужалығының

таланыуын гелән күҙ алдында тотҡанлыҡтан, күҙгә күренгән бөтә байлығын тәңкә, мәрйен кеүек йәшерергә уңайлы нәмәләргә алыштырып тота башланылар. (Былар һуңынан ҡатын-ҡыҙҙар кейемдәренә тағыла башлап, кешенең байлығын хужаһының яҡшы кейенеүенә ҡарап түгел, бәлки ҡатындарының зиннәте күплегенә ҡарап йөрөтөлөүгә, зиннәткә ҡыҙығыуға сәбәп булды.)

Был болалар башҡорттарҙы баярҙар ҡулында крепостной крәҫтиәнгә әйләнеүҙән һаҡлап ҡалдылар. Урыҫ баярҙары Башҡортостандағы башһыҙ һәм ирек һөйөүсе башҡорттарҙы үҙ имениелары янында тотоуға ҡурҡалар, башҡорттарҙың бынан ҡасасаҡтарын беләләр ине. Юғарыла яҙып киткән Тәфкилевтең балаһы Йософ мырҙа кеүек татар баярҙары ҡулы менән башҡорттарҙы крепостнойға әйләндереү сараһын күреп ҡараһалар ҙа бынан файҙа сыҡманы. Мәҫәлән, был мырҙа Бөгөлмә янындағы Ҡарабаш ауылы башҡорттарын үҙенә крепостнойға әйләндерергә тырышып йөрөгәнлеген белгәс, уны шул ауыл башҡорттары ауыл араһында уҡ менән атып үлтерҙеләр.

Был болаларҙан ҡалған иң насар бер мираҫ — бола ваҡыттарында хөкүмәттең боланы анһатыраҡ баҫыу өсөн төрлө милләттәр араһында иҡтисади файҙаны бер-береһенә ҡаршы итеп ҡуйыуы сәбәпле, быларҙың етәкселек иткән юғары ҡатлауҙары араһында бер-береһенә дошманлыҡ урынлаштырыу; бер милләтте икенсеһенә дошман итеп ҡаратыу.

Төрлө милләттәрҙең юғары ҡатлауҙарында булған был милли дошманлыҡ бик оҙаҡ ваҡыттар быларҙың массаларының да бер-береһенә дөрөҫ аңлауҙарына, бер-береһенә яҡынлашыуҙарына кәртә булып торҙо.

## Кантонлыҡ һәм башҡорт ғәскәре төҙөлөү

Бүгәс болаһынан һуң башҡорттарҙың хөкүмәткә ҡаршы аяҡланыуға хәле бөтөнләй ҡалманы, хөкүмәт башҡорттарҙы ғәскәри идара ҡулына алып, 1798 йылда бөтә башҡорттар 12, улар менән торған мишәрҙәр дүрт кантонлыҡҡа бүленеп, былар барыһы ла Ырым-

бурҙа торған айырым Ырымбур крепосы командирына ҡаратыла. (Һуңынан кантонлыҡтар күбәйтелеп, егерме һигеҙгә еткерелде. — *А.Ф.*) Был командир һәр бер кантонлыҡҡа башҡорттарҙың хөкүмәт яҡлы атаҡлыраҡ кешеләренән кантон исеме менән түрәләр билдәләй ине. Һәр бер кантон отделение һәм командаларға бүленеп, улар башына ла башҡорттарҙан старшина һәм чиновниктар ҡуйыла. Кантондар эргәһенә уларға кәңәшсе һәм улар өҫтөнән күҙәтеүсе итеп урыҫ түрәләрҙән штаб офицерҙар билдәләнә ине.

Ун ете — ҡырҡ биш йәш араһындағы эшкә яраҡлы бөтә башҡорттар ғәскәри хеҙмәттә һаналып, былар һәр ваҡыт ғәскәри хеҙмәткә дүрт өйгә бер һалдат бирергә мәжбүр ителәләр. Был рәүештә башҡорт ғәскәре төҙөлөү менән беренсе йылда уҡ башҡорттарҙан 4513, мишәрҙәрҙән 1300 кеше хеҙмәткә алынған. Хеҙмәт өсөн был һалдаттарға айға бер жалование бирелеп, барлыҡ кейем, ат, эйәр, тамаҡ үҙҙәренән булған. Бары походҡа сыҡһалар ғына торған ерҙәренән йөҙ саҡрымдан артыҡ киткәс, аттарына бесән, үҙҙәренә аҙыҡ ҡаҙнанан бирелә икән.

Башҡорт ғәскәрҙәренең кейеме аҡ йәки күк тула сәкмән, ҡыҙыл лампаслы киң күк салбар, баштарында аҡ йөн эшләпә, билдәрендә ҡайыш ҡәмәр, аяҡтарында йылҡы тиреһенән итек булып, ҡоралдары мылтыҡ, пистолет, һөңгө, ҡылыс, ян-уҡ ине. Башҡорт ғәскәрҙәре нерегулярный ғәскәр һаналып, бары һуғыш ваҡыттарында ғына уларҙан һәр береһе биш йөҙ кешелек айырым полктар төҙөлөп, былар урыҫ офицерҙары командаһында һуғышҡа ебәрелгәндәр.

Шул ваҡыт типтәрҙәрҙән дә ике полк ғәскәр йыйналып, уны казачий полктар тип йөрөткәндәр. Бындай башҡорт ғәскәрҙәре 1812 йылда Наполеон ҡул аҫтында французлар Рәсәйгә һөжүм иткәс, утыҙ полкка еткерелеп, байтағы уға ҡаршы һуғышҡа ебәрелгәндәр һәм башҡа ғәскәрҙәр менән Франция ғәскәрен ҡыуып, Парижға хәтле барып еткәндәр. Тыныс ваҡытта башҡорт ғәскәрҙәре ваҡ-ваҡ группаларға бүленеп, төрлө урындарға хәдүәд (линия) һаҡларға ебәрелгәндәр.

1860—1863 йылда башҡорт кантондары һәм ғәс-кәрҙәре бөтөрөлөп, башҡорт эштәре ғәскәри мөәссә-сәләрҙән губерния һәм уездарға тапшырылды; башҡорттар башҡа крәҫтиәндәр менән бер хәлгә ҡалдырылдылар. Кантондар урынына мировой по-средник исеме менән түрәләр ҡуйылды. Башҡорт-остан ғәскәре лә башҡа халыҡ менән бер рәүешт-алына башланы. Мировой посредниктар ваҡытында башҡорттарҙы көсләп ултырыҡландырыу саралары күрелде.

1865 йылда башҡорттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре аҙайһын тип, Башҡортостан Өфө, Ырымбур, Һамар, Пермь губерналары араһында бүленеп таратылды.

## Был дәүерҙә ер мәсьәләһе

1736 йылда уҡ хөкүмәт ситтән килеүселәргә башҡорт ерҙәрен һатып алырға төрлө ирек биргәс, килмешәктәр башҡорттарҙың төрлө болаларҙа малһыҙ, ас ҡалыуҙарынан, налог түләүгә аптырауҙарынан файҙаланып, хисапһыҙ күп башҡорт ерен һатып алғайнылар. Ерҙәр, ғәҙәттә, үлсәнмәй, «анау ерҙән бынау ергә» хәтле тип һатылып, грандәре асыҡ билдәләнмәй. Күп ер һатыуҙар тейешле урындарҙа теркәтелмәй ине. Шуның менән файҙаланып, килмешәктәрҙең, төрлө ерҙе һатып алам тиеп, тартып алыуҙары күп була. Башҡорт араһында ерҙе бер юлы бер нисәшәр кешегә һатыуҙар булғылай, ер мәсьәләһе бик сыуалсыҡ булып, гелән үҙ-ара ер дауҙары сәбәп булып тора ине. Шул сәбәпле хөкүмәт был ер дауҙарын бөтөрөп, ер мәсьәләһен тәртипкә һалыу өсөн 1818 йылда башҡорттарҙың ер һатыуҙарын бер аҙ ваҡытҡа тыйҙы.

1832 йылда башҡорттарҙың һис бер дауһыҙ, үҙ ҡулдарында булып, үҙҙәре файҙаланған ерҙәрен, ул ваҡытта ғәскәри хеҙмәт иткән мишәрҙәр менән типтәрҙәргә йән башына утыҙ, татар һәм хөкүмәт крәҫтиәндәренә ун бишәр дисәтинә киҫеп биреү тураһында бойороҡ сығарҙы. Ләкин былай иткәндә, башҡорттарҙың үҙҙәренә ер душ башына ҡырҡ дисәтинәнән аҙ булмау шарт ителде. Башҡорттарға шунан

артыҡ ерҙәрен генә һатырға, арендаға бирергә рөхсәт ителде. Ләкин был закон кәрәгенсә тормошҡа ҡуйылмай, ер мәсьәләһе хәл ителмәй ҡалғас, 1869 йылда башҡорт ере мәсьәләһе яңынан ҡаралып, аҫаба башҡорттар менән улар еренә килеп ултырған халыҡтар араһында ер бүленеп бирелде. Ләкин хөкүмәт ерҙе башҡорттарға ауыл обществоларына уртаҡ түгел, бәлки айырым кешеләргә (ир башына) атап биреп, уны ла хәҙер булған ир йән һанына ҡарап түгел, бәлки боронғо халыҡ хисабын алыуҙа күрелгән ир йәндәргә генә бирҙе. Шулай итеп, борон ир йәне күп булған семьяларҙан хәҙер йән һаны бик аҙ булһа ла ер күп, боронғо хисаптарҙа ир йән аҙ булған семьяларҙа хәҙер йән һаны күп булһа ла ер аҙ тейҙе. Шулай итеп, һәр бер ауылда башҡорттар ерле һәм ерһеҙгә әйләнә башланылар. Һәр бер йәнгә ун биш дисәтинә ер надельный һаналып, һатыла алмай; унан артҡаны запасной һаналып, уларын һатырға ирек бирелде. Байтаҡ башҡорт ерҙәре ерһеҙ башҡорт, типтәр һәм мишәрҙәргә бирергә тип айырылып ҡалһа ла уны түрәләр был эшкә тотмай, үҙ-ара бүлешеп бөтөрҙөләр. 1876—1880 йылдарҙа шул рәүештә өс йөҙ етмеш һигеҙ мең дисәтинә ерҙе төрлө генерал һәм чиновниктар бүлешеп алдылар.

Төрлө түрәләрҙең һәм үҙҙәренең һатлыҡ старшиналарының ҡыҫырыҡлауы, икенсе яҡтан, башҡорттарҙы запас ерҙәрҙе хәҙер һатып ҡалмаһағыҙ, барыбер бушлай тартып алынасаҡтар, тип ҡурҡытыуҙары арҡаһында башҡорттар запас ерҙәрен юҡ хаҡҡа һата башланылар. 1869 йылдан 1878 йылға хәтле ун йыл эсендә генә шулай бер миллион дисәтинәнән артыҡ башҡорт ере һатылып, күбеһе дисәтинәһе һигеҙ — ун биш тиндән китте. Баярҙарҙан тыш, 1861 йылда Рәсәйҙә бик аҙ ғына ер бирелеп, баяр ҡулынан азат ителгән крәҫтиәндәр ҙә көтөү-көтөү килеп башҡорт ерен һатып йәки арендаға алып ултыра башланылар. Бара торғас был ваҡытлы арендаға алған ерҙәр ҙә унда ултырған халыҡҡа ҡалдырылды. Хөкүмәт башҡорттарҙа хужалыҡ күтәреүгә һис бер әһәмиәт бирмәне, шул сәбәпле улар һаман да ярлы ҡалып, хәҙер ир йәне аҙ булһа ла душ күп булған семьялар

артыҡ ерҙәрен (һәр ревизский душтан ун биш дисәтинә надельный ерҙәрен) һата башланылар. Быларҙы ла ярлы башҡорттар ала алмай, ситтән килмешәктәр алғайны. Шулай итеп, ҙур Октябрь революцияһы килеп етеүгә башҡорт ерҙәренең күбеһе үҙ ҡулдарынан китеп, башҡорттар араһында ерһеҙ (хәҙер һаны күп булһа ла ревиз душы күп булған) бик күп халыҡ бар ине, күп ауылдарҙа халыҡтың яртыһынан күбеһе ерһеҙ булып ҡалдылар.

## Кантонлыҡ ваҡытында идара һәм тормош

Һәр бер ауырлыҡ үтеп киткәс, күңелле кеүек тойола. Шуның кеүек башҡорттар араһында ла кантонлыҡ ваҡытын һағыныусылар, рәхәт тормошло бер ваҡыт итеп күреүселәр бар. Хәлбүки, кантондар үҙҙәре башҡорт булһалар ҙа ваҡиғала батша түрәһе булып, батша сәйәсәтен үткәрәләр, кантонлыҡ башҡортто башҡорт түрәләре ҡулы менән йәберләтә, талата, ҡыҫа торған бер аппарат ҡына ине. Бөтөн айырма — урыҫ баярҙары башҡорттарҙың тормошон һәм йолаларын белмәй, уларҙың асыуҙарын килтерерлек итеп йәберләгәндә, кантондар был эште оҫтараҡ алып баралар. Башҡорт массаһының елкәһенә урыҫ түрәһенән дә нығыраҡ һуҡһалар ҙа, башын һыйпай-һыйпай һуғалар ине. Уларҙа элекке баярҙар кеүек башҡорттарҙы һуҡтыралар, башҡорттарҙан ауыр налогтарҙы көсләп түләтәләр, уларҙа ришүәт алыу ҙа элекке баярҙарҙан ҡалышмайҙар, баярҙарға башҡортто таларға юлдар күрһәтеп торалар ине. Кантон ваҡытында башҡорттарға налог артыу менән бергә юл һәм күперҙәр һалыу, уларҙы һаҡлау кеүек ауыр эштәр ҙә йөкләтелде. Ләкин бер файҙаһы ла булды: был арҡала башҡорттарҙа ағас оҫталығы артты. Хөкүмәт үткән болаларҙа дини ҡыҫыу һәм муллаларҙың агитацияһы ҙур урын тотҡанлыҡты иғтибарға алып, кантонлыҡ ваҡытында был мәсьәләне башҡа юлға ҡуйҙы: бер яҡтан мәсет һәм дини мәҙрәсә — мәктәптәр һалырға ирек биреп, икенсе яҡтан хөкүмәткә ышаныслы муллалар күсе етештерергә кереште. Бының өсөн Өфө ҡалаһында мосолман

дини идараһы асып, уның башына мөфтөй һәм ҡазый итеп хөкүмәт эшенә күңел менән бирелгән кешеләрҙе билдәләне. Улар арҡылы урындарға хөкүмәткә ышаныслы ахун һәм мөхтәсибтәр билдәләнеп, былар хөкүмәт ҡулында халыҡты тыныс тотоуға ҡорал булып хеҙмәт иттеләр. Элекке кеүек, халыҡ араһында тороп, хөкүмәт сәйәсәтенән ризаһыҙлыҡ рухы тараҡан муллаларға ҡаршы көрәш астылар. Башҡорт ғәскәре бар ваҡытта уларҙы итәғәтле тотоу өсөн һәр полкка жалование менән шундай ышаныслы мулла, мәзин ҡуйып торолдо. Бына ошондай саралар арҡаһында башҡорт халҡында элекке көрәш рухы һүнде, хужалыҡ киткән һайын артҡа ҡалды.

## Кантонлыҡ бөткәс

Кантонлыҡ бөтөп, башҡорттар башҡа крәҫтиәндәр менән бер положениеға ҡуйылғас, башҡорттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен бөтөрөп, башҡорттарҙы һәр бер өлкәлә аҙсылыҡ итеп ҡалдырыу өсөн Башҡортостан Өфө, Ырымбур, Һамар һәм Пермь губерниялары араһында бүленде. Быларҙы өйәҙҙәргә бүлгеләгәндә лә өйәҙҙәрҙең бөтөнөһөндә лә башҡорттарҙы аҙсылыҡ итеп ҡалдырырға тырышылды. Бер өйәҙҙә улар күпселек булып ҡалһалар, хөкүмәт унда крестьянский банк арҡылы башҡорт ерҙәрен һатып алып, переселенецтар күсерергә, шулай итеп, башҡорттарҙы аҙсылыҡ итеп ҡалдырырға тырыша башланы.

1874—1877 йылдарҙа Һамарҙан Ырымбур ҡалаһына, унан бер нисә йыл уҙғас Һамарҙан Өфө арҡылы Силәбегә тимер юл һалыныу арҡаһында Башҡортостанда ялан һәм тауҙарҙы Рәсәйҙең сауҙа мәркәздәренә яҡынлашып, Башҡортостандан ситкә ашлыҡ ебәрелә башланы. Хәҙер завод тауарҙарын ситкә ебәреү уңайлы ине, осһоҙланды. Был арҡала Башҡортостанда заводсылыҡ һәм иген сәсеү бик артып, бында ситтән халыҡ күсеү тағы ла күбәйҙе. Ләкин башҡорттар электән заводтарға эшкә алынмау арҡаһында һөнәрһеҙ булыу, электән уларҙа иген аҙ булып ауыл хужалығы ҡоралдары булмау, уларға ауыл хужалығы алыуға кредит бирмәү арҡаһында

бынан кәрәкле рәүештә файҙалана алманылар. Бары кантондар заманаһында ағас ҡырҡыу һәм кустарлыҡҡа өйрәнеп ҡалыу сәбәпле, ярлы башҡорттар араһында ошо кәсептәр генә бер аҙ алға барҙы.

Революциянан элек башҡорттарҙа игенселек нисек артта булғанлыҡты 1909 йылда Ырымбур губернаһында яһалған ошо хисап күрһәтә:

Бер хужалыҡҡа уртаса ашлыҡ сәселгән:

Крәстиән ерендә — 11 1/2 дисәтинә.

Казачий ерендә — 7 3/4 дисәтинә.

Башҡорт ерендә — 2 3/2 дисәтинә.

Ләкин башҡорт ерендә сәселгән ашлыҡтарҙың күбеһе башҡорт ерен арендаға алған крәстиән ашлыҡтары булған. Былар тигеҙләнһә, урта хисап менән бер башҡорт хужалығына сәселгән ашлыҡ бер дисәтинәгә тулмай булып сыға.

Кантонлыҡ үткәс Февраль революцияһына хәтле булған заманда башҡорттар бер милләт төҫөн юғалтып, бары сословие ғына булып ҡалыу юлына инәләр, сәйәси яҡтан Рәсәй мосолмандары ғына һаналып йөрөтөлөп, башҡорт исеме менән әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәйәси эшкә ҡатышыу юғала.

Башҡорттар 1917 йылда булған Февраль революцияһын бына ошондай хәлдә ҡаршы алалар.

## Февраль революцияһынан һуң башҡорттар

Батша хөкүмәтенең һуңғы осорҙарында Рәсәйҙә мәмләкәт идараһы ике синыф ҡулында: 1) имениелар биләгән баярҙар; 2) ҙур көс йыйнай башлап, власты үҙ ҡулдарына алырға тырышҡан буржуазия. Был буржуазия ла күбеһенсә шул баярҙар араһынан сәнәғәт һәм сауҙа эшенә ҡатышҡан кешеләрҙән етешкәйне. Һәр төрлө закондар төҙөргә ҡатнашҡан Государственная Дума менән Государственный советҡа һәм урындарҙағы эштәрҙе ҡарай торған земстволарға һәм ҡала думаларына ошо синыфтар күберәк инеп, хужалыҡ итһендәр өсөн уларға һайлау-һайланыу өсөн ҙур ценз шарт итеlә ине. Һуңғы утыҙ-ҡырҡ йыл эсендә татарҙар араһында ла һатыусылар күбәйеп, сауҙа буржуазияһы аяҡҡа баҫа башланы. Былар һуңғы

ваҡыттарҙа сәнәғәткә лә тотоноп, сәнәғәт буржуазияһына ла әйләнә башланылар. Быларҙа башҡа буржуйҙар менән бер рәттән хөкүмәт һәм ерле идара мөәссәсәләренә ҡатнашып, закондарҙы үҙҙәренең матди файҙаларына уңайлыраҡ итеп эшләтеүгә ынтыла башланылар. Был эштә үҙҙәренә хеҙмәт иттереү өсөн уларға милли зыялы синыф әҙерләп етештереү кәрәк ине. Улар быны өсөн яңы фән уҡытыусы мәҙрәсәләр асыу, матбуғат таратыу, йәштәрҙе хөкүмәт мәктәптәрендә уҡытып сығарыу кеүек эштәр эшләнеләр. Шулай итеп, татар һәм башҡорттан аҙ-маҙ зыялылар етеште. Былар эшкә инер өсөн цензлы татар буржуазияһының ярҙамына мохтаж булғанлыҡтан, былар менән милли зыялыларҙың яҙмышы берберeһенә нығ бәйләнгәйне. Милли зыялылар ул ваҡыттағы әхвәл менән хисаплашып, сәйәси эштәрҙә милли файҙаны күҙәтеү өсөн татар һәм башҡорт халыҡтарынан цензлы халыҡты (сауҙа һәм сәнәғәт буржуазияһы, хатта байрҙарҙы) күбәйтеү кәрәк тигән фекерҙә булдылар, быны бер милли задача һананылар. Рәсәйҙә Февраль революцияһы сыҡҡас, былар цензлы булыуҙың әһәмиәте кәмеһә лә сәйәси көрәштә капиталдың ҙур әһәмиәте буласаҡ, тип уйлап, түбән халыҡ араһынан сыҡҡан был зыялылар милли капитал етештереү кәрәк тигән фекерҙә нығ ҡалдылар. Халыҡ менән милли капитал араһында көрәш сығарыу милләттең көсөн юғалтасаҡ, тип уйланылар. Шул сәбәпле ярлы халыҡ менән милли капиталдың файҙаһын бергә бәйләп йөрөтөргә маташтылар.

Башҡорт уҡымышлылары ла ошондай уҡ маҡсат менән, бер яҡтан үҙ байҙарының ер һәм малына теймәҫкә, икенсе яҡтан ярлы башҡорттарҙы — башҡорттарҙан ҡаҙна һәм баярҙарға законһыҙ тартып алынған ер хисабына ер менән тәьмин итеү кәрәк, тигән уйға инеп, быны башҡарып сығыу өсөн милли башҡорт йөмһүриәте төҙөү юлына керҙеләр.

1917 йылда Мәскәүҙә булған бөтөн Рәсәй мосолман съезына йыйналған башҡорт вәкилдәре үҙ-ара кәңәшләшеп ҡайтҡас, ошо маҡсатҡа хеҙмәт итеү өсөн башҡорт төбәктәрендә башҡорт шуралары төҙөнөләр. Шул уҡ йылда Өфө ҡалаһында беренсе съезд

яһап, Бөтә Башҡорт Милли шураһы һайлап, был шура 1917 йылда Башҡортостанды автономиялы йөмһүриәт иғлан итте һәм 20 декабрҙә I Башҡортостан Ҡоролтайын йыйып, был эште тәсдиҡ иттерҙе. Башҡорт уҡымышлыларының тәьҫирендә үткән Ҡоролтайҙың фекеренә күрә Башҡортостан йөмһүриәте автономиялы йөмһүриәттәр союзынан ғибәрәт булған бөтөн Рәсәй йөмһүриәттәренең бер өлөшө булһа ла эске эштәрендә — бигерәк тә ер мәсьәләһендә мөстәҡил булып, уның иң төп эше Башҡортостанда башҡорттарҙы хужа итеп ҡалдырыу, бының өсөн һуң ваҡытта законһыҙ Башҡортостанда ер алған килмешәктәрҙе бынан кире сығарыу, башҡорттарҙың күпселек һәм хужа булыуын һуңғы юлдар менән һаҡлау ине. Был ҡарарҙарҙы тормошҡа ҡуйғанда Башҡортостанда ишәйгән башҡа милләт эшсәндәре менән ара боҙолоп бәрелештәр буласағы тәбиғи булып, шул сәбәпле Башҡортостандағы сит милләттәр Башҡортостан хөкүмәте төҙөлөүгә ҡаршы торҙолар. Бынан аҙ ғына элек Рәсәйҙә Үктәбер революцияһы яһалып, бөтөн ерҙәрҙә Советтар төҙөлә башлау һәм совет законының бөтә милләт эшсәндәренең хоҡуҡта бер тигеҙ булыуҙарын талап итеүе милләтсе башҡорт зыялыларының был пландарына юл ҡалдырмаясаҡ булғас, былар Советтарға ҡаршы көрәш астылар. 1918 йылда чехтарҙың контрреволюция сығарып Себер, Урал һәм Волга буйҙарын ҡулға алыуы менән файҙаланып, Башҡорт хөкүмәте башлыҡтары улар ярҙамы менән бер нисә полк ғәскәр төҙөп, көрәш ҡорал менән һуғышҡа әйләнде. Ләкин шуның менән бергә үк, башҡорттарға артта ла таяныс юҡ, Себерҙәге монархист Колчак хөкүмәте менән Дутов казачийҙары береккән Бөтә Рәсәй дәүләтен һаҡлау юлын тотоп, башҡорттарға автономия бирергә, Башҡортостандағы баяр ерҙәрен башҡорт ярлыларына ҡайтарыуға бөтә көстәре менән ҡаршы тора иноләр. Бәләкәй генә бер милләттең бындай ике көс араһында көрәшә алмаясағын аңлап һәм Совет власының ваҡ милләттәрҙең ирек һәм хужалыҡтарын төҙәтеүгә ярҙамлашыу юлын тотоуын төшөнөп, башҡорт массаһы Советҡа ҡаршы көрәште хата һанап, туҡтатып, уның яғына сығырға, һөңгө-

ләрҙе артҡа табан әйләндерергә тейеш тапты. Масса талабы менән башҡорт хәрәкәте башында йөрөүселәр ҙә шул уҡ юлға инеп, 1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте Советтар яғына сыҡты, Совет хөкүмәтенең автономиялы бер өлөшө булып нығып ҡалды. Элек буржуазия көсөнә ышанып эш күргән байтаҡ кешеләр бынан һуң элекке ҡараштан ҡайта һәм яңы әхүәлгә күнегә алмай башҡорт хәрәкәтен ташлап киттеләр. Башҡорт массаһы үҙен хата юлға өҫтөрәп алып барыусы етәкселәрҙән таҙарынып ҡалды.

## Үктәбер Башҡортостаны

Үктәбер Башҡортостаны, йәғни Автономиялы Башҡортостан Совет йомһүриәте төҙөлөү бөтә Башҡортостан тарихында һәм яҙмышында яңы бер дәүер аса. Бөтә тарихтары буйынса һис бер ваҡыт үҙҙәренә бер идара һәм хөкүмәт төҙөй алмай, гелән башҡалар ҡул аҫтында торған башҡорт халҡы хәҙер, башҡа милләт эшсәндәре менән берләшеп, бер хоҡуҡта булып, майҙанда Башҡортостан хөкүмәте бар. 200 йыл буйынса һуғышып, йөҙ меңдәрсә кешеләрен ҡорбан итеп ала алмаған хоҡуҡтар менән хәҙер һәр бер башҡорт эшсәне файҙалана. Элек Кириллов һәм Неплюев кеүек бөтә эштәре башҡорттарҙы талау һәм бөтөрөү булған баяр-түрәләр урынына хәҙер ил эштәрен башҡорт эшсәндәренең үҙ вәкилдәре йәки уларҙың файҙаһын күҙәткән башҡа милләт эшсәндәре алып бара. Элек ун меңәрләп ситкә ҡол ителеп ебәрелеп һатылған башҡорт балалары хәҙер үҙ илдәрендә, үҙ телдәрендә тәрбиәләнеп ирекле граждан булып үҫәләр. Элек Твердышев, Маслов кеүек купецтар ҡулында булған завод һәм урмандар хәҙер Башҡортостан халҡының үҙ ҡулында булып, уларҙың табышы башҡорттарҙың мәҙәни һәм хужалыҡ кәрәктәрен үтәүгә тотола. Элек башҡорт төбәктәрендә хатта тимерсе тотоу ярамай, башҡорттар заводтарға яҡын ебәрелмәй икән, хәҙер башҡорттарҙы завод-фабрика эштәренә ҡатнаштырып, уларҙан һөнәр эйәләре етештереүгә айырым әһәмиәт бирелә, элек

батша хөкүмәтенең нисә йөҙ йыллыҡ бөтә сәйәсәте башҡорт хужалығын емереүгә алып барғанда, хәҙер хөкүмәт башҡорт халҡын күтәреү өсөн айырым саралар күреп, быының өсөн бик күп айырым көс һәм суммалар тота.

Шулай итеп, 200 йыл буйынса түрәләр золомонан ҡотолоу юлында ҡорбан булған элекке башҡорттарҙың теләген, улар өмөт иткәндән бик күп артыҡ итеп, Үктәбер революцияһы бирҙе: башҡорт халҡы батша хөкүмәте менән уның түрә һәм купецтарынан ғына түгел, Батырша хитабнамәһендә күрһәтелеп үтелгән үҙ старшиналарының золом һәм хыянатынан да ҡотолдо.

## Йөкмәткеһе

Инеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
*Мөнир Һаҙыев.* БАШҠОРТ ТАРИХЫ . . . . . . . . . . . . . . . . 9
*Абдрахман Фәхретдинов.* БАШҠОРТ ТАРИХЫ. . . . . . . . . . . 75

Документальное издание

**Автор-составитель**
**РЯЗЯПОВ Рустем Фаатович**

**ИСТОРИЯ БАШКИР**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Фирүзә Камалова*
Рәссамы *Факил Мостафин*
Биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Ислахов*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева*
Корректорҙары *Ләйсән Шаймарҙанова, Альбина Баязитова*
Компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе *Венера Баһаутдинова*

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 15.01.07. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.03.07. Форматы 84x108 $^{1}/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Таймс гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 9,24. Шартлы буяу отт. 9,77. Иҫәп-баҫма таб. 8,13. Тиражы 2000 дана. Заказ № В 148.

Башҡортостан Республикаһының
"Башҡортостан "Китап" нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Башҡортостан» республика дәүләт нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450079, Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.